Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

1

ТОМ



# Сочинения

## 1
## ТОМ

Издательство "КИТАП" имени Зайнаб Биишевой

УФА · 2009

# Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

**1**

**ТОМ**

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ·2009

УДК 821.512.141-1
ББК 84-5 (2 Рос=Баш)
К 97

Мөхәрририәт:
*И. М. Кәримов, Ғ. Б. Хөсәйенов, Р. Т. Бикбаев,*
*М. Х. Нәҙерғолов, Ф. Ғ. Хисамитдинова*

Төҙөүселәре:
*И. М. Кәримов, Ф. Б. Юнысова*

**Мостай Кәрим**
К 97 Әҫәрҙәр. I том: шиғырҙар. — Өфө: Китап, 2009. — 512 бит.

ISBN 978-5-295-04903-3 (т. I)
ISBN 978-5-295-04902-6

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Әҫәрҙәр»енең I томына уның 1934–1969 йылдарҙа ижад иткән шиғырҙары, поэмалары индерелде.

**УДК 821.512.141-1**
**ТП – 212/09** **ББК 84-5 (2 Рос=Баш)**

**ISBN 978-5-295-04903-3 (т. I)**
**ISBN 978-5-295-04902-6**
© И. М. Кәримов, Ә. М. Кәримова, 2009
© И. М. Кәримов, Ф. Б. Юнысова, төҙөү, 2009



## МОСТАЙ КӘРИМ ДӘҮЕРЕ

Егерменсе быуатты оҙатып, яңы мең йыллыҡты ҡаршылағанда Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ватандаштарына ошолай тип өндәшкәйне:

*Китеп барһам, ҡан-ҡәрҙәштәр, һеҙгә*
*Нимә ҡалдырам, тип ҡаңғырам.*
*Түп-түңәрәк ер ҡалдырам һеҙгә,*
*Сатнамаған ҡояш ҡалдырам.*

*Янып торған ут ҡалдырам һеҙгә,*
*Ағын һыу ҡалдырып китәмен.*
*Ер һәм ҡояш, ут йәнә һыу булғас,*
*Үҙегеҙ хәстәрләгеҙ бүтәнен.*
*Бына шуға өмөт итәмен.*

Был юлдарҙағы тәрән фәлсәфә йәшәүҙең асылы, шәхестең яуаплылығы, быуындар араһындағы гармониялы бәйләнеш тураһында тағы ла ныҡыраҡ уйландыра. Һәр кем замандаштарына ошондай һүҙҙәр әйтә алһа, донъя ни тиклем имен, тормош ҡотло, күңелдәр камил булыр ине. Бөгөнгө кешеләр киләсәк вариҫтарына имгәнмәгән ер, сатнамаған ҡояш, бәрәкәт биреүсе изге ут менән туктауһыҙ хәрәкәттәге саф һыу ҡалдыра икән, былярҙан да ҡимматерәк нимә бар? Йәшәүҙең нигеҙе булған ошо хазиналарҙы һаҡлау – быныһы киләсәк быуындарҙың бурысы.

Мостай Кәримдең халҡыбыҙға ҡалдырған иң ҙур хазинаһы – уның ижады, ил хәстәренән, тарих биттәренән юйылмаҫлыҡ, алдағы быуаттарға үтерлек итеп әйткән

аҡыл эйәһенең хикмәтле һүҙе. Үҙҙәренән һуң кеше тәбиғәтенең ваҡсыл яҡтарын, түбән сифаттарын күберәк күреүсе төшөнкө уйланыуҙар, ҡояшы һүнгән, дәрте һүрелгән, өмөттәре емерелгән ҡараңғы мөхит ҡалдырған таланттар ҙа була.

Мостай Кәрим ижад иткән донъя ҡояшы күңелдә йылытыусы, тормошҡа ышаныслы мөнәсәбәте менән рухты ҡанатландырыусы яҡты, нурлы донъя. Уның әҫәрҙәрендә ҡатмарлы күренештәр, ауыр кисерештәр, фажиғәле яҙмыштар ҙа етерлек. Ләкин улар барыһы ла йәшәүгә ҡайнар һәм тоғро мөхәббәт, кешеләргә кеселекле ҡараш, оло ихтирам һәм хәстәрлек менән һуғарылған. Мостай Кәримдең һәр саҡ яҡтылыҡҡа һәм камиллыҡҡа ынтылыусы бөтә булмышы, тормошонең асылы, ижади тәбиғәте шулай.

Тормошҡа дәртләнеп аяҡ баҫҡан саҡта ут эсенә инеүҙәр, Бөйөк Ватан һуғышында ҡаты яраланыу – үлемесле металл ярсығының комсомол билетын тишеп, шағир йөрәгенә саҡ-саҡ етмәй ҡалыуы, унан һуңғы һыҙланыуҙар һәм ҡаты һынауҙар Мостай Кәрим өсөн тормошто айырыуса ҡәҙерле итте, ерҙәге һәр матурлыҡтың, һәр имен көндөң мәғәнәһен йылдан-йыл нығыраҡ аңлатты. Мостай Кәрим ижады ватандаштарына өмөт һәм ышаныс өҫтәне, күңелдәрендә миһырбанлыҡ, иман һәм мөхәббәт арттырҙы, йәшәйештең ҡатмарлылығындағы һәм ябайлығындағы мәңгелек рухи ҡиммәттәрҙең бөйөклөгөн, бөтөнлөгөн асты.

Ике быуат, ике мең йыллыҡ ҡушылған буталсыҡ йылдарҙың ғәҙелһеҙлектәренән түҙемлектең сигенә етеп болоҡһоған сағында шағирҙың ошо тетрәндергес дүрт юллығы тыуҙы:

*Замананың хаҡһыҙ язаһына*
*Әллә күнде йәнем. Әллә һүнде.*
*Уттарына ла төшөп яныр инем,*
*Мин янырлыҡ уттар ҙа юҡ инде.*

Ыҙғыш һәм талаш айырыуса көсәйгән был ваҡыттарҙа ла илебеҙҙең төрлө тарафтарында уттар әленән-әле тоҡанып тора ине. Ләкин Мостай Кәрим ғүмере буйы бөйөк Ватандың яҙмышы хаҡындағы яуаплы тойғо менән, юғары ялҡын менән янып йәшәне. Берҙәм дәүләтте юҡ итергә ынтылыусы яуыз көстәрҙең мәкерле ут төртөүҙәре шағир йөрәген ғүмере буйы дөрләтеп торған изге яныу, юғары ялҡын түгел ине, әлбиттә.

Әҙәбиәттең үҫеү юлын донъя мәҙәниәтен үҙләштергән, тәүге өйрәнеү тәжрибәләренән шул бөйөк байлыҡҡа үҙ өлөшөңдө индереү, үҙ биҙәгеңде өҫтәү дәрәжәһенә күтәрелеү билдәләй. Башҡорт әҙәбиәте тап бына шул йүнәлештә үҫте һәм уның ҡаҙаныштары, башҡа үҙенсәлекле таланттарҙың ижады менән бергә иң элек Мостай Кәрим әҫәрҙәренә нигеҙләнде.

Ватанды һәм замананы һайлап алмайҙар, уларҙы яҙмыш бирә. Быныһы һәр кем өсөн уртаҡ хәҡиҡәт. Ләкин шәхес үҙенең маҡсаттарын үҙе һайлай, йәшәү принциптарын үҙе асыҡлай. Мостай Кәрим әҙәбиәттәге тәүге аҙымдарынан уҡ юғары маҡсаттарға ынтылып ижад итте. «Ләкин мин бит бөтә ғүмерем буйы бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ» тигән ярһыу һүҙҙәрҙе шағир 1956 йылда яҙғайны. Шуға тиклем дә, шунан һуң да Мостай Кәрим ижадта тынғы белмәне. Тәбиғәт биргән көслө таланттың маҡсатҡа тоғро туҡтауһыҙ хеҙмәт менән ҡушылыуы уны әҙәбиәт донъяһының иң юғары бейеклектәренә күтәрҙе. Шул уҡ ваҡытта Мостай Кәрим өсөн талант һүҙе һәр саҡ талап һүҙенән айырылғыһыҙ булды.

Үҙен ижадҡа саҡырыусы иң төп сәбәпте шағир бурыс тип атағайны. Уҙған һәм киләсәк алдында бурыс, хыял менән хәтер алдындағы бурыс, тыуған халҡы алдында граждандыҡ яуаплылығы тойғолары.

Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән һүҙҙәрҙә Мостай Кәрим ижадының төп мәғәнәһе әйтелгән. Был юғары исемдә өс аҫыл сифат айырылғыһыҙ булып берләшкән: Башҡортостан, халыҡ, шағир. Был дәрәжәгә лайыҡ булыр өсөн ҙур таланттан тыш шағирҙың бөтә ғүмерен арнаған, аҡыл һәм күңел ялҡынын мөҡәддәс биргән халҡы булырға, йөрәгендә изге Башҡортостаны йәшәргә тейеш. Әҙәбиәт тормошта хаҡлыҡ эҙләү юлы икән, был хаҡлыҡты халыҡтан айырылып табыу мөмкин түгел. Халыҡ менән хаҡлыҡ – бер тыуған төшөнсәләр. Ижадсы өсөн хаҡлыҡ бары тик тыуған ергә тамырлана. Әгәр ошо сифаттар ҡушылмаһа, директивалар менән дә шағирҙы оло хөрмәткә лайыҡлы итеп булмай.

Эш, әлбиттә, халыҡ шағиры тигән исемдә генә түгел. Мостай Кәрим үҙе әйтмешләй, «шағирға ниңә чин кәрәк, нимәгә уға титул? Батшалар ятлап алырлыҡ шиғырҙар яҙа бит ул». Мостай Кәрим бөтә ижад юлында үҙенең ошо иң бөйөк таянысынан – халҡынан һәм заманынан айырылмай атланы. Шағир ватандаштарының донъяға бағыр, донъяны тыңлар күҙ-ҡолағына әйләнде. Ул башҡорт милләтенең

рухи-эстетик үҫешендәге ҙур бер дәүерҙе билдәләүсе үҙәк шәхес булып танылды. Хөкүмәт тарафынан бирелгән Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән хөрмәтле исем был сифаттарҙы бары рәсмиләштерҙе генә.

Мостай Кәримдең барлыҡ тормош һәм ижад юлы – оло мөхәббәттең тыуыуы һәм үҫеүе, яңынан-яңы буяуҙарҙа балҡып йәшәүе ул. Был һоҡландырғыс һөйөүҙең йәне – Башҡортостан.

Шағирҙың күргән-кисергәндәрен барыһын да ҙур һөйөү берләштерә, фиҙаҡәрлектәре шул һөйөүҙе һаҡлау өсөн эшләнә. Батырлыҡ, тоғролоҡ, намыҫынды юғалтмау, маҡсатыңдан тайпылмау, миһырбанлыҡ һәм ғәҙеллек – былар һәммәһе кешене һынай торған тәрән кисерештәр, матур һыҙаттар. Ләкин улар кеше тормошонда ниндәйҙер үҙмаҡсат ҡына түгел, сөнки берәү ҙә батырлыҡ эшләйем тип батыр булмай. Был сифаттар шәхестең йәшәү рәүешенә әйләнеп, ҡанға һеңә, үҙенән-үҙе үтәлергә тейешле намыҫ талабы булып нығына. Уларҙы шул уҡ мөхәббәт, кешенең тыуған еренә һәм халҡына һөйөүе бергә туплай.

Башҡортостандың рухи үҫешендәге иң юғары бейеклектәрҙе билдәләү бәхетен Мостай Кәрим бөтә тормошондағы яныуҙары, ҡыуаныуҙары, һыҙланыуҙары, ижад намыҫы һәм талантының алһыҙ-ялһыҙ эшмәкәрлеге менән яуланы. Әгәр мөхәббәт ҡанатлы тойғо икән, ҡанаттар үҫкән һәм нығынған һайын уның офоҡтары ла киңәйә. Мостай Кәрим ижадының яҡтыһы хәҙер алыҫ-алыҫ тарафтарға ла төшә. Уның ғүмер миҙгелдәрен, ижад баҫҡыстарын байҡағанда, башҡорт халҡының һуғыш алды йылдарынан алып яңы быуаттың, яңы меңйыллыҡтың башына тиклемге рухи үҫеш юлдары, етмеш йыл эсендә ниндәй яңы киңлектәргә сығыуы күҙ алдына баҫа.

Үҙ халҡының ихлас һөйөүен, ныҡлы ихтирамын яулаған ижад ҡына башҡа милләттәр алдында шундай уҡ яуаплы һынауҙы үтә ала. Ысынлап та, Европа менән Азияны тоташтырған Урал тупрағына тамырланған Мостай Кәрим таланты ошо ерлектең тарихи хәтерен, тарихи ғорурлығын да, хәҙерге йәшәү дәртен һәм киләсәк хаҡындағы хыялын да үҙенә туплап үҫте. Шул уҡ ваҡытта ике ҡитғаны бөйөк Урал тауыбыҙ нисек бергә ҡушһа, Мостай Кәримдең ижад донъяһында башҡорт һүҙ сәнғәте тыуҙырған традициялар Көнсығыш һәм Көнбайыш әҙәбиәтендәге, ғөмүмән, донъя мәҙәниәтендәге, тотош кешелек хазинаһындағы иң матур сифаттар менән үрелде.

Уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында совет әҙәбиәте яулаған бейеклектәр тураһында һүҙ барғанда Михаил Дудин, Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Сыңғыҙ Айтматов исемдәре йыш ҡабатлана торғайны. Был исемдәр теҙмәһе ниндәйҙер күнегелгән ҡалып түгел, шул осорҙоң ҡабатланмаҫ һыҙаты ине. Әйтәйек, элек бер дәүерҙә йәшәһәләр ҙә, төрлө милләт таланттары бер-береһен белмәгән. Блоктың һыҙланыуҙары Бабичҡа килеп етмәгән, Бабичтың аһзарын Блок ишетмәгән... Егерменсе быуаттың урталарынан ижади бәйләнештәр нигеҙендә бер әҙәбиәттәге асыш башҡаларҙың эҙләнеүҙәренә тәьҫир итте, уртаҡ байлыҡ тупланды. Ә бит һәр милли әҙәбиәт башҡа халыҡтар менән үҙенең иң көслө таланттары аша бәйләнешкә инә. Шуға тиң таланттарҙы эҙләй.

Мостай Кәрим башҡа халыҡтарға үҙ халҡының илсеһе булып өндәште, улар менән нур-яҡтылыҡ уртаҡлашты. Сөнки шағир үҙе әйтмешләй, «ут үрсемле – янһа, йылға тере – аҡһа ғына. Йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ – бүлешкәндән арта ғына».

Ләкин бүлешер өсөн әйтер һүҙең, йырлар йырың, аҡыллы фәлсәфәң башҡа халыҡтарҙың да иғтибарын тартырлыҡ, ихтирамын яуларлыҡ булырға тейеш бит әле. Мостай Кәримдең һүҙе үҙ милләтенең зиһененә һәм күңеленә лә, башҡа милләт уҡыусыларының рухи донъяһына ла тормошсанлығы һәм кешелеклелеге, уй-кисерештәрҙең фәлсәфи тәрәнлеге, тапҡыр образлылығы, ҡабатланмаҫ аһәңе-моңо менән үтеп инде.

Алтмышынсы йылдар башында Мостай Кәримде тәүге тапҡыр яҡындан күргәнемдә ниңәлер барыһынан да бигерәк уның уйсан йөҙө хәтерҙә ҡалған. Аҙаҡ мин уның көләс саҡтарын, шат йылмайыуҙарын да күрҙем, һәр осраҡта тапҡыр, мәрәкә һүҙҙәр әйтеүенә лә һоҡландым. Ләкин йылдар үткән һайын шағир ҡарашындағы сабыр уйсанлыҡ арта барҙы. Сабырлыҡ менән уйсанлыҡ – Мостай Кәримдең ижадсы тәбиғәте, йәшәү рәүеше, моғайын, иң элек ошо сифаттарҙа сағыла торғандыр. «Әммә мине шағир яһанылар юғалтыуҙар менән һағыштар», – тигәйне ул атаҡлы ҡырғыҙ яҙыусыһы, ҡәләмдәш дуҫы Сыңғыҙ Айтматовҡа арналған шиғырында. Һүҙ бында юғалтыуҙарҙы һәм һағыштарҙы изгеләштереү тураһында түгел, әҙәбиәттең заман дөрөҫлөгөнә тура ҡарарлыҡ граждандлыҡ ҡыйыулығы хаҡында бара. Фәйләсуф шағир был донъяның асылын, кешенең аҫыллығын күрергә һәм аңларға өйрәтә.

Мостай Кәрим халыҡтағы бөйөклөк менән тыйнаҡлыҡты, ғорурлыҡ менән сабырлыҡты күңелендә тупла" ны. Уның шиғырҙарында бөркөт саңҡыуы ла, һандуғас һайрауы ла ҡушылды. Шағир ил терәге булған ирҙәрсә ҡырыҫ та, ғашиҡтарса наҙлы ла була белде. Уның ижады ғазапланыу менән һоҡланыуҙың, ирлек менән илгәҙәклектең, ҡайғы менән ҡыуаныстың тәбиғи үрелеүенән, ҡаршылыҡтар бәрелешенән тыуҙы. Байтаҡ әҫәрҙәрендә күңел донъяһы тормоштағы хаталарға үкенеү, рухи өҙгөләнеү мәлдәрендә асылды.

«Бөтәһе лә ябай, асыҡ...» исемле шиғырында Мостай Кәрим «Миңә рәхәт, миңә еңел, барыһы ла шундай асыҡ» тигәйне. Был һис кенә лә шағирҙың идиллия һиллегенә ҡыуанып иҙрәүе түгел. Беҙ уны буш хыялдарҙан арынған, донъяға тағы ла асығыраҡ ҡараған сағында күрәбеҙ. «Миңә рәхәт, миңә еңел» тиһә лә, күҙҙәрендә уның йәш кипмәгән («Үтә әсе, үтә татлы түгел инде күҙ йәшем дә»).

Мостай Кәримдең дуҫына ҡарата «Йондоҙҙарға ҡарап туя алмағас, һин күҙҙәрең менән йотаһың» тигән һүҙҙәре уның үҙенә лә бик тура килә. Йәшәүгә һыуһау, ижад ҡомары – шағир тәбиғәтенең ошондай тынғыһыҙлығы йәшлек дәрте генә булып ҡалманы. Ошондай һыуһау уның бөтә ғүмере буйы дауам итте. Ут-ялҡын эсендә йөрәк ташҡа әйләнһә лә, ташта гөлдәр сәскә атты. Йылдар шағир күңеленә уйсанлыҡ, сәстәренә сал өҫтәне. Йөрәк түренән ҡайһы бер исемдәр япраҡ кеүек ҡойолдо, әммә сабый ихласлығын, йәшлек һөйөүен, донъяға ғашиҡ булыуҙы, дуҫтарға тоғролоҡ тойғоларын тормоштоң көҙгө ҡырауҙары ла, ҡышҡы елдәре лә шиңдерә алманы. «Тимәк, мин әле йәшәйем, әгәр ҙә һөйәм икән, юлымдан киләм икән», – тип яҙҙы шағир.

Милли әҙәбиәттә яңы жанрҙар тыуҙырған, үҙенсәлекле формалар алып килгән, стиль төрҙәрен байытҡан һүҙ оҫталары була.

Башҡорт әҙәбиәте тарихында Мостай Кәрим иң ҙур новаторҙарҙың береһе. Ләкин уның новаторлығы яңы жанр һәм форма йәки тема менән генә сикләнмәй. Был яҡтан Мостай Кәрим ижады яңырыуҙың бик күп сифаттарын һыйҙырған, ғәйәт ҙур (русса әйткәндә, всеобъемлющий) күренеш, баһалап бөтөргөһөҙ байлыҡ. Әҫәрҙәре менән ул барлыҡ башҡорт әҙәбиәтен яңы эстетик юғарылыҡҡа күтәрҙе.

Һәр жанрҙа Мостай Кәрим үҙ һүҙен тапты, үҙ моңон юғалтманы. Әҙәбиәткә ул шиғри һуҡмаҡтан килде. Йыл-

дар үтеү менән был һуҡмаҡ милли һүҙ сәнғәте үсешендәге төп үсеш йүнәлешен билдәләүсе оло юлға әйләнде. Уның Дим буйҙарында, Ағиҙел ярҙарында, Урал һырттарында тоҡанған шиғриәт уты күптән инде иң бейек, иң яҡты йондоҙҙар араһында яна. Ил драматургияһы хаҡында Мостай Кәрим әҫәрҙәренән тыш һүҙ алып барыу мөмкин түгел. Уның драмалары, трагедиялары, комедиялары был тармаҡта яңы дәүерҙе башлап ебәрҙе, илде урап сыҡты, донъя сәхнәһенә күтәрелде. Бындай хәлдәр үтә һирәк була. Шиғриәтебеҙ быуаттар төпкөлөнән килһә лә, драматургияла әле бик күптән түгел тәүге аҙымдарын яһаған башҡорт һүҙ сәнғәте өсөн был айырыуса ҙур мәртәбә. Мостай Кәрим донъя классикаһындағы Прометей кеүек иң боронғо образдарҙы ла яңыса үҫтерҙе; дөйөм кешелек темалары һәм сюжеттарын заман мәсьәләләре менән оҫта бәйләне. Нәҡ бына ошондай күренештәр аша милли әҙәбиәт донъя әҙәбиәтенә үҙ өлөшөн индерә.

Мостай Кәрим прозаһы тигән яңы донъя, уның «Оҙоноҙаҡ баласаҡ», «Ярлыҡау» әҫәрҙәре юғары баһаланды, яратып уҡылды. Был жанрҙа ла ул шағир булып ҡалды. Башҡорт әҙибенең повестарын төрлө милләт балалары рәхәтләнеп үҙ телдәрендә уҡый.

Халыҡ шағирының әҙәбиәт хаҡындағы уйланыуҙарын, уларҙағы фекер тәрәнлеге, зауыҡ һәм эрудиция, мемуарҙарҙың, мәҡәләләрҙең, портреттарҙың, әңгәмәләрҙең, көндәлектәрҙең, сығыштарҙың – һәммәһенең дә ысын сәнғәт кимәлендә камил эшләнеше һоҡландыра. Улар хаҡында «ҡойоп ҡуйған» тигән һүҙҙәрҙе әйтке килә. Мин уларға йыш ҡына әйләнеп ҡайтам, мине һис ҡасан тыныс ҡалдырғандары юҡ. Улар, моғайын, бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр.

Биш томда баҫылған әҫәрҙәренең беренсе томына инеш һүҙендә 1995 йылда Мостай Кәрим былай тип яҙғайны: «Етмеш биш йәшемде билдәләгән көндәрҙә Әбйәлил районында бер ҡорҙашым миңә ошондай хәбәр һөйләне: «Ҡорҙаш, – тине, – беләһеңме, ҡорҙаш, минең тоҡомда һинең дүрт быуын уҡыусың бар бит. Үҙем. Балаларым. Ейәндәрем. Инде килеп өлкән бүләрем һинең китапты ҡулына алды». Уҡыусыларымды былай быуындарға бүлеп уйланғаным юҡ ине әле. Ҡапыл тетрәп киттем. Йөрәгем аша үтеп, аңыма килеп һуғылған бәхеттән тетрәнем. Һеҙ бар саҡта, уҡыусыларым, телебеҙ ҙә, моңобоҙ ҙа, әҙәбиәтебеҙ ҙә йәшәр. Һеҙ йәшәгәндә беҙ ҙә бөтөнләй үк онотолмабыҙ. Ә һеҙ иһә – үлемһеҙ».

Быларға хәҙер яңы тиҫтер өҫтәлә. Мостай Кәрим әҫәрҙәре бер нисә быуын башҡорт уҡыусыларының рухи байлығына әйләнде. Шағирҙың ҡанатлы һүҙҙәре күптән инде халыҡ телендә мәҡәл һымаҡ йөрөй. Ғүмерҙең сабый һуҡмағынан, мәктәп тупһаһынан алып оло йәшкә тиклемге төрлө миҙгелдәрендә башҡорттар ғына түгел, башҡа милләттәге ватандаштарыбыҙ, хатта сит илдәрҙәге әҙәбиәт һөйөүселәр ҙә Мостай Кәримдең ижад донъяһын төрлөсә аса, тормош тәжрибәһе артҡан һайын, уның яңы яҡтарын күрә, тулыраҡ аңлай бара.

Оло таланттарҙың әҙәби хәрәкәткә йоғонтоһо уның заманы менән генә сикләнмәй, бигерәк тә киләсәк үҫешкә тәьҫире мөһим. Мостай Кәрим – башҡорт әҙәбиәтендә бай йөкмәткеле ижад мәктәбе булыу дәрәжәһенә еткән һүҙ оҫтаһы. Хәҙерге осорҙа ошо мәктәпте үтмәйенсә әҙәбиәтебеҙгә килгән берәй шағирҙы, яҙыусыны, драматургты табыуы ҡыйын. Хатта башҡорт тәнҡитенең үҫешенә лә уның туранан-тура йоғонтоһо бар. Мостай Кәрим ижады еңел-елпе мауығыуҙарҙан, яуапһыҙлыҡтан иҫкәртеп тора, художник намыҫы тураһында уйландыра.

Мостай Кәрим мәктәбенең уҡыусыһы булыуыма, остаҙым менән күп сәфәрҙәрҙә юлдаш булып үтеүемә, оҙаҡ йылдар ижади аралашып йәшәүемә мин ғүмерем буйы ҡыуанасаҡ һәм ғорурланасаҡмын.

Беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа туҡтауһыҙ үҙгәреп, яңырып торһа ла, донъяның асылы – мәңгелек. Мәңгелек ваҡыт ағышы өсөн нимә генә ул бәндәнең бушҡа сәбәләнеүҙәре, ҡыҫыр һөрәндәре? Мәңгелек ваҡыт үҙенә тиңдәрҙе генә тиң күреп һөйләшә.

Һуғыштағы ҡыҙыу һөжүм мәлен Мостай Кәрим «Мәңгелектән өҫтөн минуттар» тип атағайны. Мостай Кәрим шиғырҙарында Ваҡыт образы йыш ҡына мәңгелек һәм уның ҡыҫҡа бер мәле булған кеше ғүмере, шулар араһындағы бәйләнеш тураһында уйланыуҙар аша асыла. «Ваҡиғалар ваҡыттарҙан киң саҡта, һәр көнөбөҙ мәңгелеккә тиң саҡта», – тип яҙғайны шағир «Башҡорт халҡына яуап хаты»нда. «Ҡалтырап ағара тағы ҡояш тыуған яҡ, был таң – мәңгелек юлымда бер яҡты маяҡ» – был юлдар «Декабрь йыры» поэмаһынан. Ошондай уйҙар «Европа – Азия» шәлкемендә дауам итә: «Йыһан өсөн был – бер һулыш ҡына, ауылым өсөн – бөтөн бер заман».

Был циклдағы йомғаҡлау шиғырында уйҙар йыһан киңлегендәге ҡолас ала:

*Канат йәйгән*
*Самаһыҙ ҙур*
*Кошҡа оҡшай Урал тауы,*
*Ә Европа һәм Азия*
*Унының талмаҫ*
*Канаттары!*
*Һис ни менән үлсәнелмәҫ*
*Мөһабәт ҡош*
*Үткән ара.*
*Сөнки был бит мәңгелектән*
*Мәңгелеккә*
*Осоп бара.*

Мәңгелек һәм мәл тураһында уйланыуҙар Мостай Кәрим лирикаһында ниндәйҙер дөйөм фәлсәфәгә әйләнмәй. Кеше ҡулын, кеше күҙен, кеше аҡылын шағир Йыһан, Ваҡыт, Ара кеүек мәңгелек үлсәмдәр менән ярышырлыҡ бөйөк көс итеп данлай.

Мәңгелектән өҫтөн минуттар... Мостай Кәримдең бөтә ижад юлы – Ваҡыт менән ярышыу, мәңгелек менән бәхәс ул.

Бәлки ғәҙәти миҡдарҙарҙан, әҙәми үлсәмдәрҙән үтеп, шул сиктәрҙән, шул күнегелгән ҡалыптарҙан аша сығып донъяны байҡағанда ғына кеше йәшәйешенең мәғәнәһен нығыраҡ аңлап, уны яңыса асып була торғандыр...

Мостай Кәримдең һис ҡасан туҡтамаҫ ваҡыт менән үҙ мөнәсәбәттәре, үҙенсә ваҡыт үлсәмдәре, үҙенең ваҡыт иҫәбе. Унының ижадында мәңгелек менән мәл, баҡыйлыҡ менән фанилыҡ, тыуым менән үлем айырылғыһыҙ һәм аяуһыҙ берлектә йәшәй. Мәңгелек менән бары мәңгелек телендә аралашып була. Башҡорт халҡының ошондай юғарылыҡҡа ынтылышында Мостай Кәрим ижады иң сағыу күренештәрҙең, тарихи ваҡиғаларҙың береһе булды. Һәр милләт Мостай Кәрим кеүек шәхестәренең ижади эшмәкәрлеге арҡаһында ваҡыт менән, уҙған, бөгөнгө һәм киләсәк менән, донъя һәм кешелек менән яңыса бәйләнешкә инә. Ошондай шәхестәр халыҡты ғаилә төбәгенән, ырыу төйәгенән кешелек майҙанына алып сыға.

Шағирҙың ҙурлығы унының йөрәгенә һыйған тормоштоң, донъяның, шулар хаҡындағы уй-кисерештәрҙең ҙурлығы менән билдәләнә.

«Кендегемде киҫтеләр ҙә Ер шарына ялғанылар» – был һүҙҙәрҙә ысын шағир яҙмышы бик мәргән әйтелгән.

Яҡты һәм моңһоу, шатлыҡлы һәм үкенесле кисерештәр менән тулы донъя Мостай Кәримде һәр саҡ һоҡландырҙы, арбаны, тетрәндерҙе, һағыштарҙан күңеле тулды. Уҡыусыларға ул үҙенең күңелен ярып һала. Әле генә ташып торған шатлыҡтарын кешеләргә йомарт өләшеүсе шағир йыш ҡына был фани донъяға ҡарап һыҙланды.

Туҡһанынсы йылдар башында Мостай Кәрим «Нығып бөткәс кенә ҡайғы бөгә күп ирҙәрҙе», – тип яҙғайны. Иң көслө шәхестәрҙе лә бөгөрлөк ауырлыҡтар, яуыҙлыҡтар шағирҙы аҙ һынаманы. Әле һикһәненсе йылдар башында уҡ «Прометей монологтары»нда ошондай хәүефле уйҙар тыуғайны:

*Кешеләргә ҡарап, ҡайғым арта,*
*Онотолдо әҙәп, самалар.*
*Олимп тауына көтөү ебәргәндәр,*
*Ҡәберлектә бесән сабалар.*

Бигерәк тә нисәмә йылдар дауам иткән буталыштар-тартыштар, иҡтисади ҡыйралыштар, рухи тарҡалыуҙар заманында Мостай ағайҙың ҡарашындағы уйсанлыҡҡа һағыш ныҡыраҡ өҫтәлә барҙы. «Эштән биҙгән ҡулдарыбыҙ ҡорой, уйҙан биҙгән аңдар кибәләр», – тип хафаланды шағир. «Быуат» шиғырындағы «Быуат та юҡ, йыл да, сәғәт тә юҡ, ваҡытһыҙлыҡ итә тантана», – тигән юлдар уның ниндәй борсоулы уйҙар менән йәшәүен асыҡ күрһәтә. Был шиғыр:

*Юҡ!*
*Тарихҡа ҡалдырмайыҡ судты,*
*Быуат – беҙ ул. Беҙ ул асылда.*
*Беҙ үҙебеҙ хөкөм эйәһе лә,*
*Үҙебеҙ ҙә хөкөм аҫтында.*

*Үҙебеҙҙе гел ҡарата манһаҡ,*
*Алда кем һуң беҙҙе аҡлаһын.*
*Килер замана ла, беҙгә эйәреп,*
*Бар ғәйепте артҡа таҡмаһын,*
*Алла һаҡлаһын! –*

тигән иҫкәртеүҙәр менән тамамланғайны.

Күңеле өҙгөләнгән мәлдә «Беҙ кем?» шиғырында шағир һиҙгер замандаштарын һиҫкәндерерлек һорауҙарҙы ҡуйҙы:

*Рәнйетәләр һине, Ватан-әсә,*
*Кәмһетәләр һине, изгебеҙ.*
*Былай булғас, йә баламы һиңә,*
*Йә бәләме һиңә инде беҙ?*

Үҙгәртеп ҡороу тигән һөрәндәр менән бөйөк дәүләтте емерергә, кеше рухын тарҡатырға мәкерле әҙерлектәр башланғанда, был һүҙҙәр күптәрҙең башын әйләндергәндә, Мостай Кәрим ҡәтғи рәүештә «Мин үҙемде үҙгәртеп ҡорорға йыйынмайым» тип белдерҙе. Емереүҙәре еңел, аҙаҡтан төҙәтеү-төҙөүе бик ауыр, тип иҫкәртте. Шунан һуң халыҡҡа күпме фажиғәләр ябырылды: ҡеүәтле Ватан айырым илдәргә бүленде, рухи таяныстар ҡаҡшаны, нисәмә быуын ватандаштарҙың хеҙмәте тыуҙырған дәүләт байлығын талауҙарға юл ҡуйыу намыҫлы кешеләрҙе бөлгөнлөккә төшөрҙө. Шағирҙарҙың аҡыллы кәңәштәренә батшалар һирәк-һаяҡ булһа ла ҡолаҡ һалһа икән дә бит...

Донъялар нисек кенә болармаһын, Мостай Кәрим һаман тормошта төҙөү, ижад итеү рухы, донъяға яҡтылыҡ өҫтәү сәме һәм ғәме менән йәшәне. Ерҙәге кескәй генә матурлыҡ та уның өсөн тағы ла ҡәҙерлерәк була барҙы. Ваҡытһыҙлыҡтың мәңге тантана итмәйәсәгенә ышанысты башҡаларға илтергә тырышты. Абруйлы ғына кешеләрҙең байтағы, кисәге имандарынан баш тартып, яңы шарттарға яраҡлашып, бәҫтәрен юғалтҡанда, Мостай Кәрим үҙенең рухи дәрәжәһен, әхлаҡи бөтөнлөгөн һаҡланы, Мостай Кәрим булып ҡалды. Ысынлап та, халыҡтың тормош тәжрибәһенән, тәрән аҡылынан үрнәк алып, үҙенең маяҡтарын, йәшәү принциптарын күптән билдәләгән халыҡ шағирының һайлаған юлынан, инанған изгелектәрҙән ситкә тайпылыуын, ауманҡайҙар үҙгәрә тип, үҙгәрергә тотоноуын күҙ алдына килтереүе лә мөмкин түгел.

Бөйөк шағир, прозаик, драматург Мостай Кәрим күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре булып танылды, оҙаҡ йылдар РСФСР Юғары Советының депутаты булды. Ләкин бынан һуң да уның халыҡ менән бәйләнеше һүрелмәне, киреһенсә, көсәйә генә барҙы. Митингтарҙа сығыш яһамаһа ла, уның ватандаштарына мөрәжәғәте, публицистик мәҡәләләре барлыҡ республикаға, тотош Рәсәйгә ишетелде. Башҡортостандың киләсәк яҙмышы хәл ителгән көндәрҙә Мостай Кәримдең аҡыллы кәңәштәре ҙур көскә әйләнде. Ул һәр саҡ иң кәрәкле һүҙҙе иң кәрәкле ваҡытта әйтә белде. Ҡарашы асыҡ, фекере үткер, әхлаҡ тамырҙары тәрән ил ағаһының һүҙен халыҡ һәр

ваҡыт көтөп алды. Уның иҫкәртеүҙәре бик күптәргә дөрөҫ ҡарарға килергә ярҙам итте.

Үҙенең 85 йәшенә арналған тантаналы кисәлә Мостай Кәрим Башҡортостандағы именлек һәм татыулыкты, быуаттар буйы һыналған халыҡтар дуҫлығын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағыҙ тигәйне. Уны таларға теләүселәр арта тип киҫәткәйне. «Тыуған сәңгелдәгебеҙ Башҡортостанды, уның дәрәжәһен, уның азатлығын, уртаҡ Ватаныбыҙ Рәсәйҙәге ғәйәт ҙур абруйын һаҡлағыҙ», – тигән һүҙҙәр аҡыл эйәһенең киләсәккә әйткән аманаты ине.

Ғүмеренең һуңғы ике-өс йылында Мостай ағай халыҡ менән айырыуса йыш осрашты. Тик ҡайһы бер ваҡытта: «Ярай инде, егеттәр, әйҙәгеҙ үҙегеҙ генә барығыҙ. Минһеҙ йәшәргә өйрәнә башлағыҙ инде» – ти торғайны. Мостай Кәримһеҙ йәшәргә беҙ бер ваҡытта ла күнегә алмабыҙ. Күнегергә кәрәкмәй ҙә. Әгәр ҙә халыҡ Салауат, Аҡмулла, Бабич, Мостай, Рәми һымаҡ шәхестәрен онотоп йәшәргә күнегә икән, уның киләсәге өмөтһөҙ, яҙмышы бик хәүефле булыр ине.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ил һәм халыҡ алдындағы тауҙай хеҙмәттәре Ленин һәм Дәүләт премиялары лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән исемдәргә лайыҡ булды, милли мәҙәниәтебеҙгә оло ҡаҙаныштар һәм ҡыуаныстар килтерҙе. Был шатлыҡ, был байлыҡ киләсәк быуындарға күсәсәк. Милләттең ғорурлығы булған был хазина – кешеләрҙе уйландырыусы һәм моңландырыусы, намыҫты сафландырыусы, рухты ҡанатландырыусы, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың төҫ-ауаздарын, уй-кисерештәрен алыҫ тарафтарға һәм тыуыр йылдарға еткереүсе Мостай Кәрим ижады.

Мостай Кәрим әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтенең, Башҡортостандың рухи үҫеш юлында тотош дәүерҙе тәшкил итте. Ләкин был тарихи феномен халыҡ шағиры йәшәгән йылдар менән генә сикләнмәйәсәк. Башҡорт милләте йәшәй икән, уның яҙмышында Мостай Кәрим дәүере дауам итәсәк.

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры

# *Шиғриәт*

*1934–1969*

## Беренсе бүлек

### ТУЛҠЫНДАР

Апрель кисе зәңгәр пәрҙә тартты,
Төн һыйынды Иҙел битенә,
Аҡһыл айҙың тоноҡ нурҙарынан
Көмөшләнеп тулҡын һикерә.

Мин кәмәлә
Шаян тулҡындарҙың
Һикерешеүен ҡарап барамын.
– Ишкәксе дуҫ!
Бик тиҙ алыҫлаттың
Ярҙар менән беҙҙең араны.

Яҙғы Иҙел бөтөрөлөп аға,
Тулҡын кәмәбеҙгә үрелә,
Ҡанаттарын ҡаҡҡан шул тулҡындар
Йәшлегемдәй матур күренә.

*1936*

## КӨҘ

Тымыҡ күл буйҙарын оя иткән
Өйрәктәр ҙә китте алыҫҡа,
Хушлаштылар бөгөн улар менән
Бергә үҫкән һылыу ҡамыштар.
Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә,
Шаян елдәр уйнап үтәләр,
Суҡлы шәл ябынған ҡайындарҙың
Һары шәл суҡтарын һүтәләр.

Өй алдында яңғыҙ ҡарт тирәгем
Һуңғы япраҡтарын ҡаҡһа ла,
Тормошта яҙ –
Сирень ағастары
Сәскә ата кеүек баҡсала...

*1936*

## ДИҢГЕҘ ЯРЫНДА

*Пушкин һүрәтенә*

Һул ҡулын ҡаҡ ҡая ташҡа терәп,
Тулҡындарға текләп күҙҙәрен,
Әллә инде азатлыҡты шағир
Диңгеҙ дауылынан эҙләне?
Шағир тора текә ярға баҫып,
Ғорур башы түбән эйелгән.
Уйлағандыр шунда:
...Бәлки, тиҙҙән
Таң да атыр инде илемдә.
Азатлыҡты һағынып, ашҡынғандыр
Тулҡындарҙы юлдаш итергә,
Ярһығандыр шағир йөрәге
Тынсыу ярҙы ташлап китергә.
Ул китмәгән. Ярҙа баҫып ҡалған,
Ҡулы менән ташҡа терәлеп,
Һәм күҙәткән тулҡын шаулауын,
Диңгеҙ бушлығына текәлеп.

*1937*

## ҠЫҘЫҠ ҺӨЙӨҮ

Ай ҡалҡҡас ауыл түбәһенә
Урамдарҙы мансып нурына,
Тальян тартып үтәм, көндәгесә,
Һеҙҙең тәҙрәгеҙ турынан.
Тамсы гөлдәреңдең араһынан
Көләс ҡараш менән үрелдең,
Тиле хистәр һине баҫтырҙылар
Экранына иләҫ күңелдең.
— Әйҙә, Зәйнәп, — тинем мин, — клубҡа,
Баш болғаның
Тулҡынлатып болот сәсеңде,
— Ниңә? — тинем, —
Ә һин шуны
Ниңә инде минән йәшерҙең?

* * *

Һин бит кис ултырып яулыҡ сиктең,
Исемеңде лә яҙҙың дебетләп,
— Кемгә? — тинем,
Көләп яуап бирҙең:
— Тракторист уңған егеткә.
Һинең керһеҙ күҙҙәр, йылмайышып,
Тулҡынлатты минең хисемде,
Ә шунан һуң йөрәк йырҙарыма
Ҡушып йөрөнөм һинең исемде.
Ал таҫмалар алдым «үрерһең» тип
Индәреңә төшкән сәсеңде,
Үҙең ҡулъяулыҡтар сиктең,
«Бүләккә», — тип.
Кемде һөйөүеңде йәшерҙең.
«Тракторист» булғас,
Йөрәгеңде
Мин үҙ йөрәгемә бәйләйем,
Мин бит тракторист,
Мине һөймәй
Кемде һөйһөн, Зәйнәбем?!

* * *

Букет тоткан килеш күрҙем һине
Кис клубта – ҡыҙыл кисәлә,
Теләк ине минең, Зәйнәп һылыуым,
Йәшерен серҙәреңде сисергә.
Һин барҙың да Әхмәт ҡаршыһына,
– Данлыҡлым, һин илдең батыры,
Туҡтай белмәй, шундай көслө шаулай,
Ҡыр яңғыратып һинең моторың.
Шулай итеп сәскә һайлап алғас
Уның күкрәгенә ҡаҙаның,
Ә мин бары шул минутта ғына
Кемде һөйөүеңде аңланым.

*1937*

## ЯУЛЫҠ БОЛҒАП ҠАЛДЫ

Томбойоҡто үпкән тулҡын кеүек,
Йәш ирендәр бергә ҡушылды.
Айырылдылар –
Комбинезонлы егет
Кабинкаға менеп ултырҙы.
– Хуш хәҙергә, иркәм,
Күтәреләм,
Сәләм әйтер һиңә аҡ болот.
– Уңышлы ос, батыр Чкаловтай,
Планетаны ура, Байбулат!
Таң томанын ярып, тирбәлдереп,
Осҡан ҡарсығалай,
Ҡыйылып,
Бензин еҫе бөркөп,
Болот ярып
Ҡыйыу күтәрелде самолет.
Тау бөркөтө кеүек ҡанат йәйеп,
Болоттарҙы киҫеп иңләне,
Ә сирәмдә, күҙен күккә текәп,
Яулыҡ болғап ҡалды һөйгәне.

* * *

Көрәш сигнал бирһә,
Ер тетрәтеп,
Дауыл күтәрелһә,
Ел ҡупһа,
Кабинкала улар бергә булыр,
Бергә тороп
Икәү бер поста...

*1937*

## УРАМ ШАУЛАЙ

Урам буйлап
Байраҡ болғап,
Колонна үтә.
Көслө йырҙан
Таш урамдар
Яңғырап китә.
Иркен һулап,
Ҡыйыу атлап,
Сигнал уйнатып,
Көлөп үтә
Шат ватандың
Йәп-йәш хужаһы.
Май ҡояшы
Көлә-көлә
Ал нурын түгә,
Йомшаҡ елдәр
Тирбәлдереп
Байраҡты үбә.

*1937*

## ҺИН КИТКӘНДӘ

Йылмайҙылар һиңә ҡарап
Таныш урамдар,
Маһайҙылар һинең менән
Дуҫтар, туғандар.
Бала осорған ҡарлуғастай,
Һөйөклө әсәң,
Маҡтаулы посҡа оҙатты
Һине бит, Әсмән.
Шәфҡәтле ҡулдары менән
Арҡаңдан һөйҙө,
«Ғәҙел хеҙмәт ит иленә,
Аҡҡошом!» – тине.
Эскә батҡан күҙҙәрендә
Көләү балҡыны,
Һырланған йөҙөн нурланы
Шатлыҡ ялҡыны.
«Ярай, әсәй, һөйгән улың
Керпек тә ҡаҡмаҫ,
Өҙөлөп һөйгән ватанының
Сигендә сафта.
Уяу булыр, ҡыйыу торор
Ватан сигендә,
Һәм иленең саф еренә
Кер ҙә тейҙермәҫ!
Таң елдәре тарап иҫте
Һинең сәсеңде,
Тантаналы таңы ине был
«КИМ» – лы йәшлектең.
Комсомолдар һинең арттан
Кепкалар сөйҙө,
Һин хушлашҡаның белдереп
Башыңды эйҙең,
Ә шул ваҡыт таң яҡтырҙы
Ал нурын түгеп,
Йомшаҡ ҡына елдәр иҫте
Гөлдәрҙе үбеп.

*1937*

## НИ КӨТӘҺЕҢ?

Тәҙрә асып тышҡа күҙ ташлаһам,
Мәк сәскәһен елдәр уйната,
Парашютсы ҡыҙый!
Мәккә ҡарап,
Иҫкә алам һине шул саҡта.
...Күперенгән ҡара болоттарҙы
Телгеләгән йәшен шикелле,
Йәшлек дәрте менән ҡыйыуланып,
Самолеттан ергә һикерҙең.
Күҙҙәремде күккә текәнем дә
Ашығып көттөм һинең төшкәнде,
Минең йөрәк, бәлки, шул ваҡытта
Минутына йөҙ ҡат типкәндер.
Тирбәлеп төшөп еткәс тә,
Һинең ҡулыңды ҡыҫтым.
– Мин хәҙер ҡыйыу һикерәм,
Һин ни көтәһең, дуҫтым?

*1937*

## ЛЕНИН

Бөгөн тағын да
Табут янында
Торған шикелле,
Тамырҙар буйлап
Халҡым ҡанында
Ҡайғы эркелде.
Юҡ, юҡ, ул тере –
Беҙҙә фекере,
Тау бөркөтөләй,
Ул ғорур килә,
Май ҡояшылай,
Ул асыҡ көлә,
Ул нурын сәсә
Йыраҡ-йыраҡҡа.
Ул тере йәшәй
Миллион йөрәктә.
Зәңгәр – күгебеҙ,
Гүзәл – көнөбөҙ.
Яҡты көнөбөҙ,
Болот ҡапламаҫ
Беҙҙең ҡояшты,
Юғалмаҫ мәңге
Беҙҙең юлбашсы.

*1938, ғинуар*

## ФАКЕЛ

Төн һыйынды
Урамдарҙы
Наҙлап, иркәләп, һөйөп.
Ел шаяра,
Аҡ ҡарҙарҙы
Сәсеп, һибәләп, өйөп.
Йәштәр килә
Колонналап
Көлөп, шаярып, гөрләп,
Факел балҡый
Ҡулдарында,
Күккә һуҙылып, дөрләп,
Йыр бөркөлә
Күкрәктәрҙән.
Ярһый, яңғырай көслө
Йыр, тарала
Алыҫтарҙа
Эфир тулҡыны төҫлө.
Байрам бөгөн:
Янһын факел,
Күкте ҡаплаһын ялҡын,
Ул уттарҙа
Йәшлектең дә
Юғалмаҫ даны балҡый.
Илең һөйһәң,
Беҙҙең ҡорос
Саф тығыҙ булһын тиһәң,
Ал факелды,
Теҙел сафҡа,
Һәм ҡушыл йырға, иптәш!

*1938*

## АЙЫРЫЛЫУ

Көнбайышҡа яҡынлашҡан ҡояш
Миңә һуҙа һуңғы нурҙарын,
Елдәр...
Йәйге елдәр тулҡынлата
Ҡаршымдағы ҡайын урманын.
Ҡарап ҡалдым,
«Доң... доң...» саң ҡағылды,
Тәгәрмәстәр таҡмаҡ башланы,
Эх, землемер,
Алыҫ саҡрымдарың
Араларға ҡолас ташланы.
Ул йәшенде,
Ә мин ҡарап ҡалдым,
Баҡса ҡоймаһына һөйәлеп,
Ләкин хистәр, ярһыу хистәр китте
Уның вагонына эйәреп.
Башым ауыр, муйын саҡ бөгөлмәй,
Ҡаты һағыш тырнай күңелде.
Китеүеме ҡыйын, оҙатыуымы? –
Әйт, һандуғас,
Таныш түгелме?
Ауыр уйҙар баҫты күңелемде,
Ауыр уйҙар мине талдырҙы.
Һыҙламасы, йөрәк!
Ул бит миңә татлы үбеүен дә,
Ҡайнар һөйөүен дә ҡалдырҙы.
Ул алыҫҡа китте,
Киң ҡырҙарға
Бергә үҫкән шаулы ҡаланан,
Һағынһам да түҙәм,
Сөнки уның
Тормош юлы шунда ҡараған.
Биләп торор иркәм йөрәгемдең
Башҡаларға ят бер өлөшөн,
Һәм ҡайтыр ул,
Ә һуң ул сағында
Үтә татлы булыр күрешеү...

*1938*

## ТУҠАЙҒА

Яҡты көнгә сығып етә алмай
Күмелеп ҡалған шахтер шикелле,
Һөйгән монологын һөйләп бөтмәй
Тынып ҡалған актер шикелле,
Ағыуланған тынсыу ҡараңғыла
Янып бөтмәй һүнгән шәм кеүек,
Сәхрәләге яҙғы йылға кеүек
Ташты ла ул, тынды йәш егет.

Яҙғы ҡыраու япраҡтарын бөргәс,
Ҡапыл ғына шиңгән гөл кеүек,
Иҫкелектең тынсыу һауаһында
Тыны бөтөп үлде йәш егет.

Дауыл алдындағы ҡара болот
Теләгәндәй айҙы ҡапларға,
Иҫке тормош, Туҡай, һинең данды
Теләгәндер шулай таптарға.

Беҙ, дауылдар булып, күгебеҙҙе
Ҡара болоттарҙан таҙарттыҡ,
Беҙ – икенсе туфан – еребеҙҙе
Иҫкелектән йыуып яңырттыҡ.

Туҡай йыры беҙҙең менән килде,
Йыры ялҡын уның бөгөн дә,
Туҡай... ул бит беҙҙең яҡты йондоҙ
Поэзияның аяҙ күгендә.

*1938*

## БЕРЕНСЕ ТАМСЫЛАР

*(Феттан)*

Көн буйы тын торған һауала
Ҡаралып болоттар ҡабара,
Түбәндән шаулашып, гөрләшеп,
Үттеләр бер төркөм ҡарғалар.

Ҡояш та бөркәнсек ябынды,
Өйҙәрҙә тәҙрәләр ябылды,
Турғайым оянан сыҡты ла
Ҡомлоҡта йыуынып ҡағынды.

Ел бөгөн, хәбәрсе шикелле,
Ямғырҙың хуш еҫен килтерҙе,
Шунда уҡ япраҡтар битенә
Беренсе тамсылар һикерҙе.

*1938*

## ҠЫШ КИЛГӘС

Алыҫта урман,
Урманда томан.
Ерҙе ҡаплаған
Аҡ мамыҡ юрған.

Тышта ел өрә,
Ҡарҙы һеперә,
Мин өйҙә торам
Һалҡынға күрә.

Тышта ата ҡаҙ.
Ул, меҫкен, бойоҡ.
— Әсәй, ниңә уның
Бер аяғы юҡ?

*1938*

## КИЛ ИНДЕ

Сыйырсығым, ҡошсоғом,
Хәҙер бында ҡыш түгел,
Матурым, һин кил инде,
Өйөң өлгөрҙө бөгөн.

Тәҙрәләре уйылған,
Ал, зәңгәргә буялған,
Сыйырсығым, һинең өсөн
Ҡуныр тал да ҡуйылған.

Ҡанаттарыңды елпеп,
Асыл һайрауың һирпеп,
Сыйырсығым, кил инде,
Өйөң өлгөрҙө бөгөн.

*1938*

## ДУҪТЫҢ ҮЛЕМЕ

Комсомоллыҡ билетымды
Ҡулыма алған һайын,
Хәтерләйем фронтташтың
Билетҡа тамған ҡанын.
...Ташлы ярын йыуып аҡҡан
Волганан алыҫ түгел
Ҡайнар пулянан киҫелде
Ун ете йәшлек ғүмер.
Сентябрҙең талғын елле
Күгелйем кисе ине,
Ҡанлы кәүҙәгә текәлеп,
Фронтовиктар баш эйҙе.
Ул, ауыр һулап, түшенән
Комсобилетын алды,
Һәм билетының тышына
Тәңкә булып ҡан тамды.
Көҙгө япраҡтар шикелле
Кипкән, хәлһеҙ иренен
Тын ғына ҡыймылдатты ла
Беҙгә һуҙҙы билетын:
– Мин үләм. Ләкин уйҙарым
Һыя алмаҫ ҡәбергә.
Бына билет, дуҫтар, һеҙгә
Ҡалһын яҡты хәтергә...
Теләгем һеҙҙең йөрәктә,
Намыҫым үҙем менән,
Үлем өсөн йәшәмәнем,
Ә йәшәү өсөн үләм...

*1938*

## ТӨН ТУРАҺЫНДА УЙ

I

Ай йөҙ түбән ятып ерҙе күҙләй,
Урамдарға тынлыҡ тарала,
Тойғоларға тулы хоҡуҡ биреп,
Төн ҡарарға сыҡтым ҡалаға.

Бына асфальт, бағаналар, уттар...
Мин уларҙың бер йәш хужаһы,
Мин улы был ерҙең, һәр өй менән
Ҡосаҡлашып килә уҙаһым.

Төн. Сирендәр керпек асыр өсөн
Йоҡомһорап таңды көтәләр.
Ә тополдәр ҡала хаҡындағы
Хикәйәтте хәбәр итәләр.

II

«Был – тормошһоҙ ҡырағай урман булған,
Тик бөркөттәр ҡуян аулаған.
Иҙел иң(е)рәп аҡҡан, һәм ҡайындар
Ҡанаттарын йәйеп шаулаған.

Йылдар шулай талғын һуҙылғандар,
Ҡыштар яңы яҙҙар килтергән,
Кеше тигән бик ҙур архитектор
Был тауҙарҙа ҡала күтәргән.

Ләкин бында кешелеккә – төрмә,
Аҡылдарға – сыңлы манара,
Ауыр бығау булған ҡыйыулыҡҡа.
Кәүҙәләргә – епле бағана».

III

Төн. Тынлыҡҡа һеңеп был урында
Монашкалар гимны һуҙылған,
Шундай төндә башҡорт арҡаһынан
Ҡамсы үрергә ҡайыш һуйылған.

Төн. Бындай төн, бәлки, күҙләгәндер
Был ерҙәрҙә Ленин атлауын;
Төн. Был төндәр хәтерләтә миңә
Чапай туптарының шартлауын.

IV

Мин йоҡоһоҙ һаташыуҙан айнып,
Май төнө һәм Өфө хаҡында,
Йәшәү кеүек, татлы уйға сумып
Баҫып торам урам сатында.

Хәлһеҙләнеп алыҫ йондоҙ һүнә,
Айҙан һуңғы нурҙар түгелә,
Ҡыҙыл диңгеҙ булып, таң йәйелә
Республика һәм ҡала күгенә.

*1939*

## ТРАМВАЙҘА

Трамвай ҡуҙғалып,
Таңда ҡысҡырҙы,
Елдәр болғатып,
Сәсте туҙҙырҙы.
Тышҡа һуҙылам
Тәҙ(е)рә аша,
Бөгөн әллә ни
Шатлығым таша.
Бер кескәй бала
Ҡулын болғаны,
Шул саҡ билетты
Елдәр урланы.
Билет китте тип
Борсолманым мин,
Контролер ҡыҙый
Таныш әле, тим.
Ул миңә килеп,
Көлөп ҡараны:
– Күрһәтегеҙ! – тип,
Билет һораны.
«Юҡ» тигәс уның
Йөҙө алланды.
– Ваҡыты түгел бит,
Ҡуйсы алдауҙы!
Ә мин ҡабындым –
Башты ут алды,
Танауым буйлап
Һалҡын тир тамды.

*1939*

## ТЫУҒАН ЕРҘӘ

1

Һағыныу хисе, миңә ҡанат ҡуйып,
Алыҫ ерҙе яҡын иттерҙе,
Мин ауылға ҡайттым,
Тыуған ергә,
Күленә ҡайтҡан аҡҡош шикелле.
Уҙған ғүмер төҫлө боролма юл,
Күкшелләнгән тауҙар тулҡыны,
Һары океан – бешкән башаҡ еҫе,
Ҡуйы урман, убыр упҡыны...
Әсәй ҡулы кеүек яҡын миңә,
Таныш бында миңә һәр ҡыуаҡ,
Был ерҙәрҙә, аунап көсөк һымаҡ,
Ғәмһеҙ үтте минең бала саҡ.

2

Ҡомдан уҙған йылан эҙе кеүек,
Баҫыуҙарҙы йырып, юл килә.
Юл буйында
Урман үгәйһеткән
Япа-яңғыҙ ҡайын эйелә.
Хәтерләйем, ҡояшлы көҙ ине
Мин ауылдан киткән сағымда,
Үкһей-үкһей, әсәй оҙата килде,
Беҙ туҡтаныҡ ҡайын янында.
Күләгәләр япты уның йөҙөн,
Ҡояш инде шул саҡ болоҡа,
Йәшкә ҡушып үпте күҙҙәремде:
– Бәхетле бул, беҙҙе онотма...
Яулыҡ осон сәйнәп ҡалды әсәй,
Ҡарт ҡайынға һалып беләген,
Мин – таш бәғер,
Шул саҡ аңламаным
Улын һөйгән әсә йөрәген.

Ғәмһеҙ атлап киттем...
Бөгөн тағы тыуған ҡырҙарымдың
Тупрағына баҫып киләм мин,
Ләкин инде донъя матурлығын,
Тормош михнәттәрен беләм мин.

3

Һағыныу хисе миңә ҡанат ҡуйҙы,
Яҡты уйҙар оҙата барҙылар,
Бына хәҙер
Бер ояла үҫкән
Иҫке дуҫтар ҡаршы алдылар.
Атай —
Һаман ата арыҫлан ул,
Баҫҡан ерҙә ташты илата,
Әсәй —
Әүәлгесә
Ҡайғыһын да,
Шатлығын да йәшкә сылата.
Ҡайғы йәше әсе, ул йәш кибер.
Мин ҡайттым бит, әсәй, ул китер.
Шатлыҡ йәшен тыйма тамғанда.
Татлы йәш ул, саф ул, ысыҡ һымаҡ,
Ә ысыҡ төшә аяҙ таңдарҙа.

*1939*

## ЙЫР

Себер тигеҙлеге буйлап
Ҡоторҙо буран,
Йылдарын еңеүле итеп,
Үтте партизан.

Үтте партизан тайганы,
Аҫып винтовка,
Бойоҡманы йәш партизан,
Ташланды утка.

Кисте отряд Байкалды —
Юл булды оҙон.
Яратты шунда партизан
Бер бүрәт ҡыҙын.

Үлемгә лә, еңеүгә лә
Бергә килделәр,
Һуңғы һыныҡ икмәкте лә
Икәү бүлделәр.

Таҙартҡас самурайҙарҙан
Был изге ерҙе,
Ул яҡын итте үҙенә
Алыҫ Себерҙе.

Башта һағынды Уралын,
Унан эйәләште,
Һөйҙө зәңгәр Байкалды һәм
Һылыу кәләште.

*1939*

* * *

Иҫке йылдың иҫтәлеге итеп,
Дуҫтар миңә букет килтерҙе,
Биҙәкле ине, кисергән хис төҫлө,
Янып һүнгән көндәр шикелле.
Декабрҙә яҙ гөлдәрен тотоп
Йәшлек керҙе көлөп ишектән,
Һәм ҡанатлы дуҫлыҡ хөрмәтенә
Бер аҙ шаулы маҡтау ишетәм.
Шиңмәҫ гөлдө төрөп хистәргә,
Вәғәҙә итәм йөрәк дуҫтарға:
Йәшәү – ижад,
Ижад – йәшәү тәме,
Мин ижадым өсөн янырмын,
Асеевтар Иҙел булып ташһа,
Мин Дим булып ҡушылып ағырмын.
Өй алдында төн ҡуйыра һаман,
Ҡар ҡойола күкте томалап,
Ә һеҙ
Байрам өҫтәленең артына
Ултырығыҙ, дуҫтар,
Оҙаҡламай
Иҫке йылдың һуңғы минуттарын,
Гимн уйнап, Мәскәү оҙатыр,
Һоҡландырғыс эштәр вәғәҙә итеп,
Киң майҙанға сығыр йәш батыр.
Беҙ ҡотлайыҡ тыуыр яңы таңды.
Таңда тыуыр хеҙмәт улдарын,
Һәм арнайыҡ Ватан-әсәбеҙгә
Тәүге бокалдарҙың сыңлауын.

*1939*

## ТАҢ ИНЕ

*(Баллада)*

Яҙғы һалҡынса таң ине,
Аяҙ ине күк йөҙө,
Ай көмөш тәңкәләр сөйҙө,
Алыҫ бушлыҡта ағарып
Балҡыны таң йондоҙо.

Ҡаршыма уҫаҡ япраҡтары
Талғын ғына саба ҡул,
Ҡара таҫма шикелле юл
Һуҙыла. Ә яр аҫтында
Томан бөркөй тының күл.

Мин юлсы. Тыуған еремдең
Май таңына һоҡланып,
Ебәк теҙгенемде ҡағып,
Үреп арғымаҡтың ялын,
Тын киләм уйға талып.

Ҡапыл ишетәм, янымда
Йәш ҡамыштар баш ҡаҡты,
Шул ваҡыт ялан аяҡлы,
Ҡурҡыныс, туҙылған сәсле
Бер шәүлә күлгә ятты.

Ул бары йоҡа күлдәктән,
Тик шәл һалған иңенә,
(Һоҡландым нескә биленә)
Ә үҙе, шашҡан шикелле,
Тар һуҡмаҡтан йүгерә.

Әллә айҙағы Зөһрә-ҡыҙ,
Ҡалдырып пар күнәген,
Шәлгә төрөп ай бүләген,
Төшкәнме ергә, иреккә,
Эҙләп һөйгән сибәрен?

Әллә бәхетһеҙ һыу кыҙы,
Сәсен туҙҙырып шулай,
Урланған тарағын юллай,
Тилереп тик бер яңғыҙы,
Йүгереп күлде буйлай?

Бәлки,
Иҫерткес үбеүҙе татып,
Тәүге емеш өлгөргәс,
Һәм ялған мөхәббәт һүнгәс,
Урланған намыҫ тапалып,
Йөрәген оят күмгәс,

Өмөтө һүнгән йәш әсә
Ярһынып һуңғы ҡабат,
Күлдең тәрәнлеген ҡарап
Йөрөйҙөр. Бына ул үлер,
Шаһит мин һәм арғымаҡ.

Таң яҡтыһына төрөнөп,
Һаман алға йүгерә.
Оҙон сәстәре һибелә,
Ергә ысын йәшәү килгәндә,
Ул һыуға төшөп үлә.

Юҡ, юҡ, ул үлмәҫкә тейеш:
Шундай гүзәл күлдәрҙе,
Баҡсаһындағы гөлдәрҙе,
Яңы бәхет килтереүсе
Таңдарҙы һәм көндәрҙе

Ул ташлап китмәҫкә тейеш...
Нисек күҙ йомоп ҡалам?
Мин ул матурҙы ҡотҡарам –
Арғымаҡты кире бороп,
Ҡыҙҙың артынан сабам.

Мин уны ҡыуып етәм дә:
– Һеҙ минән ҡурҡмағыҙ, – тим, –
Саф һыуҙы болғатмағыҙ,
Алтындан ҡыйбат ғүмерҙе
Һеҙ үлеп юғалтмағыҙ...

Тынысланығыҙ, һылыуым,
Ҡәһәрле асыу бөтөр.
Зәһәрле әрнеү ҙә үтер,
Һеҙ тормошҡа килерһегеҙ –
Таң артында яҡты көн.
Шомло уйҙар ташлап китер –
Таң артында яҡты көн.

Башта һиҫкәнде ҡыҙыҡай,
Оялды, ғәжәпләнде,
Күкрәген шәленә төрҙө,
Сихырлы күҙҙәрен текләп,
Ҡарап торҙо ла көлдө:

– Һеҙ нимә һөйләйһегеҙҙәр,
Мин, егет, аңламаймын,
Тик мин үлергә килмәнем,
Кисерегеҙ... Мин ашығыс...
Һеҙ осрар тип белмәнем.

Ғәфү итегеҙ, егеткәй,
Һөйләшергә ваҡыт тар,
Эшләй торған ҙур эшем бар...
Мин борсолдом: «Матур ҡыҙ, һин
Ҡайҙа былай? Әйт, зинһар!»

Серле ҡыҙ башта үҙенең
Баҡсасы икәнен әйтте.
Ә унан ҡайҙа барыуын
Ашығып һөйләп китте:

– Уянһам, таң һалҡын...
Бөгөн ҡырау төшәсәк,
Йәшелсә баҡсам бөтәсәк,
Әгәр өйөлгән һаламды
Килеп төтөн итмәһәк.

Түтәлдәрҙең артындағы
Анау өйөм һаламға
Барып ут ҡына һалам да,
Әгәр көтөрҙән булһағыҙ,
Килермен һеҙҙең янға.

Ул китте. Эйәр өҫтөндә
Ҡыҙыйҙы ҡарап ҡалдым.
Бөгөн дә шул яҡты таңды,
Таң шикелле яҡты һынды
Яңынан иҫкә алдым.

*1939*

## БАЛАЛЫҠ

Зәңгәр колонналар булып,
Барабан ҡағып,
Колхоз урамдары буйлап
Уҙған балалыҡ,
Костерлы дозор төндәре,
Тәүге хыялдар,
Татыу ғаилә, әкиәт булып
Йәшәлгән йылдар,
Һеҙ ҡалдырығыҙ йөрәктә
Яҡты иҫтәлек,
Һеҙгә йыр менән бурыслы
Йырлаусы йәшлек.
Башҡа колоннала үтә
Шул уҡ балалыҡ,
Беҙҙең ҡулда елберләгән
Байраҡты алып.
Мин һеҙҙә күрәм үҙемде,
Бәхетле тоҡом,
Сөнки һаҡлап киләһегеҙ
Ысын йәшәү утын!

*1940*

## ЯҘҒЫ ТАУЫШТАР

Таныш моңдоң, бәлки, меңенсе ҡат
Яңғырауы булыр ошо йыр,
Тик беләм,
Ул яҙғы операға
Бер ария булып ҡушылыр.
Күңел яҙҙы һөйә шуның өсөн –
Ул өр-яңы йәшәү уята,
Яҙын тауҙа тәүге сәскә ата,
Йәш бөрөләр шартлап япраҡ була,
Һәм кәкүккә яңы моң ҡайта.
Йәшәү бәхетен йырҙарына ҡойоп,
Ҡоштар оя үрә ҡыуаҡта,
Ҡар һыуҙары аҡҡас, тау битенә
Ынйы сәскә килә ҡунаҡҡа.
Яратам мин күмәк хеҙмәт яҙын,
Ҡымыҙ кеүек татлы һауаһын,
Ергә йылы ямғыр һибәләгән
Болоттарҙың алтын ҡанатын.
Йәшлек биргән һәр бер йөрәк менән
Уртаҡлашам күңелем шатлығын:
О, күгәрсен, һинең мөхәббәткә
Яҙ гөлдәре бирһен сафлығын!
Таныш моңдоң, бәлки, меңенсе ҡат
Яңғырауы булыр ошо йыр,
Тик беләм,
Ул яҙғы операға
Бер ария булып ҡушылыр.

*1940*

## АЛЫҪТА ҠАЛҒАН ЭҘҘӘР

> Ағиҙел ярында таш тора. М. Ғафури
> был таш эргәһенә баҫып, Өфө
> сәхрәләрен күҙәтергә яратҡан

Яр ташына киләм күҙ һайын:
Йә елләнеп ямғыр һибелә,
Йә ҡараңғы тымыҡ төн була,
Йә ай нуры төшә Иҙелгә,
Яр ташына киләм күҙ һайын.

Бында торған шағир яңғыҙы,
Күңел күгән ҡайғы ҡаплаһа,
Йыр дауылы ҡупһа йөрәктә,
Йә донъяһын онотоп шатланһа,
Бында торған шағир яңғыҙы.

Иҙел шаһит, Иҙел, сая Иҙел –
Шундай минуттарҙа ҡойолған
Ауыр йәштәр, ут тамсыһы булып,
Ошо яр ташына уйылған.
Иҙел шаһит, Иҙел, сая Иҙел.

Баҫып торған ташҡа таянып,
Был Иҙелдәй тәрән, мул ғүмер,
Иркен дала һуҙыла алыҫҡа,
Ул, далаға тиңдәш киң күңел,
Баҫып торған ташҡа таянып.

Мин эҙҙәрен эҙләп шағирҙың,
Баҫмаммы тип ҡаты һағышты,
Ишетә алмаммы тип шул ерҙә
Инде ҡабатланмаҫ тауышты,
Мин эҙҙәрен эҙләп шағирҙың,
Яр ташына киләм күҙ һайын.

Йә елләнеп ямғыр һибелә,
Йә ҡараңғы тымыҡ төн була,
Йә ай нуры төшә Иҙелгә,
Яр ташына киләм күҙ һайын.

*1940*

## ОСРАШЫУҘАР

(Өҙөктәр)

Кем дуҫлығы өсөн һәйкәл икән
Аллеяла үҫкән пар ҡайын?
Тойғоларға ялҡын биреүсене
Осраттым мин шунда көн һайын.
Был бер ҡатлы йәшлек яныуымы?
Хистәр дулауымы?
Юҡ, түгел,
Ул күбәләк булһа,
Ҡуныр өсөн
Мин гөл булыр инем,
Эйе, гөл.
Ул күрмәһә, йотолам,
Ул ҡараһа,
Ирекһеҙҙән ситкә борола баш,
Ниндәй ҙур ялҡынды һүндерәсәк,
Әгәр боҙло булһа ул ҡараш.
Уны уйлау бәхетен үҫтереү
Аҙмы үкенес, ғазап килтерер?!

***

Күк ситендә бешкән миләш төҫө;
Көн шау-шыуын йота тын урам;
Уҙған минуттарға хисап биреп,
Мин бүлмәлә яңғыҙ ултырам.
Әллә көтәм шулай яҡынымды?
Яҡынымды әллә оҙаттым?
Беренсе ҡат уйҙар тотҡоно мин,
Ах, үҙемде, ахры, юғалттым.
Сеү...
Тәҙрәгә килә таныш һын,
Тышҡа саҡырып болғай ул ҡулын.
Тәҙрә асам,
Унда сирень күле,
Күл тәҙрәгә ҡаға тулҡынын.

Төндөң ҡуйынынан ҡасҡан һымаҡ,
Тығыҙ һауа өйгә атлыға,
Нурҙар диңгеҙендә уйнап үҫкән
Күбәләктәр һибелә яҡтыға.
— Күбәләктәр,
Һеҙ әйтегеҙ әле,
Мин осратҡан теге гүзәл ҡыҙ
Әллә һеҙҙең батша инеме ул?
Күбәләктәр өнһөҙ, яуапһыҙ.
Күбәләктәр һөйә яҡтыны,
Был кис — яңғыҙлыҡтың аҡтығы.

*1940*

## АЙ ЮЛЫ

Тынғыһыҙ диңгеҙҙең өҫтөн
Ай юлы килә ярып,
Ҡуҙғал, иркәм, ваҡыт етте,
Ташлайыҡ диңгеҙ ярын.

Яр башында тулҡын һанап
Йөрөнөк һинең менән.
Күрәйек диңгеҙ киңлеген,
Күрәйек күңел менән.

Ай юлы буйлап китәйек,
Ҡул бирәм һин иркәмә,
Айҡалһын әйҙә тулҡындар,
Сайҡалһын әйҙә кәмә.

Диңгеҙ – сикһеҙ зәңгәр бишек,
Ай юлы йыраҡ, йыраҡ...
Ул барған һайын киңерәк,
Яҡтыраҡ һәм яҡтыраҡ...

*1940*

## КҮРШЕМДЕҢ ТЕЛӘГЕ

Һуҙылып йәшел сирәмдә
Ҡыяр кимереп ятабыҙ
Баҡсасы менән икәү.
Самосадканы көйрәтеп,
Тәмләп кенә гәп һатабыҙ
Баҡсасы менән икәү.

Минең күрше тыныс ҡына
Бәләкәйерәк терпе саҡлы
Мыйығын һыпырып ала;
Һәм, миңә табан боролоп,
Зирәк юлбарыҫ сифатлы
Һораулы ҡараш һала:

«Зәңгәр күҙҙәрҙе яҙаһың,
Буй зифа, ҡаштар ҡара,
Һүҙем юҡ, бик шәп ул эш;
Тик баш тирәләй уйлайһың,
Беҙгә бына (хәтер ҡала)
Аҙыраҡ төшә өлөш.

Уныһы бер хәл, бына һин
Юҡҡа агроном түгелһең,
Башлы малай, моғайын,
Баҡса ултыртҡан йылдарҙа
Сәйфиҙе дәштек күңелһеп, –
Тапманы юл уңайын.

Студенттарға эйәртеп
Ул Нуруллаһын ебәрҙе,
Маһир икән сөгөлдөргә;
Һәр береһен анау туҡал
Үгеҙ башылай үҫтерҙе.
Ләкин
Теше үтмәне бүтән төргә.

Бындайҙарҙы беҙ... —
Ул, Тимский
Шиғыры төҫлө, бармаҡ буйы
Бер бөкөрө ҡыярҙы
Йылғаға ҡарай тондорҙо, —
Етлекмәгәндәр аҙ быйыл,
Тамам бөтөр киләһе йыл.
Шытып йөрәк түтәлендә,
Шиғырың етлекмәй тыуһа,
Булмаһа күрер йәме,
Кәзәләрҙе һыйла һин дә,
Көйшәһендәр. Ә кешенең
Китмәһен ауыҙ тәме.

Зәңгәр күҙҙәрҙе яҙ әйҙә,
Ҡара ҡашын, зифа буйын,
Һүҙем юҡ — бик шәп ул эш.
...Һеҙҙең уңыштан беҙгә лә,
Әйтеп ҡара, нисек булыр,
Артараҡ төшһә өлөш?!»

*1940*

## ТАБЫН ЙЫРЫ

Имән өҫтәл һығылып төшкән,
Һығылып төшкән,
Һай, ҡыҙҙар!
Кем йортоноң һыйы был?
Алма төҫлө алһыу бешкән,
Алһыу бешкән,
Һай, ҡыҙҙар!
Ниндәй һылыу туйы был? –
Байрамы был Урал иленең,
Тәбриклəйек бәхет киленен.
Аяҡсылар, туҫтағығыҙ
Сүмәкәй тулған булһын,
Тормошобоҙға оҡшаһын –
Оҡшаһын, мулдан булһын!
Майға бешкән йыуасаһы,
Йыуасаһы,
Һай, ҡыҙҙар!
Алдыр, алдыр ҡымыҙы,
Батман-батман йүкә балы,
Йүкә балы,
Һай, ҡыҙҙар!
Ҡаҙылыҡтың һимеҙе.
Табаҡтарҙа йөҙә ҡаҙҙары,
Тәмле ҡағыт ҡойған ҡыҙҙары.
Аш-һыу тоткан килендәрҙең
Күңелдәрен күрәйек,
Әҙерләнгән һый-хөрмәтте
Һоғоноп бөтөрәйек!
Ҡыҙҙарының ыҫпайлығы,
Ыҫпайлығы,
Һай, ҡыҙҙар!
Урал ҡайынына тиң.
Егеттәрҙең етеҙлеге,
Етеҙлеге,
Һай, ҡыҙҙар!
Урал ҡыйғырына тиң.

Иҙелгә тиң ҡарттар ҡартлығы,
Йөҙҙәрендә яҙҙар шатлығы.
Ҡурайсылар, байрам йырын
Көйләһен әйҙә ҡурай,
Башҡорт иленең шатлығын
Һөйләһен әйҙә ҡурай!
Имән өҫтәл һығылып төшкән,
Һығылып төшкән,
Һай, ҡыҙҙар!
Кем йортоноң һыйы был?
Алма төҫлө алһыу бешкән,
Алһыу бешкән,
Һай, ҡыҙҙар!
Ниндәй һылыу туйы был? –
Байрамы был Урал иленең,
Тәбрикләйек бәхет киленен.
Аяҡсылар, тұҫтағығыҙ
Сүмәкәй тулған булһын,
Тормошобоҙға оҡшаһын –
Оҡшаһын, мулдан булһын!

*1941*

## МИНЕҢ ҺӨЙГӘНЕМ

*(Шаян йыр)*

1

Бер егеткә күҙем төштө
Һалған саҡта күбәләр,
Серҙәр генә итеп әйтәм –
Һөйләмәҫ булһаң әгәр.

2

Төшкө ашҡа килгән мәлдә
Уйын һүҙҙәр һөйләнем,
Ауыҙ асып өндәшмәне:
Бик оялсан һөйгәнем.

3

Ял ваҡытында димләнем мин.
Әйҙә, тинем, сейәгә.
Яуап бирҙе: «Йоҡом килә,
Бында, еләҫ, күләгә».

4

Әйттем уға: «Йөрәгем яна,
Һиңә оса тотонө».
«Күләгәгә ултыр, – тине, –
Бик эҫе шул йәй көнө».

5

Ал сәскәләр өҙөп алып,
Күкрәгенә ҡаҙаным.
«Күлдәгең дә сәскә төҫлө», –
Тине егет аҙағын.

6

Егетме ни – асыҡ ауыҙ,
Әйтерһең дә, бер күбә.
Шуға ғашиҡ булғанымды
Һөйләй күрмә бер кемгә.

*1941*

## ҮС АЛЫНҺЫН!

Күк көмбәҙенә туптар
Тревога һуҡты,
Ике донъя, ике заман
Алышҡа сыҡты.
Тревога... тревога... тревога!
Илгә
Вәхшиҙәр килә.

Ҡан кәрәк, ҡан кәрәк, ҡан
Уларға.
Башкиҫәрҙәр коммунаны
Теләй быуырға.

Ант итә халыҡ, ант итә, ант.
Шашынма, Гитлер!
Күкрәктәр менән ҡапланыр
Изге ер.

Был ҡолдар Римы түгел, юҡ.
Башҡа заман.
Һинең алда – коммунизм,
Халыҡ – ҡаһарман,

Ҡалдырҙы бабаң һөйәген
Чуд күлендә,
Ары уҙмаҫ, уҙмаҫ юлың, уҙмаҫ
Һинең дә!
Тревога... тревога...тревога!
Илгә
Вәхшиҙәр килә.

Үс алынһын, үс алынһын, үс,
Ҡанға – ҡан.
Россия, Россия, Россия –
Ватан!

Команда булды.
Ил
Смирно баҫты.
Ҡуҙғалды халыҡ, ҡуҙғалды һаҡларға
Ҡояшты.

Үс алынһын, үс алынһын, үс!
Ҡанға – ҡан.
Россия, Россия, Россия –
Ватан!

*1941, 23 июнь*

## МИН ФРОНТКА КИТӘМ, ИПТӘШТӘР!

Эйәрләне атай, ялын үреп,
Аҡбуҙ аттың ярһыу, ап-ағын,
Әсәм һуҙа дәһшәт ҡылысының
Ҙур яуҙарҙа еңеп ҡайтҡанын.
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

Ышан, атай, һин эйәрләп биргән
Аҡбуҙ атым минең абынмаҫ,
Йәшең тамған был ҡылысты, әсәй,
Һуғарырмын дошман ҡанына.
Йыуырмын мин дошман ҡаны менән
Илем күкрәгенең яраһын,
Ҡайырылмаҫ ҡаты дауылдарҙа
Үс һәм нәфрәт биргән ҡанатым.

Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,
Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,
Гүзәллеген һаҡлап Иҙелдең.

Атасаҡ таң, киләсәк яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн –
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

*1941*

## ТӘҘРӘҤДЕ АС ТА...

Йәшеренмә һин йәшендән,
Дауылдан ҡасма,
Йәйҙең хәтәр төндәрендә
Тәҙрәңде ас та —

Күкте күҙәт, тирбәндермәй
Керпек осоңдо,
Бик яҡын итеп хәтерлә
Йыраҡ дуҫыңды.

Йәшен юйһын бүлмәңдәге
Төндөң ҡараһын,
Һибелдереп сәстәреңде
Дауыл тараһын.

Дауыл... дауыл! Ул бит минең —
Тере хәбәрем,
Яҡты йәшен, яҡын йәшен —
Минең сәләмем.

Мин һулармын, ерҙә дауыл
Тынмаһа әгәр,
Мин янырмын һуңғы йәшен
Һүнгәнгә ҡәҙәр!

*1942*

## РУС ҠЫҘЫ

Төтөн йотоп, асыу утын йотоп,
Батып тиргә, тояҡ саңына,
Күбекләнгән атта беҙ үтәбеҙ
Байып барған ҡояш яғына.

Танк йәнсеп үткән өй яғында
Төтәй һуңғы ҡаҙыҡ-бағана,
Шул бушлыҡта яңғыҙ тора ине
Йөҙөн хәсрәт баҫҡан ҡыҙ бала.

Ҡанатланған кеүек ҡалҡынды ҡыҙ:
«Беҙҙекеләр!..» – тине, ҡул сапты,
Ул йылмайҙы ауыр ҡайғы аша,
Күҙен алмай беҙҙе оҙатты.

Был ҡыҙ – Россияның күңеле ине,
Мәңге саф һәм шиңмәҫ гөл ине.
Был йылмайыу – йыраҡ Урал аша,
Мәскәү аша килер көн ине.

*1942*

## ҺӨЙЛӘШЕҮ

— Бойоҡмасы, иркәм, һарғая, тип,
Ҡартаялар бит, тип, ҡайындар.
Тәҙрәң ҡаршыһында һәр саҡ йәшел,
Һәр саҡ шаулап торған шыршың бар.

— Был — ҡартлыҡты ҡаршы алыу түгел,
Ә матурлыҡ менән хушлашыу.
Күпме шатлыҡ булыр йәнә күреү
Яҙ-килендең шаулы туй башын.

Мәңге матурлыҡ ул матурмы һуң?
Мәңге йәшел, эйе, шыршым бар.
Бойоҡмайым, тик яманһыу миңә,
Сөнки япраҡ ҡоя ҡайындар.

*1942, сентябрь*

## АЙ

*Сәғит Мифтахов иҫтәлегенә*

Көнбайышҡа табан үтте,
Ерҙе, күкте ялмап ут.
Ә хәҙер тамуҡ тынлығы –
Меңдән бер генә минут.

Төн. Атака уҙған ҡырға,
Һуңлап, китек ай төштө,
Ул, тыныс ҡына эйелеп,
Танышын эҙләй төҫлө.

Сал комиссарҙы тапты ул
Үлектәр араһында,
Тик ҡыҙғаныу ҙа, ҡайғы ла
Юҡ ине ҡарашында.

Бик оҙаҡ уйланды ай,
Ниҙер хәтерләргә теләп,
Ә һуңынан ағып китте
Йыраҡ илдәргә ҡарай...

Комиссар... Күп йылдар элек
Ул матур һәм йәш ине.
Мөхәббәте бәллеүендә
Буласаҡ кәләш ине.

Уларҙы солғаған ине,
Яҙғы баҡса, төн генә;
«Бәхет... Бәхет!» – Ҡабатланы
Төнгө татлы өн генә.

Мәңгелек үтәме, әллә
Секундмы? – һиҙмәнеләр,
Тик ай йөҙөнән һоҡланыу,
Йылмайыу эҙләнеләр.

Ах, юҡҡа, юҡҡа! Ай мәңге
Тоноҡ һалҡын гәрәбә:
Унда бер ҡараш – һөйөүгә,
Бер ҡараш – үлемгә лә.

*1942*

3 – 1.0148.09

## ТӨРӨПКӘ

Фронтовиктың күңелен табам, типме,
Мохтажынмы белеп, юғиһә,
Төрөпкә һалған миңә бүләк итеп
Ирәндегем ҡыҙы Нәфисә.

Ҡош телендәй ҡайнар сәләм хаты —
Йәш бер ҡыҙҙың йөрәк ялҡыны:
«Һаҡла Тыуған илде, ғүмереңде
Һәм төрөпкәңде һаҡла, алтыным!..»

Ете атакала елеп сыҡтым,
Ете яуҙа еңеп, һау ҡайттым,
Ышанысың һаҡлап ут уйнаттым,
Ә төрөпкәңде, һылыуым, ... юғалттым.

Төрөпкә. Ул да — Тыуған ил тамсыһы,
Мин ҡыҙғанмаҫ инем, юғиһә —
Ҡош телендәй хат һалмаған булһа
Ирәндегем ҡыҙы Нәфисә.

*1942*

## ЕРҘӘГЕ ЙОНДОҘҘАР

Ҡараңғылыҡ, оло бөркөт һымаҡ,
Яландарға ҡарап елпенде,
Елбәҙәкле зәңгәр яулыҡ булып,
Йондоҙло күк япты төн битен.
Ҡалҡыулыҡта, уйһыулыҡта атака!
Мәңгелектән өҫтөн минуттар,
Туп шартлауы булып, үлем көлә,
Һәм уттар, һәм уттар, һәм уттар!..
Ер яна!
Яу эсендә мин арыҫлан инем, —
Мин Уралда үҫкән егетмен.
Бына хәҙер сафтан йығылып ҡалдым,
Әллә тере, әллә үлекмен.
«Ер ҡотҡарһа ине ҡосағынан,
Һикереп менһәм ине юрғаға!»
Уйҙар елә, үҙем өнһөҙ ятам,
Ҡан аға, ҡан аға, ҡан аға!..
Яңағымда йылы тын һиҙәм мин
Һәм һаташып асам күҙемде,
Ят өн әйтә:
«Уян, егет, уян.
Мин ҡотҡара килдем үҙеңде!»
Һәм мин тоям
Төн ҡараһы аша
Ул күҙҙәрҙең йылы ҡарашын.
Бына улар —
Яҡты йондоҙҙарым!
Бәхет ҡошом йәйә ҡанатын.
Кем һин, ҡыҙыҡай, кем һин?
Мин белмәйем,
Нindәй шишмә һыуын эскәнһең,
Кем исеменә, ниндәй йырҙар йырлап,
Ҡайһы туғайҙарҙа үҫкәнһең?
Тик танйым тыуған Россиямдың
Меңдәр араһынан бер ҡыҙын.
Мин таныйым
Миңә ғүмер биргән
Еремдәге бәхет йондоҙон!

*1942*

## МИНЕҢ АТЫМ

*Ҡаҙ ҡанаты ҡат-ҡат була,*
*Ир ҡанаты ат була...*

Аҡбуҙымды мин төшөмдә күрҙем:
Тарһынып ул ҡырҙар киңлеген,
Ярһынып ул, башын сайҡай-сайҡай,
Асып инде бүлмәм ишеген.

Атым телгә килде:
«Өс ай инде
Ауыҙлыҡһыҙ минең йүгәнем,
Өс ай инде,
Аҡ күбеккә батып,
Яландарҙа яңғыҙ еләмен.

Өҙгөләне елдәр, хәтәр елдәр
Һин ялыма үргән таҫманы.
Өс ай инде,
Ләкин өҙәңгемә
Ят кешеләр аяҡ баҫманы.

Мин ант иттем туғайҙарға ҡарап,
Мин күлдәргә ҡарап ант иттем:
– Бер үҙеңә генә тоғро атмын,
Башҡаларҙы шуға ят иттем.

Һин һауыҡһаң ине.
Дуҫһыҙ ауыр,
Эҙләп килдем эсем бошҡанға;
Һинең ҡаның өсөн үс алырға,
Атылаһы ине дошманға!

Өҙәңгемә һин һикереп баҫһаң,
Дәртем таша ине шул саҡта,
Күкрәгемә йөрәк һыймай ине,
Ә хәҙер һин минән йыраҡта...»
Ҡапыл ул юғалды...

Доктор, доктор, һауыҡтырсы мине,
Ауырырға хаҡым бармы ни?
Яландарҙа яңғыҙ елеп йөрөгән,
Эйәрләнгән атым бар минең!..

*1942, госпиталь*

## ҺАЛДАТ ҺАҒЫНА ҺӨЙГӘНЕН

Зәңгәр күк тәрәнлегендә
Тулған ай йөҙә,
Һағына һалдат һөйгәнен
Ят, йыраҡ ерҙә.

Кем белә? (Ошо мәл шаһит
Ай – төн биҙәге.)
Өҙөләләр яңғыҙ ҡалған
Йәш ҡыҙ үҙәге.

Айҙан күҙен алмай, һылыу
Был гүзәл төндә
Тын торалыр таңға тиклем
Тәҙрә төбөндә.

...Һәм бик ҡапыл күктең йөҙө
Болот ябынды.
Гүйә, ай торҙо ла ҡалды
Дошман яғында.

Бүленде һалдат уйҙары,
Бүленде хыял;
Ул һиҫкәнеп һөрән һалды:
«Эй иптәш, ҡуҙғал!

Иптәш командир! Беҙҙең ай
Бүленеп ҡалды;
Ҡотҡарайыҡсы тиҙерәк,
Бирсе команда!

Тартып сығарайыҡ айҙы
Болот артынан,
Бырғытайыҡ килмешәкте
Айҙың аҫтынан!»

*1943*

## ЯКТЫ ТӨН

Ғүмеремдә мин күпме айлы төндө,
Күпме һинһеҙ төндө кисерҙем,
Апрель кисе һине алып килде,
Һин иң гүзәл төндө килтерҙең.
Белмәҫ инем, иркәм, һинән башҡа
Был тынлыҡта өнһөҙ моң барын,
Күрмәҫ инем тоноҡ төн күлененң
Алыҫтағы зәңгәр ярҙарын.
Төн. Яҡты төн мәңгелектәй тәрән.
Ниндәй киңлек, ниндәй азатлыҡ!
Туҡта, туҡта, беҙ бит һинең менән
Ай артынан китеп аҙаштыҡ.
Беҙ аҙаштыҡ.
Ләкин ошо мәлдә
Һүнмәҫ өмөт тыуҙы күңелдә,
Аҙашмабыҙ, йондоҙ аҙашһа ла
Дөм ҡараңғы төндәр күгендә.

*1943*

* * *

Гөрләп үтте тәүге күкрәү,
Шауланы яҙғы ямғыр;
Күгәрсен күҙе күгәртте
Окобым тирә-яғын.

Яу яланы. Бында олоп
Туктауһыҙ ҡурғаш яуа,
Офоҡтарҙа шәфәҡ түгел,
Болоттар ялҡынлана.

Ләкин күгәрсен күҙҙәре
Асыла көнгә табан,
Зәңгәрһыу керпектәренән
Йәш түгел, йәшәү тама.

Ә һалдат өсөн һуғышта
Йонсоу көн һирәк түгел,
Тик һарғайыуһыҙ һағынам,
Һарғайыу кәрәк түгел.

Сөнки зәңгәр сәскә үҫә
Окобым сирәмендә,
Күгәрсен күҙе күҙле ҡыҙ
Һаҡлана йөрәгемдә.

*1943*

* * *

Беҙҙе таңмы әллә солғағайны,
Әллә кистең күкһел шаршауы,
Тик хәтерҙә артта ҡалған һуғыш
Һәм эргәлә ҡайын шаулауы.
Мин һағынып һиңә ҡайтҡан инем
Ҡайын япраҡ ярған саҡтарҙа,
Ләкин уйҙар айырылып ҡалды
Күкте ялҡын япҡан яҡтарҙа.
Күҙ алдында тере күмер булып
Көйрәп торҙо һуғыш эҙҙәре.
Ят тойолдо башта өй тынлығы,
Ят тойолдо наҙлау һүҙҙәре.
Мин айныным. Һинең иркәләүҙәр
Тараттылар күңелем томанын,
Һәм мин һиҙҙем ауыр уйҙарҙан һуң
Яҡты мөхәббәттең тыуғанын.
Онотолған шатлыҡ ҡайтҡан өсөн,
Бурыслымын, һылыу, һиңә мин,
Ул мәл һине ғүмерлеккә һөйҙөм,
Тик ниңәлер «һөйәм» тимәнем.
Мин һиҙмәнем – ул саҡ таң инеме,
Әллә иртә, әллә күкһел кис;
Ҡайын шауы шулай ярһытҡысмы,
Мөхәббәтме әллә иҫерткес?

*1943*

## ШАҒИР ДУҪЫМА

Ҡайҙа ғына оҙатһа ла
Был һуғыштың юлдары,
Бик оҙаҡҡа айырһа ла
Был һуғыштың йылдары.

Йырҙарымдың яңғырауын
Бомбаларға иш иткәс,
Таптым һине, шағир дуҫым,
Тауышыңды ишеткәс.

Ҡоштар ҙа бит ҡыуаҡтарҙың
Ҡуйыһында аҙашһа,
Бер-береһен таныр өсөн,
Табыр өсөн һайраша.

*1943*

## ЯМҒЫР

Йәйге ямғыр көмөш булып
Һибелгән саҡта,
«Үҫәм» тип, малай ваҡыт ул
Ялан баш сапты.

Үҫте. Ямғыр һуғарғанда
Игенле ҡырҙы,
Иҙеү сисеп, бураҙнала
Кәпәсһеҙ торҙо.

Һыуһаны ул, күккә ҡарап,
Ҡороҡ йылды,
Һәр болотто тыны менән
Тартырҙай булды.

Бөгөн дә шул тамсы-тамсы
Көмөш ҡойола.
Ҡырҙар һулай, һәм, бейешеп,
Талдар ҡойона.

Тик бөгөн һалдат ҡыуанмай,
Кәйефе йонсоу –
Шинелгә үткән, окопта
Тубығынан һыу.

– Ямайһы ине, исмаһам,
Был туҙған күкте! –
Ул ғүмерендә тәүге ҡат
Ямғырҙы һүкте.

Болоттар ярылды ҡапыл,
Йәшен яктырҙы.
Ул күрҙе Тыуған илдәге
Игенле ҡырҙы.

Иҙелдә тулҡын бәүелеп
Ярҙарҙы ҡаға,
Ә Илгиз исемле улы
Ялан баш саба.

– Өйҙә булһаң ине, – тине, –
Ошондай йәйҙә.
(Еүеш шинелгә төрөндө):
– Яуһын әйҙә!

*1943*

## ЯР СИТЕНДӘ

Яр ситендә йәш ҡамыштар
Болғана,
Атлы егет ат эсерә
Йылғала.
Муйынына ҡыҙыл башлыҡ
Уралған,
Моғайын, был егет йыраҡ
Уралдан.
Ә казачка керҙәр сайҡай
Баҫмала.
«Ҡуй, йәш һылыу, серле ҡараш
Ташлама!
Эсмә, ҡыҙый, утлы ҡараш
Нурҙарын,
Тыңлама һин еҙ шпорҙың
Сыңдарын.
Иртәгә бит ат эсермәҫ
Егетең –
Ул китер һәм етем ҡалыр
Өмөтөң.
Ишетелмәҫ еҙ шпорҙың
Сыңдары.
Тик һибелер һинең һағыш
Моңдары».
Күрәһең, ҡыҙ тыңламаны
Аҡылын,
Ят егеткә өҙөлөп әйтте:
«Яҡыным!..»
Һәм йылғаға төштө бер пар
Күләгә,
Улар тулҡын бишегендә
Тирбәлә.
Пар шәүлә – икәү шатлығы
Булалыр;
Ҡуҙғалыр улар, шатлыҡ та
Юғалыр...

Бойоҡ йөрөнө кискә тиклем
Яңғыҙаҡ.
Бик һуң ине. Ауыҙлыҡлап
Ул атын,
Йыраҡ юлға ҡарай йәйҙе
Ҡанатын.
Һелтәне егет атына
Ҡамсыһын,
Сапты, ҡалдырып йөрәге
Яртыһын.

*1943*

## НӘЛӘТ ТАМҒАҺЫ

Мин күнектем. Йәш тә һәм йоҡо ла
Ҡаплай алмаҫ минең күҙемде.
Мушка аша күрәм, немец, һинең
Ҡанда бүрткән ләғнәт йөҙөңдө.

Ашыҡмай һәм ғәмһеҙ тимереңде
Уттан алып ҡанға манаһың,
Беҙҙең тәнгә түгел, үҙ йәнеңә
Үлем кләймәһен һалаһың.

Ябып ҡала алмаҫ кләймәңде
«Имән япраҡтары», «Тәреләр»*,
Штык йәки пуля булып, үлем
Йөрәгеңә килеп бәрелер.

Иртәгә үк дөмөкһәң дә, палач,
Хурлығыңдан ҡаса алмаҫһың,
Һәр үтеүсе ҡәбереӊ тәреһенә
Һыҙып китер нәләт тамғаһын!

*1943*

* немец ордендары

## УКРАИНА

Украина. Ағастарын һығып,
Алма бешкән ҡояш нурында.
Украина! Окоп ҡаҙыным мин
Гөл-сәсәгең үҫер урында.
Тыныс түгел Украина төнө —
Төн, ҡалтырап, ергә һыйына.
Ҡыҙҙар ҡулы өҙөр был алмалар
Туптар шартлағанда ҡойола.
Һәм йыш ҡына таңғы зәңгәрлектә
Йәш алмағас, гүйә, ҡуҙғала,
Гүйә, минең окобыма эйелә
Катерина тигән ҡыҙ бала.
Күккә ҡарайым мин. Сулпан ҡалҡа,
(Тулған айҙың — Сулпан серҙәше),
Ә битемә ҡыҙыл алма түгел,
Тама ҡыҙҙың ҡайнар күҙ йәше.
Катерина, һылыу Катерина,
Илап ҡаршылама таң алдын.
Украина! Һине ҡотҡарырға
Мин тупрағын үптем Уралдың.
Иламасы, һылыу. Яҙҙар килер.
Һуғыш һүнер, ҡояш һүрелмәҫ,
Алма бешер, ләкин ул алмаға
Һинән башҡа ҡулдар үрелмәҫ.

*1943*

## КОЛ ҠЫҘ ЙЫРЫ

*(Германияға коллоҡҡа ҡыуылған ҡыҙҙар зары)*

Тынсыу ят ер бында, елдәр иҫмәй,
Ҡоштар күтәрелмәй күгенә,
Шул ҡәһәрле илдең тупрағына
Ҡайнар күҙ йәштәрем түгелә.

Алыҫ Тыуған илдә алтын көҙҙәр –
Күктәрендә торна тауышы,
Днепроға япраҡ һибә талдар,
Мамыҡтарын сәсә ҡамышы.

Ағай йәнем! Торна йырын тыңлап,
Ғазап моңдарым тип аңласы.
Күҙ йәштәрем, шул япраҡтар кеүек,
Алдарыңа барып тамһасы.

Ситлектәге тотҡон, кол һеңлеңде,
Ағай, ағай йәнем, кил, ҡотҡар!
Ҡеүәтең бар һинең, ҡанатың бар,
Дуҫтарың бар, Тыуған илең бар.

Тынсыу ят ер бында, йәнгә ауыр,
Ҡош оса алмаҫ бушлыҡ – күгелер,
Шул ҡәһәрле илдең тупрағына
Тағы күпме йәшем түгелер?

*1943*

## АТЛЫЛАР АНТЫ

Кышкы күктә, һарғайып, таң
    Атканда,
Атлылар полкы теҙелде
    Акланда.
Ат басканда, шыңшыны кар
    Һалкындан.
Йәнгә йылы алдык беҙ ҙур
    Ялкындан.
Һүнмәс ярһыулык алдык беҙ
    Йәш канға;
Ант бирҙек беҙ был иртәлә
    Ватанға —
Дошман утын һүндерергә
    Ут менән
Һәм якларға ғәҙеллекте
    Ук менән.
Ант иттек беҙ: дошманға
    Үлем сәсергә,
Ант иттек беҙ: еңеү өсөн
    Йәшәргә.
Полк тантана тынлығын
    Һакланы.
Хатта аттар ҙа баштарын
    Какманы.
Дәртләнеп йыш-йыш һуланы
    Атлылар.
Һәр бер караштан һибелде
    Саткылар.
Шул ант менән үттек күпме
    Яу кырын,
Ялкын өйөрмәһен,
    Курғаш ямғырын.
Кындарына кылыстарҙы
    Һалманык,
Беҙ, уттан кайнар булғанға,
    Янманык.
Юлдарыбыҙ тайпылышһыҙ
    Еңеүгә табан,
Кылыс уйнай, аттарыбыҙ
    Ашкынып саба.

*1943*

* * *

Таныш түгел ярҙа баҫып торам,
Тәүге ҡарҙар ҡуна муйылға.
Йөрәгемдә, юйылмаҫлыҡ булып,
Быға оҡшаш бер кис уйылған.

Быға оҡшаш... Ләкин таныш ерҙә
Яңғыҙ түгел инем ул саҡта;
Бәхет юлы булып, пар эҙ ҡалды
Тәүге ҡарҙар яуған һуҡмаҡта.

Ҡышҡы кистәр күкһеллеге аша
Эҙҙәр һалып күпме үтмәнем?
Тик шул мәлдән һуң мин һис ҡасан да
Ундай ҡайнар итеп үпмәнем.

*1943*

## ПОЛКТАР УҘАЛАР

Сал Днепр ярһып, аҙмы сәскән,
Аҡҡош мамығындай, күбеген,
Зарлы тулҡын кеүек, аҙмы көндәр
Ыңғырашып уҙған?
Ә бөгөн...
Бөгөн Днепр, зәңгәр ялҡын төҫлө.
Үреләә бейек текә ярҙарға,
Тамсы түгел, саткыларын бөркөй
Япраҡтарын ҡойған талдарға.
Күпме тапҡыр, тар таҫмаға оҡшап,
Таң ағарткан бында тын күгеп,
Һәм томанды елдәр тараҡкандар,
Ҡайғы тараламаған.
Ә бөгөн
Офоҡтарҙан күк йөҙөнә ҡәҙәр
Таң балҡый, таң янып ҡыҙара,
Пушкин теле менән ирек һөйләй,
Полктар, полктар, полктар уҙалар.

Һәм Октябрь шул полктар менән
Бергә үтә һуғыш ҡырҙарын.
Арттан ҡояш үҙе оҙатып килә,
Ерҙән алмай керпек-нурҙарын.

Йәшен кеүек сағылып, үтер көндәр,
Туптар тауышы тыныр йыраҡта,
Әле һуғыш барған майҙандарға
Был полктар сығыр парадҡа.

*1943*

## КИЕВ

*Как тополь киевских высот…*
*А.С.Пушкин.*

*Мең йәшәгән данлы Киев!*
*Тыуһа ҡурҡыныс,*
*Ҡынынан алынған бында*
*Беренсе ҡылыс.*

Харабалар өҫтөндәге
Күмерҙәр һүнер,
Сабыйҙарҙың саф ҡандары
Тупраҡҡа һеңер.

Ямғыр йыуыр таштарҙағы
Юлбаҫар эҙен,
Елдәр ҡыуыр, көҙгө елдәр
Мәйеттәр еҫен.

Тик асыуҙа янған йөрәк
Көлгә ҡалырмы?
Күңел ирерме дошманға,
Үс таралырмы?

Ҡара көйгән тополдәрҙең
Күреп шәүләһен,
Хәтерләйем дарға аҫылған
Ҡыҙҙың кәүҙәһен.

Харабаларына халҡым
Тере һыу һибер.
Әсәләрҙең күҙендәге
Ҡайнар йәш кибер.

Ямғыр йыуыр таштарҙағы
Юлбаҫар эҙен,
Елдәр ҡыуыр, көҙгө елдәр
Мәйеттәр еҫен.

Тик асыуҙа янған йөрәк
Күмергә ҡалмаҫ,
Күңел иремәҫ дошманға,
Нәфрәт таралмаҫ!

*1943*

## ДАН*

Уттар аша янмай кисеп сыҡһаң,
Һәм егетлек булһа юлдашың.
Балҡып торор баш өҫтөңдә, һалдат,
Дан тип исемләнгән ҡояшың.

Шул ҡояштың алтын нурҙарынан
Күкрәгеңә йондоҙ теҙелер,
Мылтыҡ тотоп уҙған юлдарыңа
Йондоҙ яҡтылығы һибелер.

Бөйөк яуға ҡайҙан килһәң дә
(Кавказданмы әллә Уралдан),
Еңеү менән бергә ҡайтып илгә,
Үтерһең һин тыуған урамдан.

Аҡһаҡалдар ҡаршыларға сығып,
Тапшырырҙар илдең сәләмен,
Һәр тәҙрәнән сибәр ҡыҙҙар һибер
Һинең алға гөлдәр бәйләмен.

*1943*

* Дан ордены булдырыу уңайы менән яҙылғайны

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНА ЯУАП ХАТ

*(Башҡорт халҡының башҡорт егеттәренә — фронтовиктарға яҙған хатын уҡығас)*

Ваҡиғалар ваҡыттарҙан киң саҡта,
Һәр көнөбөҙ мәңгелеккә тиң саҡта.

Илдә барған оло яу осоронда,
Онталғанда дошман һуғыш ҡырында,

Ябай ирҙәр арыҫлан булған мәлдә,
Киң аҙымлы еңеү атлап килгәндә,

Батырҙарҙың дандары шаулағанда,
Һәм ғүмерҙәр мәңгелек яулағанда,

Яу ҡырына һарғайып таң килгәндә,
Күк ситенә ҡыҙыл ҡояш ингәндә,

Күк аҫҡанда үҙенең ай-алҡаһын,
Һәм ҡояш көйҙөргәндә ер арҡаһын,

Тәүлектәрҙең һәр төрлө миҙгелендә,
Минуттарҙың бәхетле, изгеһендә —

Тыуған Башҡортостан, һинең хатыңды
Юлығып алдыҡ беҙ — әсәлек хаҡыңды.

Көньяҡ-көнбайыш ерендә ултырып,
Беҙ — улдарың ошо хатты уҡыныҡ.

Күңелдәргә ул — әсә һөтө булды,
Беләктәргә — арыҫлан көсө булды.

Ҡылыстарҙы ҡайраусы ҡайраҡ булды,
Беҙҙе яуға саҡырған байраҡ булды!

Алып килде Уралдың ул киңлеген,
Тыуған илдең ҡаҡшамаҫ именлеген,

Шарлауыҡлы Һаҡмар-һыуҙың сафлығын
Һәм һандуғас йырҙарының шатлығын.

Килтерҙе хуш еҫен аҫыл гөлдәрҙең,
Яҡтылығын болот күрмәҫ көндәрҙең,

Күк күкрәүен һәм дауылдар дулауын,
Йәшен саҡмаһы сағылып уйнауын

Һәм ҡарттарҙың аҡылы йылдамлығын,
Сабыйҙарҙың тәүге ҡат йылмайыуын;

Алып килде әсә һөйөүе тәмен,
Тыуған ил йөрәгенең ҙур сәләмен.

Алыҫ Башҡортостан! Шундай хатыңды —
Беҙ алдыҡ һинең әсәлек хаҡыңды,

Уҡыныҡ уны окоптар төбөндә,
Яу яланының тынғыһыҙ күгендә,

Уҡыныҡ уны танкылар эсендә,
Алып ҡындан ҡылыс, эйәр өҫтөндә.

Күрҙе бөтәһен Днепр буйҙары,
Үптеләр был хатты һинең улдарың.

* * *

Булһа ла эштең бик ҡыҙыу замапы,
Ваҡыт яғы булһа ла бик самалы.

Ҡулыбыҙға ҡәләм-таш алмаҡ булдыҡ,
Ҡош телендәй сәләм-хат яҙмаҡ булдыҡ,

Илебеҙҙең ғәскәрҙәре һанынса,
Тәндәрҙәге ҡандарҙың ҡайнарынса,

Атылған уҡ, иҫкән ел тиҙлегендә,
Яуҙа ярһыған ат етеҙлегендә,

Сәләмебеҙ барһын һиңә, ай, Урал,
Улдарыңдың оло хөрмәт һүҙен ал!

Тыңла, яуап һүҙе әйтә улдарың,
Тыңла, улар сиртә күңелең ҡылдарын.

* * *

Нисәнсе ай инде тулып кәмене,
Нисәнсе ҡат ҡояш күктәргә менде,

Етегән йондоҙ нисә тапҡыр әйләнде,
Аҙмы таң атты, аҙмы күҙ бәйләнде,

Өсөнсө көҙ алтынлатты яланды,
Өсөнсө ҡат кәкүктәр һаҡауланды...

Шуларҙың беҙ бөтәһен күреп торҙоҡ,
Уттар кисеп, һаман яу йөрөп торҙоҡ;

Күпме йонсоу һуғыш юлы үтмәнек,
Тир урынына күпме ҡандар түкмәнек,

Күңелебеҙҙә булды биргән антыбыҙ,
Уйыбыҙҙа булды туған халҡыбыҙ.

* * *

Ауыр булды күреү дошман инеүен,
Батырҙарҙың, ер ташлап, сигенеүен;

Күргән саҡта төтәтелгән ауылды,
Йөрәктәрҙе дөрләгән ялҡын алды.

Дошман тубы емергәндә был ерҙе,
Ерҙе түгел, күкрәктәрҙе емерҙе.

Тапағанда ят аяҡтар игенде,
Иген түгел, ҡайнар йәштәр түгелде.

Күргән саҡта ғазапланған йөҙҙәрҙе,
Хәсрәт һөрөмө ҡапланы күҙҙәрҙе.

Шәйләһәк элек беҙ дошман шәүләһен,
Бынан һуң күрҙек уның үҙ кәүҙәһен.

Һалҡын алды, ялҡын алды йәндәрҙе, –
Беҙ ҡайраныҡ нәфрәт тигән хәнйәрҙе.

* * *

Гүзәллектә тауис ҡойроғо һирәк
Ләкин яуҙа бөркөт ҡанаты кәрәк.

Һөйөүебеҙ элек тә нәфис ине,
Тауис ҡоштоң ҡаурыйына тиң ине,

Гүзәллектә был һөйөү һирәк ине...
Тик ялҡында һуғарыу кәрәк ине.

Беҙ уттар эсендә һөйҙөк көрәште,
Һәм көрәш беҙҙе һөйөргә өйрәтте.

Башҡортостан тип белдек беҙ бар илде,
Днепрола күреп йөрөнөк Иҙелде,

Һәр ҡалҡыуҙа күрҙек Урал ҡорҙашын,
Баш өҫтөндә янды Урал ҡояшы.

Дон өҫтөндә таралды Дим томаны,
Молдаванда күрҙек башҡорт туғанын.

Япраҡ шауында туған өн ишеттек,
Украина-әсәбеҙ тип хис иттек.

Беҙҙең тамсы ҡаныбыҙ ҡайҙа тамған,
Шул тупраҡҡа ғашиҡ булдыҡ яңынан.

Һөйөү ҡанаты талыуын белмәнек,
Кирелеп нәфрәт ҡылысын һелтәнек,

Һис ҡасан да торманыҡ баштар эйеп,
Беҙ һуғышта һыналған ирҙәр инек.

Күктә ялҡын, ерҙә ҡом буран булды,
Артыбыҙҙа Мәскәү һәм Урал булды.

Яу мәлендә күрһәттек беҙ ҡатылыҡ,
Ҙур еңеүҙәрҙең бәхетен татыныҡ.

Сал Волгала күтәрелдек тау булып,
Күкрәнек беҙ күрелмәгән яу булып.

Ҡоростар иреп янды, беҙ янманыҡ,
Онталды таш, ләкин беҙ онталманыҡ.

Яу йөрөнөк Волга – Дон араһында,
Дон-йылғаның ҡылғанлы далаһында,

Сабып өҙҙөк ҡарсығаның томшоғон,
Донец-һыу төбөндә ҡалды тонсоғоп.

Барвенковта һөйәктәрен һындырҙыҡ,
Павлодарға етерлек һоғондорҙоҡ,

Ялтыраттырҙыҡ Донбасстан табанын,
Ә унан һуң уҡыттыҡ арт һабағын,

Күкрәп килдек Днепроның ярына,
Ҡанат һуҙҙыҡ Днепро аръяғына.

Яу ҡырында иртә, һуң тип торманыҡ,
Ҡайҙа барһаҡ, шунда фашист тураныҡ,

Ҡый үләндәй ҡыйып, ҡырып ташланыҡ
Һәм ҡырмыҫҡа иләүендәй тапаныҡ.

Күктә булһа, күктән тибеп төшөрҙөк,
Йылғаларҙа бүрткәнсе һыу эсерҙек.

Йөҙҙө ҡырһаҡ, тағы меңде үлтерҙек,
Меңдән артып китһәләр ҙә, бөтөрҙөк.

Тик баҫылманы йөрәктең янғаны,
Тынманы беҙҙең күңел, үс ҡанманы.

* * *

Ватан шуның бөтәһен күреп торҙо,
Батырлыҡҡа көүәтен биреп торҙо.

Күкрәктәрҙә тойҙоҡ Салауат көсөн,
Бөркөт булдыҡ һин ғәйрәт биргән өсөн —

Бөтмәҫ хазина донъяһы, күк Урал!
Яугир уландарыңдың рәхмәт һүҙен ал.

Һин эйәрләп биргән ат абынманы,
Ҡойоп биргән ҡылыстарың һынманы.

Дошманға тамуҡ килтерҙе туптарың,
Үлем ағыуы яуҙырҙы уҡтарың.

Танкыларың һыуҙарҙа батмаҫ булды,
Еңмәйенсә әйләнеп ҡайтмаҫ булды.

Өҫтә булды тундарыңдың бәрәне,
Бирсәткәнең мамыҡтан бәйләнгәне.

Бүректәрҙән һалҡын ҡурҡып йөрөнө,
Быймала, май кеүек, аяҡ ирене.

Яуҙа еңеү байрамдары сағында,
Ҡаҡлаған ҡаҙ ҙа туралды табында.

Семерләтте тамырҙарҙы араҡың,
Самосадкаң эс бошоуын таратты,

Сәйең эстек, йәнебеҙ теләгәнсә,
Йәшәүебеҙ — ошонда һөйләгәнсә.

* * *

Эй, Тыуған ил, ап-аяҙ күкле Ватан!
Көндәр уҙа, кис килә, һарғая таң.

Ҡарайһың да ҡояш күмелгән яҡҡа,
Һин көтәһең беҙҙе тыуған тупраҡҡа.

Беҙ ҡайтырбыҙ ҙур еңеү менән бергә,
Һуңғы юлбаҫар күмелгәс ҡәбергә.

Бөтә илгә шатлыҡ-нур күтәрелгәс,
Шул шатлыҡты бар туған халыҡ күргәс,

Көнгә ҡарап, ҡол ителгәндәр көлгәс,
Көнбайышта ғазап янғыны һүнгәс,

Беҙ ҡайтырбыҙ бәхеткә хайран көндө,
Беҙ ҡайтырбыҙ бер оло байрам көндө.

Күпте күргән илдең аҡһаҡалдары,
Күпте белгән саф гәүһәр аҡылдары!

Һәр эшләгән эшегеҙ уңдан булһын,
Хеҙмәттәге һәр кеше уңған булһын!

Ҡыҙҙарығыҙ арыу-талыу белмәһен,
Һәм килендәр илке-һалҡы йөрөмәһен.

Уҡыусылар «отлично»ға тырышһын,
Ваҡыт табып, өйөндә лә булышһын.

Етен сәсле етмеш йәшлек әсәләр!
Ышанмағыҙ, «ҡара хат» килтерһәләр.

Күҙегеҙҙә бөртөк йәш күрһәтмәгеҙ,
Ҡайғы-йылан күңелгә үрләтмәгеҙ!

Йәш килендәр һәм һөйгән һылыу ҡыҙҙар,
Күңелебеҙҙе биҙәп торған йондоҙҙар!

Мөхәббәттең һүнмәслек нуры булһа,
Ул мөхәббәт ғүмерлек, тоғро булһа,

Ныҡ булығыҙ, өмөткә тап төшмәһен,
Саф тотоғоҙ мөхәббәттең шишмәһен.

Беҙ киткәс, ҡояшты күргән сабыйҙар,
Йөрәктәрҙә күпме һеҙгә наҙлау бар!

Килеп етә беҙгә тәүге өнөгөҙ,
Ошо өндәй татлы булыр көнөгөҙ!

Беҙ ҡайтырбыҙ бәхеткә хайран көндө,
Беҙ ҡайтырбыҙ бер оло байрам көндө.

Ә хәҙергә яуҙың ҡыҙыу көндәре,
Яңғырай хәл иткес һөжүмдәр һөрәне.

Дөрләп яна Днепроның аръяғы,
Саҡыра беҙҙе Молдавия ярҙары.

Унда тыңлай немец бығау сыңдарын,
Беҙҙең һыуҙа йыуа ҡатҡан сылғауын.

Түктерә сабыйҙарҙың күҙ йәштәрен,
Ҡанға мана ҡарттарҙың сал сәстәрен.

Һулай һаман Украина һауаһын,
Хәнйәр менән ҡаҙап ашай алмаһын.

Ҡыҙҙар толомонан урә ҡамсыһын,
Һөлөк булып һура ҡандар тамсыһын.

Өй алдына кис сығып, олоп тора,
Һылыуҙарҙы ҡоллоҡҡа олаҡтыра...

Беҙ шуларҙың бөтәһен ишетәбеҙ,
Ярһынып һуғыш эсенә китәбеҙ.

Беҙ – улдары яуҙа һыналған заттың –
Яҡты һынын күрәбеҙ Салауаттың.

Чапай батыр тауышы дәрт уята,
Хоҙайбирҙин бергә ҡылыс уйната.

Улдарына көс бирә Ватаныбыҙ,
Еңеүҙәргә етәкләй маршалыбыҙ.

Башҡортостан! Күҙәт еңеү юлдарын,
Шул юл менән һиңә ҡайтыр улдарың.

Беҙгә – хәйерле юл, һеҙгә – изге таң!
Шуның менән һеҙгә яуап хат тамам.

*1943, Көньяк-Көнбайыш фронт*

## ИКЕ БОКАЛ

Ике даулы йылдың ыҙанында
Икебеҙ бер окоп төбөндә,
Уттар таҫмалары ишелгәндә
Һуғыш барған ҡырҙың күгендә,

Ике тапҡыр бокал күтәрҙек беҙ,
Бик татлыһын һәм бик асыһын,
Икеһен дә тын алмайса эстек,
Ҡалдырмайса эстек тамсыһын.

Тәүгеһенә ҡойҙоҡ Тыуған илгә,
Ергә булған һөйөү ҡайнарын,
Әсәләрҙең биргән фатихаһын,
Һөйгәндәребеҙҙең күҙ нурын.

Икенсеһенә беҙ һалып эстек
Хас дошманға нәфрәт ағыуын,
Ил кисергән ҡара ғазаптарҙы,
Йөрәктәрҙең үс һәм асыуын.

Ике тапҡыр бокал күтәрҙек беҙ,
Яңы йылдың таңы атҡанда,
Һалҡын окопта беҙ ике тапҡыр
Ялҡынлы ант бирҙек Ватанға.

*31 декабрь, 1943, Украина*

* * *

Томандар, ҡуйырып,
Урала ҡамышҡа.
Һалдаттың күңеле
Сырмала һағышҡа.

Йыраҡта уттары
Тыуған өй-усаҡтың,
Һаҡлана йылыһы
Наҙлаусы ҡосаҡтың.

Бойоҡма. Усаҡты
Үрләтеп ебәрҙем,
Утта бар серле көс —
Ҡарашы сибәрҙең.

Еүештә күшегеп,
Төшмәһен ҡанатың,
Күр ана: сәй ҡуйҙым,
Урғылып ҡайнаһын.

Әйҙә ул томандар
Ураһын ҡамышты,
Беҙ ҡайнар сәй менән
Баҫайыҡ һағышты.

*1944*

## ҠОЯШ СЫҠҠАН ЯҠТА, ЙЫРАҠТА...

*(Башҡортостандың 25 йыллығына)*

1

Утлы ҡалҡан булып ҡояш сыға,
Сағылып-сағылып уйнай ынйы ҡар.
Ҡояш сыҡҡан яҡта, бик йыраҡта,
Башҡортостан тигән ерем бар.

Ошо ерҙең аяҙ күге аҫтында
Ел тибрәткән минең бишекте,
Ошо ерҙә көн яҡтыһын күрҙем
Һәм әсәмдең өнөн ишеттем.

Мәғрур Урал ата булып, мине
Итәгендә һөйөп үҫтерҙе,
Ярҙарына төшһәм, Ағиҙелкәй
Һыу урынына шәрбәт эсерҙе.

Егерме ике тапҡыр ташыу күрҙем,
Ҡайындарҙың һыуын татыным.
Үләндәрҙә аунап ҡаршыланым
Тәүге күкрәүҙәрҙең шатлығын.

Яҙҙар һайын урмандарҙа йөрөнөм,
Ап-аҡ сәскә һырығас муйылды,
Һәм ғүмерем дә япраҡ шауы аҫтында
Шулай үтер кеүек тойолдо.

2

Көнсығышта таң атҡан бер мәлдә,
Көнбайышты ялҡын ялманы,
Шул ялҡындың һөрөмөнән хатта
Һары көйҙө Иҙел ярҙары.

Дағаланған немец итектәре
Ил ыҙанын тапап сыҡтылар,
Һары аждаһалар был иртәлә
Тәүге ҡорбандарын йоттолар.

Был иртәлә минең туғанымдың
Ҡаны тамды үлән өҫтөнә,
Ҙур юл туҙанына сабыйҙарҙың
Күҙ йәштәре тәгәрәп төштөләр.

Оя ташлап, таң яғына осто
Ҡурҡынышҡан ҡоштар төркөмө,
Тик мөлдөрәп ҡалды арыштарҙың
Аҡ һеркәләр аҫҡан керпеге.

3

Мәскәү һуҡҡан тревоганың өнө
Яңрап үтте ошо иртәне,
Баһадирҙар сафына сығып баҫты
Әзмәүерҙәй Урал ирҙәре.

Иҙел эйәрләгән талмаҫ аттар
Осҡон сәсрәттеләр баҫҡанда,
Урал ҡойған ҡылыстарҙың ҡоросо
Ташты ярыр ине сапҡанда.

Оҙатырға сыҡты Башҡортостан,
Ил теләне беҙгә аҡ юлды,
Әсәләрҙең биргән фатихаһы
Баш өҫтөндә уйнар нур булды.

Күкһеллеккә сумды тыуған тупраҡ,
Дала еле хуш еҫ бөркөнө.
Юлыбыҙға һеркә осора ҡалды
Арыштарҙың оҙон керпеге.

4

Утлы ҡалҡан булып ҡояш сыға,
Сағылып-сағылып уйнай ынйы ҡар.
Ҡояш сыҡҡан яҡта, бик йыраҡта,
Егерме биш йәшлек ерем бар.

Ошо ерҙең күгәрсене һаман
Баш осома килеп ҡағына,
Ғашиҡ инем элек гөлдәренә,
Таштарын да хәҙер һағынам.

Өсөнсө ҡат ҡырҙар уяндылар
Пар күтәргән яҙғы һулыштан,
Өсөнсө яҙ, эйәремдән төшмәй,
Аждаһаға ҡаршы һуғышам.

Еҙ дағалар әле япраҡ түгел,
Аяҡтары аттың талманы.
Күпме тураһам да, йөҙө ҡайтып,
Был ҡылысым ҡылға ҡалманы.

Тиҙҙән уны һуңғы ҡат һелтәрмен,
Һәм иң яҡты бер көн тыуғанда,
Аҡтыҡ илбаҫарҙың ерән башы,
Ҡабаҡ булып, аунар туҙанда.

5

Башҡортостан! Изге бәхетеңә
Сирек быуат тулған иртәне
Яу ҡырында, дошманыңа ҡаршы
Ҡылыс ҡайрап, тәбрик итәмен.

Туптар гөрһөлдәүе төтөн ҡатыш
Уйһыулыҡтар буйлап тарала,
Дошман өсөн йәшен булыр таңда –
Беҙҙең яҡта дауыл ярала.

Таңда һөжүм. Минең арғымағым
Тибенә-тибенә ашай һолоһон.
Таңда һөжүм. Ярһыу сәғәттәре –
Күкрәгемә һыймай һулышым.

Таңда һөжүм. Дауыл уртаһында
Ҡылысымдан сәселеп ут уйнар,
Сөнки минең еңеүемде көткән
Башҡортостан тигән илем бар.

*1944, февраль*

## АРМИЯ КИЛӘ

Байраҡтарҙың ал ебәге
Елберләй елгә,
Ерҙә йәшен утын сәсеп,
Армия килә.

Килә ысын азатлыҡтың
Данлы һаҡсыһы,
Үткән юлда – еңеүҙәрҙең
Маяҡ яҡтыһы.

Көнбайышҡа ярһып таша
Үстең ағымы,
Кирелеп баҫа был ғәскәр
Еңеү аҙымын.

Алыҫ түгел илебеҙҙең
Азат сиктәре,
Унда көтә туғандарҙың
Ғазап сиккәне.

Тыңла, иптәш, тыуған ерҙең
Йөрәк тибешен,
Тиҙерәк таты ҙур еңеүҙең
Татлы емешен.

Көлгә ҡалһын илде баҫҡан
Был ҡара үләт,
Һәр тамсы ҡан өсөн унан
Йән менән үләт!

*Украина, 1944*

## ИҘЕЛ ҠЫҘЫ

Иҙел ҡыҙы баҫма өҫтөндә
Һыуҙар алған иртәһен,
Иҙел ҡыҙы ил һаҡларға
Оҙатып ҡалған иркәһен.

Килһә лә сәләм хаттары
Ҡанлы һуғыш яғынан,
Иҙел ҡыҙы Гөлнәзирә
Уны өҙөлөп һағынған.

Ағиҙелдең буйҙарында
Ҡалған ҡыҙҙың күнәге,
Изге яуға алып киткән
Уны ярһыу йөрәге.

Һуғыш юлын күрән туҙан
Болоттары ҡапланы.
Иҙел ҡыҙы, шинель кейеп,
Шул юлдарҙан атланы.

Яуҙа ауған егеттәрҙең
Бәйләй ҡанлы яраһын, –
Гөлнәзирә ялҡын аша
Һуҙа шәфҡәт ҡарашын.

Батырҙарҙың ғүмере өсөн
Уттар эсенә керә.
Иҙел ҡыҙы, илем ҡыҙы
Санитарка Нәзирә.

*Украина, 1944*

## АТЛЫЛАР ЙЫРЫ

Илебеҙҙең тыныслығын
Дошман утҡа үртәне,
Ҡындан ҡылыс сығарырға
Ил ҡушты ул иртәне.

Ел тараны юрғаларҙың
Ергә тейгән ялдарын,
Яуға киттек беҙ ҡалдырып
Ағиҙелдең ярҙарын.

Ҡайнай асыу. Беҙ һуғышта
Ил намыҫын һаҡлайбыҙ.
Уйнай ҡылыс. Дошмандарҙы
Беҙ ярһып тураҡлайбыҙ.

Елдәр тарай юрғаларҙың
Утта көйгән ялдарын.
Иҙел йыраҡ. Алдыбыҙҙа
Днестрҙың ярҙары.

Әле ҡанға һуғарылған
Ер иркен һулыш алыр,
Йәйғорҙай нурҙарын һибеп,
Дан юлы һуҙылып ҡалыр.

Ал таҫмаларға биҙәрбеҙ
Юрғаларҙың ялдарын.
Беҙ ҡайтырбыҙ, яңғыратып
Ағиҙелдең ярҙарын.

*1944*

## ҺАУМЫ, ДИҢГЕҘ!

1

Йыраҡтарҙа күкһел уйһыулыҡтар
Ал шәфәҡкә инеп юғала,
Һалҡын тынлыҡ унда ҡаяларҙа,
Унда диңгеҙ дымлы тын ала.

Яҙ елдәре алып килде беҙгә
Тулҡындарҙың саҡырыу тауышын,
— Диңгеҙ, диңгеҙ... Һаумы, сикһеҙ киңлек! —
Дауыл менән диңгеҙ ҡауышты.

2

Яман йылдың ҡайнар күге аҫтында
Төтөн япты ҡая таштарын,
Ул саҡ диңгеҙгә беҙ һуңғы тапҡыр
Һаубуллашып ҡараш ташланыҡ.

Ел туҙҙырҙы
Тулҡын ярға атҡан
Матрос мәйетенең сәстәрен.
Гүйә, таштар шыңшып илай ине,
Гүйә, сәсте диңгеҙ йәштәрен...

Алмағастар бойоғоп баш эйҙеләр,
Ҡара көйөп ҡалды игендәр,
«Һиңә, диңгеҙ, тағы ҡайтырбыҙ», — тип
Ант иттеләр кипкән ирендәр.

3

Бөгөн беҙҙе ҡаршыларға диңгеҙ
Ашып сыҡҡан ташлы ярҙарын,
Тулҡындары, ярһыу аттар һымаҡ,
Сайҡай-сайҡай килә ялдарын.

Беҙ ишетәбеҙ диңгеҙ һулышында
Кире ҡайтҡан ирек тауышын.
Диңгеҙ, диңгеҙ... Һаумы, сикһеҙ киңлек!
Һинең менән тағы ҡауыштыҡ.

*1944*

## УЛ ҠЫҘ МИНЕ ТАШЛАП КИТМӘНЕ

1

Зәңгәр уттар янған бүлмә эсендә
Үлем менән йәшәү көрәште,
Баш осомда торған аҡ күләгә
Түшәгемә эйелеп өндәште.

Әрнеү утында мин аңламаным,
Ул ирендәр нимә тинеләр?
Тик шәйләнем – был йәш ҡыҙ баланың
Керпектәре дымлы инеләр.

Гүйә, ваҡыт алйып туҡтап торҙо,
Көн яҡтыһы тәҙрә сиртмәне.
Ғазап түшәгендә ул ҡыҙ мине
Яңғыҙымды ташлап китмәне.

2

Зәңгәр уттар һүнде. Бүлмә эсенә
Ҡояш тағы эйелеп ҡараны.
Йәшлек еңде. Заман алыҫлатты
Үлем менән минең араны.

Тәҙрә ҡаршыһында күк күгәрсен
Ҡанаттарын ҡаҡҡан сағында,
Мин һөйләнем ҡыҙға алыҫтағы
Башҡа бер күгәрсен хаҡында.

Керпектәре уның әүәлгесә
Һоҡланыулы ҡараш һипмәне,
Шулай ҙа ул һағыш ҡосағына
Яңғыҙымды ташлап китмәне.

3

Тағы ла яҙ. Туптар иҙгән ҡырҙа
Һикереп-һикереп аға ҡар һыуы.
Еңеү булып, көнбайышҡа таша
Һалдат йөрәгенең ярһыуы.

Мин тағы ла ҡайнар һуғыштан һуң
Йылғаларҙа атым эсерәм.
Яу юлының сикһеҙ ауырлығын
Һәм еңеүҙең бәхетен кисерәм.

Аҡ күләгә һаман, әйтерһең дә, —
Күк диңгеҙҙең йыраҡ елкәне,
Хәтәр мәлдәрҙә лә яңғыҙлыҡҡа
Йөрәгемде ташлап китмәне.

*1944*

## АЗАТ ОДЕССА

Портта әле әсе төтөн еҫе,
Аҡ мәрмәрҙәр ҡара ҡоромда.
Беҙ һуғышып алған был шәһәрҙе
Гәүһәр тиҙәр диңгеҙ ҡырында.

Туғандарҙың йылға ҡандары
Был шәһәрҙә ағып кипкәндәр,
Урамдарҙан
Румын торгаштары
Ҡырҡ тартма тейәп үткәндәр.

Утка тотоҡ
Көндө томалаған
Ул ҡайғының ҡара ҡанатын,
Һәм Одесса-гүзәл ҡаршылаyы
Азатлыктың яҙғы сәғәтен.

Аҡ мәрмәрҙәр тағын ялтырарҙар
Көньяҡ ҡояшының нурында,
Маяҡ ҡабыныр.
Каштан бөрөләре
Асылырҙар диңгеҙ ҡырында.

*1944*

* * *

Үрмә гөлдәреңде тирбәлдереп,
Булмә эсенә талғын ел инһә,
Аҡ күгәрсен, һөттәй аҡ күгәрсен
Түр тәҙрәңә килеп елпенһә,

Йөрәгеңдә булған һағыш уты
Баҫылмаһа таңғы һулыштан,
Көт, сабыр бул, иркәм,
Ҡош – хәбәрсе,
Изге хәбәр килер һуғыштан.

*1944*

## ДНЕСТРҘА МАЙ

### 1. Уң ярҙа

Көн дә, төн дә бында ыжғырып
Ялҡын яуа һуғыш күгенән,
Яр талдары, гүйә, уттан ҡурҡып,
Баштан-аяҡ һыуға күмелгән.

Алма баҡсаһы, нәҡ әкиәттәге
Һөт күленә оҡшап, түңәрәк,
Тик сәскәнең дымлы керпегенә
Шәрбәт эҙләп ҡунмай күбәләк.

Ауыр бомбаларҙың гөрһөлдәүе
Таш тауҙарын күккә күтәрҙе,
Ғәрәсәтле ошо төндө һалдат
Уң яҡ ярға һыйынып үткәрҙе.

Днестрҙың күкһел таҫмаһына
Шәүлә булып төшкәс алһыу таң,
Дейеүҙәрҙе быуыр ҡеүәт менән
Күтәрелеп сыҡты бәһлеүән.

### 2. Йыр ишеттем

Тулған ай, таң алһыуланғас,
Сулпан менән ҡауышты,
Ел уятты, тирбәлдереп,
Йоҡолағы ҡамышты.

Ошо ерҙә ишеттем мин
Туған моңдоң тауышын,
Тыңланылар талдар, ойоп,
Яңғыҙ һалдат һағышын.

«Ярға төшөп һыуҙар эсһәм,
Һағындыра Һаҡмарым,
Һаҡмарымдың йәмдәрен мин
Йөрәгемдә һаҡланым».

Билдәһеҙ күңелдең моңо
Уйҙарымды борсоно,
Мин теләнем осратырға
Таныш түгел йырсыны.

Ҡалтырап, күктән йондоҙҙар
Йылғаға ҡарай ине,
Күрҙем, егет саҡматашҡа
Хәнйәрен ҡайрай ине.

Һүҙҙәрһеҙ ҙә аңланым мин
Йырсының теләктәрен:
Ҡайраһын Днестр ташы
Уралымдың хәнйәрен!

### 3. Өс мәйет

Ҡояш сәскәс нурҙарының
Һөңгөһөн,
Ел сатнатҡас Днестрҙың
Көҙгөһөн,

Ағып үтте бер балыҡсы
Кәмәһе,
Ә кәмәлә өс немецтың
Кәүҙәһе.

Береһе ҡапланып һайлаған
Урынын –
Киң ҡосаҡлаған кәмәнең
Моронон.

Икенсеһе ауған кәмә
Ситенән,
Ҡан ағып уҡмашҡан
Битенән.

Өсөнсөһөнөң башы юҡ
Яртылай,
Күкрәгендә «Тимер тәре»
Ялтырай.

Йөҙәләр улар әйләнеп
Тын ғына.
Тик сылтырап бәреләә
Тулҡын ғына.

Сыҡҡан иң һуңғы юлға
Өс юлбаҫар,
Тик инде ҡайғы килтермәҫ
Был сәфәр.

Кәмәгә атты кешеләр
Ҡарғышты,
Ҡай берәүҙәр күрмәмешкә
Һалышты.

* * *

Көньяҡтың ҡайнар ҡояшы
Түбәлә.
Талдар һаман талғын ғына
Тирбәлә.

Ағып бара бер балыҡсы
Кәмәһе.
Ә кәмәлә өс немецтың
Кәүҙәһе.

Тик кәмәмде туҡтатыусы
Булманы,
Хатта ел дә уларға
Ҡағылманы.

Йөҙәләр һаман әйләнеп
Тын ғына,
Тик сылтырап бәреләләр
Тулҡын ғына.

* * *

Ҡояш ҡыҙарып күмелгәс
Сағылға,
Һәм талыҡҡан аттар сыҡҡас
Сабынға,

Дауыл йотто был балыҡсы
Кәмәһен,
Диңгеҙ упты өс немецтың
Кәүҙәһен.

*1944*

## ТӨШ

Кис ине, йәшенле кис ине,
Күңелдә болғансыҡ хис ине.

Яңғыҙым ҡараңғы бүлмәлә
Көттөм мин үҙеңде был мәлдә.

Тик ямғыр шаҡыны тәҙрәне,
Күктәрҙә сатҡылар сәсрәне.

Төн һаман ҡуйыра, ҡарала,
Күңелдә шикләнеү ярала.

Һәм ҡапыл ел асты ишекте,
Кемдеңдер килеүен ишеттем.

Эйе, был һин инең, гүзәлем,
Мин һинең тыныңды һиҙәмен.

Йәшендәр йәшнәгән араны
Хәйләкәр йылмайып ҡараның.

Тағы ут, ҡулыңды шәйләнем,
Ҡулыңда сәскәләр бәйләме.

Һин аттың, мин көттөм, «гөл» тинем,
Гөл түгел, был минең Илгизем.

Ул – бала. Йоҡола төн менән,
Ә көндө ҡаршылар кем менән?..

Йәшендәр күпме ут сәсмәһен,
Төн йотто баланың әсәһен.

Таңғаса тыныслыҡ белмәнем,
Ләкин һин башҡаса килмәнең.

*1944*

## ҮЛЕМҺЕҘЛЕК

*Үҙ кәүҙәһе менән дошман дзотын*
*каплаған Петр Банников иҫтәлегенә*

Һалдаттар йәшереп күҙ йәшен,
Ҡәбергә төшөрҙө иптәшен –
Ҡан менән дошмандың уттарын
Һүндергән Матросов тиңдәшен.

Балҡыу был. Йәшен дә тиң түгел.
Ялҡынлы, саф ине был күңел.
Ут алған иң һуңғы һулыш та
Бөтә бер ғүмерҙән кәм түгел.

Ҡәбергә тупраҡты һиптеләр,
Ҡайғынан ирендәр киптеләр,
Тик уны дуҫтары барыбер
Йөрәктә алып та киттеләр.

Аяҙ күк. Ағарып таң атты.
Тағы кис. Ил өҫтөн нур япты.
Баш ҡала салюты батырҙы
Киләсәк йылдарға оҙатты.

Хөрмәтем бар тиһәң батырға,
Ал, иптәш, ошоно хәтергә:
Нығыраҡ ҡыҫ ҡулыңда ҡоралды,
Күҙ йәше тамыҙма ҡәбергә.

*1944*

## ГВАРДИЯ БАЙРАҒЫ

Смоленщинаның ҡырҙарында
Һуғыш ғәрәсәте ҡайнаны,
Ул ҡәһәрле көҙҙө дошман безгә
Көнө-төнөн хәнйәр ҡайраны.

Ләкин Россияның полктары
Яуға ҡаршы утлы тау булды.
Шунда гвардия байраҡтары
Ялҡын менән ҡандан туҡылды.

Баһадирҙар сафҡа баҫты иртән,
Йыраҡ офоктарҙа ай батты;
Һәм, теҙләнеп дымлы, һалҡын ергә
Сал командир үпте байраҡты.

Йәйге шәфәҡ төҫлө, ал ебәкте
Киптерҙе лә ҡайнар битенә,
Ил ышанысына ант бирҙе ул,
Ант бирҙе ул әсә һөтөнә.

Ә батырҙар,
Тын да алмай тыңлап торҙолар.
Биш минуттан, урман яңғыратып,
Яуға саҡырҙылар борғолар.

Өс йыл уҙҙы. Байраҡ ебәктәрен
Уңдырҙылар дала елдәре,
Тик талсығыу белмәй —
Ватанымдың
Еңеү менән барған ирҙәре.

Артта ҡалды азат туған ҡырҙар,
Артта ҡалды Дунай ярҙары;
Инде Балканда ул, балҡып үтә
Данлы гвардия байрағы.

*1944 йыл, сентябрь*

## ЮЛДАР ҮТТЕК

Уйҙар кеүек оҙон юлдар уҙҙыҡ,
Юлдар үтә Балкан артына.
Уйҙар һаман, аҡсарлаҡтар булып,
Иҙел өҫтәрендә талпына.

Иҙел, Иҙел... Уның ярҙарында
Ауыр, ҡара көҙҙө үткәрҙек,
Иҙел, Иҙел... Унда еңеүҙең беҙ
Һүнмәҫ факелдарын күтәрҙек.

Иҙелдән һуң утлы яуҙа йоттоҡ
Күпме баҫыуҙарҙың туҙанын,
Азат иттек болгар илен —
Россияның кесе туғанын.

Уйҙар кеүек оҙон юлдар уҙҙыҡ,
Юлдар үтә Балкан артына,
Уйҙар ғына түгел, аҙымдар ҙа
Ҙур еңеүле көнгә ашҡына.

*1944*

## УКРАИНА ӨСӨН

*(Украинаның дошмандан тулыһынса таҙартылыуы айҡанлы)*

Украина, ғазап сиккәнеңде
Уралымда килеш мин күрҙем,
Далаларҙа үҫкән ярһыу аттың
Еҙле эйәренә һикерҙем.

Иҙел-әсә әйтте: «Тап төшөрмә,
Тап төшөрмә әсә хаҡына,
Алмас таштай булһын ҡылысҡайың,
Шоңҡар ҡанат бирһен атыңа!»

Тыуған яҡтан йыраҡ, ә йөрәккә
Шундай яҡын булған ерҙә мин
Беренсе ҡат ҡындан ҡылыс алдым
Һәм атыма ҡамсы һелтәнем.

Украина, утлы һуғыштарҙа
Сиктәреңдән үттем – сигеңә,
Маңлайымдан ҡара тирем тамды,
Ҡаным тамды һинең ереңә.

Донецтағы алма сәскәһенең
Һарғылт һөрөмләнеп кипкәне,
Төнгө урамдағы дар ағасы
Күҙ алдынан һаман китмәне.

Һиңә шулай, Украина иле,
Ҡара, ауыр көндәр арҡылы,
Дауылдан һуң сыҡҡан ҡояш кеүек,
Килде азатлыҡтың шатлығы.

Бөгөн бына сит тау башындамын,
Көнсығышҡа күҙем төбәлгән,
Ташҡа һуға атым дағаларын,
Ҡоштар осоп үтә түбәмдән.

Украина, ғазаптарың өсөн
Мин тағы ла ялҡын эсермен,
Һинең һылыуҙарҙы ҡотҡарырға
Тынсыу Шпрееңы кисермен.

*1944, Балкан*

## ДУҪТАР АРАҺЫНДА

*(Балканда)*

Тыуған усаҡтарҙың күк төтөнө
Һибелеп ҡалды алыҫ яланда,
Тик Етегән йондоҙ, йым-йым итеп,
Баш өҫтөндә тора һаман да.

Йыйналһаҡ та ошо ят тауҙарға,
Төнгө һалҡын төшкән сағында,
Туған усаҡтарҙың ялҡындары
Йылы һибә беҙҙең табынға.

Тауҙар аша алып килдегеҙ һеҙ
Ил йолаһын, йәмен йорт-ерҙең,
Мин дә сикһеҙ башҡорт далаһының
Дәртле йырын һаҡлап килтерҙем.

Ҡойоғоҙ шарап, ана, таң ағара
Көнсығышта, Ватан яғында;
Бокалдарҙың көмөш сыңы булып,
Шатлыҡ яңғыраһын табында!

*1944*

## ҒҮМЕР ШИШМӘҺЕ

*Сәйфи Ҡудашҡа*

Таштан ташҡа һуғылып аға
Йылғасыҡ,
Шарлауыҡлы булғанғамы –
Болғансыҡ.

Мин беләм был йылғасыҡтың
Шишмәһен,
Ҡолаҡ һалһаң гәлсәр сыңы
Ишетәһең.

Шундай тоноҡ, тап төшмәгән,
Саф ҡына,
Ҡоштар килеп һыу эсәләр
Һаҡ ҡына.

Һәм ғүмерем йылғаһының
Беләмен
Шишмәләй генә башланған
Бер мәлен.

Ул саҡ булдым мин ташсының
Ябайы –
Таштан һалдым әкиәттәрҙең
Һарайын.

Мин табырға тейеш инем
Бер үҙем
Алтын сәсле һыу ҡыҙының
Йөҙөгөн.

Хыялымды мин тормош тип
Уйланым.
Һарайымды һүтеп, һалып
Уйнаным.

Ят бер егет, үтеп барған
Сағында,
Бик аҙ ғына туктап торҙо
Янымда.

Һуҙҙы ҡул хыялға сумған
Балаға
Һәм етәкләп алып китте
Ҡалаға.

Ҡала миңә дәртле йырҙар
Өйрәтте,
Һүнмәҫ ут менән дөрләтте
Йөрәкте.

Беҙ алыҫ киттек. Әйләнеп
Ҡараным.
Томандарҙа күмелеп ҡалды
Һарайым.

Һин инең, йырсы, был уйсан
Ят кеше,
Тинең: «Беҙ бит бер тупраҡтың
Емеше».

Беҙ ҡайындар шаулағанын
Тыңланыҡ
Һәм, елдәргә ҡушылып, йыр
Йырланыҡ.

Ҡабатланмаҫ көндәр ҡалды
Йыраҡта,
Тик ул йырҙың уты йәшәй
Йөрәктә.

*1944*

## КИРОВ ИҪТӘЛЕГЕ

Бала инем.
Ләкин хәтерләйем
Ул хәсрәтле көндөң буранын,
Киров рәсемен мин беренсе ҡат
Ҡара таҫма менән ураным.
Бала инем.
Һәм мин уҡытыусыма
Һыйындым да үкһеп иланым,
Ә йөрәкте, ҡара таҫма кеүек,
Онотолмаҫлыҡ ҡайғы солғаны.

Смольныйҙа булған атыу тауышы
Сыңлап торҙо ҡолаҡ төбөндә,
Ҙур ҡайғының бер туғаны булып,
Үс, һүнмәҫ үс, тулды күңелдә.

Йылдар үтте.
Мин йәшәүҙе яҡлап,
Киров әйткән гүзәл йәшәүҙе,
Ҡорал тотоп ҙур һуғышҡа сыҡтым,
Дауылда һәм утта мин сыныҡтым,
Ышанысын аҡлап халыҡтың.

Тормош өсөн беҙ үлемде еңдек –
Ерҙә йөрөгән ябай кешеләр,
Сөнки, байраҡ һымаҡ, алда булды
Үлемһеҙҙәр, Киров ишеләр.

*1944 йыл, декабрь*

## СИТ УТТАР

### Бағышлау

Утлы шартлау ҡуйыра бара һаман,
Төн ҡараһы йым-йым уйыла;
Ошо күкрәү йөрәк аша үтеп,
Йыр юлынан сыңлап ҡойола.

Һалдат – йырсы!
Һиңә бағышлайым йырҙарымдың
Хәтәр минуттарҙа тыуғанын.
Һуғыш тыныр. Бәлки, йыр тауышы
Яңғырап үтер йылдар ыҙанын.

### 1. Тағы ла диңгеҙ

Күргәнем бар Ҡара диңгеҙҙе мин,
Күргәнем бар Ҡырым яғын да,
Ай юлдары буйлап йөҙгәнем бар,
Тулҡындары тынған сағында.

Ғашиҡ булып ҡарап торҙом бер кис
Офоҡтарға ҡояш батҡанын
Һәм ниңәлер гүзәл яр сәскәһен
Тын диңгеҙгә өҙөп ташланым.

Ҡайҙа илткәндер ул Ҡырым гөлөн
Тулҡындарҙың ҡанат ҡағышы;

Ә үҙемде алыҫ сит ярҙарға
Алып килде һалдат яҙмышы.

Киске Констанца. Шул уҡ диңгеҙ.
Офоҡтарҙа болот йыйыла.
Ә тулҡындар, гүйә, етем бала,
Һалҡын, үгәй ярға һыйына.

Ҡырҡ тартмасы румын минең янда
Ташҡа баҫып тора һоҡланып;
Теше менән ул йылмайыу яһай:
«Һеҙгә диңгеҙ ҡалай оҡшаны?»

Мин көнләнем был ят ҡараштарҙан,
Мин ҡыҙғандым Ҡара диңгеҙҙе;
Әгәр мөмкин булһа, күк тулҡындар,
Алып китер инем мин һеҙҙе.
Алып китер инем диңгеҙҙе...

Һалҡын таш өҫтөндә көтөп алдым
Тыуған илдә таңдың атҡанын
Һәм борсолдом: «Ниңә ул саҡ гөлдө
Мин диңгеҙгә өҙөп ташланым?..»

## 2. Сит уттар

Хайран ҡалыр ине берәү булһа
Балкандағы төндәр яҡтыға,
Был матурлыҡ мине һоҡландырмай,
Һағыныуымды ғына арттыра.

Бөркөү өйҙө ташлап, тауға менәм,
Уйһыулыҡҡа томан ятҡанда,
Бейеккәрәк күтәрелгән һайын,
Яҡынаям һымаҡ Ватанға.

Төн һаңғырау. Һәм мин ишетәмен
Бик алыҫта йылға шарлауын,
Һәм ишетәм миңә ят бер ҡоштоң
Илау һымаҡ зарлы һайрауын.

Ватан алыҫ. Бында ел дә болот,
Һәм йондоҙло сит күк түбәмдә,
Ә уттары болгар ҡалаһының
Йым-йым итеп яна түбәндә.

Өшөгәндә ҡулдарымды һуҙып
Йылытҡаным бар мин ул утта,
Мөмкинме һуң йәнде йылытыуы,
Мөмкинме һуң тик бер минутҡа?

### 3. Ҡыҙҙар йырын ишеттем мин

Күк ситендә көҙгө ҡояш
батҡанда,
Ҡыҙҙар йырын ишеттем мин
Балканда.
Мондары – яҙғы ҡоштарҙың
телендә,
Бындай ауаз – тик болгарҙар
илендә.
Манылды йәшкелт айвалар
алтынға,
Яңғыраны йыр егет даны
хаҡында.
Ул егет илдәр сигенән
һикергән
Һәм Балканға азатлыҡты
килтергән.
Атым йәш ҡурпы утланы
сабында,
Мин тын баҫып торҙом йылға
ярында.
Киске эңер солғағанда
Балканды.
Һағындым мин йыраҡтағы
Ватанды.

### 4. Минең тыуған көн бөгөн

София урамдарында
Ямғыр һибәләй һаман,
Елпенеп дымлы елдәргә,
Япрағын ҡоя саған.

Томалай һоро томандар
Емерек батша һарайын,
Мин һағышлы күҙҙәр менән
Сит донъяға ҡарайым.

Һәм һанайым йылдарымдың
Һәр бер ынйыы бөртөгөн:
Ун... егерме.. тағы ла биш, –
Минең тыуған көн бөгөн!

Был көндө алтын Уралда
Хәтерләйме икән әсәй?
Ә мин уның һаулығына
Тәүге бокалды эсәм.

Ул миңә киң донъя биргән,
Ул миңә һулыш биргән.
Мин тыуған көҙгө сыуаҡты
«Изге көн булһын!» тигән.

Япа-яңғыҙ түгелмен мин,
Дуҫтарым бар янымда,
Сәйгүндәргә сәй ҡойолған,
Мейескә ут яғылған.

Күпкә түгел, бер минутҡа
Онотоп һалдат йөгөн,
Беҙ күтәреп шарап эстек:
Минең тыуған көн бөгөн!

### 5. Балатон ҡыҙына

Мин һинең илдеке түгел,
Мин башҡа илдән килдем,
Бөркөтлө сал тауҙа үҫтем,
Һин – ҡошо тыныс күлдең.
Мин башҡа илдән килдем.

*1944–1945*

## ЯЗА КИЛӘ БЕРЛИН ӨҪТӨНӘ

Ҡырпаҡ ҡар сит ерҙең ҡырында,
Ҡоромдар туп төшкән урында
Юлдарында штыктар, штыктар
Ялтырай ҡояштың нурында.

Зыңлай ер аяҡтар баҫҡанда,
Яңы йыр иҫке күк аҫтында,
Һалдаттар, һалдаттар, һалдаттар
Уҙалар тиң булып ташҡынға.

Алда ер, унда таң атмаған,
Ҡара ҡош ҡанаты ҡаплаған
Ул илдә Аждаһа-йыландар
Әлегә әжәлен тапмаған.

Ишетелә ҡолдарҙың зар йыры,
Йәш түгә һылыуҙар зинданда,
Яҡты көн, татлы өн юҡ унда,
Зың да зың... бығауҙар сылбыры.

Күк Дунай һәм Прут артынан,
Бөйөк ил – Россия яғынан,
Килә ул – хаҡ яза, ҡайнар үс,
Көслөрәк күкрәп дауылдан.

Һәм килә ҡарттарҙың ҡарғышы,
Зарыҡҡан әсәләр һағышы,
Ҡан менән, йәш менән йыуылған
Тупраҡтың һәр изге ҡарышы.

Ләғнәтле Берлиндың өҫтөндә
Аҡтыҡҡы ғәскәрҙәр эҙенән
Еңеүсе ғәскәрҙәр эҙенән
Атлай ҙур бәхетле замана.

Зыңлай ер аяҡтар баҫҡанда,
Яңы йыр иҫке күк аҫтында,
Һалдаттар, һалдаттар, һалдаттар
Уҙалар тиң булып ташҡынға.

*1945, Венгрия, февраль*

## ЕВРОПАҒА МАЙ КИЛӘ

Европаға май килә,
Ерҙе һөйөп ел өрә,
Көньяғына асылған
Тәҙрәләргә нур керә.

Сәскә һуҙҙы керпеген,
Киң һуланы ер бөгөн,
Май ҡояшты киптерер
Күҙҙәрҙә йәш бөртөгөн.

Киң ҡолас йәй, әй урам,
Штыктарға гөл урап,
Еңеүсе ғәскәр уҙа,
Бәхет сәғәте һуға.

Үлем, хурлыҡ дошманға,
Имен йәшәү дуҫтарға
Алып килдек беҙ бында
Штыктарҙың осонда.

Европаға май килә,
Ерҙе һөйөп, ел өрә,
Яҙҙы көткән өйҙәргә
Киң атлап, тормош керә.

*1945, 1 май, Вена*

**ЕҢЕҮ**

Таралды һуңғы туптарҙың
Төтөнө,
Ғазаптар аша килде еңеүҙең
Был көнө.

Беҙ оҙаҡ йылдар буйынса
Тир түгеп,
Тештәрҙе ҡыҫып, ҡан ҡойоп,
Бил бөгөп,

Еңеүҙең гүзәл ағасын
Үҫтерҙек,
Үлә яҙҙыҡ, тик үлемде
Үлтерҙек.

Ҡара суйын свастика
Гөрһөлдәп,
Төштө ҡапланып Европа
Өҫтөнән.

Тынды Европала ҡылыстар
Ҡайрауы —
Күтәрҙек беҙ тыныслыҡтың
Байрағын.

*1945, май, Вена*

## ТАШ ӨҪТӨНДӘГЕ ГӨЛДӘР

Һин яҙаһың: «Йылдар, юлдар буйлап
Алыҫлашҡан һайын аралар,
Һинең хаттар һүҙгә һәм наҙлауға
Һаман һараная баралар.

Мин уйҙарҙың әле лә йә дауыллы,
Йә тын диңгеҙендә йөҙәмен;
Айырылышыу, ахры, һыуыталыр,
Таш итәлер ирҙәр йөрәген...»

Һин әйләнеп ҡара Уралдағы
Артта ҡалған яҙғы көндәргә,
Иҫеңдәме, хайран ҡала инек
Таш өҫтөндә үҫкән гөлдәргә?

Эҫе нурҙар гөлдөң һабаҡтарын
Шундай сәнскеле иттеләр,
Ә сәскәләр, ҡояштан күҙ алмай,
Йәйҙәр буйы хуш еҫ һиптеләр.

Әгәр уттар үткән минең йөрәк
Мөмкин икән ташҡа әйләнеү,
Һиңә булған мөхәббәтем минең —
Ташта үҫкән гөлдәр бәйләме.

*1945*

* * *

Ҡара төндә Ҡош юлдары буйлап
Күктәр күкрәп уҙған шикелле,
Тимер менән уттан тыуған Еңеү
Беҙҙе бына ҡайҙа килтерҙе.

Тик ҡайғы һәм нәфрәт менән янған
Йөрәктәрҙән һөрөм китмәгән,
Ҡорбандарҙың ҡәберенә тамған
Күҙ йәшебеҙ әле кипмәгән.

Шулай ҙа беҙ илдәр буйлап сәстек
Имеҥлектеҥ изге орлоғон.
Мин аңланым
Беҙҙең күңелдәрҙең
Хазинаһы сикһеҙ ҙурлығын.

*1945*

## КАЙТЫУ

### 1. Унының һуңғы хатынан

Мәк ултырттым яҙын, өмөт мәген,
Һыуҙар һиптем көн дә түтәлгә,
Тиҙҙән, тинем, сәскә күҙен асыр, —
Күп ҡалманы инде күтәргә.
Сәскә атты, төштө түтәлгә,
Яҙмыш шулай, тағы күтәргә.

Ләкин йәшлек сәскә түгел икән,
Һүрелмәне өмөт, шиңмәне,
Был йылдарҙа, бәлки, янар тауҙар
Һыуынғандыр. Һөйөү һүнмәне.
Теләмәнем шаян шатлыҡты,
Бәхет кәрәк, шатлыҡ ваҡытлы.

Шул бәхетем булып ҡайтһа инең һин, —
Көтәм мин ул таңдың атҡанын;
Ер йөҙөнә килгән тыныслыҡтай,
Асып инһәң ине ҡапҡаны.
Бәлки, ҡар ҙа төшөр ул көндә,
Тик яҙ булыр тәҙрә төбөндә.

## 2. Яуап урынына

Ерҙә шундай тынлыҡ. Мин ситтәрҙә,
Мин алыҫта илдәр гиҙәмен.
Ерҙә тынлыҡ. Ете даръя аша
Һинең һулышыңды һиҙәмен.
Юлым оҙон, Тыуған ил яҡын,
Тупрағына баҫыр аяғым.

Һиңә ҡайтыу өсөн дүрт йыл буйы
Һуғыш ҡыры буйлап атланым.
Дүрт йыл буйы мин үҙемде түгел,
Һинең мөхәббәтте һаҡланым.
Һүрәтеңде илап үпмәнем,
Ҡайғымды ла елгә түкмәнем.

Артыҡ һағынғанға, күрешеү башта
Яманһыу ҙа, ят та тойолор.
Минут уҙыр, минең күгәрсенем
Күкрәгемә килеп һыйыныр...
Күҙҙәреңә, беләм, йәш тулыр, –
Минең өсөн һуңғы йәш булыр.

*1945*

## УЙҘАР

Мин килмешәк булып тыуманым:
Оло юлдың йотоп туҙанын,
Һыйыныр ер тапмай донъяла,
Мин уҙғынсы булып уҙмамын.

Ғәҙеллектең тотоп бизмәнен,
Хаҡлыҡ эҙләп илдәр гиҙмәмен,
Хаҡлыҡ тимен тыуған еремде
Һәм еремдең һәр бер биҙәген.

Мин түгелмен ерҙең ҡунағы.
Уның улы. Кеше туғаны.
Бит ватанһыҙ була ҡолдар ғына.
Ә мин хужа. Йәшем йыуманы

Был тупраҡты. Тирем түгелде.
Һабан һөрҙөм, бөгөп билемде.
Ерҙән шытып сыҡҡан һәр бер һабаҡ
Шатландыра минең күңелде.

Заманымдың етеҙ ағышын,
Кешеләрҙең бәхетен, һағышын,
Ҡош һайрауын, урман шаулауын
Бергә ҡушһа ине тауышым —

Йырға күсер ине уйҙарым.
Мин еремде маҡтап туймамын.
Тормош тын күл түгел. Тып-тын йәшәп,
Шып-шым ғына донъя ҡуймамын.

*1946*

* * *

Һин – минең ярты яҙмышым,
Өлөшкә тейгән көмөш.
Күпме ғүмер бар, – беҙ шуны
Бергә үтергә тейеш.

Мин күнәм бөтәһенә лә:
Яҡшыға, яманына,
Көндәрҙең салт аяҙына
Һәм болотло сағына.

Ҡыуанысың булһа, мин дә
Бергәләп ҡыуанырмын.
Хәсрәттәр төшһә башыңа,
Иркәләп йыуатырмын.

Һукранмам, тормош ауыр, тип,
Башым эйелмәҫ түбән,
Йөрәктә саф мөхәббәт, ул
Һүнмәҫ йылдар үтеүҙән.

Тик икебеҙҙең араға
Яуыз елдәр өрмәһен,
Һәм ялғанлыҡ – юха йылан
Беҙҙең өйгә кермәһен.

Икәүебеҙгә бер яҙмыш –
Тормоштан тейгән өлөш.
Күпме ғүмер бар, – беҙ шуны
Ғәҙел йәшәргә тейеш.

*1946*

## ҺАУМЫ, ТИҘӘР ГӨЛДӘР...

Ауылымдың туғайҙары аша
Алыҫтарҙан ҡайтып киләмен,
Шишмәләргә ятып һыуҙар эсәм
Һәм эйелеп өҙәм еләген.

Гөлдәр миңә: «Һаумы, һаумы!» – тиҙәр,
Талғын елдәр иҫкән сағында,
Баш эйәләр. Бер мин генә түгел,
Улар ҙа, ахры, мине һағынған.

Айырылыуҙың оҙаҡ йылдарында
Ниндәй яландарҙа йөрөмәнем,
Ләкин, гөлдәр, һеҙҙең шикеллеләй
Хуш еҫ бөркөгәнде күрмәнем.

Хәтерләйем ошо туғайҙарҙа
Бик, бик күптән гөлдәр үҫкәнен;
Ғашиҡ булдым егет йылдарымда,
Тик гөлдәрҙе үрелеп өҙмәнем.

Ғашиҡ булдым. Ләкин мин ғишҡымды
Әйтеп бирҙем ябай тел менән.
Тиңләмәнем уны далалағы
Ғүмерһеҙ һәм матур гөл менән.

Улар һаман: «Һаумы, һаумы!» – тиҙәр,
Алдарыма хуш еҫ сәсәләр.
Бик һағындым һеҙҙе, бик һағындым,
Үҙ еремдә үҫкән сәскәләр.

*1946*

* * *

Ағиҙелдә аҡ пароход
Алып китте һөйгәнемде.
Һыуҙы түгел, һулҡылдатып,
Ярып үтте йөрәгемде.

Иҙел өҫтө сылбырланып
Тулҡынды ла тағы тынды,
Шул пароход менән генә
Алып китте тынлығымды.

Йыуатмағыҙ, дуҫтар, мине,
Сабырлығың кәрәк түгел,
Мөхәббәттә һәм нәфрәттә
Сабырлыҡҡа күнмә, күңел.

Күргәнем бар: матур, ләкин
Һыу тиҙ тынсый тын күлдәрҙә.
Һәм беләмен: тиҙ һүнә уй
Ойоп торған күңелдәрҙә.

Аҡ пароход айырҙы ла
Алып китте һөйгәнемде.
Ярҙа ҡалдым, ярһыу уйҙар
Дер һелкетте йөрәгемде.

*1946*

## ҺАЛДАТ

1

Ярты донъя урап ҡайтҡан һалдатмын,
Тик мылтыҡ һәм патронташты һалғанмын...
Йәшел фляга сиселгән билемдән,
Төтөн еҫе килә һаман шинелдән.
Мәскәүемдән Берлинғаса еттем мин —
Аҙмы юлды түштә шыуып үттем мин?!
Күпме ҡором һәм туҙанға батманым?
Ә намыҫты тап тейеүҙән һаҡланым.
Үҙем әйтмәйем, ишеттем кешенән:
«Ватан риза, һалдат, һинең эшеңдән...»

2

Хәҙер инде бер ташсымын мин үҙем,
Таштан һалам тыныс өйҙәр нигеҙен.
Күр, һуҡҡанда, сүкешемдән ут оса,
Ә кем әйтер — түгел был тип һалдатса?
Именлекте һаҡлаусы бер һалдатмын,
Мылтыҡ ҡуйып, ҡулға сүкеш алғанмын.
Төтөн еҫе килә һаман шинелдән...
Килмәһен тик шул еҫ диңгеҙ еленән,
Йәш һәм ҡайғы күрмәһен тип бар кеше,
Көн-төн тынмай төҙөүсенең сүкеше,
Таштар ватҡан шул төҙөүсе мин үҙем,
Таштан һалам тыныслыҡтың нигеҙен.

*1946*

## ТУЙҘА УҠЫЛҒАН ШИҒЫР

Мин килтерер инем бүләк итеп
Был табынға гөлдәр туғайын,
Тоноҡ шишмәләрҙең сылтырауын,
Һауалағы һабан турғайын.

Мин килтерер инем ҡояштың да
Эҫе нурҙар сәскән бер мәлен,
Һәм килтерер инем еләҫлеген
Аҡ болоттан төшкән шәүләнең.

Мин килтерер инем...
Дуҫ-иштәрем,
Һеҙҙең өсөн бит был киң йыһан!
Әйтерһең, ер оҙаҡ йылдар буйы
Туйҙы ҡотларға тип йыйынған.

Ошо тошта икәү йөрәгенең
Бергә атлап киткән юл башы.
Мин теләйем йөрәк дуҫтарымдың
Бәхет, шатлыҡ булһын юлдашы.

Хәтәр елдәр иҫә ҡалғанда ла
Күңелдәрҙе һөрөм япмаһын.
Һәм йөрәктәр тәүге күрешеүҙең
Йылылығын мәңге һаҡлаһын.

*1947*

* * *

Мәңгелек улы – ҡояш гел янһа ла,
Ҡырҡ эшем ҡырылып ятып ҡалһа ла,
Һуғыр аҡтыҡҡы сәғәтем бер заман,
Һәм мин китеп тә барырмын донъянан.
Яҡтырыр һаман хәүефһеҙ был йыһан,
Ҡуҙғалмаҫ хатта ерҙәге бер туҙан.

Һуңғы юлға дуҫтар алып китерҙәр,
О, мин наҙлы, күтәреп үк илтерҙәр.
Күтәрһендәр! Тау хәтлеге йөктәрҙе
Тере саҡта эһ тә итмәй күтәрҙем.

Ергә киске эңер төшөп килгәндә,
Дуҫтар ҡайтып ултырырҙар бүлмәмдә.
Ҡараңғыла, һөртмәйенсә күҙ йәшен,
Берәү шул саҡ тыныс ҡына өндәшер:

– Арабыҙҙан тик бер кеше юғалды –
Ниндәй тулы донъя нисек буш ҡалды...

*1948*

## УТ СӘСЕП УҘҘЫ АТАКА

Ут сәсеп уҙҙы атака, ҡан түгеп,
Төштө атынан һикереп бер егет.

Теҙләнеп, ул яҙғы йәшел үҙәндә
Ҡылыстағы ҡанды һөрттө үләнгә.

Ҡараштары күк сәскәгә туҡталды,
Ҡылысына таянып, ул тын ҡалды.

Әллә күрҙе Уралының күктәрен,
Әллә күрҙе һөйгәненең күҙҙәрен.

Ҡапыл гөлгә тамды бер ысыҡ тамсыһы...
Менде атҡа, һелтәне ул ҡамсыһын.

Һәм тағы ла ут-төтөнгә күмелде,
Ә ул егет миңә оҡшаш түгелме?

*1948*

## БЕҘҘЕҢ КОЛХОЗ ҠЫҘҘАРЫ

Күргәнегеҙ бармы, дуҫтар,
Йәмле Дим буйын?
Ап-аҡ күбеккә төрөнә
Яҙҙарын муйыл.

Бында таңда йүкәләрҙән
Татлы бал тама,
Елдән арып, томбойоҡтар
Йоҡоға тала.

Турғай йырлай. Башаҡ шаулай
Баҫыуҙар һайын,
Талғын ел менән серләшә
Тауҙарҙа ҡайын.

Күкрәктәрендә, атылып, атылып,
Яна йондоҙҙар.
Йондоҙ ни ул? Бына беҙҙә,
Исмаһам, ҡыҙҙар.

Ҡояшта янған йөҙҙәре –
Баҡыр ҡатыш ут.
Күҙҙәр – ҡарағат, ҡараҡ
Башҡа ерҙә юҡ.

Сәстәре хас төн йә етен,
Йә ҡара болот.
Толомдары ишелеп төшә,
Ебәктәй булып.

Ирендәр – тау сейәһенең
Тулышып бешкәне.
Ҡаштар – ҡоҙғон ҡанатының
Ҡыйылып төшкәне.

Тын алғанда күкрәктәре –
Аҡ тулҡынмы ни?

Күҙ һалғанда ҡараштары —
Ах, упҡынмы ни?

Билдәреме? Юҡ, билдәре
Нескәнән түгел.
Беҙҙең яғымлы ҡыҙҙарҙа
Бик нескә күңел.

Ҡыҙыу көндә, эш өҫтөндә
Уйнаталар ут,
Былдай уңған, йылдам ҡыҙҙар
Башҡа ерҙә юҡ.

Ниндәй генә егеттәр һуң
Хайран ҡалмаған?!
Күпме йөрәкте ғүмерлек
Ялҡын ялмаған!

Тура әйтәм, ҡолағың һал
Минең кәңәшкә;
Егет аҫылы булмаһаң,
Безгә эйәләшмә.

Етәр, Кәрим, көнләшерҙәр
Юҡһа йондоҙҙар.
Йондоҙ ни ул? Бына беҙҙә,
Исмаһам, ҡыҙҙар!

*1948*

## ТАУ ЕЛЕ ТУРАҺЫНДА БАЛЛАДА

1

Ер тамам йәшел кейемен
Кейенеп бөткән саҡта,
Ә йәштәр һабан туйҙарын
Ашҡынып көткән саҡта,

Беҙ алтау бер звенонан –
Өс ҡыҙ менән өс егет
(Ҡыҙҙары йәшен ташындай,
Егеттәр һөлөк кеүек).

Сығып киттек яландарға
Йәй йәмен күрер өсөн.
Ғәмһеҙ ҡолондар шикелле,
Иркенләп йөрөр өсөн.

Үттек шишмәле туғайҙан
Уҙҙыҡ баҫыуҙар буйлап,
Япраҡтарҙан таждар үреп,
Гөлдәрҙән бәйләм йыйнап.

2

Беҙҙең уйһыулыкты тауҙар
Ураткан төркөм-төркөм.
– Әйҙәгеҙ, – тине бер егет, –
Күрәйек тауҙар күркен!

– Әйҙәгеҙ, – тинеләр ҡыҙҙар, –
Ҡарайыҡ тауҙар күркен!
– Ә тауҙар, – тине егеттәр, –
Дала ҡыҙҙарын күрһен.

Ҡаялар, упҡындар аша
Беҙ үткән юлдар хәтәр.

Ләкин күтәрелдек тауҙың
Иң бейегенә ҡәҙәр.

Түбәндә беҙ йәшәгән ер –
Шунда төбәлгән ҡараш.
Күпме нур! Ергә моғайын
Ғашиҡ булғандыр ҡояш.

Ана беҙ сәскән бойҙайҙар –
Сиге юҡ йәшел ялан.
Беҙ ултыртҡан баҡсаларҙы
Сәскәләр һырып алған.

Йылға буйлап теҙелеп киткән
Беҙ һалған яңы өйҙәр.
Гүйә, өйҙәр: «Ҡунаҡ булып
Беҙгә килегеҙ!» – тиҙәр.

Каруан, каруан болот төҫлө,
Йөрөй колхоздың малы,
Унда яңғырай ҡоштар йыры,
Унда кешеләр даны.

Уйһыуҙар буйлап һуҙылып
Тап-таҡыр юлдар үткән,
Юл булмаһа, ерҙә кеше
Нисек йәшәр ине икән?!

Алтаулап баҫып торабыҙ,
Түбәндә якты йыһан.
Гүйә, йыһан бар байлығын
Беҙҙең далаға йыйған...

Әллә беҙ был көнгә тиклем
Ерҙә йөрөмәнекме икән?
Күҙ күргәнде күңел менән
Әллә күрмәнекме икән?!

3

Һәм бик ҡапыл иҫеп ҡуйҙы
Тауҙарҙың һалҡын еле.
Беҙ һиҫкәнеп киттек. Берәү:
— Ә тауҙар күрке? — тине.

Яуап биреүсе булманы.
Шаулашып алтау бергә,
Ҡанатлы ҡоштай, атылдыҡ
Үҙебеҙ торған ергә:

— Тауҙар үҙҙәре далаға
Һоҡланып торһон әйҙә!
...Беҙ алтау шулай йәм күреп,
Йөрөнөк ошо яйҙа.

*1948 йыл, ғинуар*

## СТАЛИНҒА

Ауыл эргәһендә йәшел тау бар,
Түбәһенә ҡуна аҡ болот,
Ошо тауҙың йөрәгенән, ҡайнап,
Шишмә сыға, тоноҡ, саф булып.

Һәм шул шишмә, йылғаларға ҡушылып,
Ағып китә алыҫ диңгеҙгә...
...Йәшел тау буйында улығыҙ йәшәй,
Һүҙ әйтергә теләй ул һеҙгә:

— Йөрәгемдә йөрөтәм Һеҙгә, атай,
Һүнмәй торған һөйөү ялҡынын.
Минең ошо керһеҙ тойғоларым,
Һөйөүенә ҡушылып халҡымдың.
Барып етһен ине, тим, Һеҙгә,
Шишмә еткән кеүек диңгеҙгә.

*1948*

## УКЫТЫУСЫМА

*Нәби Усмановҡа*

Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм —
Тәү башлап мәктәп ишеген
Үрелеп асҡан көнөм.

Һин, уҡытыусым, шундай наҙлап
Ҡараның күҙҙәремә.
Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдың
Бәләкәс йөрәгемә.

Һин һөйләнең бәхетемдең
Аҡлығы тураһында,
Тыуған илдәге халыҡтың
Шатлығы тураһында.

Һин етәкләп мендең мине
Тауҙарҙың бейегенә,
Алып киттең далаларға,
Диңгеҙҙәр киңлегенә...

Һин яратырға өйрәттең
Һәр бер биҙәген ерҙең,
Йондоҙло зәңгәр күктәрҙең
Серҙәрен асып бирҙең.

Яҡтыртты һәр бер көнөмдө
Ҡояш
Нурҙары менән,
Һин яҡтырттың күңелемде
Ленин уйҙары менән.

Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм
Һәм тормошом китабының
Тәү битен асҡан көнөм.

*1948*

# ҠАРА АЛТЫНЛЫ ЕРҘӘ

## НАРЫШ АУЫЛЫ

Бында мин тәү тапҡыр...
Ишетмәнем
Тын кистәге йырын Нарыштың,
Мин күрмәнем уның баҫыуында
Һеркә осорғанын арыштың.

Бик борондан ҡарап торған
Нарыш
Күктәрендә болот аҡҡанын,
Тик белмәгән ере ҡуйынында
Девондарҙа алтын ятҡанын.

Ә Кремлдән минең еремәсә
Килеп еткән даһи уйҙары,
Ошо уйҙар бөгөн, факел булып,
Яҡтырталар Нарыш буйҙарын.

Вышкаларға килде ҡыҫыҡ күҙле,
Киң күңелле Нарыш улдары.
Ҡулдар ҡара, ләкин уйҙары аҡ,
Иркен һәм хаҡ барыр юлдары.

Мин күрмәнем ошо баҫыуҙарҙа
Һеркә осорғанын арыштың.
Ҡала үҫә бында. Йәп-йәш ҡала
Ҡосағына ала Нарышты.

## ТӘРӘНЛЕКТӘР РАЗВЕДЧИГЫ

Хазина эҙләп, хыялды
Үтте бала саҡ:
Ул үҫер, серле байлыҡты,
Шикһеҙ, табасаҡ...

...Ул ташлап китте ҡаланың
Шаулы уттарын
Һәм ҡалдырҙы ҡарт әсәһен,
Йәшлек дуҫтарын.

Яратты дала киңлеген
Тынғыһыҙ күңел.
Ә бит ҡырҙа турғай менән
Гөл генә түгел...

Ҡояш яндырҙы йөҙҙәрен
Һәм елдәр киҫте;
Боҙон ватып, шишмәләрҙең
Һыуҙарын эсте.

Туғанлашты ул ҡыш менән,
Дуҫ итте яҙҙы,
Күрешер өсөн йәшендәргә
Ҡулдарын һуҙҙы.

Күктәр унының түбәһенә
Йондоҙ түшәне.
Таштар мендәр булды уға,
Тауҙар – түшәге.

Ятһынып ҡасманы унан
Ҡоштар, кейектәр,
Юлдаш булды үҙе кеүек
Сая егеттәр.

Ете диңгеҙҙе кисмәне,
Тауҙар гиҙмәне,

Тыуған ер тәрәнлегенең
Серен эҙләне.

Тапты ул йылҡылдап торған
Ҡап-ҡара алтын.
Әйтте: «Улыңдың бүләген
Ал, туған халҡым!»

Ул усаҡ үрләткән ерҙә
Яҡты ут яна.
Кешеләр ул үткән эҙгә
Таштан юл һала.

Тарала унын йырҙары
Сикһеҙ яланға.
Разведчик булып бара ул
Килер заманға.

Артында яңы ҡаланың
Балҡый уттары.
Ҡарт әсә алыҫ. Янында –
Яҡын дуҫтары.

## НЕФТСЕЛӘР ТАБЫНЫ

Ҡыҙып бара нефтселәр табыны...
Бер мискә буш. Тәгәрәтәләр яңыны.

Өҫтәл оҙон, ләкин табын түңәрәк,
Һый иҫәпһеҙ – йәндәреңә ни кәрәк.

Залда яҡты, гүйә, күктән ай төштө.
Өҫтәл – гүйә, байлыҡҡа мул ер өҫтө,

Иҫкә алып һәр ҡунаҡтың талабын,
Аяҡсылар ҡоя бирә шарабын.

Һәм урындан тора ҡапыл сал кеше,
Тост күтәрә: «Туғаным!» – тип өндәшеп.

Өҫтәлдең арғы башында йәш егет
Күтәрелә, оялсанлығын еңеп.

Сал ҡунаҡ ул килгән алыҫ Бакуҙан –
Танып була күҙендә нур балҡыуҙан.

Егет йөҙөнә йылмайыу тарала –
Шулай киң йылмаялар тик далала.

Бар ҡунаҡтар бер минутҡа тын ҡала,
Ҡарт һәм егет күрешергә ҡуҙғала.

Улар килә, һәр аҙымды баҫҡанда,
Ҡара ҡыҙыл шарап уйнай бокалда.

Бына осраша улар тап уртала.
Ҡарт егеттең ҡулбашына ҡул һала.

«Туғаным, – ти, – дуҫтарым! – ти сал ҡунаҡ, –
Ҡайҙа бар ил беҙҙең илдән байыраҡ?

Беҙ астыҡ тәрән девондар ҡатламын
Һәм йөрәктә тәрән дуҫлыҡ ятҡанын

Һынап белдек...» – Ҡунаҡ тынған арала,
Бөтә залда гәлсәр сыңы тарала.

Шау-гөр килә нефтселәр табыны –
Иҫке Баку ҡулын ҡыҫа Яңының...

...Тышта эңер. Тышта уттар ҡабына,
Нурҙар төшә алыҫ диңгеҙ яғына.

Уттар, уттар, үтеп төнгө бушлыҡты,
Яҡтырталар ерҙә оло дуҫлыҡты.

*1949*

## ПАРТИЯНЫҢ РЯДОВОЙЫ

Ерҙә төтөн, ерҙә ялҡын
Саҡтарҙа,
Мылтыҡ алып, беҙ теҙелдек
Сафтарға.

– Рядовой Кәрим, өс аҙым
Алға сыҡ,
Авангардта барасаҡһың,
Юл асып!

Шулай тине миңә ул көн
Командир,
Шулай тине партия һәм
Тыуған ер.

Шунан бирле авангардтан
Ҡалманым,
Мине ут та һәм пуля ла
Алманы.

Ҡаным тамһа, ул үсемде
Яндырҙы,
Үсем янһа, ул көсөмдө
Арттырҙы.

Командир ҙа булдым кәрәк
Заманда...
...Партиямда мин рядовой
Һаман да.

Эй партиям, һинең тере
Тамсың мин,
Ел-дауылда һүнмәй торған
Саткың мин.

Һинең ташсың, һинең ябай
Уҡсыңмын,
Сафтарыңда тынмай торған
Йырсыңмын.

Йөрәгемдә саҡырыуың:
«Алға сыҡ,
Бар һәр ваҡыт авангардта,
Юл асып!»

*1949*

## БАШАҠТАР ҺӨЙЛӘШӘ

Юл үтә, кескәй юл,
Бағыуҙар сигенән,
Тулҡына тулышып
Өлгөргән игендәр.

Уң яҡта «Ар»ҙыҡы,
Һул яҡта «Дим»деке –
Бөтәһе илдеке,
Бөтәһе минеке.

Алтын нур емелдәй
Башаҡтар өҫтөндә.
Һәм бында ураҡтар
Ялтырар тиҙ көндә.

Көлтәләр тәгәрәр
Урғыстар артында...
...Ә мин йыр башлайым
Бойҙайҙар хаҡында.

...Яҙғы күк ҡыҙара,
Яҡтыра барғанда,
«Дим»дән дә, «Ар»ҙан да
Килделәр ҡырҙарға.

Сәскестәр теҙелеп,
Ер иңләп уҙҙылар,
Һарғылт тос орлоҡтар
Тупраҡҡа сумдылар...

Улар ер ҡуйынында
Йылынып шыттылар, –
Таң менән ҡыҙарып
Баш төртөп сыҡтылар.

Күрҙеләр ҡояшты
Һабаҡтар, уянып,

Ә нурҙар уларҙы
Йәшелгә буяны.

Ҡапланды бар ялан
Тик йәшел төҫ менән,
Ел үтте йүгереп
Ҡыяҡтар өҫтөнән.

Ә унан... йәй буйы
Ҡояшҡа һыйынып,
Дауылда сайҡалып,
Ямғырҙа ҡойоноп,

Таңдарын биҙәнеп,
Көндөҙөн гөрләшеп,
Үҫтеләр бойҙайҙар
Нимәлер серләшеп.

Наҙланы уларҙы
Тулы ай яҡтыһы,
Бик йомарт һыйланы
Ерҙең иң яҡшыһы.

Күр, ниндәй шат улар –
Сәләмләй бер-береһен,
Беләләр йәшәүҙең,
Үҫеүҙең ҡәҙерен...

Тыңлағыҙ, башаҡтар
Нимәлер ҡыштырлай, –
Яланды тултырып
Күңелле йыр йырлай.

Дан йырлай үҙҙәрен
Үҫтергән кешегә,
Донъяның иркенә,
Кешенең эшенә.

Татлы еҫ бөркөлә
Башаҡтар өҫтөндә,

Һәм бында һуккыстар
Геүелдәр тиҙ көндә.

Тулы, тос бөртөктәр
Тоҡтарға һалынып.
«Дим»гә лә, «Ар»ға ла
Каруандар ағылыр.

Тын ҡалыр яландар
Юлдың һәр яғында.
Ләкин йыр бөтмәне
Бойҙайҙар хаҡында.

Алыҫта, алыҫта
Бик оло ҡала бар.
Күгендә яҡуттан
Йондоҙҙар яналар.

Ошонда ҡауыша
Бөтә дуҫ халыҡтар.
Ошонда ҡауыша
Илдәге шатлыҡтар.

Тап ошо ҡалала,
Ҙур байрам сағында,
Осрашыр бойҙайҙар
Күргәҙмә залында.

Йыһандан ҡунаҡтар
Саҡырыр күргәҙмә.
Һоҡланып төбәлгән
Меңдәрсә күҙҙәргә

Карамаҫ оялып,
Ҡарамаҫ моңайып
Халҡымдың көс түгеп
Үҫтергән бойҙайы.

*1949*

## АЛЫҪ БЕР ҠАЛАЛА...

Алыҫ бер ҡалала ята инем
Мин дауалап һуғыш яраһын,
Ярам ауыр, ләкин белә инем
Ғүмер йондоҙомдоң янаһын.

Тышта буран ине. Быялаға
Һалҡын яһай яҙҙың һүрәтен,
Ошо мәлдә яҙғы тыуған ерҙе,
Дуҫтарымды килде күрәһем.

Хәстәрһеҙ ел, шаян малай кеүек,
Ҡағып китте тышҡы ишекте.
Был ел түгел, әсәм телендәге
Сәләм ауаздарын ишеттем.

Ҡапыл ҡыуаныу ҙа ауыр икән:
Мин юғалта яҙҙым һушымды –
Ҡар ҡаплаған юлдар минең янға
Алып килгән иҫке дуҫымды!

Яуап көтмәй ҡат-ҡат һорау бирәм:
– Ни эш бөтөрәләр өфөләр?
– Ниндәй шатлыҡ менән йәшәй халыҡ?
– Нимә яҙа шағир кешеләр?..

Таныш ҡырҙарының иркен күргән
Ҡош шикелле, йөрәк талпына...
...Ул, тоғонан алып, тыныс ҡына
Бер һауыт бал ҡуйҙы алдыма.

Һәм бүлмәлә ҡапыл йәй аңҡыны –
Ә беҙ инде икәү аҡланда
Ултырабыҙ төҫлө, ҡарт йүкәләр
Тәлгәш-тәлгәш сәскә атҡанда.

Бал ҡорттары ҡуна күҙәнәккә,
Турғай сәсә шатлыҡ моңдарын,
Елдәр алып килә ҡыҙҙар йырын,
Алып китә салғы сыңдарын...

...Ҡапыл тышта дауыл уйнап үтте.
Быялаға һуҡты бөртөк ҡар.
Юҡ, барыбер буран аръяғында
Минең тыуған ерҙең яҙы бар!

Тыуған илдең
Ул йөрәге өсөн
Юҡ буранлы төнө, юҡ ҡышы,
Сөнки ҡояш батмай торған илдә
Яҙға оҡшаш халҡым тормошо.

*1949*

## ДУҪТАР ҺОРАУЫНА ЯУАП

Йыйылған дуҫтар әйтәләр:
– Бөгөн бит тыуған көнөң,
Был донъяла йәшәүеңә
Утыҙ йәш тулған көнөң.

Хәтерлә ошо табында
(Иҫәпләмәй бөгөндө)
Бөтә көндәр араһында
Иң бәхетле көнөңдө.

– Дуҫтарым! Бөтә ғүмерем
Ус төбөндәге һымаҡ.
Тик ҡайһы көн иң бәхетле,
Ҡайһы көнөм яҡтыраҡ,

Әйтеү ауыр. Ҡайҙа ул көн?
Тәү ҡояш күргәндәме,
Ҡултыҡҡа әлифба ҡыҫып,
Мәктәпкә кергәндәме?

Беренсе ҡат байраҡ тотоп,
Урамдан үткәндәме,
Хыял-ҡыҙҙың «һөйәм!» тигән
Һүҙен ишеткәндәме?

Ҡайҙа ул көн? Тыуған илгә
Ант биргән яландамы,
Атаканан һуң окопта
Партбилет алғандамы?

Иң һуңғы ҡайнар пуляны
Дошманға атҡандамы,
Илгә ҡайтып, бураҙнаға
Аяҡты баҫҡандамы?..

...Һәм булды яралы көйө
Көрәштә сигенгәндәр,
Фронтташ дуҫ ҡәберенә
Йәштәрем түгелгәндәр.

Булды яҡын дуҫымдың да
Хыянат иткән сағы,
Саф эҙҙәремә дошмандың
Бысраҡтар һипкән сағы.

Булды ҡайғы татығаным,
Булды яфа күргәнем,
Тик булманы өмөтһөҙ көн,
Юҡ бәхетһеҙ көндәрем!

*1949*

## МИНЕ ТАҒЫ ТАШЛАП КИТӘҺЕҢ

«Мине тағы ташлап китәһең...» – тип
Бойоғаһың оҙатып ҡалғанда.
Йәшәп булмай гел ҡауышып ҡына
Походлы һәм дауылы заманда.

Океандарға сыҡһа, караптар ҙа,
Дауыл үтеп, ҡайтһа ярына;
Караптарҙа китһәм, кире ҡайтам
Тыуған илгә, һинең яныңа.

Самолеттар алып менһә мине
Болоттарҙың өҫкө яғына,
Ваҡыт еткәс, тағы ергә төшәм,
Ергә, тимәк, һинең янына.

Ҡайҙа булһам да, мин илем менән
Һәр бер һулышымды алғанда, –
Һин дә ошо илдең ҡыҙыһың бит,
Бойоҡмасы оҙатып ҡалғанда.

*1949*

## АЙЫРЫЛЫУ ЮҠ

Айырылыу юҡ һөйгән йөрәктәргә,
Беҙ ҡауыша алмаҫ ара юҡ,
Һағыныу бар, ләкин күңелдәрҙә
Әрнеп торған утлы яра юҡ.

Вокзалдар бар,
Вагон янында бар
Минуттың иң ҡыҫҡа саҡтары,
Бөтә юлдар буйлап килә торған
Бар шатлыҡлы сәләм хаттары.

Һәр урында тормош ҡосаҡ йәйә,
Ҡул һуҙалар миңә ысын дуҫтар;
Сөнки ерҙә, һөйөү менән бергә,
Илгә бағышланған хеҙмәт бар.

Арабыҙҙа ҡояш балҡып тора,
Елдәр иҫә, яман ел түгел;
Еребеҙ киң, ләкин кешеләрҙе
Аҙаштыра торған ер түгел.

Һағыныу бар, алда күрешеү бар.
Күңелдәрҙә утлы яра юҡ.
Бер Ватандың балалары өсөн
«Айырҙы бит!» тиер ара юҡ.

*1949*

## ЛӘЙСӘН

Бөтә ил буйынса ләйсән үтте...
Әле бына, тик таң алдынан,
Һуңғы болот ҡанат ҡағып китте, —
Ынйылары сәселеп ҡалдылар.

Алпан-толпан баҫып уҙып барам
Быуҙар бөркөп ятҡан ҡыр аша.
Ҡояш ҡалҡа. Алтын ерем минең
Алтын офоҡтарға тоташа.

Мин, эйелеп, нисәнсе ҡат инде
Тупраҡ алып ҡыҫам усыма,
Ерҙең ҡара һуты беләк буйлап
Ағып төшә терһәк осома.

Табаныма йәбешә йылы балсыҡ,
Ишетәм төҫлө уның һүҙен дә:
«Һин йәшәрттең мине, һин, игенсем,
Миндә тамыр йәйсе үҙең дә!»

Бөрөләрҙең хуш еҫтәрен тоям
Үткән саҡта урман буйҙарын.
...Ошо яҙғы аяҙ көн шикелле
Тыныс булһа ине уйҙарым...

Уйҙар тыныс түгел. Ишетһәм дә
Ерҙең иркен һулыш алғанын,
Онота алмайым тыуған тупрағымдың
Ут эсендә дөрләп янғанын.

Онота алмайым: ерем менән бергә
Фашист пуляларын татыным,
Дошман йөҙөн һүрәттәрҙән түгел,
Прицел аша ҡарап таныным.

Онота алмайым шаулы океандың
Алыҫ төнгө ярҙы йыуғанын,
Аҡ күңелле ҡара Робсон илен
Ҡара йөрәктәрҙең быуғанын.

Һәм ҡушырға теләй улар һөрөм
Океандың саф, тыныс еленә,
Мәйет еҫе таратырға теләй
Донъяға һәм минең илемә.

...Миндә башҡа хыял. Ул яуыздар
Өлгөргәнсе ерҙе яндырып,
Еткерербеҙ бөтә планетаға
Тыныслыҡтың ләйсән ямғырын.

*1950*

## ҺАҒЫНҒАН ҠЫҘ ЙЫРЫ

Таңдар һайын йырлап уҙам
Дим буйы һуҡмағынан.
Йүкәләргә ҡарайым да
Һөйгәнемде һағынам.

Быйыл иртәрәк
Сәскә ат, йүкәм.
Тап шул ваҡытта
Йәремде көтәм.

Йүгерә-йүгерә йыйыр инем,
Бешһә бөрлөгәндәре.
Күңелемә ҡанат булды
«Онотмам» тигәндәре.

Иртәрәк өлгөрөр
Ҡыҙыл бөрлөгән.
Тап шул саҡта бит
Ҡайта бергенәм.

Мин, һағынһам да, түҙәм бит,
Кәкүктәр, бойоҡмағыҙ.
Туғай гөлдәре аша ҡайтыр иркәм,
Сәскәләр, ҡойолмағыҙ.

Туғай гөлдәрен
Тотам ҡулыма,
Йүгереп сығырмын
Унның юлына.

*1950*

## БӘЛӘКӘЙ ДУҪТАРЫМА

Үтте йылға буйҙарының
Гөрләп торған саҡтары,
Һүнде күктәргә үрләгән
Пионер усаҡтары.

Урман тынды, япраҡтарға
Һарғайып алтын тамды,
Дуҫтары киткәс, һағынып,
Ҡоштар ҙа телдән ҡалды.

Бөгөн ошо саф иртәлә
Һәр бер ерендә илдең
Мәктәп юлдарына сыҡты
Кескәй дуҫтарым минең.

Һәр береһе шат. Бөтәһендә
Хыялдың иң татлыһы,
Ниәттәрҙең иң яҡшыһы,
Уйҙарҙың иң яҡтыһы.

Белмәйем, ҡайһы кем булыр —
Ҡалалар төҙөүсеме,
Алмалар үҫтереүсеме,
Диңгеҙҙә йөҙөүсеме?

Тик беләм. Бөйөк Ватандың
Гүзәл килере улар.
Уларҙы коммунизмға
Илтәләр яҡты юлдар.

Беләм, яныр был йөрәктәр
Ҙур йәшәү уты менән.
Сөнки улар — ленинсылар,
Большевик тоҡомонан.

Күҙҙәрем менән, дуҫтарым,
Һеҙҙе оҙатып ҡалам
Тик йөрәгем айырылмай —
Ул һеҙҙең менән һаман.

*1950*

## КӨҘ

Шып-шым ғына, шым ғына
Оса ҡайын япрағы.
Япраҡтарына ни булған,
Бөтәһе лә һап-һары?

Һары, һары, һап-һары
Инде урман юлдары.
Йым-йым итә юлдарҙа
Һары ҡояш нурҙары.

Ерҙә кәкүк саҡырмай,
Күктә йәшен сағылмай,
Көҙ килеп етте бына
Тын ғына, тып-тын ғына...

*1951*

## ЮҠ, МИН УНЫ ҮЛГӘН ИТЕП ЙЫРЛАМАМ

Ауырлыҡта ҡайғының юҡ тиңдәше.
Йөрәктәрҙән атылып сыға күҙ йәше, –
Таш тауҙары ҡысҡанға ер күкрәген,
Шулай урғый тәрәндән тау шишмәһе.

Баштар эйҙек беҙ Уның табутына.
Көйгән ирендәр был әрнеү утына.
Әйтәләр: «Юҡ, оҙатмайбыҙ донъянан...» –
Юҡ, мин Уны үлгән итеп йырламам!

Тимәк, ҡояш яҡтырта икән ер йөҙөн,
Шаулай икән донъяның бар диңгеҙе,
Йыһан буйлап тынмаҫ ел иҫә икән,
Төнгө күктә йондоҙҙар яна икән,
Дымлы ерҙә гөл япраҡ яра икән.
Тимәк, тынмай аға икән йылғалар, –
Юҡ, мин уны үлгән итеп йырламам!

Туктаны тибеүҙән батыр, ҙур йөрәк.
Тик үлемдән үлемһеҙлек көслөрәк,
Иртәгәбеҙ яҡты икән бөгөндән,
Тимәк, йәшәр ул теренән тererәк.
Беҙ, кешеләр, – Уның тиң балалары,
Йөрәктәрҙең уңалмаҫ яралары.
Беҙ, кешеләр, – Партия һалдаты беҙ,
Мәңге тоғро булыр биргән антыбыҙ.
Беҙҙең менән булыр даһи һәр заман, –
Юҡ, мин Уны үлгән итеп йырламам!

*1953, март*

## КӨҘ ҺӘМ ҺӨЙӨҮ ТУРАҺЫНДА

1

Ямғыр ҡатыш һибелә талғын ғына
Ағастарҙың һары тәңкәләре.
Тик, күшеккән ҡоштар төркөмөләй,
Ошо көҙҙөң һуңғы сәскәләре
Ҡыуаҡ-ҡыуаҡ ултыра түтәлдәрҙә...
Ерҙе маныһ һағыш төҫтәренә,
Һарғайып көҙ килгән мәлдәрҙә
Мөмкин түгел уйлау тик Кешегә
Йоҡо,
    ҡартлыҡ,
        үлем тураһында.
Бер ул ғына бары күрә шунда:
Бар донъяла
    япраҡ менән бергә
Орлоҡ төшә дымлы ҡара ергә.

2

Айырылышыу көнө, әйтерһең, шул
Донъянан йәй киткән миҙгел ине.
(Мөхәббәт һәм һағыш тулы күңел
Дауыл уйнап торған диңгеҙ ине.)
Япраҡ шауы ине өндәшкәнең,
Көҙгө ямғыр ине күҙ йәштәрең.
Ҡыш аръяғындағы яҙ шикелле,
Йыраҡтаһың хәҙер һин шул тиклем.
Ләкин мәкер һәм хыянат еле
Үтә алмаҫ беҙҙең араларҙан,
Сөнки, күкрәп, тағы килер яҙҙар,
Сөнки яратаһың һин, һөйөклөм.

*1953*

## ӘЙТЕЛМӘГӘН ҺҮҘ

Айырылышыу минутында
Гел шулай тиһең миңә:
– Әйтә алмай ҡалдым һүҙемдең
Иң кәрәклеһен генә.

Йәшәлмәгән ғүмер бит ул –
Әйтелмәгән шул һүҙең,
Алдағы өмөт, яныуҙар,
Мөхәббәтең һәм үҙең.

Мәңгегә оҙатҡанда ла
Һин әйтһәң ине миңә:
– Ҡалды шул, ҡалды һүҙемдең
Иң кәрәклеһе генә.

*1953*

## ГӨЛГӨНӘГӘ ХАТТАР КИЛГӘН

*(йыр)*

Гөлгөнәгә хаттар килгән
Ишембай ҡалаһынан, –
Әллә төшкән самолеттан,
Әллә ҡош ҡанатынан.

Табаҡ-табаҡ хаттар яҙып,
Ҡулы талғандыр инде,
Ғишыҡ уттарында егет
Дөрләп янғандыр инде.

Янһын әйҙә, көйһөн әйҙә,
Хаттар яҙһын гел генә,
Гөлгөнәбеҙ үҙе лә бит
Арабыҙҙа бер генә.

*1953*

## ЙӘШ НЕФТСЕЛӘР ЙЫРЫ

Ҡыҙҙар: Алтын микән, көмөш микән
Гармунының телдәре?!
Гармун теле шуны әйтә, –
Ни уйлай күңелдәре.
Егеттәр: Егеттәр күңеле күн түгел,
Унда йондоҙ күп түгел.
Бер генә бит иң яҡының,
Әммә көслө ялҡыны.
Ҡыҙҙар: Абау-абау хәтәр икән,
Яндырмаймы ялҡыны?
Егеттәр: Ана шул ялҡын иретә
Ерҙең ҡара алтынын.
Бергә: Пар һандуғастай һайраһын
Гармуныңдың телдәре,
Дәртләндер ҙә, ашҡындыр ҙа,
Ярһыт та күңелдәрҙе.

*1953*

## *ЕВРОПА – АЗИЯ*

### КЕРЕШ

Йөрәгенең аҫтындағы
Йән эйәһе
Ҡыймылдаһа,
Йоҡолағы әсә ҡапыл
Һиҫкәнә лә
Күҙен аса.

Күҙен асһа: яҙғы ер тын.
Төн тын ала
Ойоп ҡына.
Тик йондоҙҙар бейеклектә
Берсә яныП,
Берсә тона –
Гүйә, кемдер йондоҙҙарҙы
Бер-бер артлы
Сөйөп тора.

Яҙғы ер тын. Тик ҡарағыҙ
Һеҙ донъяға
Әсә һымаҡ:
Иң үткер күҙ – әсә күҙе,
Иң зирәге –
Унын ҡолаҡ.

Әсә тоя: ер ситендә
Бомбаларҙың
Шартлауынан
Ҡалтырана ул йондоҙҙар,
Ҡалтырана
Бөтә йыһан.

Төн тын ала. Яҙҙың еҫен
Ергә һибә
Ел һаҡ ҡына.
Әсә һиҙә: ошо елдә
Ҡан еҫе лә
Бар саҡ ҡына.

Бына шуға әсә ҡапыл
Һиҫкәнә лә
Күҙен аса,
Йөрәгенең аҫтындағы
Йән эйәһе
Ҡыймылдаһа.

Тап ошо мәл ватандаштар
Был һулышһыҙ,
Ләкин тере
(Асылырға торған бөрө)
Кеше өсөн
Иген игә,
Һоҡландырғыс китап яҙа,
Матур-матур
Кейем тегә.

Сал ғалимдар, күҙ ҙә йоммай,
Күктәрҙә таң
Һыҙылғансы,
Ашығалар бөтә сирҙе
Бөтөрөргә
Ул тыуғансы.

Ә тегендә – донъябыҙҙың
Тынсыу, яман,
Бер ерендә –
Был сәғәттә «Аҡ йорт» тигән
Тамуҡтың
Иң төбөндә

Ҡарт Ғазраил ҡаҡса ҡулын
Ҡандан алып,
Ҡанда йыуа.
Сәтләүектәй был йөрәккә
Атыр өсөн
Ҡурғаш ҡоя.

Шуға әсә, ҡапыл ярһып,
Донъя алдына
Килеп баҫа,
Йөрәгенең аҫтындағы
Йән эйәһе
Ҡыймылдаһа.

Кешелек тә тап ошолай
Һиҫкәнде һәм
Яуға сыҡты
Һаҡлар өсөн үҙ балаһын –
Тыныслыҡты.

## БӨТӘҺЕ ЛӘ ЙӘНЛЕ БЫНДА...

Һарайҙарҙың еҙ тотҡалы
Ишектәрен асҡаным бар,
Келәм йәйгән ап-аҡ мәрмәр
Баҫҡыстарға баҫҡаным бар.

Йөрөгәнем бар меңәр лампа
Балҡып торған залдарында...
...Һәм бар бер өй, тәпәш кенә,
Тымыҡ Димдең ярҙарында.

Ошонда мин ҡаршыланым
Көндәрҙең иң яҡтыларын,
Ошо өйҙә ишеттем мин
Өндәрҙең иң татлыларын.

Атай йорто! Алдарында
Муйылдар суҡ үреп тора,
Ә ул кескәй дүрт тәҙрәнән
Бар донъяны күреп тора.

Өрлөгөнә атай ҡулы
Буйҙан-буйға тамға һуҡҡан, –
Тимәк, бында ҡайғыһы ла,
Шатлығы ла инеп сыҡҡан.

Ләкин өйҙә һис нәмәгә
Тап төшмәгән, тут теймәгән, –
Бөтәһе лә йәмле бында,
Йәнле бында.

Асыҡ тәҙрә төптәрендә
Тирбәлә гөл алҡалары,
Әллә улар баҡсалағы
Миләүшәгә баш ҡағамы?

Сәскәләрҙән сәскәләргә
Күсеп йөрөй ҡара иңкеш,
Ул ҡырҙарҙың сәләмдәрен
Тапшырырға килгән, имеш.

Түрендәге ҡаҙауҙарҙа
Гел сигелгән таҫтамалдар, –
Ем-ем иткән һәр биҙәктә
Әсәйҙәрҙең күҙ нуры бар.

Кескәй сәғәт ниндәй етеҙ,
Келт-келт йөрөй, тыңлап ҡара,
Әйтерһең дә, ул бер үҙе
Заманаа алып бара.

Бөтәһе лә йәмле бында,
Йәнле бында.

Ә мөйөштә үткән яуҙа
Еңеп ҡайтҡан ҡылыс тора,
Бер ул ғына ҡыны эсендә
Тыныс ҡына.

## БЕР ЙЫР ЙЫРЛАНҒАН

Бер йыр йырланған был өйҙә,
Бәпесте йоҡлатҡанда,
Шул йыр көйләнгән, улдарҙы
Ҙур юлға оҙатҡанда.

Әсәйем йырлаған уны,
Әсәйем-алтынҡайым,
Асығыраҡ ишетәм моңон,
Алыҫҡа китҡән һайын:

«Осҡондарҙан ялҡын була.
Бел һин, бала,
Осоп китһә осҡон, һүнеп,
Саңға ҡала.

Тамсыларға тамсы тамһа,
Була диңгеҙ,
Тамсы ситкә сәсрәп китһә,
Кибә бик тиҙ.

Ҡыйыу баҫҡан тура эҙҙән
Ғаләм атлай,
Ҡыйыш баҫҡан яңғыҙ эҙҙе
Үлән ҡаплай.

Кеше ҡырҙа сәскә күрһә,
Маҡтап үтә,
Һуҡмаҡтағын шәйләмәй ҙә
Тапап үтә.

Сәскә булһаң, «күрһендәр!» тип,
Юлға сыҡма,
Осҡон булһаң, «күккә ашам!» тип,
Яңғыҙ осма.

Тамсы булһаң, һин тереһең
Тик диңгеҙҙә.
Һис бер үлән үҫмәһә ине
Һинең эҙгә.

Ғүмерең яуынһыҙ ғына
Елләп үтмәһә ине.
Донъя һинеке, сөнки мин
Донъяға бирҙем һине».

Бер йыр йырланған был өйҙә,
Бәпесте йоҡлатҡанда,
Шул көй көйләнгән, улдарҙы
Ҙур юлға оҙатҡанда.

## ШУЛАЙ БАШЛАНА ЙӘШӘУ

Сыға ир бала ҡураға,
Имгәкләп, тупһа аша,
Ергә тейгәс табандары,
Тып итеп тәпәй баҫа.

(Тормоштоң ғәҙел законын
Ул да аңлай шул килеш, —
Ерҙә йәшәгәндә кеше
Имгәкләмәҫкә тейеш.)

Сәпсек балаһы шикелле,
Бәүелеп тора ул башта
Һәм, кескәй күҙҙәрен ҡыҫып,
Ҡулын һуҙа ҡояшҡа.

Гүйә, кояшты саҡыра:
«Төш һин бында, төш ергә,
Үлән өҫтөндә йүгереп
Уйнап йөрөрбөҙ бергә».

Эй ҡолон! Әллә ҡайҙарға
Талпынып барыр кеүек,
Алтын ҡанатлы ҡоштарҙы
Үрелеп алыр кеүек.

Сеү! Ҡапҡаға килә бала
(Ә ара ниндәй йыраҡ!).
Атлаған һайын аяҡтар
Баҫа ышаныслыраҡ.

Ҙур юлға килтерә уны
Ҡуранан сыҡҡан һуҡмаҡ,
Һәм ҡапыл йыһан сиктәре
Киңәйеп китә һымаҡ.

Донъяла иң тәүге юлын
Тап шулай башлай кеше.
Тап шулай башлана уның
Йәшәүе – бөйөк эше.

Һәм ғүмерлек йылы биреп
Уға ике күҙ баға:
«Донъя һинеке,
сөнки мин
Бирҙем һине донъяға...»

## ТАҢДЫҢ КИЛЕҮЕ

Аҡ батшалы алыҫ ҡара көндә
Тәүләп усаҡ яҡҡан ауылым.
Һөйрәгән ул быуат юлдарынан
Яҙмыш арбаһының ауырын.

Шунда ултырып барған Ташбулат бай,
Ильяс муллаларҙың тоҡомо.
(Уларға тап минең тыуған йылым
Тарих приговорын уҡыны.)

Минең ҡанды йөрөткән кешеләрем! –
Күпме улар михнәт сиккәндәр,
Балсыҡ өйҙә донъя көтөп бөтмәй,
Таш зыяратҡа инеп киткәндәр.
Ә бит кешеләрем әжәл түгел,
Ғәжәйеп бер таңды көткәндәр.

Һәм ул килде, килде иңләп-буйлап
Бөйөк Россияны – Ватанды.
Этәс түгел, «Аврора»ның залпы
Хәбәр итте бында ул таңды.

Нур бирҙе ул кешеләр ҡарашына,
Яҡтылығын – ағын һыуҙарға,
Бар йылыһын бирҙе дымлы ергә –
Мин шаһитмын бына шуларға.

## МИН ШАҺИТМЫН

Мин шаһитмын, алпан-толпан атлап,
Тәү урамға сыҡҡан яҙымдан –
Ауылымдың яңы ғүмер юлы
Йөрәгемә уйылып яҙылған.

Йыһан өсөн был – бер һулыш ҡына,
Ауылым өсөн – бөтөн бер заман.
Быуат үҙе олоғайған һайын,
Нисек йәшәрҙеләр донъялар!

Мин шаһитмын.
Емереп, айҡап уҙҙы
Баҫыуҙарҙың кәкре ыҙанын
Машиналар. Тамырын киҫте йылдар
Дошманлыҡтың, әсе нужаның.

Ҡарайһың да, әллә юҡмы тиһең
Алтын һары диңгеҙ сиктәрен;
Мин именлек һулышы итеп һиҙәм
Бешкән игендәрҙең еҫтәрен.

Кеше ҡулы шундай көслө булғас,
Ҡаҡ тауҙарға менде имәндәр,
Киң далаға килгән ҡул өҫтөнә
Ботаҡтарын талдар эйгәндәр.

Кеше бөйөк. Бәлки, шуғалыр ҙа
Кесерәйгән кеүек ҡаялар.
Юлдар хәҙер ҡыҫҡа тойолалар,
Сөнки улар һәләкәткә түгел,
Ә йәшәүгә алып баралар.

Көндөҙ яҡтылыҡҡа туймаған яҡ
Балҡый ярып төндәр ҡараһын,
Ҡаплай алмай шомло ҡараңғылыҡ
Кистәр менән таңдар араһын.

Һағынып ҡайтҡан һайын, урап сығам
Ауылымдың атлы урамын,
Өйҙәренән шатлыҡ эркелгәнен
Йәнем-тәнем менән тоямын.

Европаны гиҙҙем, Азияны,
Күп күрҙем мин матур, яҡшыны.
...Беләм, ауылым илдәрҙә бер түгел,
Ләкин ерҙә ул иң яҡыны.

**ТУПРАҒЫМ, ҺАУАМ, ҺЫУҘАРЫМ**

Тупраҡтар сем-ҡара бында,
Тупраҡ һутланып тора,
Бураҙнаға ҡояш төшһә,
Ялтырап, янып тора.

Кисен уға орлоҡ сәсһәң,
Таң менән шытып сыға,
Ер хаҡында шуға әйтәләр:
«Тот та икмәккә һыла».

Бойҙай үҫә. Күл ҡамышы
Тулҡынланып торған һымаҡ;
Башаҡтарын бөртөк-бөртөк
Гәрәбә һырыған һымаҡ.

Торналар килеп киткәнсе,
Ағас япраҡ һипкәнсе
Тупраҡты биҙәп өлгөрә
Нисә мең төр гөл генә.

Аяҡ баҫһаң, үләндәре
Торғаны бәрхәт инде,
Шул тупраҡта тыуып үҫеү
Үҙе бер бәхет инде.

* * *

Һауалар зәп-зәңгәр бында,
Һауалар шундай бейек.
Шул күк аҫтында олатай
Йәшәгән башын эйеп.
Ә бит башың эйелмәһә,
Һауалар шундай бейек.

Күпме ҡош был киңлектәргә
Талпынып осоп менә,
Улар менә бары ерҙе
Һағыныр өсөн генә.

Һауала мең төрлө моң бар,
Юҡ матурлыҡҡа тиңе,
Әгәр ерем зарлы булһа,
Күгем шат булмаҫ ине,
Шатлығының юҡ тиңе.

* * *

Һыуҙар тонок, татлы бында,
Һыуҙар тау ярып сыға,
Мәңгегә һүнгән таштарҙың
Һалкынын алып сыға.

Ә ниндәй шифалы дымдар
Бөркөлә шишмәләрҙән!
Бер ләззәттән мәхрүм йәшәй
Был һыуҙы эсмәгәндәр
Шарлауык шишмәләрҙән.

Уйһылыкта якты күлдәр
Йә тулкына, йә тына,
Дымға һыуһап килгән елдәр
Тулкындарға һыйына.
Ә унан болот йыйырға
Китә дала буйына.

Ер-һыуҙың сәләмен алып
Йә уралып-уралып
Ҙур донъяға ағып сыға
Минең тымык Димгенәм,
Ал сәләмдәр, Иҙелгенәм!
Ал сәләмдәр, Илгенәм!

## ӨС ЙӨҘ ЕГЕТ

Канға мансылып тыуған бер иртәне,
Дошман үткәс тапап илдең сиктәрен,
Кыскырҙы Ватан изге яу оранын,
Шул оранды кабатланы Уралым.
Күкрәп килде ул өн беҙҙең яктарға:
— Башкорттарым, атланығыҙ аттарға!
Ошо хәтәр сәғәт, хәтәр көндө беҙ,
Өс йөҙ егет — бер ауылдан көллөбөҙ —
Өс йөҙ ат эйәрләнек иң даңдарын,

Баҫҡан саҡта осҡон уйнатҡандарын.
Оҙатты ил. Атайҙар баш эймәне,
Һөйгән йәрҙәр: «Ах, ҡалабыҙ!», – тимәне,
Илап-илап бирмәнеләр анттарҙы,
Тик маңлайҙарын үптеләр аттарҙың.
Йәш күрһәтмәй ҡатып ҡалды әсәйҙәр,
Сөнки шундай йола йәшәй Рәсәйҙә:
Егет китһә яуҙарға хаҡ эш менән,
Сылатмайҙар униң юлын йәш менән.
Үҙе ҡалһа, аты ҡайта бер урап,
Аты ҡалһа, даны ҡайта яңғырап.
Шундай улдар үҫтерҙеләр Рәсәйҙә
Шул дүрт йылда сәс ағартҡан әсәйҙәр.
Өс йөҙ инек – бер ауылдан көллөбөҙ –
Ҡайтып ишек ҡаҡманы йөҙ иллебеҙ.
Тупраҡ булды уларға яу яланы,
Тик булманы хәбәрһеҙ юғалғаны.

### ҺАБАН ТУЙЫ

Пожарниктар ғына ҡалды ауылда –
Көллө ғаләм бөгөн Ҡыҙҙар тауында.

Өйөрөлөп ҡунаҡ килгән һәр яҡтан:
«Куштирәк»тән, «Авангард»тан, «Маяк»тан.

Көрәшселәр күренеп ҡала Ураҙҙан,
Бишҡайындар килеп етер бер аҙҙан.

Дим үренән бер ҡурайсы Мөлкәрәм,
Бер фотокор йөрөп ята өлкәнән.

Ҡабул иткәс саҡырып яҙған хаттарҙы,
Яҡын иткәс шундай йыраҡ яҡтарҙы,

Килеп сыҡҡан хатта Йәрми Сәйете,
Үҙе уйнай, үҙе әйтә бәйетен.

(Ҡарт, тимәгеҙ, дәрте барға ни етә,
Ҡарт булһа ла йәш ҡыҙҙарҙы бейетә.)

Һөнәре бар күрһәтә үҙ һөнәрен,
Һөнәрһеҙҙәр күрһәтәләр үҙҙәрен.

Монтер Морат, йоп-йомшаҡ атлап ҡына,
Йөрөп ята ҡырын тейәп саҡ ҡына.

Тегендәрәк комбайнсы Баҙамша,
Күҙ бәйләп, көршәк ватырға маташа,
Халыҡ шуны ҡылып тора тамаша.

Конюх Шәриф тоҡ эсендә юрғалай,
Бағанаға менеп бара бер малай.

Ә кәнсәлә счет һалыусы Мырҙабай,
Кәпәс болғап, ҡеүәт бирә: «Йә, давай!»

Түп-түңәрәк ҡарт-ҡороноң табыны.
– «Етәр», тиң дә, әллә, ҡорҙаш, тағымы?

Тел тейҙерер урын да юҡ ҡымыҙға,
Әбейҙәрҙең эше еткәс ҡумыҙға.

Яҙ байрамы бөгөн беҙҙең ауылда,
Һабан туйы гөрләй Ҡыҙҙар тауында.

Суҡтай итеп кейенеп алған барсаһы,
Ебәге лә, сатины ла, парсаһы,

Ул таҫмалар, ул селтәр, уҡалары,
Ҡыҙҙарының аҫыл таш алҡалары –

Йөҙ төрлө төҫ йымылдап янып тора,
Ҡарағанда күҙ яуын алып тора.

* * *

Ҡояш яғы төшлөктән уҙып бара,
Һабан туйы ҡыҙғандан-ҡыҙа бара.

Ебәрҙеләр юлға сабыш аттарын,
Йүгереүселәр төрәләр балаҡтарын...

Көрәшселәр, дәрәжә һаҡлап ҡына,
Аҙымдарҙы һалдырып һалмаҡ ҡына,

Майҙан уртаһына сыға бер заман.
Майҙан аса башлай ике уҙаман.

Бына ҡапыл сәмләнеп алып китә.
Ҡул сабыуҙар, һыҙғырыу, тауыш китә.

Килеп сыға тап баяғы Мырҙабай,
Бер эйелә, бер сүгәләй: «Һал, давай!»

Һәр егеттең иҫәбе бил бирмәҫкә,
Һәр егеттең иҫәбе еңдермәҫкә,

Ниңәлер, ең төрөп, ҡарттар алыҫтан
Әйтәләр: «Былар торғаны арыҫлан!»

– Ҡара, ҡара, ниндәй сая был алыш!
– Береһе – дейеү, береһе бының Алпамыш!
– Көс-кеүәттең бөтәһе ерҙән инде,
Кеүәтте, тим, йәлләмәй биргән инде!

* * *

...Минең дә бит батыр дуҫым бар ине,
Уның өсөн киң майҙандар тар ине.

Биле уның һис ваҡыт ер күрмәне,
Йөҙө уның алышта тир күрмәне.

Урал күген бөркөт нисек буйлаһа,
Ағын һыуҙа суртан нисек уйнаһа,

Минең дуҫым шулай ине майҙанда.
Һорарһығыҙ: хәҙер һуң ул ҡайҙарҙа?

Ул баһадир баҫып тора эргәмдә,
Тик буш еңе бәүелә ел өргәндә.

Һуғыш йотто шул еңдең эсендәген —
Ҡапыл бына семерләп китте тәнем.

Борсоулыраҡ аҡты, буғай, тим, уйым.
Кисерегеҙ. Бөгөнгө һабан туйын

Шатлыҡ менән, хәүефһеҙ үткәрәйек,
Ни мәҙәк бар, бөтәһен дә күрәйек.

Киттек ары. Унда йәштәр. Түңәрәк.
Түңәрәктә әйләнә бер күбәләк.

Күбәләк түгел, ҡыҙ бейей уртала,
Күҙҙәрендә ниндәй дәртле ут яна!

Һылыулығы ҡыҙҙың илдә бер, тимен,
Ниндәй бәхетле ул баҫҡан ер, тимен.

Бер әйләнеп, берсә ул осоп китә,
Берсә, гүйә, кемделер ҡосоп китә.

Күҙҙәрендә нур сәсеп, йүгереп үтә,
Егеттәрҙең йөрәген көйҙөрөп үтә.

Томбойоҡтай ҡай ваҡыт ойоп тора,
Керпектәрен күтәрмәй бойоҡ тора.

Һәм ҡапыл ҡыҙ шундай яҡты йылмая —
Хас йылмайып тыуғанмы ни донъяға.

Һылыулығын ҡыҙҙың илдә бер, тимен,
Ниндәй бәхетле ул баҫҡан ер, тимен.

* * *

...Бар ине, дуҫтар, минең дә һөйгәнем,
Ер йөҙөндә иң ҡәҙерле, тигәнем.

Һылыулығын һөйләргә һүҙем етмәй,
Күңелем тула, һөйләргә түҙем етмәй.

Һөйгәнемдең даны ҡанатлы ине,
Ә йырҙары һандуғас затлы ине.

Матурҙар ҙа уны – матур, тинеләр,
Батырҙар ҙа уны – батыр, тинеләр.

Һораһағыҙ: ниңә ул юҡ янында?
Уның ҡәбере зәңгәр Дунай ярында...

* * *

Ысын кешеләр, минең бар туғандарым,
Ерҙә бергә көн күреп торғандарым!

Дошман беҙгә тағы ут атмаҡ була,
Һабан туйын тағы таратмаҡ була,

Шат йырҙарҙы зарлы иттермәк була,
Башҡаларға хәҙер килтермәк була

Дуҫым менән һөйгәнемдең яҙмышын.
Туктатырға теләй заман ағышын.

Рөхсәт итмәм! Көрәшкә күтәреләм,
Тотоношоп ҡулға-ҡул һеҙҙең менән.

## ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ ТУРАҺЫНДА

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына, –
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе, япраҡ, аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны – бөйөк Рәсәй –

Шундай йәшел, юғары.
Нисә быуат шул япраҡты
Ҡайындан өҙмәк булып,
Боҙ һалҡынында туңдырмаҡ,
Утта көйҙөрмәк булып,
Нисә диңгеҙ аръяғынан
Ниндәй елдәр иҫмәгән,
Ниндәй йәшен уйнамаған.
Ниндәй ҡырау төшмәгән.
Шул япраҡты ашар булып,
Нисә төрлө ҡорт һырыған.
Ҡайһы «милләт», ҡайһы «дәүләт»,
Йә «өммәт» затлы булған.
Ғорур япраҡ өҙөлмәгән
Ғорур ҡайын — әсәнән,
Әсәһенең һуты менән,
Көсө менән йәшәгән.
Бөгөнгө яҙ килде илгә
Елдәр, дауылдар аша.
Ҡайындың шат япраҡтары,
Тыңла, нисек шаулаша!

* * *

Картаға ҡарап еремде:
— Бер япраҡ саҡлы, — тинем, —
Мин хайранмын киңлегеңә,
Башҡортостаным — илем!
Бер сигең Йайыҡ ярында,
Ыҡ буйында бер сигең,
Бөркөт ҡанатын талдырыр
Сал тауҙарың бар һинең.
Һиндә тормоштоң көрлөгө,
Донъялар именлеге,
Һиндә тауҙар ғорурлығы,
Далалар иркенлеге.
Һыуҙарың көмөш. Тупрағың
Торғаны алтын һинең,
Бар хазинаңдан ҡиммәтле
Бәхетле халҡың һинең!

* * *

Донъя картаһында ерем
Бер япраҡ саҡлы ғына,
Ә быуаттар төпкөлөнә
Ҡараһаң яҡшы ғына,
Ошо изге ерҙән уҙған
Күпме быуын яҙмышы —
Һауаларға ашҡан даны,
Һыуға һеңгән һағышы.
Был тупраҡҡа сәмле тарих
Ҡандар менән яҙылған,
Ҡаяларҙа ҡылыс эҙе —
Ташҡа тамға һалынған.
«Эйгән башты ҡылыс сапмай», —
Тиһә лә иҫке мәҡәл,
Баш эймәгән ғорур халҡым,
Теҙ сүгеп йәшәмәгән.
...Бик хәйерсе булған халҡым,
Тик хәйер һорашмаған,
Билгә ҡылыс таҡҡан, ләкин
Күршелә ил баҫмаған.
Кем уға ҡорал күтәрһә,
Шуны яуҙа тураған,
Дошманының атын һорап,
Затын һорап тормаған.
Кисәгең дә, бөгөнөңдәй,
Күңелемә яҡын минең,
Утты, һыуҙы кисеп үткән
Ҡаһарман халҡым минең!

## РОССИЯНМЫН

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россияның һыуын эскәнмен,
Сағылдарҙа имән нисек үҫһә,
Үҙ еремдә шулай үҫкәнмен.

Хаҡлымындыр, тимен, үҙемде әгәр
Сағыл имәненә оҡшатһам, —

Тамырҙарым бит дүрт быуат әүәл
Мәскәү менән барып тоташҡан.

Замандар бик хәтәр мәлдә Мәскәү
Дуҫлыҡ ауазымды ишеткән,
Һәм рус халҡы минең яҙмышымды
Үҙе яҙмышына иш иткән.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!
Биш ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ.

Рус һәм башҡорт юлда һәр саҡ юлдаш,
Табындаштар оло байрамда,
Яуҙа яуҙаш, дандаш һәм ҡәберҙәш
Изге һуғыш үткән майҙанда.

Салауаттың утлы ирендәре
Пугачевты үпкән сағында,
Беләм, миңә мөхәббәтең артҡан,
Рус туғаным, һинең ҡаныңда.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Совет Ватанының улымын.
Ниндәй яҡты бейеклектәренә бөгөн
Күтәреләм йәшәү юлының!

Күңелемдә минең көн сыуағы,
Күҙҙәремдә – ҡояш нурҙары,
Йөрәгемдә – мең йыл тотҡонлоҡто
Үтеп сыҡҡан өмөт йырҙары.

Ерҙә нисек мин ныҡ баҫып торам,
Ниндәй иркен алам һулышты!
Шуларҙың бит мин бөтәһе өсөн,
Рус туғаным, һиңә бурыслы!

Һин тәм бирҙең минең икмәгемә,
Һин тат бирҙең эскән һыуҙарға.
Ер йөҙөндә күпме халыҡтар йәшәй, –
Туған иттең мине шуларға.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!
Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ!

## ХАЗИНАЛАР ХАҠЫНДА ҺӨЙЛӘШЕҮ

Шыңғырап торған салт аяҙ ҡышҡы төн –
Һәр тауыш урап сығырлыҡ ер өҫтөн.

Күктең йөҙө иҫке йомаҡ инде хас:
Бәрәмәстәр уртаһында бер ҡалас.

(Әгәр йондоҙҙар батһа, шул саҡ бына
Булыр ине ай күктә бер тап ҡына.)

Тышта айлы һәм йондоҙло ҡышҡы төн,
Бәҫ селтәре солғап алған ер өҫтөн.

Биҙәкләнгән тәҙрәләрҙең өлгөһө,
Был – донъяның яҙҙы һағыныу билгеһе.

Йыһанды буйлап төн йөҙә яй ғына.
Бүлмәлә мин һәм ғалим бабай ғына.

Үҙе ап-аҡ ул нәҡ ошо ҡыш һымаҡ,
Ике йөҙ йәшәгән бөркөт ҡош һымаҡ,

Өҫтәлендә уның тау тоҡомдары –
Ерҙә нисә төрлө таш – шуның бары.

Ултырған ул күҙ текәп байлығына,
Әйтерһең дә, бар донъяһы шул ғына.

Тап ошолай ҡай ваҡыт хайран ҡала
Уйынсыҡтар янында сабый бала.

Ә мин, тәҙрә аша күреп күк ситен:
«Һауаларға зиннәт һибелгән!» – тинем.

Бабай хатта ҡымшанып та ҡуйманы,
Һаман бер көй аҡты, буғай, уйҙары.

Тик әйтте ул: «Күктәгеһе – күк эше,
Күктә түгел, ерҙә йәшәй бит кеше.
Ғүмер буйы мин ер серен эҙләнем,
Тәрән күрергә күнекте күҙҙәрем.

Туҡһан алты төр хазина бар унда,
Ә туҡһаны һинең тыуған Уралда.

Шулай булған хатта ул мең йыл элек,
Тик кешеләргә теймәгән игелек.

Сөнки иң аҫыл хазина ул заман
Беҙ йәшәгән ер өҫтөндә булмаған.
«Бәхет!» тиҙәр уны тик бер һүҙ менән,
Ләкин ҡиммәт ул донъяның үҙенән.

Кем ҡолатты ил иңенән тәхетте,
Кем килтерҙе был тупраҡҡа бәхетте,

Сығарма шуны һис ҡасан иҫеңдән.
(«Ил халҡы», – тип ҡабатлайым эсемдән.)

Күҙҙәреңде тултырып ҡара, уланым,
Бәхет тауы хәҙер һинең Уралың.

Башҡорт яғын кем әкиәт ише итте,
Ә үҙеңде хужа һәм кеше итте,

Һис ҡасан да онотма, уланҡайым!»
(«Партия», – тип эсемдән ҡабатлайым.)

Бабай һаман ҡымшанып та ҡуйманы,
Аҡты ла аҡты хазина уйҙары.

...Тышта аяҙ, сатнап торған ҡышҡы төн,
Йомшаҡ, яҡты нур ҡаплаған ер өҫтөн.

## ИҢЛӘНЕМ ДӘ, БУЙЛАНЫМ ДА

Иңләнем дә, буйланым да
Һине, Башҡортостаным,
Ҡай яҡтарыңа илтмәне
Юлдарымдың остары?!

Ләкин, юҡ, гиҙмәне һиндә
«Бәхет эҙләп бер башым».
Мосафир таяғы түгел,
Шат йыр булды юлдашым.

Бал ҡорттары нисек йыйһа
Туғайҙарҙа гөл балын,
Шулай алам һинән, илем,
Йырҙарымдың илһамын.

Игенсең бирһен йырыма
Башаҡтарҙың туҡлығын,
Ялҡында ҡорос ҡойоусың –
Саф ҡоростоң ныҡлығын.

Нефтсең бирһен йырыма
Девондар тәрәнлеген,
Ҡыҙҙарың тәүге һөйөүҙең
Ғүмергә һүнмәгәнен.

Йырға ҡушылһын ҡош моңо,
Балалар көлгән тауыш,
Тауҙарҙа күктең күкрәүе,
Күлдә шаулаған ҡамыш.

Иңләнем дә, буйланым да
Һине, Башҡортостаным,
Ҡай яҡтарыңа илтһә лә
Юлдарымдың остары,

Күрҙем мин хеҙмәт шатлығын,
Көндәрҙең именлеген,
Табындарҙың тығыҙлығын
Һәм күңелдәр киңлеген.

Халҡыма һөйөү йөрәккә
Ҡушылып үҫте минең,
Ошо һөйөү урғылды ла
Йырыма күсте минең.

## КРЕМЛГӘ КЕРГӘНДӘ

Мин штабҡа ингәнем бар
Бойға приказ көткән мәлдә,
Минуттарҙың ҡыҙғанлығы
Дөрләр сиккә еткән мәлдә.

Ул саҡ һинең ҡараштарың
Шундай үткер, осҡон һибә,
Хатта йөрәк тибешендә
Бармаҡтарҙың осо һиҙә.

Эстә дауыл, эстә ялҡын,
Тыштан шундай тыныс һиң һин,
Ҡороп ҡуйған граната һин,
Һурып алған ҡылыс һиң һин.

Бар тормошоң әйтә һымаҡ:
«Мин әҙермен бөтәһенә –
Кешегә хас батырлыҡҡа,
Батырға хас үлеменә!»

О, ғүмерҙе ғүмер иткән
Минуттарҙың бөйөк сағы!
Йөҙ тапҡырға артыҡ янып,
Мин кисерҙем һеҙҙе тағы.

Был алтын көҙ, был яҡты йөҙ
Алып килде мине бына
Сал Кремлгә – Партиямдың,
Державамдың штабына.

Һары ҡайыш билемдә юҡ,
Ә шулай ҙа мин һалдатмын.
Погондарым иңемдә юҡ,
Ә шулай ҙа мин һалдатмын.

Мин халҡымда, партиямда
Ял, срокһыҙ хеҙмәттәмен,
Шунда тоям, шунан табам
Йәшәү йәмен, йәшәү тәмен.

Ватанымдың һәр бойороғон
Үҙем өсөн изге күрәм,
Һәм шуға ла мин Кремлгә
Ныҡлы баҫып, ҡыйыу керәм.

## МИЛӘШ

Кремль эсендә, һул яғында ҙур ҡапҡаның,
Миләш үҫә, иркен йәйеп ботаҡтарын.
Яңғыҙ түгел бында ул, бар дуҫ-иштәре,
Һалҡын төньяҡ шыршылары – серҙәштәре,
Тирәһендә талғын ғына бәүеләләр
Ҡайнар көньяҡ сәскәләре – аҡ ләләләр,
Көҙ сыуағы. Ҡыҙыл булып бешкән миләш
Таш ҡоймаға һығылып төшкән тәлгәш-тәлгәш.
Тоҙаҡ оса, алтын сынйыр булып күктә,
Бөйөк Иван манараһын аша үтә.
Ҡараным да бында үҫкән шул миләшкә,
Уйым менән кире ҡайттым мин Киләшкә.
Ул яҡта ла күктәр зәңгәр, көндәр сыуаҡ,
Баш өҫтөнән тоҙаҡ оса, сынйыр һымаҡ.
Тыуған өйҙөң эргәһендә тап шул миләш
Кәртә аша һығылып төшкән тәлгәш-тәлгәш.
Ике яҡта иркен үҫә ике миләш –
Бер үк тупраҡ балалары – ике ҡәрҙәш.

## ЕВРОПА – АЗИЯ

Европа һәм Азияға
Был донъяны
Кем һуң бүлгән?
«Европа аҡ,
Ә Азия һары», – тигән,
«Европа көр,
Ә Азия арыҡ», – тигән?

Ысындан да
Ер йөҙөндә
Ундай һыҙыҡ була икән,
Ул бит бына
Ҡап уртаға
Йөрәгемде бүлеп үткән.
Сөнки Урал түбәһендә
Баҫып торам –
Тап уртала.

Ә йөрәкте шулай телеү
Ниңә кәрәк?
Бит барыбер
Уң яғы ла, һул яғы ла
Минең йөрәк,
Минең йөрәк.

Европанан Азияға
Елдәр иҫә,
Европанан Азияға
Болот күсә.
Самолеттар аша оса
Ошо сикте,
Бына поезд Европаға
Уҙып китте.

Мәҙәк итеп ҡарап торҙом
Кескәй генә ҡырмыҫҡаға:
Йөк күтәреп сығып бара

Азиянан
Европаға.

Ә һуң ҡояш, –
Ерҙе нисек тигеҙ нурлай,
Европаға, Азияға
Бүлеп тормай.
Ә бер аҙҙан йәйге ямғыр
Үтте һибеп,
Тамсылары бөтә яҡҡа
Төштө тигеҙ.

Шул арала,
Уҙа биргәс йылы ямғыр,
Европанан Азияға
Алтын күпер
Һуҙҙы йәйғор.

* * *

Ҡанат йәйгән
Самаһыҙ ҙур
Ҡошҡа оҡшай Урал тауы.
Ә Европа һәм Азия
Уның талмаҫ
Ҡанаттары!

Һис ни менән үлсәнелмәҫ
Мөһабәт ҡош
Үткән ара,
Сөнки ул бит мәңгелектән
Мәңгелеккә
Осоп бара.

Пар ҡанаттың киңлегендә
Минең ерем,
Минең илем. –
Алтын менән яҙыр тарих
Хеҙмәтенең
Бөйөклөгөн.

Уның теле –
Дуҫлыҡ теле,
Тиңһеҙлеккә юл ҡуймаңы,
Емерҙе ул
Материктар сигендәге
Таш ҡоймаңы.

Азияны Европаға
Итте туған, итте яҡын
Минең илем,
Минең халҡым.
Ул күтәргән маяҡтарға
Бөгөн яҡты
Нур тоҡанған.
Мәскәүемдән Ханойғаса,
Берлинғаса
Пхеньяндан.

Тимәк, инде планетаны
Шулай бүлеү
Ниңә кәрәк? –
Европа ла, Азия ла
Бер үк мейе,
Бер үк йөрәк.

Донъяла тик бар бүтән сик:
Тегендә – улар,
Был яҡта – беҙ.
Унда әле – төн.
Беҙҙә – көндөҙ.

Ул сик үтә Кореяның
Тәне буйлап,
Ҡамсы эҙеләй,
Ҡара булып,
Ул сик үтә Берлин аша,
Һарҡып торған
Яра булып.

Лондон аша, Париж аша
Уҙа ул сик.
Бара ул сик,
Вашингтон һәм Токионы
Урталайға
Яра ул сик.

Һәм ошо сик ҡарт донъяны
Ике яҡҡа
Бүлеп үтә —

Кисәге һәм иртәгәнең
Шул ыҙаны
Булып үтә.
Тегендә — улар, был яҡта — беҙ,
Унда әле — төн, бында — көндөҙ.
Ләкин шундай хәҡиҡәт бар
Ерҙә, тиҙәр,
Яҡтылыҡ ул ҡараңғыны
Еңә, тиҙәр.

Сөнки ҡояш бөтә яҡты
Тигеҙ нурлай,
Үҙ юлында саҡ ҡына ла
Туктап тормай

Беҙҙең ҡояш,
Беҙҙең яҡты.
— Мир — Туғанлыҡ, — тип әйтәләр
Беҙ күтәргән
Шул байраҡты.

*1951–1954*

## ҺИНЕҢ ТЫУҒАН ЕРҘӘРЕҢДӘ БУЛДЫМ

Һинең тыуған ерҙәреңдә булдым.
Ерҙәреңдә яҙҙың сыуағы.
— Һаумы, һөйгәнемдең бала сағы!
Һаумы, уның үткән һуҡмағы.

Бына, бәлки, уның иң тәү баҫҡан
Эҙҙәренә баҫып киләмдер,
Башым эйеп, бәлки, уға йәштәш
Ҡайындарға сәләм бирәмдер.

Рәхмәт һеҙгә, мәрхәмәтле тупраҡ,
Сәрмәсәндең яҡты һыуҙары,
Туғайҙағы гөлдәр, талғын елдәр,
Ай яҡтыһы, ҡояш нурҙары,
Рәхмәт һеҙгә!
Уны һеҙ үҫтергән,
Йөрәгендә һеҙҙең йылығыҙ,
Күңелендә һеҙҙең иркенлектәр,
Күҙҙәрендә һеҙҙең нурығыҙ,
Эйе, ул бит һеҙҙең ҡыҙығыҙ.

— Һаумы, йәшлек! — тим мин, —
Әле беҙҙең
Иҫкермәгән икән танышлыҡ,
Нисә йылдар айырылышып торғас,
Бына ҡайҙа килеп табыштыҡ.

Миңә гүйә әле ун һигеҙ йәш.
Һыу кисмәгән, утта көймәгән,
Ҡайғыларым ҡайғырылмағандар,
Шатлыҡтарға ҡул да теймәгән.
Гүйә, таңда төшкән ысыҡмын,
Талпынырға торған ҡошсоҡмон.

Ләкин беләмен мин бер бөрөнөң
Ике ҡабат сәскә атмауын,
Күпме ашҡынһа ла, бер тулҡындың
Ике тапҡыр ярҙы ҡаҡмауын,
Иҫкән елдең кире ҡайтмауын
Беләмен мин.

Ә тау итәгенән
Шишмә сылтырай көнөн дә, төнөн дә,
Ана ниндәй йәш ҡурпылар ҡалҡа
Буйға еткән ҡайын төбөндә.

Ҡыуанышып ҡоштар бала осора —
Ҡотлар инем, белһәм телдәрен!
Сәрмәсәндән ҡыҙҙар, көлөшә-көлөшә,
Һыуҙар ала бөгөп билдәрен,
Өҙөлә икән үҙәге кемдәрҙең.

Минең йөрәктә лә шул уҡ уй бит.
Ул һүрелмәҫ. Үҙем һүнмәһәм.
— Һаумы, беҙҙең йәшлек,
Ҡыҙ йәшлеге,
Ерҙең йәшлеге! — тип өндәшәм.

*1954*

## ӨСӨНСӨ КӨН ТОТАШ ҠАР ЯУА

Өсөнсө көн епшек ҡар яуа,
Өсөнсө көн тоташ, өсөнсө көн
Әрней минең иҫке бер яра.
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.

Тимер ярсыҡ – яра төбөндә.
Тимер ярсыҡ йөрөй тәнемдә,
Әйтерһең, ҡарт гонаһ эйәһе
Әйләнгеләп ҡуя ҡаберҙә.
Шуға күрә әрней ул яра.
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа...

Тимер ярсыҡ ниңә ҡуҙғала?
Ул да, ахры, әрнеп һыҙлана.

Руда көйө уны алыҫта
Ер ҡуйынынан эҙләп таптылар,
Туптар батшаһына һаттылар,
Рурҙа унан мина ҡойҙолар,
Ә Днепрола миңә аттылар.

Ҡандай ҡыҙыл ине таң нуры,
Таң ҡыҙартты үлән ысығын.
Икебеҙгә тейҙе бер юлы
Бер минаның ике ярсығы.

Береһе ҡалды сержант Фоминда
Текә яр ситендә ҡаберҙә,
Икенсеһе минең тәнемдә.
Ун ике йыл әрней шул яра,
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.

Ҡарҙар ирер, йылы ел иҫһә,
Ҡарҙар китеп барыр, яҙ килһә,
Бәлки, үсем кәмер дошманға
Тәнемдәге тимер ереһә.
Тынғы бирмәй миңә шул яра,
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.

*1955, март*

* * *

Өй артында ҙур ҡара таш ята.
Тамсы шуны, кәйефе килгәндә,
Тама-тама, ана, үтә тиште
Әллә биш-алты йыл тигәндә.

Ун алты йыл тоташ тырышам мин,
Күпме булды тилереп шашҡандар.
Мин барыбер тамсынан да көсһөҙ,
Һин ныҡыраҡ икән таштан да.

*1956*

* * *

Айырылышыу артыҡ оҙаҡ булды
Һәм бына беҙ тағы бергәбеҙ.
Бер-беребеҙҙең ҡайнар ҡосағына
Кире сыҡмаҫ өсөн кергәнбеҙ.

Ҡоро япраҡһың һин. Һәм мин һине
Утлы тыным менән яндырҙым.
Һин һыуһаған ерһең, ә мин ергә
Ҡойоп яуған эре ямғырмын.

Танһығыңды тиҙ үк ҡандырмауҙы
Ала күрмә, иркәм, үпкәгә.
Ямғыр ҙа бит ҡорғаҡһыған ергә
Яуа-яуа ғына үткәрә.

*1956*

* * *

Гөлнисаға дәштем мин ҡунаҡҡа:
«Ни йәм бар, — ти, — һинең өйөңдә,
Еләтте инде һалҡын түшәгең».
«Рәхәтләнеп ҡарап ятырһың, тим,
Кисә буяп ҡуйҙым түшәмен».

*1956*

## ТӨШ ВАҠЫТЫНДА ҮТКӘН ЯМҒЫРҘАНҺУҢ

Донъя менән ара һәйбәт ине, –
Кәйеф боҙошманыҡ юҡ менән.
Һыу менән дә татыу ғына булдым,
Бер сама дуҫ булдым ут менән.

Әллә донъя күңелен китмәҫ өсөн,
Әллә күнегеп кесе йәшемдән,
Ауыр сирҙәремде еңел тинем,
Ҡайғы булһа, эскә йәшерҙем.

Шуға әйттеләр: «Һинең йыр буйынса
Ерҙә үс тә, йәш тә юҡ һымаҡ...»
Мин аҡландым: «Һәр гөл уҡлы булмай,
Борма-борма булмай һәр һуҡмаҡ».

Донъя мине ошо йәшкә саҡлы
Иркәләне, ахры, самаһыҙ.
Ҡай саҡ кескәй эшем маҡтау алды,
Ҡай саҡ хатам ҡалды язаһыҙ.

Бөгөн бына һүрән күңелем.
(Үҙем һүрәндән дә түгелмен.)

Был шиғырҙы башламаҫ та инем,
Әгәр йөрәк талап итмәһә,
Йөрәк талап итмәҫ ине, бәлки,
Бына әле генә, төш еткәндә,
Анау ямғыр үтеп китмәһә.

Дауылланып, күкрәп болот килде,
Тетрәп торҙо дала буйҙары.
Йәшен йәшенләне.
                    Ә ямғыры? –
Ул һибәләп үтте ни бары.

Ошо мәлдә, шиғырҙарым, һеҙҙе
Берәм-берәм алдым хәтергә.
Ил ҡырына ниңә һеҙ ҙә шулай
Һаран һибелдегеҙ хәҙергә?

Ҡойоп яуыр ямғыр килер бит ул,
Тиҙ килерме, әллә оҙаҡмы?
...Шулай ҙа мин анау болот менән
Ярты ғүмеремде оҙаттым.

*1956*

* * *

Йөҙҙәреңә ҡыйып ҡарай алмайым,
Ә үҙемде ҡыйыумын тип алдайым.
Ҡарағаным бар мин аҫыл нур-ташҡа,
Нәҡ түбәлә янып торған ҡояшҡа.
Бәхет менән осрашҡан бар йөҙгә-йөҙ,
Үлем менән ҡарашҡан бар күҙгә-күҙ.
Тимәк, матурлыҡ барынан өҫтөндәр,
Матурлыҡ – ул үҙе һинең төҫөңдәр.
Бына шуға ҡыйып ҡарай алмайым.
Юҡҡа үҙемде ҡыйыумын тип алдайым.

*1956*

## ӨМӨТ

Беҙ ҡауышҡан көндө һуғыш сыҡты,
Туйҙан яуға киттем мин ул көндө.
Тау ҡәҙәрле ҡайғы ҡалдырҙым да
Алып киттем барлыҡ өмөтөңдө.

Һин ике һүнеп тоҡанғанһың, –
Ике тапҡыр үле хәбәре алғас.
Өмөтөң һаман ҡалған
өсөнсөгә,
Мине ҡаршыларға,
яу туҡтағас.

*1956*

## ДУҪ ТУРАҺЫНДА КҮҢЕЛҺЕҘ ХИКӘЙӘ

*Назар Нәжмигә*

Бер дуҫым бар минең Өфөмдә,
Шул дуҫым бар йөрәк төбөмдә.

Табышманыҡ беҙ ул дуҫым менән
Башҡа бәлә төшкән сағында,
Танышманыҡ (еңел кәйеф менән)
Һый һәм шарап тулы табында.

Бер тупраҡҡа тәүләп аяҡ баҫтыҡ,
Бер тамырҙан сыҡҡан ҡуш талдай;
Бер төбәктән киттек беҙ ҡалаға,
Бер оянан осҡан ҡоштарҙай.

Вуз йылдары. Булған ваҡыттарҙа
Ашай инек беҙ бер ҡашыҡтан.
Кеҫәләр буш – күңел тулы өмөт, –
Хәсрәт ҡурҡа ине шатлыҡтан.

Унан яуға киттек. Ут-һыу кисеп,
Урап ҡайттыҡ алыҫ яҡтарҙы;
Үлем беҙгә, йыға һуҡмайынса,
Тик тамғалар һалып ҡайтарҙы.

Ғүмер, ағын һыуҙай, аға торҙо,
Сәстәргә лә тәүге сал төштө,
Беҙ һаман да икәү бергә булдыҡ,
Тамырҙаш шул ике тал төҫлө.

Һәр шатлыҡтан түбә күккә тейҙе,
Тигеҙ бүлдек ҡайғы күргәндә.
Мин сирләһәм, оҙон төндәр буйы
Ул ултырҙы минең эргәмдә.

Инеү менән минең балаларҙы
Алып һөйә ине бишектән,

Беренсе ул урын бирә ине,
Минең әсәй инһә ишектән.

Оҙатып ҡала, ҡаршы ала ине,
Сыҡһам юлға, ҡайтһам юл йөрөп;
Беҙҙә һауыт-һаба шалтыраһа,
Килеп етә ине йүгереп.

Был юлдарҙы уҡып һәр кем әйтер:
– Дуҫлыҡ шундай булғас, бик һәйбәт!
Ләкин ҡай саҡ матур, ҙур һәйбәтте
Аяҡ салып йыға бер ғәйбәт.

...Дуҫтың начальнигы яһанылар
Эш буйынса мине бер заман.
Шунан һуң да эш эш көйө ҡалды,
Дуҫ дуҫ көйө ҡалды. Ул һаман

Оҙатыр булды, сығып ҡаршы алды,
Китһәм юлға, ҡайтһам юл йөрөп.
Өйгә ҡайғы йәки шатлыҡ керһә,
Беренсе ул килде йүгереп.

Әүәлгесә минең бәләкәсте,
Килһә, алып һөйҙө бишектән.
Беренсе ул тороп урын бирҙе,
Минең әсәй инһә ишектән.

Ҡапыл бер көн ғәйбәт һөрән һалды:
– Асыҡ ауыҙ булыу ярамай!
Фаш итергә кәрәк, арабыҙҙа
Боҫоп йөрөй икән ялағай!

Утыҙ яҡҡа китте шул сыҡҡан һүҙ
Бер бәндәнең утыҙ тешенән.
Ҡушылдылар уға үҙ-үҙҙәрен
Әҙәпле тип йөрөгән кешеләр.

Аҙым һайын шулар быш-быш килде:
— Теге түрә. Бынһы ялағай...
Юғарыла баш сайҡанылар:
«Абайламай ҡалдыҡ. Ай-ай-ай!»

Шул көндәрҙә дуҫым менән икәү
Яуыз яман телдән төшмәнек;
Йә, әйтегеҙ инде, йә, әйтегеҙ,
Беҙ һуң ниндәй ғәйеп эшләнек?

Шау-шыу тынды. Бәлки, берәү әйтер:
«Шундай дуҫлыҡ һүнһә, күңелһеҙ».
Ундай ғына елгә ҡоларға беҙ
Тамыры ҡороған ағас түгелбеҙ.

Беҙ шундай уҡ. Ләкин дуҫтың яҡты
Күҙҙәренә төштө ҡара тап.
Гүйә, тоноҡ ағын һыу төбөнә
Услап ырғыттылар ҡара таш.

Ошо дуҫым йәшәй Өфөмдә —
Әүәлгесә йөрәк төбөмдә.

*1956*

* * *

«Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде», — тиһең.
Теләктәрең, эйе, хаҡ һымаҡ.
Ләкин мин бит бөтә ғүмерем буйы
Бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ.

Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул,
Бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ,
Ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә
Йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.

*1956*

## КАВКАЗ МЕНӘН ХУШЛАШЫУ

*Рәсүл Ғамзатовҡа*

Уралымда инде ҡара көҙҙәр,
Ер өшөйҙәр, ҡарҙы һағынып,
Бында платандарҙың түбәһенә
Тик һары ел үткән ҡағылып.

Ул һарылыҡ – йәшел япраҡтарға
Яңы ҡунған алтын саң төҫлө.
Ул һарылыҡ – һинең сәстәреңдә
Үтә йәшләй кергән сал төҫлө.

Бөтәһе лә һине хәтерләтә.
Тауҙар... диңгеҙ... ҡарап туйғыһыҙ;
Тауҙар һинең кеүек тыныс, уйсан.
Диңгеҙ һинең кеүек тынғыһыҙ.

Ағастарын һығып, емеш бешкән,
Теҙелеп-теҙелеп бешкән, етешкән.
Улар, гүйә, һинең шиғырҙар, –
Һәр береһендә күпме ер йылыһы,
Күпме ҡайнар ҡояш нуры бар!

Бөгөн бына һинең ерең менән, –
Тимәк, һинең менән хушлашам.
Монар алған тауға, күк диңгеҙгә
Бер ҡарайым әле, исмаһам!

Кавказ, Кавказ!.. Бөтә һының менән
Сыҡмаҫ өсөн индең хәтергә,
Бына шуға, боролоп ҡарағас та,
Телем бармай «хуш!» тип әйтергә.

*1956*

* * *

*Раузаға*

Күпме йылдар инде йөрөтәмен
Һине йөрәгемдә,
Йөрәгемде ҡаты сәнсеү алды
Ҡапыл үткән төндә.

Әллә ауыр ҡайғың бармы һинең?
Әллә бармы шигең?
Ә мин ҡурҡтым, юғалтам тип һине,
Йөрәк ҡуйһа шиңеп.

*1956*

## *ВЬЕТНАМ ЯҘМАЛАРЫ*

### ВЬЕТНАМҒА КИЛЕҮ

Ун өс көн килдем мин, ун өс төн,
Юл үттем, ер буйлап – ун өс мең.

Килдем мин һалҡын ҡыш яғынан,
Шыршылар унда ҡар ябынған;

Ә бында ергә орлоҡ сәсәләр,
Зәйтүндәр бында аҡ сәскәлә.

Ун өс көн килдем мин, ун өс төн,
Юл үттем, ер буйлап – ун өс мең.

Күңелде ҡараһам тикшереп...
Әйтерһең, индем мин күршегә,
Ни бары кәртә аша һикереп.

### ХАНОЙҘА КҮЛ БУЙЫНДА УЙЛАНЫУҘАР

Бысаҡ алып бүлдем ҡап уртаға
Мин бер алманы.
Шатландырҙым уйнап йөрөгән
Ике баланы.

Дошман ҡулы ҡылыс менән сапҡан
Илде уртаға.

Күпме күҙҙән, Нам Бо*, һиндә хәҙер
Ҡанлы йәш аға.

О, кешелек! Ниңә юл ҡуяһың
Яуыз ҡулдарға
Алма кеүек планетаны
Шулай турарға?

Бүлгеләргә Ерҙе
ҡан дошманға
Беҙ рөхсәт итһәк,
Бүлә алмабыҙ балаларға
Алма һәм икмәк.

**ҠАР**

Ҡояш китмәй түбә өҫтөнән,
Саҡматаштар ирей эҫенән.
Беҙ торабыҙ пальма төбөндә,
Суэнь әйтә:
«Һеҙҙә, тегендә,
Ергә, тиҙәр, хәҙер ҡар яткан,
Ҡар ниндәй ул?»
Ни тип аңлатам?

— Ҡар ул, Суэнь, фил һөйәге төҫлө,
Шәкәр төҫлө, хатта ағыраҡ,
Тик аҡлығы һинең тештәреңдән
Ҡайтыш булыр булһа аҙыраҡ.

— Ҡар ул, Суэнь, зәйтүн ағастары
Сәскә ҡойған һымаҡ һибелә.
Тәүге ҡар яуғанда беҙҙең яҡта

* Нам Бо — Көньяҡ Вьетнам

Күптәр ғашиҡ була (һине лә
Ситләп үтмәҫ ине мөхәббәт).

Шуға беҙҙә туйҙар ҡыш була,
Ҡай бер ҡышты бигерәк йыш була.

– Ҡар ул, Суэнь, һинең ҡулдар һымаҡ,
Һинең ҡулдар шундай һалҡындар.
Ә бит һыуыҡтарҙа ерҙе йылыта
Ошо ап-аҡ, йомшаҡ, һалҡын ҡар.
Ҡуйһаң ине йөрәк өҫтөнә,
Суэнь, кескәй һалҡын ҡулыңды, –
Тойор инем йөрәк йылыңды.

## БАМБУК ҺЫМАҠ ҺИН, СУЭНЬ

Суэнь, Суэнь, йәй иленең ҡыҙы!
Һин йәш бамбук һымаҡ нескәһең,
Лотос һымаҡ сафһың, әйтерһең дә,
Ғүмер буйы тик нур эскәнһең.

Бамбук һымаҡ зифаһың һин, Суэнь,
Мин иленде гиҙгән көндәрҙә
Бамбук урмандарын ҡыҙырып йөрөнөм,
Төндәр ҡундым бамбук өйҙәрҙә.

Бамбук күперҙәрҙән аша сыҡтым
Шаулы йылғаларҙы. Бөгөн дә –
Бамбук ҡурпыһынан бешкән һыйҙың
Тәме тора тамаҡ төбөндә.

...Мин ишеттем, ҡаҡ бамбуктан яуҙа
Уҡ юнылған, һөңгө осланған,
Һәм, миномет булып, бамбук көпшә
Үлем уты һипкән дошманға.

Бамбук кеүек ныҡлыһың һин, Суэнь,
Һоҡланам мин, ҡарап торам да,
Күҙ эйәрмәй кескәй ҡулдарыңа,
Эйелә-һығыла дөгө урғанда.

Ер һөрәһең, сигеү сигәһең һин,
Еп иләйһең, таштар ватаһың,
Бамбук көйәнтәңде һығылдырып,
Йүгерә-атлап һыуҙан ҡайтаһың.

Һәм мин беләм: һинең ошо ҡулдар
Мылтыҡ тотҡан, бомба ташлаған. –
(Юлбарыҫтар йөрөгән һуҡмаҡтарҙы
Илбаҫарҙар ҡаны ашлаған.)

Мин беләмен: ураҡ, сәскә тотҡан
Һинең кескәй, нескә ҡулдарың
Бығау ауырлығын татығандар –
Һин үткәнһең үлем юлдарын.

Суэнь, Суэнь, азат илдең ҡыҙы!
Һин йәш бамбук һымаҡ нескәһең.
Лотос һымаҡ сафһың. Ә ғүмереңдә
Күпме ҡайғы-хәсрәт эскәнһең!

## ҺИНЕҢ ҮТКӘН ЯҘМЫШЫҢДЫ КҮРҘЕМ

Киске Ханой. Күл буйында шаулы.
Күктә ай йөҙә, һыуҙа – кәмәләр.
Ябыҡ ҡына малай, батмус тотоп,
Һатып йөрөй татлы нәмәләр.

Ул, башҡалар кеүек, тауар маҡтап
Һуҙмай матур һүҙҙәр таҫмаһын.
Өндәшмәйсә генә тәҡдим итә,
Иҫе китмәй ала аҡсаһын.

...Тик, йәшереп, төкөрөгөн йота
Кешеләргә тауар һуҙғанда. —
Күрҙем эргәһенән уҙғанда.

Бай, матур һәм татлы Вьетнам иле!
Уйҙарымда был кис һин булдың.
Күпме быуат халҡың яҙмышы ла
Ана шул балаға тиң булды.

## ҠУНАҠ

Ағастарға ҡыш ҡыҙының
Һибелгән сәйләндәре.
Ә тәҙрәгә килеп ҡунған
Имен йәй сәләмдәре.
Быялала һығылып төшкән
Тук бойҙай башаҡтары,
Туҙғылып ултыра һоло,
Лаҫпылдап тора тары.
Быны, изге билдә, тиҙәр,
Шуға ышанып инем, —
Ҡыш уҡ шулай хәбәр итә
Йәйен уңасаҡ иген.
Күрәм, йәнә ҡунаҡ та бар
Башҡорттоң далаһында:
Бер пальма ботағы тора
Башаҡтар араһында.
Арыш керпегенә һалған
Япрағының остарын.
Күрәһең, онотмай мине
Ханойҙағы дуҫтарым.

*1956–1957*

* * *

Ташлап киттең мине, йөрәгем.
Йөрәкһеҙ бар кемгә кәрәгем?
Гүйә, кашы төшкән йөҙөкмөн,
Аты йығып ҡасҡан егетмен.

*1957*

## ҠЫШ УРТАҺЫНДА ИҪКӘН ЙЫЛЫ ЕЛ

Ниндәй йыл был?
Ниндәй сәйер йыл был?
Ҡыш уртаһы еткәс, бер мәлде
Диңгеҙ тулҡындары әллә ҡайҙан
Алып килде йылы елдәрҙе.

Ел уятты ерҙе, һаҡһыҙ асып
Ул ябынған ап-аҡ юрғанды,
Даугаваның* боҙо, аптырағас,
Тауыш-тынһыҙ китеп юғалды.
Күк күкрәне хатта. Ә ямғырҙар
Көн аралаш яуып үтәләр.
«Яҙ!» — тип тау битендә үлән шытты,
«Яҙ!» — тип бөрөләнде йүкәләр.

«Яҙ! Яҙ! Яҙ!» — тип бер ҡарабаш турғай
Иртән талда һайрап ултырҙы.
..Шул көндө кис хәтәр елдәр иҫте,
Төнө буйы буран ҡоторҙо.
Ҡыш ҡышлығын итер, ихтимал.
Яҙ хаҡында ҡалды тик хыял.

Анау турғай төҫлө, мин дә шулай
Күреп күҙҙәреңдең нурҙарын:
«Мөхәббәт!» — тип йөрәгемде астым
Һәм мөхәббәт йырын йырланым.

«Мөхәббәт!» — тип мин күктәргә аштым,
«Мөхәббәт!» — тип яндым, көнләнем.
...Ул ҡараштың ҡыш аҙашып иҫкән
Йылы ел икәнен белмәнем.

Үҙем ғәйеплелер, ихтимал —
Мөхәббәттән ҡалды тик хыял.

*1957, Рига*

---

* Даугава — Көнбайыш Двина

## БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ШИШМӘЛӘР

*(Шаян йыр)*

Беҙ үҙебеҙ Дим буйынан,
Беҙ үҙебеҙ шишмәләр,
Шишмәләр телдәр булһа ла
Серҙе һаран сисәләр.

Беҙ тәкәббер халыҡ түгел,
Дуҫтар менән һин дә мин.
...Деньги есть – Уфа гуляем,
Деньги нет – Шишмә сидим.

Шишмәләрҙә йөҙҙәр яҡты,
Яғымлы була күңел,
Ләкин баштар уңыштарҙан
Әйләнә торған түгел.

Шишмәләрҙә һин маҡтаулы,
Ҡайҙа ғына эшләмә,
Йәндәреңә нимә кәрәк,
Барыһы ла бар Шишмәлә.

Арыштары, бойҙайҙары
Рәхәтләнеп үҫәләр.
Ғәжәпме ни, йылғалар – һөт,
Күлдәр ҡатыҡ тиһәләр.

Беҙ ебегән халыҡ түгел,
Донъя менән һин дә мин.
...Теләһәк – Уфа гуляем,
Теләһәк – Шишмә сидим.

*1957*

* * *

Ҡайғы төҫө ҡара, ҡап-ҡара,
Ҡап-ҡара сәс шунан ағара.

Һәм ҡап-ҡара тупраҡ – ер төҫө,
Аҡ сәскәләр биҙәй ер өҫтөн.

Әгәр ҡайғы күрһәң бер үҙең:
– Ах, сал баҫҡан, – тимә, – ер йөҙөн!

*1957*

## ЙЫЛҒАЛАР ТӨНӨН ҺӨЙЛӘШӘ

Йылғалар төнөн һөйләшә,
Болот тауҙарға ҡунғас;
Йөрәктәр төнөн серләшә,
Аяҡ тауышы тынғас.

Ниңә шулай? Бит йылғалар
Көндөҙ ҙә аҡмай тормай,
Төнөн серләшкән йөрәктәр
Көндөҙ ҙә ҡаҡмай тормай.

Таң һыҙыла. Ә йылғалар
Һаман да сылтыр-сылтыр...
Күрәһең инде, йыһандың
Ғишыҡ сәғәте шулдыр.

*1958*

## БӘПЕС МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

Туҡмаҡ саҡлы ғына бер кәүҙә
Мыш-мыш килеп ята биләүҙә.

...Муйыл сәскә атҡан эркелеп,
Күктә йәш ай тора бер телем.

Шул сәскә һәм айҙан кесе һин,
Тыуҙың икән – инде кеше һин.

Күҙҙәрең бар, әле нур күрмәй,
Ҡолағың бар, уға моң кермәй.

Әйтеләсәк һүҙең – телеңдә,
Янасаҡ ут – йөрәк төбөңдә.

Әлегә һин бахыр бер кәүҙә,
Ятаһың һин мышнап биләүҙә.

Үкенмәçһең, ышан, һин бер ҙә,
Отолманың тыуып был ерҙә.

Күңелең күрер ерҙә яҡтылыҡ,
Күҙең күрер ерҙә яҡшылыҡ.

Хуш еҫ килтерерҙәр иртәләр,
Ҡолағыңды моңдар иркәләр.

Мөхәббәттән иҫереп шашырһың, –
Үләндәргә һуҙылып ятырһың.

Ошо ерҙә тамам әңгәмә...
Туҡта, туҡта! Тағы был нимә?

Күкрәгеңдә ята йомолоп,
Ике төймә – ике йоҙроҡ.

Дөрөҫ, улым, улар бик кәрәк –
Оноторға быны иртәрәк.

*1958*

## ШИҒЫРҘАРЫМ, ҠАЙҘА КИТТЕГЕҘ?

Ҡайҙа киттегеҙ һеҙ, шиғырҙарым?
Мин юғалттым йоҡо,
Һыу тәмен.
Зәңгәр төтөн йөҙгән тар бүлмәлә
Нисәнсе төн һеҙҙе көтәмен.

Илһам өмөт итеп, күккә бағам.
Аҡ болотта йәш ай тирбәлә.
Ә йондоҙҙар миллион йылдар аша
Бер-береһенә сәләм ебәрә.

Йыһандың һуң миндә ҡайғыһымы?
Бына миндә йыһан хәстәре:
Аяҙ булһа, шиғырҙарым шаттар,
Болот ҡупһа түгелә йәштәре.

Улар хәҙер мине ташлап китте.
Ҡайҙа һуң һеҙ, йырлар йырҙарым?
Мин баҡсаға сыҡтым.
Япраҡтарға
Төшкән таңдың тәүге нурҙары.

Шундай тынлыҡ. Бары бер өн генә
Тәбрикләне июль иртәһен:
«Сут-сут... Сут-сут...»
Әллә ҡош һайраны,
Әллә егет үпте иркәһен.

Мин шишмәгә килдем. Шишмә булып
Урғылалыр, бәлки, шиғырым.
Тау шишмәһе, шиғырымды түгел,
Сылтыр-сылтыр көйләй үҙ йырын.

– Эй, тау, – тим мин, – күкрәк кир әле,
Шул шишмәләй илһам бир әле!
...Күкрәгендә күктәр күкрәмәгәс,
Таң һуң һиңә тауыш бирәме?
Шиғыр эҙләп оҙон юлға сыҡтым,
Ләкин таҡыр юлға сыҡманым,

Шырлыҡтарҙа ҡалды баҫҡан эҙем,
Ҡаяларға илтте һуҡмағым.

Менгән һайын офоҡ артҡа сикте,
Яҡыная барҙым ҡояшҡа.
Тыуған ерем ҡосағымда һымаҡ,
Уның ҡан тибешен тоймаҫҡа
Мөмкин түгел.

Һиңә башым һалам,
Алтын бишеккәйем, Уралым.
Үләндәрең – минең һеңлеләрем,
Ағастарың – минең туғаным...
Тик ҡайҙа һуң йырлар йырҙарым?

Юлым оҙон. Ерҙең дүрт яғы бар,
Күптән инде донъя гиҙәмен.
Бына бында тимер ҡуллы халыҡ
Ҡоя илдең ҡорос үҙәген.

Ә тегендә, шайтан ҡотон алып,
Ете ҡат ерҙе тишеп үтәләр,
Меңәр быуат тотҡонлоҡта ятҡан
Ҡояш нурын азат итәләр.

Баҫыуҙарҙа ашлыҡ ҡотороп уңған,
Быйыл тулы булыр буралар.
Ҡайҙа барма, кешеләрем минең
Шатлыҡ сәсеп, бәхет уралар.

Ләкин шиғырҙарым һаман ғәйеп,
Күңелем дә инде буш һымаҡ,
Мин өйөмә ҡайттым, балалары
Аҙашҡан бер етем ҡош һымаҡ.
Шул уҡ бүлмә...
Ни был?
Унда нурҙар,
Унда моңдар килеп тулғандар.
Был бит шиғырҙарым! Алдан килеп,
Мин ҡайтҡанды көтөп торғандар.

*1958*

* * *

Батыр күрһәм, шул батырлыҡ тигән
Тауға менгем килде;
Дан ҡапҡаһы күрһәм, шул ҡапҡаны
Шаҡып ингем килде.

Ҡош һайраһа, ошо моңло ҡоштоң
Йәне булғым килде;
Илдәге бер иң сибәрҙең
Һөйгән йәре булғым килде.

...Өсөнсө ай инде ямғырҙар юҡ,
Иҫә афәт еле.
Ерем көйә. Тик бер генә яуыр
Ямғыр булһам ине.

*1958*

* * *

Бөгөн төндә баҡса аша уҙҙым,
Бер-береһенә ҡуйып наҙлы башын,
Гөлдәр йоҡлай ине түтәлдә.
Тик бер ләлә ситкә эйгән тажын,
Эргәһендә йәре булмағастын,
Сер бирмәгән, ахры, бүтәнгә.

Сәскәләргә ҡарап шул мәлдә,
Хайран ҡалып торҙом мин — бәндә.

*1958*

## ТӘҮБӘ КУПЛЕТТАРЫ

1

Шатлыҡ күрһәк, бокал тотабыҙ ҙа:
— Күтәрәйек! — тибеҙ, — юғары.
Шул бокалды барыбер ауыҙҙан да
Юғарыраҡ илткән юҡ әле.

2

Ҡайғы күрһәк, бокал тотабыҙ ҙа:
— Төшөрәйек! — тибеҙ әүәле.
Шул бокалды ауыҙҙан да түбән
Төшөргәнде күргән юҡ әле.

3

— Күңел асабыҙ! — тип ауыҙҙарҙы
Асабыҙ ҙа шарап ҡоябыҙ.
Иртән торғас, күңелдәрҙең
Томанланғанын тоябыҙ.

*1958*

## ДАҒСТАНДА БУЛДЫМ ҠУНАҠТА

*Шахрутдин Шамхаловҡа*

Иңгә бурка һалып, хәнйәр тағып,
Дағстандан ҡайттым ҡунаҡтан.
Тау ҡояшы ҡунған ҡулбашыма,
Диңгеҙ шауы китмәй ҡолаҡтан.

Юлсы ҡайтҡан йортҡа дуҫтар килгән –
Шундай йола беҙҙең яҡтарҙа.
Күстәнәстән ауыҙ итеү кәрәк,
Бүләктәрҙе кәрәк маҡтарға.

Ғамзат Цадасанан мираҫ хәнйәр
Ҡасан күскән Назар биленә?
Ә Шахрутдин бүләк иткән бурка
Осоп ҡунған Хәким иңенә.

(Шахрутдин дуҫ!
Ҡайтҡас ҡына белдем,
Һағындырыу булған исәбең:
Бурка түгел, бүләк иткәнһең һин
Беҙ тауҙарҙа булған ҡара төндөң,
Хәтирәле төндөң киҫәген.)

...Һәм һүҙ башлай бокалдарҙың сыңы.
Башламайса бармы сараһы!
Бит уларҙа ҡояш нуры ҡатыш
Тау ҡыҙының балҡый ҡарашы.

Күтәрәйек, дуҫтар, шул илдәге
Утыҙ телдә һөйләр ир өсөн,
Ҡая кеүек ғорур ҡыҙҙар өсөн,
Ҡыҙҙар кеүек гүзәл ер өсөн!

Табын тына. Теҙеп һорашалар:
– Имен ҡалдылармы хужалар?

— Унда таңдар матур атамы?
— Моң сәсәме тау былбылы?
(Рәсүл!
Бер ҡыҙ һине шулай атаны.)

Дуҫтарым, мин бары шуны әйтәм:
Дағстанда булдым ҡунаҡта.
Устарымда йөрәктәрҙең йылыһы,
Бәхет йыры яңғырай ҡолаҡта.

*1958*

* * *

Һин киткәндә тулған ай ине,
Япраҡтарға ағас бай ине.

Һағыш ҡына бөктө шул айҙы,
Һине көтөп япраҡ һарғайҙы.

Минең башым һаман юғары,
Үҙем кеше генә ни бары.

*1958*

* * *

Утыҙ көн һинһеҙ мин, утыҙ төн,
Утыҙ тәүлек, тимәк.
Әйтерһең дә, утыҙ даръя кистем
Бер-береһенән киңерәк.

Гүйә, утыҙ тауға мендем мин
Бер-береһенән бейек,
Утыҙ таң ҡаршыланым, утыҙ туңып,
Утыҙ ҡабат көйөп.

Утыҙ шигем, утыҙ өмөтөм.
Утыҙ уйым – бер һин.
Минең кеүек һөйгән кешеләргә
Сабырлыҡтар бирһен.

*1958*

## КИСЕР, ӘЖӘЛ

*Әхмәт Фәйзигә*

Алмаштырып аҡ күлдәген кейергә лә
Өлгөрмәне, кисер уны,
Битендәге юл-юл ҡара тирҙе хатта
Һыпырманы, кисер уны.

Ул алъяпҡыс быуған ине, күн алъяпҡыс,
Уйҙыҡ-уйҙыҡ атҡы тишкән,
Тимер сүкей ине шул ул, йәшәү тимерен,
Өҫтөн ҡуйып барлыҡ эштән.

Һин килгәс тә, туҡтатырға күндәм эшен
Байтаҡ торҙо, тапмай әмәл.
Тере саҡта һине һанға һуҡманы ул,
Кисер, әжәл.

*1958*

## НАНАЙ ЯҘЫУСЫҺЫ ХОДЖЕРҒА

Халҡым минең үтә аҙ, тиһең,
Ҡыш бик оҙон, ҡыҫҡа яҙ, тиһең,
Яғым, тиһең, һаран сәскәгә.
Шунда ғынамы ни мәсьәлә?
Ҙур урманда ҡарға булғансы,
Бер ҡыуаҡта былбыл булһаңсы.

*1958*

## БЕР ТАНЫШҠА

Дошмандан ҡурҡаһың,
Дуҫыңа шик тотаһың,
Эҫелә бәлйерәйһең;
Ни юғың да, ни барың,
Эй һин, бәлә һыңары!

*1958*

## ТАШКЕНТ ИҪТӘЛЕГЕ

Күрһәң ине Ташкент иртәләрен...
Һин алыҫ шул, алыҫ, һөйөклөм.
Күк ситендә, ана, ҡояш ҡалҡа,
Ниндәй тынлыҡ, ниндәй бөйөклөк!

Көҙгө ҡояш. Юҡ, ул һүрән түгел,
Һаран түгел, сабыр саҡ ҡына,
Әсә лә бит буйға еткән улын
Ҡыҫып ҡосаҡларға тартына.

Был көҙҙәрҙә, көҙгө был төҫтәрҙә
Билдәһе юҡ шиңеү, һағыштың,
Әйтерһең дә, мин көҙ менән түгел,
Аҡыл ире менән табыштым.

Йәренгәне тыныс ҡаршылай ул,
Ҡул һелтәмәй үткән былтырҙан,
Аҡылы уның мөхәббәттә янған,
Мөхәббәткә аҡыл ултырған.

Түтәлдәрҙә әле һаман да йәй,
Көҙ ҡағылмай гөлдәр эшенә;
Розалары шундай... Өҙөп ал да
Һөйгәнеңдең ҡаҙа түшенә.

Тик бер кәкүк кенә юл ситендә
Емдәр эҙләп йөрөй, бисараң.
Йырлар йырҙарыңды йырлап бөткәс,
Күктән ергә төшмәй ни сараң?

Минең, гүйә, тәүге йырым тыуа,
Тәүге моңом, тәүге хыялым.
Һиңә лә мин тәү ҡарайым һымаҡ
Дүрт мең саҡрым аша, оялып.

Мин сикһеҙ бай, сикһеҙ йомарт бөгөн.
Елдәр иҫеп етмәҫ ерҙәрҙән
Бүләк итеп, бары һиңә генә
Был иртәнең үҙен ебәрәм.

Ышаныу ҙа, борсолоу ҙа унда,
Унда аҡыл, унда бөйөклөк.
Ҡояш алып барыр бүләгемде,
Йоҡлап ҡала күрмә, һөйөклөм.

*1959*

* * *

Һыуһағанда, онотторҙоң һыу барлығын,
Өшөгәндә – уттың йылы йомартлығын;

Ҡара төндә онотторҙоң ай хаҡында,
Зәһәр ҡышта онотторҙоң май хаҡында;

Эш өҫтөндә һин бит мине яլһыҙ иттең,
Өмөтөмдөң диңгеҙҙәрен ярһыҙ иттең;

Тик үҙеңде күҙ асып йомғансы ла
Онотмаҫҡа мәжбүр иттең – бер тамсы ла.

*1959*

# *КАШТАН СӘСКӘ АТҠАН ЕРҘӘ*

## КҮҘҘӘРЕМӘ ҠАРА

Өмөт менән һуғарылған был ер,
Өмөт һулышын ала был һауа.
Кисә ерҙә ятҡан һарғылт орлоҡ
Бөгөн ҡыяҡ булып йылмая.

Ел таратып йөрөй имен хәбәр
Донъялағы таныш-белешкә:
«Туй күлдәге кейгән алмағастар
Таң алдынан уҙҙы емешкә!..»

Һәм болоттар бөтә ил буйынса
Алып китте ҡиммәт бер йөктө,
Ул болоттар һөтлө күкрәк төҫлө,
Ул болоттар шундай өмөтлө.

Күҙ тултырып бағам чех яҙына.
Бағыу менән танһыҡ ҡанамы?
...Һәм яҡшы күҙ, беләм, таш иретә,
Ағас ҡорота күҙҙең яманы.

Күҙҙәремә ҡара һин, чех ере!
Һин гүзәлгә башым эйелгән.
Таштарыңды хатта иретерлек
Һөйөү алып килдем илемдән.

## УЛ ЯРАТА ИНЕ ҠАЙЫНДАРҘЫ

Дунай ярҙарында каштандар...
Арала бер таныш каштан бар.

Тик бер ҡарау менән әллә ҡайҙан
Таныным мин һине, каштаным,
Ҡоластарың ҡолас ҡынамы ни!
Һауаларға ашҡан баштарың.

Аҡ сәскәне һары алтынға манып,
Һуңғы һүрән нурҙар төштөләр,
Япраҡтары, саҡ-саҡ шыбырлашып,
«Һөйәм», «Һөйәм» тигән төҫләләр.
Ул япраҡтар йәштәр, яҙғылар,
Яҙғы булған өсөн наҙлылар.

Мин, һаҡ баҫып, һиңә табан киләм,
Теләр инем – елдәр өрмәһен.
Йөрәк тулы һағыш, сайпылып, тим,
Үләндәргә тама күрмәһен.

Тап ун дүрт яҙ әүәл шундай кистә...
Кисер, каштан, юлым бүленде, –
Ботағыңа баҫып ҡош һайраны,
Йәшәү йыры ошо түгелме?

Эйелеп ҡара, һөйгән йәрен ҡосоп,
Ғашиҡ егет тора эргәңдә,
Бер-береһенең ҡосағына улар,
Гүйә, ғүмерлеккә кергәндәр.

Яныңа уҡ килалмайым, каштан,
Изге бер тартыныу тоямын.
Нисек бүлдерәйем һуң ҡош йырын?
Ғашиҡтарҙың татлы хыялын
Нисек бүлдерәйем?
Юҡ, мин бында,

Ситтә генә, яңғыҙ, һаҡ ҡына
Бер хәсрәтле иҫтәлектең битен
Асып ҡына алам,
Саҡ ҡына.

Бик саҡ ҡына. Ул биттәрҙән ергә
Күләгәләр ятып ҡалмаһын.
Күңел йәшен тыйығыҙсы, күҙҙәр,
Йәшел үләндәргә таммаһын,
Хәсрәт эҙе бында ҡалмаһын.
...Тап ун дүрт яҙ әүәл шундай кистә,
Яман төштән ауыр өнөмдә
Бер йәш һылыу ҡанға сәсәп ауҙы,
Ауҙы, каштан, һинең төбөңдә.

Һуңғы тапҡыр һиңә ҡараны ул,
Шулай һаубуллашты, күрәһең.
Беҙ йәшәгән ерҙең төҫө булып,
Күҙҙәрендә ҡалды һүрәтең.
Ә ул һөйә ҡайындарҙы,
Алыҫ тыуған ерҙә, тегендә,
Урал күге ине күҙҙәрендә,
Урал таңы ине йөҙөндә,
Алыҫ тыуған ерҙә, тегендә.

Чехославакия! Һинең өсөн,
Һеҙҙең өсөн, тауҙар, турғайҙар,
Һеҙҙең өсөн, Благослава, Милош,
Ул йән бирҙе ошо туғайҙа.

Мин, һаҡ ҡына баҫып, кире китәм.
Теләр инем – елдәр өрмәһен.
Йөрәк тулы һағыш, сайпылып, тим,
Үләндәргә тама күрмәһен.

## КӨЙӘҘ ТУРҒАЙ ЕМ СУКЫЙ

Прагала яңы тыуған
Иртә ине,
Иртә булған өсөн дә ул
Иркә ине.
Бер ҡарауҙа йәнле итте
Нур
Ысыкты.
Һәм баҡсаға ысыҡҡа хас
Бер ҡыҙ сыкты.
Сыкты ла ул ҡыуаҡтарға
Ҡулын һондо,
Шул саҡ ҡапыл көйәҙ турғай
Йырҙан тынды,
Тынды ла ул ҡыҙ ҡулына
Килеп ҡунды.
Урман ҡошо ҡыҙ усынан
Емдәр суҡый,
Үҙе суҡый, үҙе, гүйә,
Рәхмәт уҡый.
Мин торамын ҡарт йүкәләр
Араһында
Һәм уйлайым чех ҡулдары
Тураһында.
Чех гүзәле, тик бер күрҙем
Йөҙҙәреңде.
...Мин усыңа һалырға әҙер
Йөрәгемде.

*1959*

# *БОЛГАР ДӘФТӘРЕНӘН*

## КАРАМФИЛА ЙЫРЛАЙ

*Е. Бағрянаға*

*— Карамфила, Карамфилка,*
*Ҡайҙан ағып сыға Дунай?*
*— Алтын алманан сыға ул.*

*Болгар йыры*

Карамфила йырлай, Карамфила,
Карамфила һылыу, ҡара ҡаш.
Йырҙарында һағыш ҡатыш дәрт тә,
Аһ-зар ҙа бар шатлыҡ аралаш.

Ҡарт тау* кеүек бик боронғо,
Диңгеҙ шауы кеүек үлемһеҙ.
Яңы тыуған ай шикелле йәш ул,
Йәшен уты кеүек ғүмерһеҙ.

Моңайғандыр, бәлки, болгар шулай
Ташлап киткән саҡта Волганы.
Ошо зарҙы тыңлап ағарғандыр
Скиф далаһының ҡылғаны.

---

* *Ҡарт тау* — Стара планина (*болгарса*)

Карамфила йырлай, Карамфила...
Ҡара урманлы ҡырағай Балҡанда,
Ҡанға батҡан гайдук һалҡын ташты
Һуңғы түшәк итеп ятҡанда,

Баш осонда уның хур ҡыҙҙары
Көйләнеме әллә шул йырҙы?
Был өндәрҙә зың-зың ҡылыс зыңлай,
Гүйә, бысҡы быса сынйырҙы.

Һәм был моңдар, сәскәләрҙе һөйөп,
Таң еләләй үткән түтәлдән.
Ошо ауаз ике Сентябрҙә*
Кешеләрҙе яуға күтәргән.

Карамфила, һеңлем Карамфила!
Белгем килгән нәмә шул ғына:
Йырҙарыңдың хазинаһы ҡайҙа,
Моң шишмәһе ҡайҙан урғыла?

— Ҡайҙан булһын? Алтын алманан.
Ә ул алма болгар күкрәгендә,
Һис кем уны өҙә алмаған.

## ТАШТАР ҒЫНА ИЛАЙ

*Иван Мартыновҡа*

Гиҙеп сыҡтым мин болгарҙар илен.
Ергенәме торған ерҙәре!
Күҙ ҡояшы — һөйгән ҡарашы,
Дуҫ сәләме — иҫкән елдәре.
...Тик тарлауыҡ буйлап үткән саҡта,
Ҡарт тау ғына ҡуйҙы уфылдап.

* 1923 һәм 1944 йылдарҙың сентябрендә болгар халҡы азатлыҡ көрәшенә күтәрелде

Тарлауыҡта өнһөҙ илай таштар,
Һалҡын йәштәр тама тупылдап.
Ниңә илай таштар, ниңә илай?
Тау яғы, һин илаҡ яҡмы ни?
Болот китеп, салт аяҙған был саҡ
Шулай йәштәр түгер саҡмы ни?
Ҡарт тау яуап бирҙе: «Мең йыл буйы
Болгар ҡайғыларын күтәрҙем,
Ер өҫтөнә тамған күҙ йәштәрен
Таш йөрәгем аша үткәрҙем.
Һорама һин: әсә йәшеме ул,
Ҡыҙ йәшеме? Кемдәр йәше ул?
Шатлыҡ йәше түгел, шуға күрә
Тиҙ кипмәй ул, ауыр, әсе ул.
Мин илайым боронғо йәш менән,
Әрнеүҙәре уҙған аҙаптан.
Ямғыр ғына яуып үтһә лә бит,
Тамсы тамып тора аҙаҡтан...»
...Ҡарайым мин бейек зәңгәр күккә,
Бөркөт саңҡып, ҡанат ҡаҡҡанға.
Ә түбәндә һаман таштар илай,
Улар ғына илай Балҡанда.

*1959*

* * *

Көтмәгәндә кистән ҡар төштө.
Бик ваҡытһыҙ,
иртә.
Иретергә уны ҡояштың
Бер ҡарауы етә,
Сөнки әле йылы тупраҡта
Йәшәү дауам итә.

Арабыҙға ҡапыл ҡар яуҙы.
Ҡары өрпәк кенә.
Ул ирергә тора,
өмөтлө бер
Ҡараш күрһәт кенә.
Ҡышҡа алыҫ әле. Йәнәшә
Ике йөрәк тибә.

*1959*

* * *

Диңгеҙ буйлап йүгерә бер малай,
Ялан тәпәй. Беҙҙең нәҫелдән.
Эҙҙәрендә йым-йым итә ваҡ таш,
Гүйә, ергә йондоҙ сәселгән.

Килә заман. Килә. Шул малайҙар
Ҡош Юлына сәфәр сығырҙар.
Һәм йондоҙҙар, улар баҫҡан саҡта,
Ваҡ таш урынына шығырҙар.

*1959*

## УРАҠСЫҒА АЛТМЫШ ТУЛҒАНДА

*Ай урагың һалып иңбашыңа...*

*Н. Иҫәнбәт*

Ай урағың һалып иңбашыңа,
Ижад ҡырҙарына килдең һин.
Һәм иң тәүҙә, тар бишмәтең сисеп,
Ҡайын ботағына элдең һин.

Ер башына килеп баҫҡанында,
Тарлағайны төндөң эҙере,
Бына-бына балҡып күк уяныр,
Һәм башланыр ҡояш ғүмере.

Эй урҙың һин, урҙың: арттарыңда
Теҙелеп ҡалды тигеҙ усмалар;
Һиңә ҡарап, һоҡландылар кешеләр,
Ошо баҫыу аша уҙһалар.

Эй урҙың һин, ярһып-ярһып урҙың,
Ҡояш менгән һайын юғары;
Төш тә ауып бара, ләкин һиндә
Арыу-талыу һаман юҡ әле.

Әммә үткер икән урағы,
Әммә хаҡтыр халыҡ йомағы:
Шул бәләкәй генә бөк(ө)рө
Күпме ҡырҙы урып бөтөрҙө.

Усмаларҙан булды көлтәләр,
Көлтәләрҙән ҙурат ҡуйылды,
Ҙураттарҙан кәбән ҡойолдо.
«Арыным» тимә, алымың ҙур әле,
Ер башына әле йыраҡсы,
Халҡың өсөн алтын иген урған,
Алтын ашлыҡ һуҡҡан ураҡсы!

*1960*

## ШИК ЯРАЛДЫ

Бер көн шулай иҫке дуҫым
Ҙур табында
«Яратам» тип әйтте миңә
Кеше алдында.

Хатта һөйгән ҡыҙына ла
Беҙҙең яҡта
«Яратам» тип әйтер егет
Тик аулаҡта.

Нәфрәтен генә йәшермәҫ
Ир булған ир,
Дошманына: «Һин дошман!» – тип
Тура әйтер.

Тик дуҫына ысҡындырмаҫ
«Һөйәм» һүҙен;
Шығырлатып тешен ҡыҫыр,
Әммә түҙер.

«Яратам» тип әйткәс дуҫым
Ҙур табында,
Күңелемдә шик яралды
Шул сағында.

*1960*

* * *

Ата өсөн улды хөкөм итмәйҙәр,
Сөнки улар бер баштан үҫмәйҙәр.
Бер үк күкрәк һөтөн имгән игеҙҙәр,
Халыҡ хөкөмө алдында тигеҙҙәр.

*1960*

* * *

Ҡыҙмаса баштан берәүҙе
Кисә хаҡһыҙ маҡтаным,
Иртән торғас, үҙ-үҙемә
Бер аҡланыу тапманым.

Шул ғәйебем, төйөр булып,
Ултырҙы бит тамаҡҡа.
Их, ғәфү үтенер инем,
Тотоп һүкһәм нахаҡҡа.

*1960*

## СӘЛӘМ-ЙЫР

*(Татарстандың 40 йыллығына)*

Йырҙар яҙҙыҡ, ҡулға тотоп,
Мөхәббәт ҡәләмдәрен.
Моңдарға төрөп килтерҙек
Башҡорттоң сәләмдәрен.

Сәләмдәрҙә – изге теләк,
Еребеҙҙең аңҡыуы,
Шишмәләрҙең сылтырауы,
Бөркөттәрҙең саңҡыуы.

Табындарығыҙ түңәрәк,
Уртаҡ байрам мөбәрәк,
Һабанда ла, табында ла
Һайрашабыҙ бергәләп.

*1960*

## ШАЯРЫУ

Миңлекамал, бит алмаңда
Ҡара миңең,
Күргән һайын, зиһенемде
Ала минең.
Миңлекамал, ҡыҫып
Нескә
Билкәйеңде,
Тик бер генә үпһәм дә шул
Миңкәйеңде,
Ниндәй яза бирһәләр ҙә
Гонаһыма,
Әйтер инем, ирештем, тип,
Моратыма.

*1961*

* * *

Кеше көслө. Ҡулда тота олонон ул
Был йыһандың. Кеше көслө.
Бер һелкетһә, тупылдашып йондоҙ
Ҡойолор,
Ағастағы алма төҫлө.
Көслө кеше! Ул йондоҙҙар янһын шунда,
Һоҡландырып ерҙе, күкте.
Алмағаслы еребеҙҙә беҙҙең өсөн
Алһыу бешер алма күпме!

*1962*

## «АРЫНЫМ» ТИГӘН ДУҪЫМА

Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул
Оҙаҡ йылдар һаҡлай.
Ә буш көршәк иһә, тора-тора,
Үҙ алдына сатнай.

Ҡайтмаҫ өсөн китһә ҡайғы, шатлыҡ,
Борсолоулы саҡтар,
Ҡорғаҡһыр ҙа тыныс, буш йөрәгең,
Үҙ алдына сатнар.

*1962*

* * *

Ай keүek тыуһаң ине лә
Ай keүek тулһаң ине,
Ә һүнгәндә, йондоҙ һымаҡ,
Ҡапыл атылһаң ине.

*1962*

## УҠЫУСЫМА ТЕЛӘК

Ҡулға китап алып, битен асҡас,
Ас, уҡыусым, күңелең ҡайнаһын,
Бар уйҙарым – минең геройҙарым
Йөрәгеңә тура атлаһын.

Йомолған күҙ ҡояш нурын күрмәç,
Йомолған ҡул ҡыçмаç дуç ҡулын.
Аҡһап түгел, йүгереп үтһәң ине
Минең китабымдың һәр юлын.

*1962*

* * *

Аҡ ҡайынды ҡосоп илай Мәрйәм.
Күҙ йәштәре тама аҡ туҙға.
Ниҙәр булды икән, ниҙәр генә
Ун етеһе тулған был ҡыҙға?
Һут ҡайнаша, урғып һут ҡайнаша
Үҫеп буйға еткән ҡайында.
Ниңә шулай иләҫләнә икән
Ҡайындар ҙа апрель айында?
Аҡ ҡайынды ҡосоп илай Мәрйәм.
Ниндәй ғазап? Ниндәй әрнеүҙәр?
Әле генә уға: «Һөйәм», – тине
Ун һигеҙе тулған Әнүәр.
Бына шуға, бары шуға ғына
Күҙ йәштәре туҙға тамдылар,
Ҡыҙ үҙе лә ҡайын кеүек кенә,
Йәштәре лә шундай татлылар.
Илаһын әйҙә...

*1962*

## СӘСӘН

Йылдар кеүек оҙон ине төндәр,
Хатта яҙғы төндәр...
Әсәләрҙең баш аҫтында ул саҡ
Ҡайғы ине – мендәр.
Яу ҡырынан үлем хәбәрҙәрен
Ташый ине елдәр,
Хатта яҙғы елдәр...

Йылдай оҙон, ерҙәй ҡара төндә –
Хәтәр мәлдә сәфәр –
Дөм-ҡараңғы тын ауылға инде
Ил гиҙеүсе сәсән,
Халыҡ күңеленә өмөт сәсеп,
Йыр игеүсе сәсән.

Туҡтаны ла урам осонда ул
Тәү тәҙрәне ҡаҡты.
Берәү һикереп тороп ишек асты,
Берәүһе шәм яҡты.
Һәм бер аҙҙан Йыһан киңлегенә
Сәсән йыры аҡты.

Йырлап уҙҙы сәсән өйҙән өйгә,
Өйҙәрҙә ут янды.
Өмөт танһыҡлаған кешеләрҙең
Танһыҡтары ҡанды,
Күҙҙәренән берсә нур бөркөлдө,
Берсә йәштәр тамды.

Танһыҡтары ҡанды...
Юлсы китте. Әммә шәмдәрҙә ул
Ут ҡалдырып китте.
Юҡ, шәмдәрҙе түгел! Йөрәктәрҙе
Тоҡандырып китте.
Ҡара төндә тик бер кеше күпме
Нур ҡалдырып китте.

*1962*

* * *

Елдәр иҫкән һайын ҡайындарҙа
Япраҡ кәмей шөйлә.
Йылдар үткән һайын, табындарҙа
Дуҫтар кәмей килә.

Йылдар – елдәр. Шәфҡәт көтөп булмай
Улар вайымынан.
Япраҡ кеүек ҡойола ҡай исемдәр
Йөрәк ҡайынынан.

Ҡай япраҡтар ҡырҡ ҡырау күрә,
Хатта шул сағында,
Йәшел көйө туңып, бөгәрләнеп
Ҡала ботағында.
Йылдар үткән һайын, әммә дуҫтар
Кәмей һәр табында.

Әллә ҡояшыбыҙ һаранайып,
Яйлаймы көҙ яйын?
Бәлки, беҙгә аҡыл ултыралыр,
Ғүмер үткән һайын.

*1962*

# КАБАРДИН-БАЛҠАР ДӘФТӘРЕНӘН

* * *

*Ҡайсын Кулиевҡа*

Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтында
Мин иленде гиҙҙем, бик күп юл урап,
Алыҫ ҡояш була икән йылыраҡ,
Бейек йондоҙ яна икән нурлыраҡ.

Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтында
Гөлдәр сәскә ата икән наҙлыраҡ;
Күңел ҡошо һайрай икән моңлораҡ,
Күҙ йәштәре булған, ахры, тоҙлораҡ.

Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтында
Осраттым мин таш ауылдар зыяратын;
Әллә дауыл үткән, йәшен уйнатып,
Әллә заман еле иҫкән ҡыйратып.

Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтында
Ҡуҙ һүнһә лә, усаҡтарҙа көл ҡалған;
Күҙ йәшенән көлдә шытҡан гөл ҡалған,
Гөлдө төндән һаҡлай торған көн ҡалған.

...Көҙгө елдәр китҡән тауҙар яғынан,
Хатта таштар терелгәндәр яңынан,
Бешкән алма өҙәм балҡар бағынан
Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтында.

## ТАУ ҺУҠМАҒЫ

Йөрөгәнем бар, мин тауҙарҙың
Хәүеф-хәтәрен беләм,
Менгәнем бар бейеклектәргә,
Шуға ҡәҙерен беләм.
Ҡәҙерен беләм. Бейеккә
Көн бит иртәрәк ҡарай.
Тараҡ түбәләр ҡояштың
Алтын толомон тарай,
Шунан ғына балҡый йыһан —
Беҙҙең мәңгелек һарай.
Һис кем, һис кем әйтә алмаҫ:
«Был һарайға мин хужа!»
Була алһам бер һаҡсыһы,
Бик ризамын мин шуға.
Заман шомло. Ҡаҡшап ҡуя
Ғаләмде тотҡан терәк.
Хужа түгел, был йыһанға
Тоғро һаҡсылар кәрәк.
...Ауыҙлыҡты тешләне лә
Сапты уйҙарым шашып,
Тауҙар хаҡында ине бит
Телгә килгән йыр башым.
Тауға киттек. Тау йырсыһы
Ҡайсын ине юлдашым.
Иртәнге мәл. Тарлауыҡтар
Яталар томан бөркөп.
Болот менән ике арала
Эленеп тора бөркөт.
Бөркөттән дә, болоттан да
Һуҡмаҡ менә өҫкәрәк.
Бындай юлды үтер өсөн
Ҡуш йөрәкле дуҫ кәрәк.
Аҫта упҡын, өҫтә күк тын,
Бер хәүефлән, бер кинән...
Ҡайсын йырлай, мин йәнемде
Усымда тотоп киләм.

Һуҡмаҡ үрләй. Алда ҡапыл
Йәйелеп китә туғай!
Тауҙа туғай! Йәшел туғай!
Өн түгел был, төш, буғай.
Төш түгел – өн. Бөркөттән дә,
Болоттан да юғары,
Ҡорос моңдарын таратып,
Сыңлай салғы сыңдары.
Йәш егеттәр, иҙеү сисеп,
Ярһып бесән сабалар.
Хуш еҫле йәшел болоттан
Ҡыҙҙар күбә һалалар.
Ҡыҙҙар йырлай. Ә йырҙары
Гел шатлыҡ тураһында.
Гүйә, шом һис ҡағылмаған
Уларҙың ҡураһына.
Дуҫым! Һинең халҡыңда бит
Ҡуш йөрәк һәм пар ҡанат.
Аҙмы хәтәр юл үтте ул
Упҡын күҙенә ҡарап.
Абынһа – ҡоламаны,
Ыңғырашһа – иламаны.

## ДУҪТАР БҮЛӘГЕ

Чегем шарлауығын бүләк итте
Миңә Ҡайсын.
Шарлауыҡһыҙ Чегем бойоғор бит,
Шунда ҡалһын.

– Һиңә булһын беҙҙең тәрән Күккүл, –
Тине Адам.
Күлен алһам, тауҙар күҙһеҙ ҡалыр,
Нисек алам?

Алим әйтте: – Ҡушбаш Эльбрустың
Ал бер тажын.

Юҡ. Батша-тау кем иңенә һалыр
Яңғыҙ башын.

Бирегеҙ һеҙ миңә шарлауыҡтай
Мәңгелек йыр.
Тәрән күлдәй тыныс аҡылығыҙ
Серҙәш булыр.

Ҡуш түбәле тауҙай дуҫлығығыҙ –
Таянысым.
Һеҙҙең кеүектәргә таянғандар
Таямы һуң?

Ут үрсемле – янһа. Йылға тере –
Аҡһа ғына.
Йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ – бүлешкәндән
Арта ғына.

*1962*

## АЛҺЫУҒА

Арбалары көймәле,
Көймә эсендә кем әле?
Көймә эсендә Алһыу икән, —
Алһыу таңдай көл әле.

Көймәләре күн икән,
Күне асыҡ күк икән,
Көймә эсендә ике йондоҙ, —
Ике зәңгәр күҙ икән.

Ялт иттереп көймәһен,
Гөр-гөр килеп көләһең.
Яңы асылған сәскәме ни, —
Абау! Күҙем теймәһен.

*1963*

* * *

Ҡышҡы юлдан аҡбуҙ килә,
Саба-елә, саба-елә,
Көпшәк ҡарҙы яра-яра,
Сана елә, сана елә.

Ялан ҡуллы күсер егет
Дилбегәне тотҡан урап,
Иҙеү асыҡ. Ҡара бүркен
Һалып алған ҡырыныраҡ.

Ат ярһыған. Сана оса.
Күсер егет, һин самала!..
Толоп кейгән берәү килә,
Берәү килә шул санала.

Ат еләнә арҡа ҡуйып,
Юлсы ғәмһеҙ ҡарап бара,
Һикерткән һәр һикәлтәне,
Йөҙөн һытып, һанап бара.

Башын баҫып уйлай үҙе:
«Юл аҙабы – гүр ғазабы.
Ошо тиклем ғазаптарҙың
Булырҙыр бит бер аҙағы...»

Йөрәк ҡағып, аҡбуҙ килә,
Саба-елә, саба-елә.
Көпшәк ҡарҙы яра-яра,
Сана елә, сана елә.

Һис туҡтамай ғүмер баҡый
Шулай саба заман аты,
Берәүҙәрҙең данын тейәп,
Берәүҙәрҙең – яманатын.

Эй, замандың ярһыу аты!
Елең бәрһә биттәремә,
Үкенмәмен был донъяға
Килгәнемә-киткәнемә.

*1963*

## АРАҠЫ ШАУҠЫМЫ

Ҡайғылының ҡайғыларын тарата,
Һөйкөмһеҙгә һөйкөмләрәк ҡарата.

Нығ күтәрә баҙарын ул харамдың,
Кеҫәләрен әйләндерә һарандың.

Йомоҡтарҙың телен аса келт итеп,
Сатандарҙы бейетә ер һелкетеп.

Егеттәрҙе ҡыйыш-мыйыш атлата,
Бабайҙарҙың таяҡтарын ташлата.

Аҡыллының аң һарайын емертә,
Тиләләрҙе торған һайын тилертә.

Аҡыллылар һәм тиләләр эсмәһен,
Ҡалғандары – теләһәләр нишләһен.

*1963*

## ЙЫРЫМ МЕНӘН БӘХӘС

*...Чувства добрые я лирой пробуждал.*

*А.С. Пушкин*

Йырыма тылҡып: – Кешене
Һөнәргә өйрәт, – тимен, –
Тимерлеккә тимерсенең
Усағын көйрәт, – тимен.

Игенсегә күрһәтмә бир
Нисек иген игергә,
Тегеүсене өгөтләп тор
Йөйҙө ҡупшы бөрөргә.

Нефтсегә төртөп күрһәт
Ерҙе ҡайҙан тишергә,
Килендәргә кәңәштәр бир
Нисек ҡымыҙ бешергә...
Төҙөүсене, һауынсыны
Күҙ уңынан төшөрмә...

Күрәһең, йырым күндәмдер,
Тыңлай мине тын ғына.
Туҡта! Ниңә йылмая ул
Шулай аҫтыртын ғына?
Телгә килә тын ғына:

– Кешеләр, – ти, – үҙ эштәрен
Оҫта итеп башҡара.
Ҡул ҡаушырып тормаҫ улар,
Тормаҫ минән башҡа ла.

Етмеш һөнәр, етмеш аҡыл
Талап итмә һин минән,
Мин бәрәбәр япраҡтарҙы
Ҡағып үткән ел менән.

Шом яралған күңелдәргә
Өмөт булып керәмен,
Шик солғаған йөрәктәргә
Мин ҡыйыулыҡ өрәмен.

Күҙҙәрҙә йәш күрһәм, шуны
Һаҡ ҡына һөртөп китәм,
Ойоп торған тойғоларҙы
Саҡ ҡына сиртеп китәм.

Яҙғы төндә ай нурынан
Мин таҫмалар үрәмен,
Үрәмен дә сырмап ҡуям
Ғашиҡтарҙың йөрәген.

Бер тамсы нур, бер тамсы моң
Кешеләргә көн һайын
Бирә алһам,
Йырланырға
Хаҡлымындыр, моғайын.

Шул һөнәрем – йәшәү йәмем.
Һәләтем юҡ башҡаға.
...Ә кешеләр үҙ эштәрен
Минһеҙ ҙә шәп башҡара.

*1963*

* * *

Аяҡтарым юлда, күңелем йырҙа,
Ерҙә мин бер шундай юламан,
Көндөҙ мин – ҡояшҡа, ә төндәрен
Йондоҙҙарға ҡарап юл алам.

Иренемде ҡаршы елдәр киҫте,
Сәсемдә сал – йылдар туҙаны,
Ишектәрҙе шаҡып инәмен дә
Йөрәктәрҙе ҡағып уҙамын.

Тик ҡояшты болот ҡаплап китә
Көндәр боҙоҡ, йонсоу заманда.
Йондоҙҙар ҙа,
Хатта йондоҙҙар ҙа
Томалана төнгө томанда.

Аяҙҙа ла, йонсоу көндәрҙә лә
Ғүмер юлы тигән араны
Уҙған саҡта,
Йондоҙҙарҙай күреп,
Мин күҙҙәргә ҡарап барамын,
Кешеләрҙең шат, өмөтлө, моңһоу
Күҙҙәренә ҡарап барамын, –
Юлдарымда аҙашмаҫ өсөн,
Йырҙарымда алдашмаҫ өсөн.

*1963*

## ДУҪЫМА

Һин ҡомһоҙһоң, дуҫым, бар нәмәгә...
Эштә — шыбыр тирең аҡҡансы,
Бәхәс булһа — тамаҡ ҡарлыҡҡансы,
Табын булһа — таңдар атҡансы.

Һин ҡомһоҙһоң, дуҫым, бар нәмәгә...
Шатлыҡ кәрәк — осороп китерлек,
Һөйөү икән, булһын иҫертерлек.
Һағышы икән — даръя кисерлек.

Һин ҡомһоҙһоң, дуҫым, бар нәмәгә...
Ҡулдарыңда донъя тотҡаһы,
Йондоҙҙарға ҡарап туя алмағас,
Һин күҙҙәрең менән йотаһың.

Һин ҡомһоҙһоң, дуҫым, бар нәмәгә...
Тик көтмәйһең дандың әҙерен.
Көҙгө елгә күкрәк асаһың һин,
Белер өсөн яҙҙың ҡәҙерен.

Һиңә бик күп нәмә кәрәк ерҙә,
Үтә ҡомһоҙ һинең йөрәгең.
...Хәйер, һиңә һис ни кәрәкмәһә,
Үҙеңдең дә ҡалмаҫ кәрәгең.

*1963*

* * *

Алыҫ юлға эйәрләйҙәр
Аттарҙың иң яҡшыһын.
Ҙур йомошҡа ебәрәләр
Ирҙәрҙең иң затлыһын.
Ҡунаҡ алдына ҡуялар
Һыйҙарҙың иң татлыһын,
Байрам көндө яндыралар
Шәмдәрҙең иң яҡтыһын.
«Оло юлға сыҡҡан юртаҡ, —
Тимә, — берҙән-бер генә»,
Күпме аттар, күпме аттар
Тиргә батып ер һөрә!
«Ҙур йомошто йомошлаусы, —
Тиһәң, — берҙән-бер батыр»,
Ә кемдер һуң иген игер,
Тимер сүкер, таш ватыр?..
Ҡунаҡ һыйын татығанда:
«Был иң татлы!» — тимә һин, —
Төйөлдөрөр бураҙнала
Умырып ҡапҡан икмәгең.
Байрам шәме үтә яҡты,
Тик ҡарама бик оҙаҡ.
Ул тиҙ һүнә, һәм күҙҙәрең
Күрмәҫ булырҙар аҙаҡ.
Дан йырланһын яҡшы атҡа,
Затлы иргә, ҙур шәмгә,
Тик күп йырланһын донъяны
Алып барған әҙәмгә.

*1963*

## ТОРНАЛАР ҠАЙТҠАНДА

*Карт коммунист иҫтәлегенә*

Ярһып-ярһып уйнай яҙ үҙ көйөн
Ҡояш нурҙарының ҡылында.
Шатлыҡ ҡына, бары шатлыҡ ҡына
Һибелә һымаҡ уның моңонда –
Ергә яуған нурҙар ҡылында.

Болот үтә. Ҡылдар өҙөлөп ҡала,
Иңрәп ҡуя көмөш торбалар –
Шул уҡ күктән, шул уҡ юлдан ҡайта
Шул уҡ яҡтан шул уҡ торналар.
Ә ниңә һуң иңрәй торбалар?

Күге, яғы, юлы, эйе, шул уҡ,
Ләкин теүәл микән ҡоштары?
Ҡалғандыр сит илдә ятып, бәлки,
Ҡанаттары һынған дуҫтары...
Ай-һай, теүәл микән ҡоштары?
Иңрәй, иңрәй көмөш торбалар,
Кире ҡайтҡан саҡта торналар.

...Шундай көндө һине ерләйбеҙ беҙ.
Йөҙөң асыҡ. Ҡояш ҡараһын.
Беҙҙең иңде баҫҡан табутыңда
Һуңғы ярға йөҙөп бараһың.

Шундай ауыр. Шундай ауырһың һин.
Абындыра. Ә юл тап-таҡыр.
Дуҫтарыңа, илгә, дымлы ергә
Ауырлығың һалдың тәү тапҡыр.

Һиңә түшәк булыр көпшәк тупраҡ,
Йәшел юрған булыр был сирәм.
...Ошо мәлдә үлемеңде түгел,
Ғүмереңде уйҙан кисерәм.
Ҡырҙа тыуҙың. Аҡ мендәргә түгел,
Арыш көлтәһенә һалдылар.
Баш өҫтөңдә, тап әлеге һымаҡ,

Берсә балҡып нурҙар яндылар,
Берсә болот үтте ялбырап.

Иренеңә әсәң баллы майҙар
Яғалманы (боҙҙо йоланы).
Шуғалырмы, һүҙең хаҡ булһа ла,
Телең һинең татлы булманы.

Кескәй өлөшөңдө ялбарып, һин
Ҡул һонманың һуҡыр тәҡдиргә,
Сөнки һорар өсөн түгел,
Яулар,
Даулар өсөн килдең был ергә.

Ебәк елән кейҙермәне яҙмыш,
Уҡа менән биҙәп, ҡайытып,
Ғүмерлеккә һалды һинең билгә
Туҙмай торған һалдат ҡайышын.

Ун етенсе яҙҙың ярын ашҡас,
Ҡыҙ ҡуйынына инер ваҡытта,
Винтовканды ҡосоп, Перекопта
Төндәр төнәнең һин окопта —
Уйнап ҡына, көлөр ваҡытта.

Баш өҫтөңдә әле түбәң дә юҡ.
Тик ас күҙҙәр һиңә ҡарайҙар...
Шул саҡ хыялландың кешелекте
Йәшәтергә мәрмәр һарайҙа.

Йәки яуҙа, йәки юлда булдың,
Йә сөйәлле,
Йәки яралы
Ҡулдарыңда
Йәки һабан һабы,
Йәки булды һуғыш ҡоралы.

Тәүге тапҡыр донъя тетрәгәндә
Әле алыҫ ерҙә, тегендә,
Коммунизм өсөн ҡанға баттың
Мадрид ҡапҡаһының төбөндә.

Унан,
Йөкмәп донъя яҙмышын, һин,
Аша атлап хәүеф йылдарын,
Ҡыҙырып сыҡтың ярты Ер шарын.

Уйың тура, юлың урау булды,
Аҙмы тайҙың, аҙмы абындың.
«Ғәҙелдәрҙән-ғәҙел» пәйғәмбәргә
Йәнең-тәнең менән табындың.

Аҡты ҡара тиһә — шикләнмәнең,
Дуҫты дошман тиһә — ышандың,
Һөрән һалыр ерҙә оран һалып,
Үтәнең һин бер ул ҡушҡанды.

Һыуҙар аҡты. Ҡараны аҡ йыуҙы.
«Ҡәҙерһеҙҙәр» булды ҡәҙерле.
Һәм һин белдең, пәйғәмбәрең икән
Иман белмәҫ ҡаты бәғерле.
Тик түтәлдәр генә ҡаҙыр ерҙә
Ҡаҙытҡан ул күпме ҡәберҙе...

Барын белдең. Йөрәгеңде тоттоң.
Йөрәгеңдә зәһәр уҡ ине.
Һин сайҡалып киттең, тик ауманың,
Баҫып торған ерең ныҡ ине.

Яуҙар үтте. Бына юл да бөттө.
Йән-тәнеңдә бөтмәҫ яралар.
Инде һине һуңғы окобыңа
Тыныс ҡына алып баралар.
Иңрәп ҡуя көмөш торбалар, —
Тыуған яҡҡа ҡайта торналар...

Шундай көндө һине ерләйбеҙ беҙ...
Кемдәр унда артта, ҡойроҡта,
Ҡупшы эшләпәләр менән,
Һыу болғатып,
Балыҡ тотоп килә ҡуйыраҡта?

Имеш, мәрхүм янмаҫ ерҙә янды.
Файҙаһыҙға, бахыр, өшөнө.
Йүләр ине, йүләр... Усағының
Үтә тура сыкты төтөнө.

Урынһыҙға дәртле йыр йырланы,
Көлһә, имеш, дөрөҫ көлмәне,
Һөрән һалыр сақта оран һалды...
Ҡәҙер күреп йәшәй белмәне,
Ҡыҫҡаһы, бер заман имгәге...

Имгәк кенә түгел, яман ғибрәт,
Ике аҙымдың береһен абынды.
Бар тормошо уның хата булды –
Ялған пәйғәмбәргә табынды...

Туҡта! Кемде хөкөм итәһегеҙ!
Кәпәс һалып баштар эйегеҙ!
Ғорур оран һалыр ерҙә лә
Һеҙ бит һөрән һала инегеҙ.

Йылдар иркен, тип үк төкөрмәгеҙ
Үҙегеҙ ҡашыҡ һуҙған табаҡҡа.
Кем һуң ҡаны менән тормош бирҙе
Һеҙ емешен өҙгән ағасҡа?

Заман ҡырында ул, дауыл үтеп,
Ҡырау күреп үҫкән бер һабаҡ,
Еңеүе лә уның, хатаһы ла
Беҙгә мираҫ, беҙгә ҙур һабаҡ.

Ул коммунист ине. Тыны менән
Туңған планетаны иретте,
Күкрәгендә, йөрәк янында ул
Йомарланған байраҡ йөрөттө.

Йөрәк тынды – башҡа типмәне.
Байраҡты ул алып китмәне...

Күктә яңғырай көмөш торбалар, –
Оло юлдан ҡайта торналар...

*1961*

## ВӘҒӘҘӘЛӘР БИРМӘ

Ағастарҙы һалҡын сихырлаған,
Улар йоҡлай төрөнөп бәҫтәргә.
Ботаҡтарҙы елдәр һелкеткәндә,
Ошо бәҫтәр ҡуна сәстәргә.

Йыбанмай ҙа, гәрсә ашыҡмай ҙа
Ергә тағы Яңы йыл килә,
Артҡа ҡарап, күңел бер бошонһа,
Алға ҡарап, берсә елкенә.
Ана шулай Яңы йыл килә.

Ҡала майҙанында боҙ һарайҙар,
Боҙ йылғалар, боҙҙан – күперҙәр.
Бәләкәстәр ошо күперҙәрҙән
Тылсым донъяһына үтерҙәр.
Бигерәк матур икән күперҙәр.

Ер-күктең бар биҙәктәрен йыйып,
Бейек шыршы тора уртала:
Бер ботаҡта ҡояш балҡып яна,
Бер ботаҡта йондоҙ нурлана,

Бер ботаҡта оса ракеталар,
Бер ботаҡта аттар сабалар,
Бүре менән ҡуян ҡосаҡлашҡан –
Самаларҙан ашҡан самалар...
Ҡыуанышыр бала-сағалар.

Тик шуныһы үкенесле бер аҙ:
Боҙ һарайҙар иреп ағырҙар,
Йәшел шыршы ҡорор, был майҙанда,
Ебәрә алмаҫ инде тамырҙар.

Хәҙер инде минең хыялым да
Ярһып сапмай ҡағыҙ юртаҡта.
Табанымда тупраҡ тойһам ғына,
Ҡеүәттәрем арта шул саҡта.

Ағастарҙы һалҡын сихырлаған,
Улар йоҡлай төрөнөп бәҫтәргә.
Йылдар еле ботаҡтарҙы ҡаға,
Бәҫтәр осоп ҡуна сәстәргә...

Алыҫ дуҫым! Һине уйлайым мин.
Хәбәрҙәрең килер – көтәмен.
Сәләмдәрең килер. Теләктәрең
Яҡшылыр тип өмөт итәмен.

Теләктә бул: миҙгел белеп кенә
Ямғыр яуһын минең еремә.
Улым сирләй. Алған дауалары
Шифа була күрһен сиренә.

Изге теләктә бул. Тик һин мине
Вәғәҙәләр менән йыуатма.
Анау шыршы матур. Ләкин уның
Тамырҙары ҡалған йыраҡта.

«Яңы йылда килеп сығырмын», – тип
Вәғәҙәләр бирмә һин миңә.
Вәғәҙәләр бирмә, килер булһаң,
Иҫ итмәҫтән тот та кил генә.

Ашыр булһаң, бейек тауҙарға аш,
Вәғәҙәләр бирмә һис кенә.
Диңгеҙ кисермен, тип анттар итмә,
Анттар итмә бары һис кенә...
Вәғәҙәләр бирмә һис кенә...

Мин дә илемә вәғәҙәләр бирҙем
Ямғыр булып күкрәп яуырға,
Иң гүзәл йыр йырланасаҡ, тинем,
Ҡайҙа ул йыр?
Яуап алырға
Ваҡыт етә...

Һөйгәнемде күпме
Ебәк вәғәҙәләргә ураным.
Һәр балама мин ай вәғәҙә иттем,
Йондоҙға ҡул яңы һонамын.

Вәғәҙәләр бирмә. Үттек инде
Еңел-елпе йәшәр осорҙо.
Иренмәйек, дуҫым, «Һап!» тиәйек,
Һикереп сыҡҡас ҡына соҡорҙо.

Хәҙер инде беҙҙең буш хыялдар
Ярһып сапмай ҡағыҙ юртаҡта.
Табандарҙа тупраҡ тойһаҡ ҡына,
Ҡеүәтебеҙ арта шул саҡта.

*1963*

* * *

Ҡатындарға ирҙәр сәскәләрҙе
Төнгә ҡаршы бүләк итәләр.
Шуға күрә шиңгән сәскә менән
Ҡаршылана байтаҡ иртәләр.

Бер ҡатлыраҡ шаян саҡтарымда
Ул хистәрҙе мин дә татыным,
Сөнки төнгә ҡаршы
Төнгө һуҡыр
Сәскәләрҙе мин дә ташыным.

Таңда тороп, хәҙер ҡырға сығам,
Ысыҡ кипмәҫ борон гөлдәрҙә;
Ҡояш сыҡҡан саҡта сәскә ҡуям
Ул баш һалған йомшаҡ мендәргә.

*1964*

* * *

Юлдарым йыраҡ, һөйөклөм,
Юлдарым һиңә бара.
Йылдарым япраҡтай ҡойола,
Тик яҡынаймай ара.
Юлдарым һиңә бара.

Йылдарым япраҡтай ҡойола,
Тик зарланыр юҡ зарым!
Бик урау-урау булһа ла,
Һиңә бара юлдарым.
Зарланырға юҡ зарым.

Тимәк, мин әле һөйәмен,
Шул юлдан киләм икән,
Тимәк, әле мин йәшәйем,
Әгәр ҙә һөйәм икән.
Юлымдан киләм икән.

*1964*

## ЯРҘАР ҠАЛА

Бер пароход, төтәй-төтәй,
Ағиҙелдә тулҡын яра.
Палубала
Түбәтәйле,
Сабаталы малай бара.

Малай бара. Ҡайҙа бара,
Тоҡсай аҫып арҡаһына?
Белмәй әле ҡағылырын
Ниндәй яҙмыш ҡапҡаһына.

Малай уйлай: «Ни ғәжәп был,
Күҙҙәремме шулай алдар? –
Мин торамын, аға тауҙар,
Аға ярҙар, аға талдар».

Ул малай – мин. Йылдар аша
Өндәшәмен: «Әй, – тим, – бала!
Беҙ йөҙәбеҙ. Тауҙар ҡала,
Ярҙар ҡала, талдар ҡала...»

Бына хәҙер баҫып торам
Яҙмышымдың карабында,
Сайҡала ул тормош-даръя
Ярҙарының араһында.

Мин торамын. Тулҡын үтә,
Үтә,
Ҡанат ҡаға-ҡаға,
Мин торамын, көндәр аға,
Айҙар аға, йылдар аға.

Теге малай йылдар аша:
«Әй, ағай! – тип һөрән һала. –
Беҙ йөҙәбеҙ. Көндәр ҡала,
Айҙар ҡала, йылдар ҡала...

Заман ҡала. Яуап бир һин,
Көс килтермәй намыҫыңа, –
Ниндәй биҙәк, ниндәй ҡеүәт
Өҫтәнең һин заманыңа?»

Йөрәгемдә шаңдау тора:
Заманыңа... заманыңа...
Заманыңа...

*1964*

## ТАУҘАР

Тауҙар кешеләр шикелле —
Бейек булған һайын
Ғүмерҙәре бәхәслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын.

Түбәләргә болот ҡунһа,
Тиҙ китергә ҡунмай:
Түбәләрҙә боҙҙар туңһа,
Тиҙ ирергә туңмай.

Иҫкән саҡта, елдәр унда
Иҫә зәһәрерәк,
Ҡаяларҙы онтап,
Йәшен
Уйнай хәтәрерәк.

Тауҙар зарланмай. Ғорурлыҡ
Баштарынан ашҡан, —
Кем ҡояш менән һин дә мин
Шул тауҙарҙан башҡа?

Кешеләр тауҙар шикелле —
Бейек булған һайын
Тормоштары бәхәслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын.

Мин дәрәжәне әйтмәйем —
Ул мәңгелек түгел.
Юғарылыҡты билдәләй
Тик юғары күңел.

Юғары күңел гел генә
Аяҙ булып тормай,
Һағыш сорнай бик йыш уны
Йәки шиктәр тырнай.

Замананың дауылдары
Уға килеп һуға.
Ә шулай ҙа ҡояш тәүҙә
Унын өсөн сыға.

Түңгәккә болот уралмай,
Ҡағылмай йәшен.
Зарланма. Зарлана күрмә,
Юғары кешем!

*1964*

* * *

Туған телдә рәхмәт һүҙе әйтәләр,
Шул уҡ телдә ләғнәт уҡыйҙар.
Бер ебәктән ҡыҙҙар сәсүргесе,
Матәм таҫмалары туҡыйҙар.
Тик һин, тыуған ҡара тупраҡ ҡына,
Һин — ер генә,
Тәүге һөйөү кеүек, бер генә.

*1964*

## КЕШЕЛӘРГӘ ТӨРЛӨ ТӨШТӘР КЕРӘ

Кешеләргә яман төштәр керә...
Имеш, ерҙе атом үртәгән,
Океандарҙы быуға әйләндергән,
Тауҙарҙы саң итеп күтәргән.

Кешеләргә яман төштәр керә..
Хаким булған, имеш, диуана,
Ә ғалимдар, диуананы хуплап:
«Аҡыл эйәһе!» — тип ҡыуана.

Кешеләргә яман төштәр керә...
Һөйөү әүерелә хатаға,
Дуҫ тигәне хаин булып сыға,
Ул хыянат итә атаға...

Кешеләргә яҡшы төштәр керә...
Ерҙә, имеш, асыу, шиктәр юҡ,
Ил сиктәре бөткән, кешеләрҙең
Йөрәк араһында сиктәр юҡ.

Кешеләргә яҡшы төштәр керә...
Аҡыл менән намыҫ — тәхеттә,
Ә ахмаҡлыҡ тере мәйет булған,
Яуызлыҡ һәм ялған — ләхеттә.

Кешеләргә яҡшы төштәр керә...
Бар ғашиҡтар берсә ҡауышҡан,
Ул — атаны, ҡыҙ әсәне таный,
Бөтә аҙашҡандар табышҡан.

Кешеләргә төрлө төштәр керә —
Һорап тормай керә — төн менән.
Ямандары төштә генә ҡалһын,
Яҡшылары булһын өн генә.

*1964*

10 – 1.0148.09

## БИЛДӘҺЕҘ ҺАЛДАТ

Һәйкәл тора. Имеш, һөйләйҙәр,
Был – билдәһеҙ һалдат һәйкәле.
Билдәһеҙме ошо баҡыр кеше?
Билдәһеҙме, хәтер, әйт әле?!

Атакаға күтәрелдек бергә,
Йыға һуҡты әжәл бер мәлде,
Ваҡытлыса йәнә терелдем мин,
Ул – мәңгелек һынға әйләнде.

Ҡаршыһында түтәл-түтәл гөлдәр
Изге ялҡын булып яналар,
Баш өҫтөндә таңдан ҡоштар һайрай,
Эргәһендә һайрай балалар.

Ә артында уның сал бер ҡатын
(Ил инәһе – улдыр, моғайын.)
Нисәмә йыл инде өнһөҙ илай,
Һалҡын ташҡа терәп маңлайын.

Еңеү! Ҡояш балҡый бер битендә,
Бер битендә – моңһоу ай һаман,
Бер күҙендән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙендән әсе йәш тама...

*1965*

* * *

*О, Русь моя!*
*Жена моя!*

*А. Блок*

Тыуған ерем, һөйгән йәрем!
Кисер, һиндә гел тормайым.
Елдәй еләм, һыуҙай ағам,
Ер-йомғаҡҡа юл сырмайым.

Юлдар оҙон, көрешеү тиҙ,
Иҫең китер донъя тарға,
Йыраҡ-йыраҡ аралар ҙа
Инә алмай араларға.

Сөнки минең күҙҙәремдә
Яна... яна һинең уттар,
Гөрләй минең күкрәгемдә,
Гөрләй һинең шарлауыҡтар.

Сит ерҙәрҙең мәкеһенән
Ятып һыуҙар эскәнемдә,
Һөйгәнемдең һынын күрҙем
Ҡараңғы һыу төптәрендә.

Тамырға – дым, япраҡҡа – нур,
Һин – илһамым, һин – көс-кәрем,
Һинән башҡа мин – бисара,
Башҡортостан, һөйгән йәрем!

*1966*

* * *

Күктә ай – алтын умарта.
Ә йондоҙҙар – күс иле.
Бар йыһандан йыйып, улар
Нур ташыйҙар, гөж килеп.

Ай тулып та килә, ҡара! –
Башланыуға ни ара.
Былай булғас, йондоҙҙарҙың
Эше ырамлы бара.

*1966*

## ҒӘРӘП ҠЫҘЫ ЛӘЙЛӘ

Ғәрәп ҡыҙы Ләйлә – сүл сәскәһе,
Тик бер тапҡыр һирпеп ҡараның,
Ҡараның да... төньяҡ юлсыһының
Шул ҡарауҙа йәнен арбаның,
Ниңә инде һирпеп ҡараның?

Күҙҙәреңдең бер балҡышын күреп,
Мин – хайрандың күҙе ҡамашты,
Ереҙ буйлап ғәмһеҙ атлай инем,
Күктәреңә ҡарап аҙаштым,
Ике күҙем берсә ҡамашты.

Ун йәшемдә ғашиҡ инем һиңә,
Һин әкиәттә инең ул заман.
Хәҙер һин ысынһың. Бөгөн ҡабат
Малай булдым мин – сал уҙаман.
Гүйә, заман һис тә уҙмаған.

Ғәрәп ҡыҙы Ләйлә – сәхрә еле,
Ҡараш һалдың, күңел һалманың,
Күрәһең, мин буйым, һыным менән
Диҡҡәтеңде тарта алманым,
Ҡараш һалдың, күңел һалманың.

Их, бер генә тапҡыр күрһәң ине
Минең тыуып үҫкән яғымды,
Кәкүктәре шаулар Сағылды, –
Минең тыуып үҫкән яғымды.

Аҡманайҙың аҡ томаны менән
Таңда йыуһаң ине битеңде,
Шишмәбеҙҙең һыуын бер уртлаһаң –
Шул үҙе бер ғүмер бит инде,
Томан менән йыуһаң битеңде...

(Ҡайындарҙың япраҡ ҡойған сағын
Күрһәтергә ҡурҡам – шашырһың,
Төштәреңә керер – һаташырһың,
Һары һағыштарға һабышырһың,
Юҡ, күрһәтмәм, күрһәң – шашырһың.)

Башҡорт һүҙе, башҡортомдоң моңо
Ҡолағыңа тик бер сағылыр.
Бер сағылыр... Сәхәр ваҡытында
Шул моңдарҙы күңелең һағыныр, –
Ҡолағыңа тик бер сағылыр...

Их, бер генә тапҡыр күрһәң ине
Минең тыуып үҫкән яҡтарҙы:
Ер тетрәтеп күктәр күкрәгәнде,
Бурап ҡарҙар яуған саҡтарҙы, –
Минең тыуып үҫкән яҡтарҙы.

Ул ваҡытта, Ләйлә, үҙең миңә
Ғашиҡ булыр инең, моғайын,
Һин йөрөмәҫ инең сит ерҙәрҙә,
Минең кеүек, былай моңайып,
Һине аңлар инем, моғайын.

*1966*

## АЙҺЫЛЫУҘЫҢ КҮҘ ЙӘШТӘРЕ

Ун алтыһы тулған Айһылыуҙы
Аҡҡоштарға тиңләү аҙ төҫлө,
Ул үҙе бит аҡҡош төркөмдәрен
Беҙгә алып килгән яҙ төҫлө.

Ун алтыһы тулған шул Айһылыу,
Ап-аҡ халат кейеп өҫтөнә,
Таңды – кискә, яҙҙы көҙгә ялғап,
Тау яғында ҡоштар үҫтерә.

Ә бер көндө көҙгө себештәрҙе
Барлағанда...
                    икәү тулманы.
Шуны белгәс, мөдир Әбделҡадир
Үрле-ҡырлы килеп туланы.

Ауыр һүҙҙәр, яман һүҙҙәр әйтте,
Бысраҡ һүҙҙәр әйтте балаға.
Нурҙар сәсеп торор ике күҙҙән,
Ике шишмә булып, йәш аға.

Аҡланырлыҡ урын юҡ ҡыҙҙың,
Бөтә ғәйеп уның яғында;
Әбделҡадир ни әйтһә лә хаҡлы –
Әбделҡадир дәүләт һағында.

Күпме кәрәк ап-аҡ туй күлдәген
Бысраҡ атып ҡына тапларға?
Күпме кәрәк сабыйҙың пак күңелен
Ҡара һөрөм менән ҡапларға?

Иламасы, һылыу, туҡта инде,
Онотторға тырыш йәберҙе.
И, кешеләр! Ҡай саҡ беҙ һуң әле
Ниңә шундай ҡаты бәғерле?..

Буласағын, була яҙғандарын
Иҫәпкә беҙ теүәл алабыҙ.
Ҡаҙ юғалһа, оран таратабыҙ,
Себеш үлһә, һөрән һалабыҙ.
Иҫәптәрҙе теүәл алабыҙ.

Ә ҡырылып ҡалған кәйефтәрҙе,
Ә нахаҡҡа тамған йәштәрҙе
Иҫәпләргә ваҡыт түгел микән? –
Кемдән көтәйек ул хәстәрҙе?

Айһылыуҙың түккән күҙ йәшенә
Ысын баһалар ҡуйһам мин әгәр,
Әйтер инем: был – заяға аҡҡан
Алтын шишмәләргә бәрәбәр.

Күҙ йәштәрен юҡҡа түкмәйек.
Улар ҙа бит дәүләт байлығы,
Ул байлыҡты әрәм итмәйек.

*15, XI, 1966*

## УРАМ САТЫНДА ОСРАШЫУ

Миңә үпкә белдерҙе бер ҡатын,
Туҡтатты ла урам сатында:
– Сәләм биреү түгел, баш ҡаҡмайһың,
Һин миңә тап булған сағында.

Шөһрәт һәләк күтәрә лә күккә,
Маһайта шул һеҙҙең халыҡты.

...Мин ғәйепле. Аҡлар һис әмәл юҡ
Иргә лайыҡ түгел ҡылыҡты.

Ыҡ-мыҡ иттем: «Эйе, эйе, – тинем, –
Артта ҡалды йәшлек ярҙары,
Хәтирәнең нәфис сәскәләрен
Күмеп китә заман ҡарҙары...»

«Ярҙар, ҡарҙар... Ҡуйсы! – Көлә ҡатын. –
Шундай мәҙәк бүтән табылмаҫ.
Күптән түгел бәпес туйында бит
Һинең менән булдыҡ табындаш.
Ҡара кистән һары таңға саҡлы
Гөрләп торҙо кәйеф-сафалар.
Ундай кистәр һирәк килә, шағир,
Ундай таңдар һирәк аталар.
Дуҫың менән алмаш-тилмәш миңә
Комплиментлы һүҙҙәр ҡуштығыҙ...»
«Онотҡанмын... Ғәфү, ғәфү, ханым,
Кисерегеҙ мине,
хушығыҙ!»

Әгәр онотһам мин хәтәр юлда
Михнәт уртаҡлашҡан дуҫтарҙы,
Яу ҡырында күкрәгемдең
Утлы
Яраһына баҫҡан устарҙы.
Әгәр онотһам мин ел-дауылда
Мине ышыҡлаған ағасты,

Йәнһеҙ төндә, йәнем өшөгәндә,
Йәнемә биргән ҡарашты
Онотһам мин...

Йәшен атһын мине, йылан саҡһын,
Һәм кешеләр ғәфү итмәһен,
Эсер һыуҙарымдың тәме китһен,
Харам булһын хәләл икмәгем.
Кешеләр ҙә ғәфү итер, бәлки, –
Мин үҙемде ғәфү итмәмен.

Майҙандарҙа бергә бейегәндәр,
Табындарҙа бергә булғандар!
Осрағанда һеҙҙе танымаһам,
Кисерегеҙ мине, туғандар...

*1966*

## БӨТӘҺЕ ЛӘ ЯБАЙ, АСЫҠ...

Сырхауҙарға сихәт булып,
Яраларға булып дауа,
Ҡара ергә аҡ ҡар яуа,
Ҡарт тупраҡҡа йәш ҡар яуа.

Иртә түгел, һуң да түгел,
Миҙгел китте, миҙгел килде,
Һары һағыш уҙған ерҙе
Ап-аҡ йоҡо баҫа инде.

Миңә рәхәт, миңә еңел,
Бөтәһе лә шундай асыҡ,
Айныным буш хыялдарҙан,
Буш өмөттәр китте ҡасып.

Үҙем көткән яҡшы хәбәр
Юлыҡты тап ваҡытында,
Мине эҙләгән ҡыҫыр көйөк
Аҙашҡан, ти, юл сатында.

Ярһыу атта һыбай уҙһа,
Уға ҡарап ымһынмайым,
Буйым етмәҫ ағастарҙың
Емешенә ҡул һонмайым.

Ҡарт та түгел, йәш тә түгел,
Хәҙер мин нәҡ үҙ йәшемдә.
Үтә асы, үтә татлы
Түгел инде күҙ йәшем дә.

Бөтәһе лә ябай, асыҡ:
Ер түбәндә, өҫтә һауа.
Ҡара ергә аҡ ҡар яуа...
Ҡарт тупраҡҡа йәш ҡар яуа...

*1967*

* * *

Һәр аҙнамдың ете көнө
Ете шәмдәй йым-йым итә,
Моңдар сәсеп, ете төнө
Ете көмөш ҡылды сиртә, —
Һинең менән бергә саҡта
Тыуған яҡта.

Һүнгән шәмдәй һәр бер көнөм,
Өҙөлгән ҡыл — һәр бер төнөм, —
Һинән башҡа, яңғыҙ саҡта
Ят тупраҡта.

*1966*

* * *

Дуҫтар, дуҫтар! Таралышмай,
Тарҡауландыҡ,
Балҡып түгел, быҫҡып яныр
Көнгә ҡалдыҡ.

Хатта ағас, хатта утын –
Күрсе, ана! –
Өйөбөрәк бергә яҡҡас,
Дөрләп яна.

*1966*

## ДУҪКА ТЕЛӘКТӘР

Өндәреңдә яҡшы кешеләр күр,
Төндәреңдә татлы төштәр күр.

* * *

Йылын түгел, хатта айын,
Аҙнаһын
Һөйгәнеңдән һуң йәшәргә
Яҙмаһын.

* * *

Әгәр Аҡыл була икән
Энең хатта,
«Һеҙ» тип кенә өндәш уға
Һәр ваҡытта...
Әгәр Талант була ҡалһа
Һинең әшнәң,
Ғәйеп түгел, уға «һин» тип
Һүҙ өндәшһәң.

*1967*

## ӘСӘЙЕМ СИРЛӘГӘНДӘ

Әсәйем ятып сирләй.
Белһәгеҙсе
Миңә нисек ҡыйын икәнен.
Быға хәтле күрмәнем мин уның
Хатта ятып серем иткәнен.

Таңда торһам — усағында уты,
Төндә ҡайтһам — көйрәй күмере.
Исеме лә уның Вазифа шул,
Һәм вазифа — бөтә ғүмере.

Бер кис әйтте: «Ҡуй шул дарыуҙарҙы...
Үҙең оҙаҡ ултыр янымда.
Бергә йәшәп, һирәк күрешәбеҙ
Беҙ — бәндәләр иҫән сағында.

Васыятым юҡ һиңә, мираҫым юҡ,
Өгөт алыр йәштән үткәнһең.
Ҡалдығыҙ өс бөртөк бер башаҡта —
Арала һин салһың, өлкәнһең.

Йөрәгемә туктауһыҙ ут ата
Ауыр уйҙарымдың ғәскәре,
Сөнки минән ҡала, һиңә күсә
Ике донъяның да хәстәре.

Һин юламан булдың. Юлда булдың.
Һағышыма һағыш ялғаның,
Ярты ғүмерем уҙҙы һине көтөп,
Һин китә тип ҡурҡып — ҡалғаны.

Юҡ, юҡ, һуҡранмайым. Мин бит һине
Үҙем шундай итеп яраттым.
Ҡауырһынына ла тел тейҙермәм
Рухыңдағы сая ҡанаттың.

Өс йәшеңдә атҡа мендерҙеләр,
Һин сытырлап ялға йәбештең,
Ә мин сәстәремде услап алдым, –
Һиңә ҡеүәт бирәм, имештер...

Тап шул мәлдә йөрәк-бауырымдың
Бер тамыры ҡапыл өҙөлдө:
Атҡа мендең – ҡулдан киттең, бала,
Тәҡдир һаҡлай күрһен үҙеңде!

Шунан машиналар, ярапландар
Һине минән алып ҡастылар,
Мин уларҙы ҡарғаманым, улар
Һине кире алып ҡайттылар.

Урмандарға сыҡтым һағыныуҙан
Сыҙамдарым бөткән саҡтарҙы.
«Мостафа-а!» – тип саҡырҙым мин һине.
Рәхмәт,
Урман яуап ҡайтарҙы.

Сирле инең ситтә. Төшкә кермәй
Яфаланың шулай бер заман.
Таң торам да Әскәптәргә инәм,
Инәм дә шул зарҙы зарланам.

Әскәп әйтә бер көн: «Таң алдынан
Мостафаңды күрҙем төшөмдә,
Аҡбуҙатта һыбай, имеш, үҙе,
Ап-аҡ күлдәк, имеш, өҫтөндә...»

Әскәп алдай, ә мин алданамын,
Икебеҙ ҙә әрнеп илайбыҙ.
Аҡбуҙатҡай менән аҡ күлдәкте
Иҫән күрешеүгә юрайбыҙ.

Һин һуғышта саҡта
Ҡыштар һыуыҡ,

Ҡар-буранлы булды, – зәһәрле.
Һине уйлап, дер-дер ҡалтырандым
Ҡара күҙҙән яҙға ҡәҙәрле.

Күҙ алдымда торҙо: һин гел генә
Бурандарға ҡаршы бараһың,
Билдән ҡарға бата-бата-бата,
Бүтәндәргә юлдар яраһың.

Шундай бер төн мин, далаға сығып,
Елгә ҡаршы юлһыҙ атланым.
Киттем, киттем, Ҡаҡ түбәне үттем,
Эҙҙәремде ҡарҙар ҡапланы.

Бирешмәйем, һаман барам, барам,
Тиҫкәре ел йәнде өҙөрлөк.
Үҙем барам, үҙем оран һалам:
Түҙ, түҙ, балам! Әҙәм түҙерлек!..

...Бына шулай, теҙмә-теҙмә булып,
Бөтәһе лә килде хәтергә.
Күрәһең, бер яйҙа кеше үҙенең
Әйтер һүҙен тейеш әйтергә.

Васыятым юҡ һиңә, мираҫым юҡ,
Өгөт алыр йәштән үткәнһең.
Ҡалдығыҙ өс бөртөк бер башаҡта –
Арала һин салһың, өлкәнһең...»

Әсәй!
Мине күптән еңгән булыр ине
Ҡаршы елдәр, ҡаты яралар,
Һин тормаһаң әгәр, ҡалҡан булып,
Хәүеф менән минең арала.

Бирешмәсе, зинһар, бирешмәсе,
Терелә күр инде, әсәйем!
Тағы бер аҙ һинең ышығында
Хәүеф-хәтәр күрмәй йәшәйем.

*1967*

## КЕСКӘЙ АЛЬЫУҒА

Ни мөғжизә, ни ғәжәп был? –
Бар донъя зәңгәр бөгөн,
Зәңгәр ҡояш сәсә ергә
Зәңгәр нурҙар бөртөгөн.

Зәңгәр иген баҫыуҙарын
Тибрәтә зәңгәр елдәр,
Зәңгәр урман буйҙарында
Яңғырай зәңгәр өндәр.

Зәңгәр тауҙар араһында
Һибәләй зәңгәр ямғыр,
Бына-бына зәңгәр йәйғор
Зәңгәр офоҡта яныр.

Зәңгәр даръя, зәңгәр кәмә...
Мин йөҙөп барам икән.
Юҡ, йөҙмәйем, һинең зәңгәр
Күҙеңә бағам икән.

Сабыйым, саф күҙҙәреңдә
Донъяның һынын күрәм.
...Инде төн. Зәңгәр йондоҙҙар
Ҡабына берәм-берәм.

*1967*

* * *

Һауалағы бөркөт һымаҡ,
Ғорур инем. Йәш инем.
Бар донъяға баш бирмәнем,
Мөхәббәткә баш эйҙем.

Үтте йәшлек, елеп үтте.
Артында туҙҙы туҙан.
Хәҙер инде уҙыр юлды
Туҙан туҙҙырмай уҙам.

Тик бөгөлмәҫ билем
Хатта
Пәйғәмбәр Мөхәммәткә,
Нескә талдай бөгөлә ул
Һаман шул мөхәббәткә.

Юл осланыр... Ап-аҡ ҡарға
Ҡапланырҙар түбәләр.
Шул саҡ бер юлы әйтелер
Әйтеләсәк тәүбәләр.

Әммә әжәл ҡаршыһында
Теҙләнергә самам юҡ.
Шул саҡ Мөхәббәт алдында
Теҙләнермен – сарам юҡ.

*1967*

* * *

Ярһыу Танып буйҙарында
Алһыу таңдар яна ине,
Тирәктәге бер һандуғас
Йөрәктәрҙе яра ине,
Һөйөүенән, һағышынан
Үҙе дөрләп яна ине.

Әйт, ҡошсоғом, йәрең ҡайҙа?
Табышырмын. Мин бит кеше.
Мин бит көслө. Үҙем ғашиҡ,
Үҙем янам, һинең ише.

Ике ҡуллап йыртыр инем
Зәңгәр офоҡ пәрҙәләрен,
Әгәр шунда күрер булһаң
Һөйгәнеңдең кәүҙәләрен.

Башым менән ярыр инем
Күктең алтын көмбәҙҙәрен,
Аръяғында табыр булһаң
Һөйгәнеңдең тик күҙҙәрен.

Йөрәгемде атырмын да
Яндырырмын диңгеҙҙәрен,
Төптәрендә ҡалған булһа
Һөйгәнеңдең тик эҙҙәре.

Әйт, ҡошсоғом, йәрең ҡайҙа?
Табышырмын. Мин бит кеше.
Мин бит көслө. Үҙем ғашиҡ,
Үҙем иҫәр, һинең ише.

*1968*

* * *

Ҡот осҡос төш күрҙем бер төндә:
Бар йөк төшкән, имеш, өҫтөмдән:
Бөтә донъям тамам көйләнгән,
Барлыҡ бурыстарым түләнгән.
Биргән вәғәҙәләр үтәлгән,
Данды өҙөп алам түтәлдән,
Дуҫ маҡтамай, дошман үсләшмәй,
«Төшөргәндә» һис кем өндәшмәй.
Яҡынайған бөтә аралар,
Бөтәшкәндәр бөтә яралар,
Ҡылыр изгелектәр ҡылынған,
Гонаһтарым тотош йолонған...
...Өн ишетәм: «Эшең бөткәнме?
Бөткән булһа, күтәр үксәңде
Был донъянан!»

*1968*

## ҺАБАНТУЙҘАН ҠАЙТЫП КИЛӘМ

Һабантуйҙан йәйәү ҡайтып киләм...
Көн эҫеһе инде баҫылған.
Бөтә нәмәм теүәл, тик нишләптер
Кәпәс төшөп ҡалған башымдан.

Кәпәс нимә! Баш ҡына һау булһын.
(Ерҙә тулып ята бәрәкәт.)
И-һи! Күпме мәрәкәләр күрҙем,
Һәм үҙем дә булдым мәрәкә.

Үрмәләгән булдым бағанаға...
Дарман әйтте дәрткә: «Ҡуй, энем!..»
«Барыня»ға көсләп бейеттеләр,
«Сабата»ға үҙем бейенем.
Көс һынашты алыш майҙанында
Саяраҡы иһә ир-аттың,
Мин – бер ҡатлы, кеше көлдөрәм тип,
Күҙҙе бәйләп, көршәк ҡыйраттым.

Көн өҫтөндә байтаҡ ғибрәт күрҙем –
Һәр кем тыңдаш үҙе тиңенә:
Тегеләр бал эсеп аҡыл туплай,
Былар айран эсеп тилерә.

Һабантуйҙан йәйәү ҡайтып киләм.
Ҡаршы осрағандар туҡтайҙар:
– Үткән байрам менән!
– Уҙған менән! –
Ҡул ҡыҫалар –
Йәғни ҡотлайҙар.

Йәше-ҡарты, зирәк-йүләр заты
Бары ла хуплай ихлас уй менән:
– Гөрләп үткән йәмле байрам менән!
– Шаулап уҙған һабантуй менән!

Ҡуйығыҙсы... Әҙәпкә көс килер,
Һыйпамағыҙ ялбыр аҡ баштан,
Йыуатмағыҙ уҙған рәхәт, бәхет,
Уҙған ғүмер менән, яҡташтар.

Ҡыҙынмайыҡ батҡан ҡояшҡа беҙ,
Мауыҡмайыҡ үткән эш менән,
Ҡотлашайыҡ китҡән бәлә менән,
Бөткән сирҙәр, кипкән йәш менән.

Ҡайтып киләм. Башта кәпәсем юҡ,
Баш һау булһа, кәпәс табылыр...
Арғымаҡты менеп, һабантуйға
Мин барырмын әле тағы бер!

*1968*

## САҠЫРМАҒЫҘ, ТАУҘАР...

*Рәсүл Ғамзатовҡа*

Саҡырмағыҙ, тауҙар, мине,
Ҡотортмағыҙ, тимен!
Мин үҙәндә торам хәҙер,
Бында тыныс, имен.

Ҡояш бында һуңлап ҡалҡа,
Ә алдараҡ бата,
Иртә-кисен һүлпән эңер
Ерҙә оҙаҡ ята.

Донъям менән ризамын мин,
Шөкөр – ҡылғаныма.
Һәм ҡағылмай хатта ел дә
Башым ҡылғанына.

Арҡаланым, буғай, инде
Хыял – толпар атты.
Мөхәббәт тә, дәртен баҫып,
Ояһына ҡайтты.

Саҡырмағыҙ, тауҙар, мине,
Ҡотортмағыҙ, тимен!
Мин үҙәндә торам хәҙер,
Бында тыныс, имен...

Тауҙарҙағы һуҡмағыма
Таш ҡаялар ауған,
Йәшләй баҫҡан эҙҙәремә
Ҡарлы боҙҙар яуған.

Унда дауыл, унда күкрәү.
Һәр аҙымың – хәтәр.
Яҙа баҫһаң, һинең хаҡта
Килер бары хәбәр...

Бында рәхәт. Шул рәхәткә
Саҡ-саҡ ҡына түҙәм...
...Мин тауҙарға китәм бөгөн,
Хуш бул, тыныс үҙән!

*1968*

* * *

Дау күтәрә йәнем, ҡырау һуғып,
Үлән ҡыяҡтары ҡаралһа,
Үкһей йәнем, атылып һүнгән йондоҙ
Ҡәбер тупрағына ҡаҙалһа.

Шәфҡәт ҡайҙа? Шундай бәрәкәтһеҙ
Тәбиғәттең барлыҡ иккәне.
Килгән ниңә китер өсөн килә,
Ниңә кире ҡайтмай киткәне?
Дау күтәрә йәнем... Ниңә фани
Был йыһандың барлыҡ иккәне?

Ғаҡылым тыныс. Бөтә нәмә асыҡ –
Һис урын юҡ фараз итергә.
Донъя фани. Киткән кире ҡайтмай,
Ә килгәндәр килә китергә.
Ғаҡылым аяҙ. Хөкөм күптән сыҡҡан.
Һуң инде, һуң дәғүә итергә.

*1968*

## ӘЙЛӘНӘ КАРУСЕЛЬ...

Әйләнә карусель, әйләнә,
Карусель ҡоролған хәйләгә.

Осҡаны, сапҡаны, йөҙгәне
Һәм ерҙә һөйрәлеп йөрөгәне –

Һәммәһе бер тигеҙ елдерә,
Ел үҙе уларға юл бирә.

Бер ҡатлы кешеләр шаҡ ҡата:
– Боландан ҡалышмай ташбаҡа!

– Сысҡанды күрергә килегеҙ:
Кәүҙәгә фил менән бер тигеҙ...

Әйләнә карусель, әйләнә,
Карусель ҡоролған хәйләгә.

Ир бала атланған толпарға,
Ҡыҙ бала ултырған шоңҡарға.

Толпарын малай эй ҡамсылай,
Ҡамсылай... Шиге юҡ тамсылай –

Елдереп етәсәк дусына,
Бына ул дусына ҡул һона.

Ҡыҙ бала әйләнеп артына,
(Ул бәхет талында талпына)
Йылмайып, малайға тартыла.

Күҙгә – күҙ, ҡулға ҡул үрелә –
Өрөлә ике гөл бөрөлә.

Бер аҙым ни бары аралар...
Тик шундай бер аҙым ара бар:

Бер аҙым арала – даръялар,
Күктәргә ҡаҙалған ҡаялар,

Ҡояштан ергәсә юл ята,
«Мәңгелек» исемле йыл ята, –

Әгәр һин атланһаң толпарға,
Әгәр ул ултырһа шоңҡарға.

Сөнки бит карусель әйләнә,
Карусель ҡоролған хәйләгә...

Туктаны карусель. Бына ер,
Эй, малай, ҡыҙыңа ҡулың бир!

Ебәрмә устарын усыңдан,
Аҙым да айырылма дуҫыңдан –

Сөнки бит Ер шары әйләнә,
Ер шары ҡоролған хәйләгә...

*1968*

## МЕНДЕМ БЕЙЕК ТАУҘАРҒА

Мендем дә бейек тауҙарға,
Ҡараным ауылдарға,
Сәләмдәремде ебәрҙем,
Ҡушып ел-дауылдарға.

Һин йоҡонан уянғанда,
Алһыу таң атҡан булыр.
Таң түгел, минең һағышым
Тәҙрәңде ҡаҡҡан булыр.

Таң нурҙарын тараҡ итеп,
Сәсеңде тарар инең,
Шул саҡ беҙҙең тарафҡа ла
Әйләнеп ҡарар инең.

Мендем дә бейек тауҙарға,
Ҡараным ауылдарға,
Мөхәббәтемде ебәрҙем,
Ҡушып ел-дауылдарға.

*1968*

* * *

*Хәсән Туфанға*

Һандуғаска ниңә буй-һын,
Нимәгә уға биҙәк?
Таңда бер һайрап ебәрһә,
Биш ҡат өҙөлә үҙәк.

Шағирға ниңә чин кәрәк,
Нимәгә уға титул?
Батшалар ятлап алырлыҡ
Шиғырҙар яҙа бит ул.

*1968*

## САЛ СӘСТӘРЕМ

«Туҙғаҡ башың ниндәй ҡайғыларҙан
Ағарҙы?» – тип бирәү һораны.
Ошо һорау ҡаршыһында, ҡаушап,
Малай кеүек баҫып торамын.

Еңел ҡотолор инем, аҡ сәстәрҙе
Ҡайғыларға ғына япһарһам...
Әммә хәтер ҡулы берәм-берәм
Сал иҫтәлектәрҙе аҡтарһа,

Ошо аҡ сәстәрҙең, йым-йым итеп,
Тарихтары көйрәй ҡуҙ булып,
Бер төк сәсем янып көлгә ҡалһа,
Икенсеһе туңды боҙ булып.

Янғандары әрнеүҙәрҙән янды.
Афәт килгән саҡта илемә,
Ил ҡайғыһы төштө был башыма,
Яфалары төштө иңемә.

Янғандары мөхәббәттән янды.
Үҙем яндым.
– Ҡотҡар! – тимәнем.
Көйгәндәре һағыштарҙан көйҙө,
Көйгән башты түбән эймәнем.

Янғандары шиғыр өсөн янды,
Шиғырҙағы иман хаҡына, –
Атланмаһын, тинем мин, яманлыҡ
Яҡшылыҡтың күндәм атына.

Туңғандары үкенеүҙәрҙән туңды,
Выжданымды бөргән ғазаптан.
Ҡылған ҡылыҡтарға күпме тапҡыр
Тәүбә итергә ҡалды аҙаҡтан.

Хәтерләйем, ҡапыл ҡаушап ҡалдым
Беренсе ҡат яуға ингәндә,
Ә бит уға тиклем батыр инем
Бәхәскә һәм дауға тигәндә.

Үкенәм хәҙер: һалҡын ирендәрем:
«Янып һөйәм!» – тине бер саҡты,
Аҫҡа ҡарап, тик ултырыр ерҙә,
Аяҡ үрә баҫып, ҡул саптым.

Бер көн, күрәләтә, минең ҡулдан
Яза алмай ҡалды яман зат,
Ишек ярығынан өйгә инде
Бармаҡ буйы ғына ярамһаҡ.

Эйе, күпте күргән был башымдың
Бер үк заттан түгел аҡтары,
Шуға күрә күңелемә төштө
Ҡайһы аҡтарҙың ҡара таптары.

Ғүмерҙең бер тәңгәлендә шулай
Әсенеп үк «терһәк тешләйбеҙ...»
...Ҡайғы иһә беҙҙән һорап килмәй,
Үкенестәрҙе үҙебеҙ эшләйбеҙ.

*1968*

## ШАҒИР ШАТЛЫҒЫ

Шатлыҡ һөйләргә шағирға
Килерме кем дә берәү?
Шатлыҡ ҡанатлы заттан ул —
Кәрәкмәй уға терәү.

Кешеләр килә шағирға
Мәшәҡәт, хәстәр менән,
Керпектәре осондағы
Тулышҡан йәштәр менән.

Бар ғаләмде йыуатырға
Шағир ҙа Алла түгел,
Телгеләп үк бирер ине —
Йөрәге алма түгел.

Ҡалдырып китәләр уға
Борсолоу, әрнеү, яра...
Шуға уның ҡарашында
Моңһоулыҡ арта бара.

Бер кис шағир күҙҙәренән
Бөркөлөп нурҙар аҡты,
Гүйә, сулпан алдан ҡалҡып,
Сылтырап таңдар атты.

Шағир өйөндә шундай бер
Тамаша булған икән:
Таянып килгән таяғын
Бер ҡарт онотоп киткән.

*1968*

* * *

Йылан зәһәр булыр өсөн
Ағыу эсмәй,
Асыл сәскә һуттарынан
Ағыу эшләй.

Һине маҡтап, тәмләй-тәмләй
Шәрбәт эскән:
— Был, моғайын, умарталыр, —
Тимә эстән.

*1968*

* * *

Ап-аҡ ҡағыҙ һалдым мин алдыма,
Ап-аҡ ҡағыҙ,
Ҡара ҡәләм алдым мин ҡулыма.
Ашыҡмағыҙ,
Бармаҡтарым, аҡты сыбарларға
Ашыҡмағыҙ!
Таңда тыуыр сабый яҙмышы бит –
Ап-аҡ ҡағыҙ.

Аҡ ҡағыҙға күндәм ҡара ҡәләм
Яҙмай ниҙәр.
Шуға күрә: «Ҡағыҙ бөтәһенә
Түҙә», – тиҙәр.

Аҡ ҡағыҙға һөйөнсөләр яҙа,
Яҙа сәләм,
Үлем, яза хөкөмдәре яҙа
Ҡара ҡәләм.
Ялбарыуҙар яҙа, йәнә яҙа
Ярлыҡауҙар.
(Шәфҡәтһеҙ үк түгел был донъяла
Ярлыҡау бар!)

Һуғыш йәки солох әмерҙәре
Яҙа ҡәләм,
Күҙ төбәгән ҡара шул ҡәләмгә
Барлыҡ ғаләм.

Һөйөклөм, мин бурап ҡарҙар яуған
Тарафтамын.
Яҙып ебәр бары бер генә һүҙ:
«Яратамын...»

*1968*

* * *

Әсә ҡарынынан сығып, кеше
Ер ҡарынына керә.
Шул арала йә ул донъя ҡора,
Йәки ғүмер һөрә.

*1969*

* * *

**Ул әйтә:**

— Гел китәһең, гел китәһең,
Гел китәһең яндарымдан,
Ағын һыуҙар шулай ағып,
Йыраҡлаша ярҙарынан.

Һин китәһең, мин көйәмен —
Ут сәселә урттарымдан,
Һин китәһең, гүйә, карап
Сығып китә порттарынан.

**Мин әйтәм:**

— Мин ағын һыу. Бар юлымда
Һин, ҡәҙерлем, алтын ярһың,
Мәңге ағыр дарьялар ҙа
Ярын ташлап ҡайҙа барһын?

Карап булһам, мин ҡайтырмын,
Төн ҡараһын яра-яра.
Ҡабыҙып бар уттарымды,
Мин ҡайтырмын, яна-яна.

Карап тулы хазиналар,
Хазиналар... — Икебеҙгә!
Карап тулы һөйөү, һағыш —
Меңәр йылға етер беҙгә...

*1969*

* * *

Был ҡаланан китәйек беҙ, йәнем,
Йорт нигеҙе шөйлә мүкләнде,
Өмөт-хыял төшмәҫ түр башына
Бик йыш мендерәбеҙ үткәнде.

Шәүлә һымаҡ, гел эйәреп йөрөй
Уҙған ғүмер, ҡалған хәтерҙәр.
Һәм өшөтә беҙҙе зыяраттарҙан
Йөрәктәргә күскән ҡәберҙәр.

Күләгәләр, көн кисеккән һайын,
Көн сигенгән һайын, һуҙыла,
Төнгә ҡаршы, ана, тулҡындар ҙа
Ярға нисек һүлпән һуғыла.

Сит ҡалаға китәйек таңда,
Яңы йондоҙ ҡалҡыр түбәлә.
Мин әйтермен: «Ана, һинең яҙмыш
Йондоҙ булып күктә тирбәлә».

Сит ҡалала булмаҫ хәтерләүҙәр,
Йорт-йыһазға һеңгән ваҡыттар.
Бында тороп ҡалыр мин тулаған,
Һин үпкәләп йөрөгән ваҡыттар.

Инде аҙашыр беҙҙең бала саҡтар
Урман һуҡмағында, тегендә,
Тороп ҡалыр йәшлегебеҙ
Һине
Тәү осратҡан ҡапҡа төбөндә...

Туҡта, туҡта! Нисек инде улай? –
Йәшлек ҡалыр, ә беҙ китербеҙ.
Йәшлекһеҙ һуң унда, сит ҡалала,
Нисек кенә ғүмер итербеҙ?

Яҙҙым да үҙем ошо юлдарымды,
Үҙем ҡапыл ҡуйҙым моңайып.
...Йорттан ҡуҙғалмабыҙ, моғайын.

*1969*

## ӨС СИФАТТА КҮРӘМ, ӨС ҺЫНДА...

Мин тағы ла ситтә, Башҡортостан,
Матур исемең телем осонда.
Оҙон төндә һине төштәремдә
Өс сифатта күрәм, өс һында –
Әсәм, бисәм, ҡыҙым һынында.

Әсәйемә мең йәш, хатта ашыу...
(Әсә йәшен кем һуң һанаһын!)
Волга менән Йайыҡ араһында
Итәк тулы булған балаһы.

Минең ҡаным, минең сая рухым
Алыҫтағы бабам тәнендә –
Тыумаһам да, яралғанмын, тимәк,
Бынан мең йыл элек кәмендә.

Күҙҙәремдә яна хөр далала
Мең йыл һүнмәй осҡан саҡтылар.
(Өркөтөлгән ҡырағай аттар һымаҡ,
Уйҙарым шул яҡҡа саптылар.)

Әсәйемә мең йәш. Мин һорайым:
– Әсәкәйем, бәхет күрҙеңме?
– Көн менән төн күрҙем, ут менән һыу;
Йәш тә, нур ҙа йыуҙы күҙемде.

Яуабымды мин тупраҡҡа яҙҙым
Һинең һорауыңдан элгәре:
Әрнеүҙәрем – әсе әремдәрем,
Шатлыҡтарым – баллы гөлдәрем.

Барын күрҙем, бөтәһен дә ҡылдым:
Ҡорал тоттом, доға уҡыным;
Тауҙар ишелделәр, ҡороно диңгеҙ, –
Ҡоротманым башҡорт тоҡомон!..

Әсәйемә мең йәш. Унан ҡала
Һиңә өндәшәм, бисәм-йәштәшем:
Бәхетлеһеңме һин?
Ярты быуат
Был тупраҡта нисек йәшәнең?

...Бәхетлеме? Бәлки, кәрәкмәйҙер
Бәхетлегә бәхет юрауҙар.
Килгән болот китер өсөн килде,
Бөтөр өсөн төштө ҡырауҙар.

Ярты быуат ҡояш нурын эсәм —
Минең өсөн тыуған ҡояштың.
Упҡындарҙан сығып, уйым менән,
Буйым менән күккә олғаштым.

Ярты быуат буйы ҡанат ҡағам
Өмөттәрҙән, дәрттән, һөйөүҙән.
Ҡай ваҡытта ҡапыл ҡурҡып ҡуям
Йәшәүемә ят күҙ тейеүҙән.

— Хәҙер һин әйт, ҡыҙым,
Ҡулыңдамы
Аҡ бәхеттәр тулы аҡ тәгәс?
— Бәхетте һуң нисек танийым мин,
Бәхетһеҙлектәрҙе күрмәгәс?..

Телә миңә, һеҙҙең ашҡыныуҙар,
Һеҙҙең идеал булһын яраным.
Әйткәнең бар: «Бәхет ул — тик алда».
Һәм мин уға табан барамын.

...Һинән алыҫта мин, Башҡортостан,
Матур исемең телем осонда.
Оҙон төндә һине төштәремдә
Өс сифатта күрәм, өс һында —
Әсәм, бисәм, ҡыҙым һынында...

*1969, Малеевка*

## ҮҘЕМӘ ӘЙТКӘН ҺҮҘ

Тәү һүҙемде әсәйемә әйттем,
Икенсеһен ергә өндәштем.
Шунан ары бүтәндәргә күпме
Өгөт бирҙем, «аҡыл өләштем».
Баҡһаң икән, аҡылдарға һыуһау,
Кәңәштәргә мохтаж үҙем бар,
Шул үҙемә бөгөн һүҙем бар:

Ғүмер уҙған һайын, беҙҙе алып
Йылдар етеҙерәк сабыр ул,
Йылдар саба тип үк сәбәләнмә,
Сабырыраҡ бул һин, сабыр бул.

Эйелеп-бөгөлөп барма һәр тарафҡа.
Бөгөлә икән, талдар бөгөлһөн;
Елберләмә һәр уҙғынсы елгә,
Елберләмә, уҫаҡ түгелһең.

Һыйҙар күрһәң, талымһыҙҙан булма,
Миҙгел белеп үрел ҡашыҡҡа;
Елгә еленләгән һәр уйыңды
Илгә таратырға ашыҡма.

Ағыу менән дарыу бер үк заттан,
Тик самалар — төрлө саманан;
Самаларҙан сығып дан йырлама,
Һәм хөкөм дә итмә ҡабалан.

Айға менһәң, үрә һикермәй тор,
Ҡояш бар бит айҙан юғары;
Түрҙән төшһәң, «гүргә төштөм» тимә,
Унан сыҡҡан әҙәм юҡ әле.

Ауырлыҡтар ауһа иңдәреңә,
Еңеләйтер сара табыр бул.
Ауырына, хәйер, түҙерһең һин,
Еңеленә сыҙа, сабыр бул.

*1969*

## ӘЛДӘ ГАРМУНСЫ ТҮГЕЛМЕН

Ташты Ағиҙел, ташты Дим,
Ярға һыймай һыуҙары.
Ярҙан ашҡан һыуҙар кеүек
Йөрәктең ярһыуҙары.

Килде йәшлек, балҡып килде
Яҙғы йәшендәр менән.
Таң нурҙарына тотоноп,
Гүйә, күктәргә менәм.

Тау битендә ҡыҙҙар бейей –
Береһенән-береһе һылыу.
Ниндәй бәхет – шул сағында
Ҡыҙ ҡарар егет булыу.

Аҡҡош ҡанатына яҙҙым
Берәүһенең исемен.
(Пәйғәмбәрҙән дә өҫтөнмөн,
Тик Хоҙайҙан кесемен.)

Зәңгәр моң арбай һауаны,
Йәшел моң – ҡырҙар иңен.
Их, гармунсы түгелмен шул –
Бер уйнап, йырлар инем
Яңғыратып ҡырҙар иңен.

...Ярҙарына ҡайтты һыуҙар,
Тынды яҙғы йәшендәр,
Япраҡтарҙа – көҙ һарыһы,
Тик ҡурпылар йәшелдәр.

Кискә ауыша һүрән көн,
Усаҡта көйрәй ҡуҙҙар,
Ейәндәргә әкиәт һөйләй
Бая бейегән ҡыҙҙар.

Килмәй хатта сәләмдәр ҙә
Йәшлек тарафтарынан,
Һибелеп ҡалды ҡауырһындар
Аҡҡош ҡанаттарынан.

Аҡҡоштар китә күленән,
– Булһын, – тим, – юлдар имен!
...Әлдә гармунсы түгелмен,
Уйнар ҙа илар инем...

*1969*

## УҢДЫМ

Ярты быуат тигән ят түбәгә,
Бәй, килеп тә шулай ҡундыммы?
Тирә-яҡҡа ҡарап, сама йөрөтәм:
Уңдыммы, тим, әллә туңдыммы?

Уңдым.
Тыуған йылым ун туғыҙҙан уңдым,
Октябрҙән — тыуған айымдан, —
Ана нисек минең юлдарыма
Һары йондоҙ һибә ҡайындар.

Тупрағымдан уңдым. Башҡортостан!
Һин иманым минең, ҡәҙерлем,
Күк сымылдыҡ ҡорған сәңгелдәгем,
Һиндә булһын йылы ҡәберем.

Кешеләрҙән уңдым. Улар мине
Өйрәтте, тик юҡҡа ҡаҡманы.
Дуҫтарымдан уңдым. Улар керҙе
Ҡағып тормай ҡапҡаны.

Мөхәббәттән уңдым. Ышанысты
Өҫтөн ҡуйҙы барлыҡ анттарҙан;
Шик белдереп үҙен кәмһетмәне
Хатта шикләнерҙәй саҡтарҙа.

Яуҙарымдан уңдым. Еңеү килде,
Килде һәләкәттәр сигендә.
Яраларҙан уңдым. Көн элгәре
Алып китмәнеләр «тегендә».

Бара торғас исемемдән уңдым:
Кеше алдында кәм-хур итмәне.
Һәм холҡомдан уңдым: илертмәне
Маҡтауҙарҙың татлы икмәге.

Күп нәмәнән уңдым.
Рәхмәт һеҙгә,
Хәйерле төн һеҙгә, үткәндәр!
Эйе, уңдым. Күп нәмәнән уңдым.
Минән уңды микән бүтәндәр?

*1969*

## ХЫЯЛ

Күтәрелдем бейек түбәләргә,
Сәләм бирҙе миңә шаңдауҙар.
Тауға ҡарап, тау булаһым килде.
Ах, хыялым минең – шул тауҙар.

Диңгеҙ кистем. Тулҡындар, һеҙ ниңә
Йөрәгемә бәреп индегеҙ?
Индегеҙ ҙә ҡабат тынманығыҙ.
Ах, хыялым хәҙер – шул диңгеҙ.

Ғүмерлеккә ғашиҡ булдым һиңә,
Һәр бер һулышыңды тоямын.
Һөйҙөң дә һин, һөйҙөрә лә белдең,
Тик һаман һин минең хыялым.

*1969*

## ҺӨЙГӘНДӘР ГЕНӘ СИБӘР

Быйыл ғына буйға етте
Буй урамдағы Дилбәр.
Өҙгөләнә ошо Дилбәр,
Түгелмен бит, тип, сибәр.

Ҡаштары ла көндә көйгән,
Танауы ла һипкелле,
Йәнәһе, ул төҫкә-башҡа
«Ен пәрейе» шикелле.

Ун етеһе тулған төндә
Ғәжәп төш күрҙе Дилбәр:
Имеш, ул зифанан-зифа,
Бар сибәрҙәрҙән сибәр.

Халыҡ таң ҡала: был һылыу
Ниндәйен илдән икән?
Күҙ теймәһен! Үҙебеҙҙең
Буй урам Дилбәр икән.

Гөл һибә ғашиҡ егеттәр
Уның баҫҡан эҙенә.
Дилбәрҙең өмөт шоңҡары —
Шәриф бигерәк өҙөлә...

Йылмайып уянды Дилбәр,
Шатлыҡ һыймай эсенә...
Нисек кенә, нисек кенә
Түҙер үкенесенә?

Яҡты таңда ҡара зарын
Һөйләр был ҡыҙ кемдәргә?
Аҡты ҡайнар күҙ йәштәре,
Аҡты ап-аҡ мендәргә,
Төштән ҡайтҡас өндәргә.

Шул уҡ төндө шофер Шәриф
Уйлап ятты Дилбәрҙе,
Әллә нисә әйләндерҙе
Ялҡын алған мендәрҙе.

Уятты тауҙар түбәһен,
Яҙғы һары таң атып,
Ойоп китте егет шул саҡ,
Һары һағышҡа батып.

Йоҡо түгел, тотош яза:
Ул йән атҡан Дилбәре,
Имеш, хәҙер ят ҡулында.
– Илдәрҙең иң сибәре!
Йән аттым, тик һүҙ ҡатманым
Ниңә генә элгәре?!

Үкенес, әрнеүҙән егет
Бер туңды ла бер янды,
Йөрәген усына алып:
«Уф, йәнем», – тип уянды...

Уфтанмаҫ бынан һуң Шәриф,
Иламаҫ инде Дилбәр...
Юҡ, сибәрҙәр сибәр түгел,
Һөйгәндәр генә сибәр.

*1969*

### БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостан — изге тупрағыбыҙ,
Аяҙ, яҡты һинең таңдарың.
Талдарыңдан ҡара ҡандар түгел,
Тама хәҙер татлы балдарың.

Башҡортостан! Балҡып тораһың һин
Нурҙарында илле ҡояштың...
Төйнәлдәрҙән сығып, уйың менән,
Буйың менән күккә олғаштың.

Башҡортостан — алтын бишегебеҙ!
Ул бишектә беҙҙең ҡотобоҙ.
И, кешеләр! Затлы шул бәхетте,
Ҡәҙерен белеп, һаҡлап тотоғоҙ.

*1969*

# *ПОЭМАЛАР*

## ТАНЫШ БУЛМАҒАН ҠУНАҠ

I

Шәүләләр оҙон һуҙылды
Көнсығыш яҡҡа табан,
Ерҙе еңел һалҡын һыйпай,
Усаҡта уттар яна.

Салғы сыңдары тындылар,
Бик алыҫта юғалып.
Эшсе ҡырмыҫҡа шикелле,
Таборға ҡайтты халыҡ.

Бал ҡорто һымаҡ гөжләшкән
Бик ҙур бер ғаилә булып,
Йәм-йәшел балаç өçтөндә
Киске аш уҙғарылды.

Оло ярғанат булып, төн
Уйһыулыҡтан ҡалҡынды,
Һунарға сыҡҡан ябалаҡ
Баш өçтөндә талпынды.

— Әлли-бәлли-бәү. — Килендәр
Бәпестәрен йоҡлата,

Гәп һуға ҙурҙар йыйылып,
Малайҙар тыңлап ята.

Ат ярыштыра берәүҙәр,
Берәүҙәр һөйләй бүре,
Берәүҙәр, «күргәндәрем» тип,
Борсаҡты яра эре.

Ҡайһылар хәтергә ала
Арыҫланбәк Мәргәнде,
Икенселәр хикәйә итә
Бик алыҫ үткәндәрҙе.

Усаҡтар, ғәҙәттәгесә,
Төн йөҙөн һыйпанылар,
Ҡыуаҡтар татыу йәшәүҙең
Һулышын тыңланылар.

* * *

Тоноҡ ялҡын яҡтыһында
Яңғыҙ шәүлә һелкенде —
Разъезд юлы таборға
Ят ҡунаҡ алып килде.

Әкиәт бүленде. Ҡараштар
Килеүсегә ташланды.
Асыҡ сырайҙар ҡунаҡты
Саф күңелдән ҡаршы алды.

Ят кеше хәрби кейемдә,
Бер «шпал» бар яғала,
Йылмайып көлгән сағында,
Аҡ тештәр сағылып ҡала.

Был, ялға ҡайтҡан капитан,
Ауылына үткән саҡта,
Туҡтаны таборға, күреп
Юл буйында усаҡты.

– Арығанға оҡшайһың, егет,
Күрәһең, алыҫ ерҙән...
– Именме йөрөгән яҡтарың?
– Ултыра ҡал, әйҙә, түрҙән!

– Яҡындан түгел, – ти ҡунаҡ,
Көнбайыш сиктән киләм,
Ундағы һаҡсы дуҫтарҙан
Һеҙгә күптин күп сәләм.

– Ҡайҙа юл тоттоң, ир-егет?
– Тыуған илемә ҡайтам,
Төнәр өсөн рөхсәт булһа...
Атларға әле байтаҡ.

Ҡарттар яҡты ут янынан
Хөрмәтләп урын бирә,
Йәш ҡыҙҙар (ниндәй сибәрҙәр!)
Ҡунаҡҡа һый килтерә.

– Оҡшаһа, ҡымыҙ эс, егет,
– Йүкә балын шәп тиҙәр.
– Күңелең тартһа, әсе бал бар.
– Йәш ит һоғоноп ебәр.

«Күстәнәс» тип папиросын
Ҡунаҡ өләшә бирә,
Ә үҙе, янсыҡтан алып,
Яйлап тәмәке төрә.

Һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан берәү
Бик тәрән һулап ала,
Бер ҡунаҡҡа, бер янсыҡҡа
Ҡарай ҙа ҡатып ҡала.

Ҡатын, бик ныҡ тулҡынланып,
Инеп китә сатырға.
Инде һуң, беҙҙең ҡарттар ҙа
Һүҙ ҡуҙғата ятырға.

Ҡунаҡҡа урын йәйҙеләр,
Табор йоҡоға талды,
Тик, шағир йөрәге төҫлө,
Усаҡтар көйрәп ҡалды.

* * *

Романдың башын яҙғанда
Айлы итәләр төндө,
Ләкин, был һуңы булғанға,
Айҙы болоттар күмде.

Төн айһыҙ, ә ел тынғыһыҙ,
Уята уҫаҡтарҙы;
Турғайҙар, таң һыҙылғансы,
Өй иткән ҡыуаҡтарҙы.

Алыҫта аҙашҡан өйрәк
Өҙөлөп ҡысҡыра, меҫкен,
Төн ҡараһында юл тапмай
Ул дуҫһыҙ булған өсөн.

Бойоҡма, иркәм, бойоҡма,
Шул ҡоштар һыҙған юлдан
Эҙләп ҡайтыр йәшлек дуҫың,
Һин онотмаған булһаң.

Һүндермәҫ дуҫлыҡ хистәрен
Тиҫтәләп үткән йылдар,
Айыра алмаҫ тәүге дуҫтан
Ҡош осоп етмәҫ юлдар.

Йөрәктәр тере ҡалғанда,
Мөхәббәт йәшәр һаман,
Йәшәргә теләүселәргә
Яңғыҙлыҡ артыҡ яман.

Бойоҡма, иркәм, бойоҡма,
Шул ҡоштар һыҙған юлдан

Эҙләп ҡайтыр йәшлек дуҫың,
Һин онотмаған булһаң.

* * *

Уҡыусының эсе бошор:
«Бик күп һөйләйһең, малай,
Таныш түгел ҡунаҡ менән
Таныштыр әле давай!»

Бик алыҫ ерҙәрҙән ҡайтҡан
Таныш түгел был егет
Бейек ярға сығып баҫҡан
Ник, башын түбән эйеп?

Һуң ҡунаҡ ниңә йоҡоһоҙ?
Һуң ҡунаҡ ниңә бойоҡ?
Уйҙар төн кеүек болғансыҡ,
Уйҙар төн һымаҡ ҡуйы.

* * *

Ҡапыл сатырҙан сыға ла
Ап-аҡ күлдәкле шәүлә
Оялсан аҙымдар менән
Ҡунаҡҡа табан килә.

Ул, гүйә, энәле гөлгә
Һаҡлыҡ менән ҡул һуҙа
Һәм, гүйә, тәрән упҡындан
Тар баҫма буйлап уҙа.

Аҡыл тойғоларҙы тыя:
«Ниңә мин киләм әле?
Ниңә билдәһеҙ кешегә
Серемде бирәм әле?»

Аҡ шәүлә артҡа сигенә,
Туҡтала, тағы атлай,
Сайҡала, елдәр, ҡайтарып,
Шәлен битенә ҡаплай.

«Ниңә юҡтан тартынырға,
Ниңә мин ҡалтырайым?
Ул таныш кешегә оҡшай,
Мин тик шуны һорайым.

Ә әгәр ул, аңламайса,
Минең һүҙемдән көлһә,
Ниндәй оят, «моғайын, был
Хыялыйҙыр», тип белһә...

Кит, улай уйламаç инде
Капитан булған кеше...»
Секундтарға ҡушылып үтте
Уның ҡурҡыныс хисе.

Бармағына урай-урай
Мамыҡ шәленең суғын,
Ул яҡынлаша егеткә,
Баçып күңел ярһыуын.

Тағы ҡалтыранып китә,
Һалҡын һыу ҡойған кеүек:
— Кисер... — Тауышы ҡыçыла, —
Кисер һин, уйсан егет.

Егет ҡапыл ҡараш ташлай
Бышылдау килгән яҡҡа,
Шул ваҡыт, сатҡылар сәсеп,
Йәшен шартлай йыраҡта.

Ни күрә, әллә төшмө был?
Әллә тик хыял уйнай?
Юҡ, беҙҙең ҡунаҡ һаташмай,
Юҡ, беҙҙең ҡунаҡ уяу.

Ул күрә: баяғы ҡатын
Ҡыйыуһыҙ килә яҡын,
Борсоулы, моңһоу күҙҙәрҙән
Бөркөлә дымлы ялҡын.

Ул күҙҙәр йәшлек яҙының
Сафлығын йыйып алған.
Ул күҙҙәр ҡара төндәрҙең
Ҡараһын уйып алған.

Әйтерһең, был һулыш хәҙер
Һүнергә торған кеүек,
Тик күҙҙәр ҡайнар ғүмерҙе
Һыуытмай һаҡлар кеүек.

Ҡатын һүҙен дауам итә:
«Йоҡоһоҙ үтте төнөм,
Нишләнем? Ғәфү ит, егет,
Мин былай түгел инем.

Мин тура һөйләйем, юлсы,
Төпһөҙ уй йотто бөгөн.
Ҡапланы һеҙҙең күләгә
Тыныс күңелемдең күген.

Әллә мин һеҙҙе ҡалала
Урамда күреп ҡалдым?
Әллә поезд, пароходта
Ҡасандыр бергә барҙым?

Әллә тик һеҙҙең менән мин
Бары бер һыуҙы эстем,
Бер төрлө һауаны һулап,
Бер күк аҫтында үҫтем.

Ниңә өндәшмәйһең, юлсы?
Борсоном, буғай, килеп,
Кәйефеңде боҙҙом, буғай,
Тәмле уйыңды бүлеп...»

«Кәйефем яҡшы, һөйөклөм,
Ана, йәшен йыраҡта, –
Хәтерләйем үткәндәрҙе,
Йәшен уйнаған саҡта.

Тартынмағыҙ, ултырығыҙ,
Һеҙ теләһәгеҙ әгәр,
Һөйләйем, тик бүлдермәгеҙ
Һүҙҙең һуңына ҡәҙәр».

Ләкин автор һүҙ яғына
Әүәҫ булғанға күрә,
Ҡунаҡ һөйләйәсәктәрҙе
Ул үҙе һөйләп бирә.

II

Батша ҡуян бүрек менән
Японды ҡыуған йылды,
Күрше өйҙәрҙә күрше таңда
Йәштәш балалар тыуҙы.

Нәфисә ғаилә күленең
Тәүге аҡҡошо ине,
Илгизәр – Торна Мәргәндең
Ҡәҙерһеҙ оя төбө.

Тормош башлаған ғаиләгә
Һөйөргә ҡурсаҡ тыуҙы,
Ә ҡартлығында Мәргәнгә
Бер артыҡ ҡорһаҡ тыуҙы.

Япон диңгеҙен быуырға
Кәүҙәләр кәрәк булған,
Ҡыҙ атаһын ҡыҙыл вагон
Ҡайтмаҫҡа олаҡтырған.

Тол әсәне айнытмаҫлыҡ
Һағышлы итте ҡыҙы,
Балҡырға ла өлгөрмәйсә,
Һүнде бәхет йондоҙо.

Ҡысҡыра, поезд ҡысҡыра,
Әсә эсен бошора,
Тигеҙ ғүмер иткән саҡты
Иҫкәйенә төшөрә.
Ул ҡайтманы...

* * *

Асыуланған бесәй һырты төҫлө
Тауҙар... тауҙар, ҡайын, ҡарағай;
Урман шомло, урман артыҡ ҡара —
Нур ҙа үтмәй япраҡ аралай.

Шул тауҙағы барлыҡ кейектәргә
Батша булып Мәргән көн күргән —
Һәр бер ҡуян уға бүрек теккән,
Һәр бер төлкө һалып тун биргән.

Ҡамышлы күл ҡуйы ҡамышында
Бала үҫтергән инә өйрәктән.
Айыу еккән,
Һәм ул Илгизәрен
Айыу кеүек әрһеҙ өйрәткән.

* * *

Сыбар йылдар, талсыҡҡан ат төҫлө,
Батҡаҡлы юл буйлап тартылған,
Шашҡан бүре булып, ун өс тапҡыр
Ғинуар сыҡҡан тауҙар артынан.

Иҙел шаулап ташҡан ун өс тапҡыр,
Ҡайнап киткән Иҙел боҙҙары,
Ун өс тапҡыр, ап-аҡ киндер сайҡап,
Боҙ оҙатҡан ауыл ҡыҙҙары.
Һәм йәштәштәр үҫкән...

* * *

Ҡусҡыл йәшел бөркәнсеген
Еллətеп йылы елгә,
Йәш килен төҫлө яҙ килде,
Сәскәләр һибеп ергә.

Көн яртылаш күҙен асҡас,
Ҡанатын ҡаға-ҡаға,
Бер инә ҡаҙ алып бара
Бәпкәләрен йылғаға.

Ҡаҙ менән бергә тора ла
Мәргән мылтығын яһап,
Ҡарт айыуҙай дөп-дөп баҫып,
Тауҙарға ҡарай атлай.

Тәү башлап яланға сыҡҡан
Азат байталдар һымаҡ,
Тыныс Мәргәндең артынан
Йәштәштәр бара уйнап.
Йәштәштәр бара уйнап
Зәңгәр аландар буйлап.

Илгизәр әбәк бирә лә,
Нәфисә уны ҡыуа.
Илгизәр таштар ырғыта,
Нәфисә сәскә йыя.

Үтәләр тәрән соҡорҙан,
Һәм сытырман ерҙәрҙән

Үтәләр. Пар күгәрсенгә
Донъя күрһәтә Мәргән.

Балалар һыуһап йөҙәйҙәр,
Баштарға эҫе ҡаба,
Шул саҡ Мәргән тау аҫтынан
Бер һалҡын шишмә таба.

Көмөш шишмә. Ятып эскәс,
Ултырып ҡыҙыл ташҡа.
Ата йәшәү серен һөйләй
Күпте күрәсәк башҡа:

«Бына шишмә. Ете ҡат ерҙең
Аҫтынан ағып сыға.
Ҡөҙрәте бар, ҡеүәте бар,
Таштарҙы ярып сыға.

Шул ауыр юлдарҙы үтеп,
Көн яҡтылығын күрә,
Һуғара аҫыл гөлдәрҙе,
Бәндәләргә һыу бирә.

Ҙур диңгеҙҙәргә ҡушыла,
Бер көмөш тамсы булып;
Диңгеҙҙәрҙән күтәрелеп,
Ҡырҙар һуғара болот.

Шишмәләй ит һин ғүмереңде,
Тайшанып баҫма ергә,
Үлемдән түбән –
Баш эйеү
Ғәйрәте булған иргә!

Ҡеүәтең бар. Тауҙы аҡтар,
Намыҫ эше өсөн ян,
Бүленгәнде бүре ашар,
Ир булһаң – илгә таян!»

Мәргән, ҡулын ҡашҡа ҡуйып,
Күҙләне алыҫ күкте,
Айыу атланған йәшлеге
Уйында елеп үтте.

Шул саҡ бала хыялында
Яҡын йәшен уйнаны —
Аҡбуҙ ат булып, киләсәк
Осортоп китте уны.

* * *

Яландар өҫтөнән
Көкөртлө ел иҫте,
Елләнеп, яуынлап,
Дауыллап көҙ етте.

Илдәге ҙур пожар
Тау яғын ялманы:
Алдылар, бүлделәр
Мырҙаның малдарын.

Байҙар мулланы
Аҙандан төшөрмәй.
Ни булыр артабан? —
Мужиктар төшөнмәй.

Киләләр погондар,
Уҙалар атлылар,
Үтәләр йондоҙҙар
Уларҙың артынан.

Ун дүртенсе яҙ уҙғанда
(Хыял ҡанатлы саҡтар!),
Ҡыраулы һалҡын иртәлә
Ауылды баҫты аҡтар.

Май сүлмәктәре бушаны,
Тауыҡты ҡырҙы «үләт»,
Ҡыҙҙарҙың намыҫын тапап,
Һалдаттар үтте геүләп.

Был иртә күптәр яҙмышын
Көл итте. Бына Мәргән
Шул йәрәбәгә эләкте.
(Мырҙа ояһын теткәндә,
Ул юл башлап йөрөгән.)

Илгизәрҙең күҙ алдында:
Әремле соҡор буйы,
Атаның башһыҙ кәүҙәһе,
Дәһшәтле пәрей туйы*.

Теҙләнгән дә ҡатҡан бала,
Кәүҙәһеҙ башты ҡосоп.
Ҡанға йәбешеп уҡмашҡан
Аҡ һаҡалының осо.

Ирендәр күгәреп туңған,
Ҡаш ҡуйы, маңлай яҫы.
Әллә тилерәме бала?
Был бит атаның башы!

Илгизәрҙең күҙ алдында:
Ҡамсылар... наган... итек...
Мыйыҡлы офицер китте,
Кәүҙәне башһыҙ итеп...

Бит кисә ул бөркөт атты
Һәм атлап килде бая,
Мыйыҡлы йөҙгә төкөрҙө,
Ә хәҙер... хәҙер ҡайҙа?

Ул кәүҙә өҫтөнә ауҙы,
Гүйә, быуыны һынды;

* Беҙҙең яҡта ҡойондо «пәрей туйы» тип йөрөтәләр. (*Автор*)

Үкһене, оҙаҡ үкһене,
Ҡысҡырҙы – ҡапыл тынды.

Һуңын хәтерләмәй бала,
Дөм-ҡараңғыға батты,
Ҡояш оялып ҡараны,
Ә әремдәр баш ҡаҡты.

* * *

Еңел болоттар ябынып,
Кис килде йыраҡ юлдан;
Сәстәрҙе һыйпап үттеләр
Ниндәйҙер ескә ҡулдар.

Һалҡын бармаҡтар һаҡ ҡына
Эҫе маңлайға төштө;
Илгизәр күҙҙәрен асты,
Әкиәт батыры төҫлө.

Нимә бар? Бала аҡылын
Ҡайғы йоҡоһо йотҡан.
Нәфисә, ергә теҙләнеп,
Уның маңлайын тотҡан.

Юҡ, был һис һаташыу түгел –
Ул көндөҙ бында килде;
Шул уҡ кәүҙә, ҡанлы һаҡал...
Тик ул иламай инде.

Башты ескә ҡулдар тотҡан.
Ҙур ҡара күҙҙәр ҡарай,
Илгизәрҙе наҙлай улар.
Аңламай, нисек улай?

Ҡурҡып ағарған Нәфисә
Ҡуҙғата ирендәрен:
«Һин инде иламайһың бит,
Эйе бит, Илгизәрем!

Минең дә атай ҡайтманы –
Мин дә атаһыҙ бала;
Илаһаң, ҡыйын була шул,
Илгизәр, һин илама.

Ҡайтып әсәйеңде йыуат,
Ул бит һушһыҙ йығылған,
Ер тырнап һине саҡыра
Һыуһаған ҡара юрған».

Йәштәштәр атлап киттеләр
Ҡойон һуҡмағы буйлап,
Бала аҡылына һыймаҫ
Ҡот осҡос уйҙар уйлап.

Күгелйем бушлыҡ тирә-яҡ,
Йыраҡта тауҙар ауа;
Кем уртаҡлашыр яҙмышын,
Кем юлдаш булыр уға?

* * *

Илгизәр был ваҡиғаны
Төш һайын ҡабатланы –
Ҡылысын һелтәп, офицер
Ғазаплай ине уны.

Болғансыҡ иҫтәлектәргә
Өмөтлө нурҙар сәсеп,
Нәфисә йылмайҙы, һөрттө
Илгизәрҙең күҙ йәшен.

Илгизәр үҙ аҡылында
Тиң итте яҙмыштарҙы,
Дауылдар аша яҡтырҙы
Тәүге мөхәббәт яҙы.

* * *

Унан һуң күп болот аҡҡан,
Асыҡ күк йөҙөн ҡаплап,
Иҫәпһеҙ һалдаттар уҙған,
Был урамдарҙы тапап.

Йәшенле кис килде бер саҡ,
Һауала ут уйнатып,
Эскадрон керҙе ауылға,
Һикертеп ат уйнатып.

Йәшәүҙең маршы аҫтында
Эскадрон менән бергә,
Беҙҙең ҡунаҡ хәтерләгән
Ут яуған ошо төндә.

Йәшендәр һыҙып күрһәткән
Билдәһеҙ йыраҡ юлға
Илгизәрҙе алып китте
Эйәрле ҡара юрға.

Илгизәр йәш күкрәгендә
Дәрт һәм көс һаҡлап бара,
Йөрәгендә дошмандарға
Һүнмәҫ үс һаҡлап бара.

Башта уй, ата васыяты:
«...Тайшанып баҫма ергә,
Үлемдән түбән –
Баш эйеү
Ғәйрәте булған иргә...»

Баҫыу ҡапҡаһын сыҡҡанда,
Йөрәкте өҙгөс тауыш
Ҡапыл уйҙарҙы бүлдерҙе.
(Был тауыш артыҡ таныш.)

— Илгизәр... ах, Илгизәр, тим,
Туҡта, көт, көтсө мине!..
Был — хәлһеҙ, һулышы бөткән,
Йәшле Нәфисә ине.

Ҡара юрғаны туҡтатып,
Егет эйәрҙән төштө.
Йәш ҡыҙ ҡосаҡҡа ташланды,
Атылған аҡҡош төҫлө.

Бына тәүге һәм һуңғы ҡат
Ҡайнар ирендәр аша
Ике йәш йөрәк үҙенең
Ҡайнарлығын алмаша.

Һулышһыҙ рәхәтлек эсендә
Татлы минуттар уҙа;
Нәфисә һуңғы бүләген —
Ҡайыған янсыҡ һуҙа.

Егет эйәргә һикерә,
Алға оса ҡара юрға.
Ә Нәфисә йәш аралаш
Ҡарай ул киткән юлға.

Болоттар ярыла күктә,
Төн йөҙөн телә яҡтын,
Ерҙә йәш ҡыҙ — кем йыуатыр,
Кем итер уны яҡын?

* * *

Барҙы ла барҙы эскадрон
Еңеү, дан менән,
Йәшәү яуланы эскадрон
Ҡан, ҡорбан менән.

Күп һыуҙар кисте эскадрон,
Үтте күп ерҙе,
Һуңғы дошманды эҙәрләп,
Кавказға керҙе.

* * *

Тревогалы Кавказ кисе –
Гөрләй тау йылғалары,
Урманында шакал олой,
Бөркөтлө – ҡаялары.

Ҡарлуғас ояһы төҫлө
Сакля бар яр ситендә,
Аҡһыл төтөндәрен бөркөп,
Усаҡ үрләй эсендә.

Юлсыларҙы ер иҙәнгә
Ҡырған да һалған йоҡо,
Төштө лә ғазаплы итә,
Ах, был йылдарҙың уты!..

Ҡара бесәй күҙе төҫлө
Төнлөктән ҡарай йондоҙ;
Усаҡты көйрәтә егет,
Ҡаҙанды бутай йәш ҡыҙ.

Аттар бышҡыралар тышта
(Таң ямғыр вәғәҙә итә),
Усаҡ эргәһендә икәү
Дуҫтарға аш өлгөртә.

Ҡыҙ – кипарис, Ҡара диңгеҙ
Ярының даны икән.
Егет – алыҫ, алыҫтағы
Уралда үҫкән имән.

Ҡәмәрҙең (шулай ине ҡыҙ)
Бәллеүе булған тулҡын,
Диңгеҙ ярһыу күңел биргән,
Һәм ҡояш биргән ялҡын.

Тауҙарҙан алған ғорурлыҡ,
Нәфислек алған гөлдән,
Уйсанлыҡ алған таңдарҙан,
Шаянлыҡ алған елдән.

Ҡаяның ҡырағай ҡыҙы
Ике ай инде бына
Йәшәй дан булып эскадронға,
Матурлыҡ биреп уға.

Ҡәмәр – туғаны уларҙың
Һәм иң яҡын иптәше.
Ә егетме? Ул – Илгизәр,
Бик күптән таныш кеше.

Ҡара бесәй күҙе төҫлө
Төнлөктән ҡарай йондоҙ;
Усаҡты көйрәтә егет,
Ҡаҙанды бутай йәш ҡыҙ.

Бик оҙаҡ ҡуйырып торҙо
Тыныслыҡ – көйһөҙ ҡунаҡ,
Тик һуҙылдылар ҡараштар,
Ҡояшлы ямғыр һымаҡ.

Илгизәр өндәште ҡыҙға:
– Һин белһәң ине, Ҡәмәр,
Йәшерҙем һинән, үҙемдән
Бөгөнгө көнгә ҡәҙәр...

Илгизәр тынды, ояллы,
Ҡалтырап китте тәпе,
Ә Ҡәмәрҙең күҙ ҡарашын
Йәшерҙе керпектәре.

Инде ул усаҡ көйрәтмәй,
Бутамай ҡаҙанды ҡыҙ,
Тик төнләктән һаҡлыҡ менән
Үрелеп ҡарай йондоҙ.

Янсыҡ сығара Илгизәр
Тәмәке төрөү өсөн
Һәм ҡапыл үҙ аҡылында
Юғалтып ташлай үҙен.

Ҡулында ҡайылған янсыҡ –
Ҡыҙыллы, күкле дебет.
Һәр биҙәк аша Нәфисә
Үпкәләп ҡарай кеүек.

«Шулмы боҙолмаҫ вәғәҙәләр?
Шулармы инде өмөт?
Ниңә тындың? Ҡайҙа намыҫ,
Йөрәгең ҡайҙа, егет?»

Аш өлгөрҙө. Халыҡ торҙо.
Шаулашып аш ашалды;
Һәм борсоулы тынлыҡ тағы
Һалмаҡ ҡанатын һалды.

Ҡәмәрҙә йөрәк ярһыуы, –
Уның әйтәһе килә:
«Бойоҡма, иркәм Илгизәр,
Ҡәмәр бит һине һөйә».

Тышта ямғыр дөбөр-дабыр
Сакля балсығын йыуа:
Илгизәр, талсыҡҡан килеш,
Хәлһеҙ күҙҙәрен йома.

Төш үткән йәшәүгә ҡайта:
...Бына тышта иртә яҙ,
Ә улар Нәфисә менән
Ултырта ҡуш алмағас.

Күҙ асып йомған арала,
Аҡ сәскәгә ябынып,
Ҡуш алмағас күкрәп үҫә,
Күккә тейерҙәй булып...

...Һәм ҡапыл серле бушлыҡта,
Ҡом мәмерйәһе буйлап,
Нәфисә шәүләһе килә,
Шашып, үкереп илап.

Сәстәре туҙылған уның,
Ҡулына сыраҡ тотҡан,
Төңгө елдә тирә-яҡҡа
Осҡон һибелә уттан.

Ул үкһеүенән тынды ла
Бөркөткә хас күс менән,
Ыласынға хас тиҙлек менән,
Һуҫарға хас үс менән

Илгизәр аяғы аҫтына
Тотҡан сырағын атты.
Ут һүнмәне. Ваҡ таш ҡатыш
Ҡара ҡом иреп аҡты.

Һәм әйтә кеүек Нәфисә:
«Был ут бит минең бәғер,
Иркәләп яндырҙың үҙең,
Мә, тапап һүндер хәҙер!..»

IV

Беҙҙең таныш түгел ҡунаҡ
Кеҫәнән янсыҡ алды:
«Бына янсыҡ. Бөгөнгәсә
Намыҫым кеүек һаҡланды.

Һинән айырылып китеүгә
Инде ун өс йыл үткән,
Тик бөгөнгө күрешеүҙе
Мин көтөп йөрөнөм күптән».

Нәфисә ни кисергәндер –
Беҙгә билдәле түгел.
Нәҡ бына ошо ваҡыт
Таң йыуҙы июнь күген.

### Эпилог

Ауылдаштарына ҡунаҡ
Үҙен танытты иртән:
Ул – Мәргәндең ғәйеп булған
Улы Илгизәр икән.

Илгизәр күрергә ҡайтҡан
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Тапҡан бында мөхәббәттең
Алыҫ ҡалған эҙҙәрен.

Был осрашыуҙың һуңы,
Беләм, ҡыҙыҡ тойолор.
Дауам итер шул уҡ моңдо
Киләсәктә яңы йыр.

*1939–1940*

## *ДЕКАБРЬ ЙЫРЫ*

### 1. ЙЫРҘЫҢ БАШЫ

Һауала ҡайнап үкерә,
Дыулай декабрь,
Хас өйөрмә ояһындай –
Утлы йомғаҡ – ер.

Һоро болот түбәнәйә
Ҡырҙарға табан,
Ләкин ул ҡар булып түгел,
Ут булып тама.

Ерҙе әйләндереп көлгә
Ҡара тупраҡтан,
Үрмәләй аждаһа илгә
Көнбайыш яҡтан.

Был аждаһа ғәрәсәте –
Ағыулы ялҡын:
Тир, ҡанға батып алыша
Ҡаһарман халҡым.

Әкиәттәрҙә лә юҡ батыр
Халҡымдан ашҡан –
Ике аяғын ике диңгеҙ
Ярына баҫҡан.

Кәүҙәһе менән ҡаплай ул
Аждаһа юлын,
Үлмәҫ батырҙың күкрәге —
Ул минең быуын.

## 2. МИНЕҢ ОКОП

Ике диңгеҙ араһында
Һанһыҙ окоптар,
Ике диңгеҙ араһында
Минең окоп бар.

Өс тәүлек минең окопҡа
Ут, металл яуа.
Өс тәүлек башым өҫтөндә
Ал шәфәҡ яна.

Сәғәтләп түгел, минутлап
Ут ҡыҙа һаман,
Иҫерек һаташыу менән
Ташлана дошман.

Белә Тыуған ил һәм халыҡ,
Белә армия,
Был — иң һуңғы оборона,
Һуңғы линия.

Беләм мин, был һуңғы окоп
Көнбайыш сиктә,
Биш йөҙ саҡрым сиктем, хәҙер
Биш аҙым сикмәм!

Был — окоп түгел, крепость,
Был — минең Ватан,
Был — минең быуын яҙмышы,
Намыҫ, ирек, дан!

Был окоп — атамдың өйө,
Мин үҫкән урам,
Был окоп еңеү усағы —
Мәскәү һәм Урал!

Ялҡын өйөрмәһе ҡаплай
Дошмандың юлын,
Иң беренсе линияла —
Ул минең быуын!

Һәм беләм мин: оло еңеү
Ҡорбанһыҙ килмәҫ.
Ләкин Тимербаев Юлдаш
Еңеүһеҙ үлмәҫ.

Еңергә тыуҙым. Һәм шулай
Үҫтерҙе илем.
Юлдашҡа юлдаш булалмаҫ
Данлыҡһыҙ үлем.

## 3. МИНЕҢ ТЫУЫУЫМ

Дәүерҙәрҙә ҡабатланмаҫ
Берҙән-бер төндө
Ер ишеткән тәүге тапҡыр
Был яңы өндө.

Мин тыуҙым. Был минең тауыш.
Тик илау түгел,
Мин тыуҙым һәм хәбәрләйем
Донъяһын, күген!

Был минутта айыу булып
Үкергән урман,
Был минутта Ирәндектау
Ҡалтырап торған.

Томан таралған, болоттар
Иреп юғалған,
Күк бейегәйгән, йондоҙҙар
Яҡтыраҡ янған.

Был минутта ярҙан ташып
Сайҡалған күлдәр,
Минең өндө бар донъяға
Тараткан елдәр.

Тыуҙы ул. Ни тип ҡушырға
Исем уланға? –
Кендек әбейе тын ғына
Сыға урамға.

Ул күрә: шул уҡ тоноҡ төн
Борондан ҡалған,
Тау – йоҡолағы баһадир,
Күл – көмөш ҡалҡан.

Әбей күҙ ташлай йыһанға –
Төнгө күк һәм ер:
«Ниндәй исем был баланы
Бәхетле итер?

Әгәр анау таштан алһаҡ
Баланың атын?
Тар булһа һуң уның күңеле,
Таш һымаҡ каты?

Кемдең күңеле тар, шул кеше
Һөйөнә белмәҫ,
Кемдең күңеле таш, ул кеше
Көйөнә белмәҫ.

Мөхәббәт бәхетен татымаҫ,
Ғүмере буш булыр,
Нәфрәтләнә белмәй торған
Бер байғош булыр.

Күктә тулы ай. Балаға
Айсыуаҡ ҡушһаҡ?
Бик ҡыҫҡа булһа ғүмере,
Ошо ай һымаҡ?

Ҡара болот ҡаплағанда
Айлы төн күген,
Ауыр ҡайғы баҫҡан булыр
Шат бала күңелен.

Ана, юл ялтырап ята,
Гүйә, саҡматаш,
Хәйерле мәлгә тап килһен
Был исем – Юлдаш!

Бик оҙон булһын ғүмерең,
Был юлға оҡшаш,
Ошо юлдай нурлы булһын
Яҙмышың, Юлдаш!

Яҡты юлың дандың бейек
Тауына үтһен,
Оҙон ғүмерең, бәпесем,
Бәхетле итһен!..»

Тик ул ишетмәне алыҫ
Туптар шартлауын.
Ул һиҙмәне киң ил буйлап
Заман атлауын.

Ут-ялҡын эсендә яңы
Был заман тыуҙы.
Һәм тоҡомға тиңдәш булып
Уҙаман тыуҙы.

## 4. ТӨПСӨК БОЛАРА

Ҡабыҡ бишек өй башынан
Һуңғы ҡат төшкән,
Ошо бишектә бәүелеп,
Өс быуын үҫкән.

Дыулап тирбәлә йәш бала
Муйыл сиртмәлә,
Төпсөк тыуҙы. Уны менән
Килһен иртәгә.

Беште ырыу ҡыуағының
Һуңғы емеше,
Бәлки, ул яңы ырыуҙа
Иң тәүге кеше?

Ошо мәлдә әсәм ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Был бишектә
Өс быуын үҫкән.

Ҡыҫыҡ биләүгә өс быуын
Шулай биләнгән;
«Яҙмыш быҒауына йәштән
Күнек!» – тигәндәр.

Татыған бала биләүҙә
Ғазап барлығын,
Иге-сиге юҡ донъяның
Сикһеҙ тарлығын.

Ошо мәлдә әсә ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Нужа ағыуын
Өс быуын эскән.

Донъяға берҙән-бер һуҡмаҡ,
Шунан атлаған
Өс быуын... Ләкин һуҡмаҡта
Бәхет ятмаған.

Көткәндәр: «Алтын ҡош ҡуныр
Беҙҙең ҡапҡаға!»
Көткәндәр, ләкин сәүкә лә
Ҡанат ҡаҡмаған.

Күккә ҡарап, улар күпме
Хыял һаҡлаған!
Тик уй ҡарға ояһынан
Бейек ашмаған.

Уларға иң юғары күк —
Иртәнге аҙан.
Шулай йәшәгән өс быуын
Бик оҙаҡ заман.

Ошо мәлдә әсәм ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Был һуҡмаҡтан
Өс быуын үткән.

Ни ғәжәп? Сепрәк биләүҙе
Тарһына төпсөк,
Һыймай ҡабыҡ бишегенә,
Ярһына төпсөк.

«Хас түгел төпсөк ырыуға,
Ниңә һуң былай?
Бәлә-ҡазаңдан бер үҙең
Һаҡласы, Хоҙай!»

Һиҙмәне әсә — ут аша
Атланы заман.
Яңы тоҡомға тиң булып
Тыуҙы уҙаман.

### 5. КОСТЕР ЯНЫНДА ТӨН

Тау артынан күтәрелде
Йәшәргән ҡояш.
Тәүге нуры мине ҡосто:
«Ҡотло бул, Юлдаш!»

«Ҡотло бул, Юлдаш, ҡотло бул!» —
Ҡабатланы ел.
«Ҡотло бул!» — Шауланы ҡырҙар.
Шауланы бар ил.

Төндәр буйы ай һаҡланы
Тыныс йоҡомдо,
Бишегемә, гәүһәр булып,
Йондоҙ ҡойолдо.

Һуҙҙы яҙ миңә бәйләмдәр
Аҫыл гөлдәрҙән,
Торналар тәпәй килтерҙе
Алыҫ илдәрҙән.

Йырланы турғай күктәрҙә,
Ағарҙы муйыл,
Әйткәндер, бәлки, олатай:
«Ниндәй изге йыл!»

Ниндәй изге йыл! Яланда
Сайҡала иген!
Кешеләр ҡыуанысының
Юҡ иге-сиге!

Иркен үҫтем һәм күрмәнем
Тормош тарлығын,
Һәм белмәнем был донъяла
Ҡайғы барлығын.

Үтте балалыҡ, әйтерһең,
Ул йәйге болот,
Төнгө костер янындағы
Әкиәт булып.

### 6. УН ЕТЕНСЕ ЯҘ

Тирбәлә башым өҫтөндә
Ун етенсе яҙ,
Көн күңелем кеүек, ә уйҙар
Көн кеүек аяҙ.

Мин сығып киттем. Кескәй тоҡ
Арҡала ине,
Өмөт иҙеле хыялда
Сайҡала ине...

Тау аша йыраҡ ерҙәргә
Ташлы юл үтә, —
Ошо тау артында мине
Ҙур донъя көтә.

Зәңгәрлеккә күмелеп ҡалды
Мин үҫкән ауыл,
Аяғым аҫтында — миңә
Исем биргән юл.

Хушлашҡанда әсәй әйтте:
«Аҡ юлдар теләп ҡалам.
Зарыҡтырмай килеп торһон
Иҫән хәбәрең, балам».

Күҙҙәремә баҡты атай:
«Инде өмөттә ҡалам —
Һинең хаҡта дан һүҙҙәре
Ишетһәк ине, балам».

Йәшәреп бойҙай ҡырҙары
Елгә елпенә;
Башта уйҙар... уйҙар... уйҙар,
Уйҙар елкенә.

Кем итер мине Тыуған ил,
Кем итер быуат?
Ҡайһы хеҙмәт хужа итер?
Ҡайһыһы – ҡунаҡ?

Тормошҡа ҡунаҡҡа түгел,
Ә эшкә киләм,
Мин һыбайлы булһам, хеҙмәт –
Йүгерек ерән.

Теләһәң, уйҙар осошо
Емеш килтерһен.
Теләһәң, һин ҡоштар юлын
Һуҡмаҡ итерһең.

Тирбәлә башым өҫтөндә
Ун етенсе яҙ,
Көн күңелем кеүек, ә уйҙар
Көн кеүек аяҙ.

Мин барам. Алдыма ятып,
Йүгерә шәүләм.
Ни йәм бар шәүлә хужаһы
Булып йәшәүҙән?

Йәшәйһе ине тормошта,
Шулай йәшәйһе! –
Һинең шәүләң барлығын да
Һиҙмәһен кеше!

Мин сығып киттем. Кескәй тоҡ
Арҡала ине,
Өмөт иҙеле хыялда
Сайҡала ине.

## 7. ТАҢ

Ғәмһеҙ балалыҡтамы ни
Ғүмерҙең таңы?
Серле зәңгәр кис – кешенең
Балалыҡ сағы.

Тормош – уйналмаған гармун,
Йырланмаған моң.
Ул серен һаҡлай үҙендә
Төнгө урмандың.

Балалыҡ – йә асыҡ аҡыл,
Йә тотош хыял,
Йә ул арыҫланға оҡшай,
Йә ҡурҡаҡ ҡуян.

Һанама, бала, күгеңдә
Йондоҙҙар һанын.
Гүзәл кисең хәбәр итә
Ғүмереңтаңын.

Күрәм, аяҙ күк ситенә
Таңым йәйелә,
Ул күк – минең ғүмер, күрәм,
Йәшлегем килә.

Тап иттем таң ҡыҙҙарының
Мин бер һылыуын,
Эстем һөйөү шишмәһенән
Иҫерткес һыуын.

Беҙ диңгеҙ булһаҡ, күл ине
Фәрхәд һәм Ширин.
Был һөйөү менән үлемһеҙ
Йәшәргә мөмкин.

...Мин хәҙер алғы һыҙыҡта,
Ышансы, илем:
Юлдашҡа юлдаш булалмаҫ
Данлыҡһыҙ үлем.

## 8. ЕҢЕҮҘЕҢ БАШЫ

Ҡалтырап ағара тағы
Ҡояш тыуған яҡ.
Был таң – мәңгелек юлында
Бер яҡты маяҡ.

Бала ине киске дауыл,
Таңғыһы – әсә,
Тик ул хәҙер көнбайышҡа
Ялҡынын сәсә.

Гүйә, ғәйрәтле ҡул борҙо
Заман ҡанатын,
Йүгәнләне ваҡиғаның
Тыңлауһыҙ атын.

Һауыҡты яралы һалдат,
Хәлһеҙ хәл алды.
– Атака! – Бар фронт буйлап
Тик бер команда.

Дошман үтер бында үҙенең
Иң һуңғы юлын,
Сөнки алғы сафта барған –
Ул минең быуын!

Еңеү тыуын яулап алыу
Еңелдән булмаҫ.
Тик еңелеп ҡайтмаҫ илгә
Рядовой Юлдаш.

*1942*

## ҮЛМӘҪБАЙ

### 1. ТӘҮГЕ ҺУНАР

Минең яҙғанды уҡығас,
«Әкиәт», – тимә, ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора –

Урал батыр тоҡомонан
Үлмәҫбай атлы егет,
Совет Ватанында үҫкән
Большевик затлы егет.

Тирәләп халыҡ ултырған,
Уртала усаҡ яна,
Ситтәрәк ҡулы бәйләнгән
Офицер дулап ята.

Үлмәҫбай һирәк мыйығын
Ҡапыл тырпайтып ала,
Ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа төшөп,
Хәйләкәр ҡараш һала.

Ул офицерҙы «йыуата»:
«Һин тыпырсынма, ҡуян,
Хәҙер ошо сылғау менән
Ағасҡа аҫып ҡуям...»

Гөж килә ағай-энеләр:
– Хитрый ҙа һин, Үлмәҫбай,
Был йәнлекте ҡайҙа тоттоң,
Һөйләп ташласы давай.

Ялындырырға яратмай,
Тел асҡысы – теләге.
Үлмәҫбай тыңлаусыларға
Ошо хәлдә һөйләне:

– Һунарсы минең ырыуым,
Һунарсы ата-бабам,
Һунарсы ҡаны үҙемдә,
Һунарсы булыр балам.
Ғәҙәт – ҡылыҡтың әнеһе,
Бик ғәжәп бит ул ғәҙәт,
Һунар сыға һалыуыма
Шул ғәҙәт булды сәбәп.

Хазина ине уҙған төн:
Йондоҙло, айлы ине,
Немецҡа тоҙаҡ һалырға
Бигерәк яйлы ине.

Значит, ике еңемә
Ике «тукмаҡты» алып,
Кәйеф өсөн бер кружка
Русский горькийҙы һалып,

Күркәләнеп сығып киттем,
Ергә лә теймәй табан –
Әйтерһең, тыуған Уралға
Ҡунаҡҡа ҡайтып барам.

Тегеләр яғына еткәс,
Ҡулды күтәргән булам,
Йәнәһе, рәтен килтерәм.
(Хәйлә кәрәк бит, туған.)

Хәтерләй алдым кемдеңдер
Шунда ата-әсәһен,
Һөрән һалам: «Гитлер, – тимен,
Дөмөккәнсе йәшәһен!..»

Һалдаттар килеп, кеҫәне,
Ҡуйынды һәрмәп ҡарай,
Ә еңгә күҙ төшөрөргә
Баштары етмәй, малай.

Бер заман себен шикелле
Алдылар мине ҡамап:
– Үҙең теләп нәрәтәгә
Килеп индеңме, сабаҡ?

– Офицерға илтегеҙ! – тим, –
Гәп һатырға ваҡыт тар,
Берәй ғәмәлгә ярарлыҡ
Һүҙ әйтеп һалыуым бар.

Штабҡа илтәләр. Күрәм
Дейеүгә хас бәндәне.
Ошо, күрәһең, быларҙың
Офицер тигәндәре.

Доклад яһайым үҙенә:
– Үлмәҫбай атлы булам,
Тау башҡорто тоҡомонан,
Салауат затлы булам.

Икәүҙән-икәү ҡалабыҙ,
Беребеҙ – күҙ, беребеҙ – ҡаш.
– Башҡорт... башҡорт... – Ул мығырлай. –
Ниндәй януарға оҡшаш?

Яуапты тапҡыр ҡайтарам:
– Ғәфү итегеҙ мине,
Немец башын ҡырт-ҡырт ҡырҡа –
Ана шул башҡорт инде.

Ә илем Рәсәй була,
Дауылы, еле лә бар,
Һинең бабаң батып үлгән
Чуд тигән күле лә бар.

Офицер, әй боларынып,
Ҡыҙып китә шул саҡты,
Шым ғына ҡулға төшөрәм
Мин дә ике «туҡмаҡты».

– Тауышты яратмайым, – тим, –
Ҡиммәт бит һиңә ғүмер.
Бына күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә – көл-күмер.

– Һин шаянға оҡшайһың! – ти,
Мин әйтәм: – Улаймы ни,
Эш бар саҡта шаярырға
Ыштанһыҙ малаймы ни?

Бына һеҙҙе тар-мар иткәс,
Илдә байрам-туй булыр.
Туй мәлендә шаярырға,
Уйнарға ла уй булыр.

Ә хәҙергә наганыңды
Өҫтәлгә сығарып ҡуй,
Күңелеңә төшөүе бар
Бер-бер төрлө ҡара уй.

– Атырмын! – ти. Ә мин әйтәм:
– Ҡиммәт бит һиңә ғүмер,
Бына күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә – көл-күмер.

Мирный ваҡыт булһа, бәлки,
Кәңәш тә ҡорор инек.
Бер-беребеҙҙе баллап-майлап,
Өгөтләп торор инек.

Үҙең беләһең, господин,
Хәҙер һуғыш заманы,
Һәр эштә йылдамлыҡ кәрәк,
Ваҡыт яғы самалы.

Аяғын тибеп екерҙе,
Ҡалтырап китте иҙән,
Наганын ырғытып бәрҙе:
– Ни кәрәк һиңә минән?!

– Сәпсемә, – тим, – йә ҡағылыр
Йәһәннәмдең елдәре,
Аңлау кәрәк, тәртә дулап
Атты бармы еңгәне?

Вот шулай. Хәҙер үҙеңде
Ҡунаҡҡа алып китәм,
Аҙаҡтан маҡтап йөрөрһөң:
«Башҡорт ҡунаҡсыл икән...»

Йәнәшә сығып китәбеҙ,
Бик эре сирттерәбеҙ:
Йәнәһе, начальник менән
Постарҙы тикшерәбеҙ.

Беҙ үтәбеҙ, ә һалдаттар
Сәләмләй, тура ҡатып,
Тик ай ғына шул сағында
Ҡайҙалыр ҡалды батып...

Һөйләгәндең тамсыһы ла
Әкиәт түгел, туған.
Ана ул ята. Ә үҙем
Сылғау киптереп торам –

Урал батыр тоҡомонан
Үлмәҫбай атлы егет,
Совет Ватанында үҫкән
Большевик затлы егет.

## 2. ҮЛМӘҪБАЙ ТУЙҒА БАРА

– Тауыҡтар төнәгән мәлдә
«Һунар»ҙан ҡайтып киләм.
Теребайҙың Саптарынан
Арттараҡ ҡалды Ерән.

Буш теҙгенде һиҙеп, буғай,
Башҡайын сайҡай атым,
Уҡып барам Гөлбикәнең
Уралдан яҙған хатын:

«...Һин – егеттәрҙең-егете,
Минең Үлмәҫбайғынам,
Бер һинең өсөн шатланам,
Берсә тағы ҡайғырам.

Иҫ киткес батырлығыңа
Һоҡлана Урал иле,
Тик бына шул хаттарыңды
Йышыраҡ яҙһаң ине...

Осоп барып күрер инем,
Ҡанатым булһа икән,
Ошо сәләм хатын яҙҙы
Һин һөйгән ҡыҙ – Гөлбикәң...»

Ҡапыл юлға бер ҡарт баҫты:
– Һаумы, Үлмәҫбай таныш? –
Үҙе биш ҡарыш самаһы,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

– Башҡорттоң егетенә, – ти, –
Партизанский сәләм!
Үҙе мине маҡтап китте:
Фәлән-фәсмәтән, фәлән...

– Сер итеп кенә әйтәм, – ти, –
Ҡолағыңа һала ҡуй,
Фәлән төндә, төгән ерҙә
Фашистар типтерә туй.

Мир башы ҡыҙы немецҡа
Ул көн кейәүгә сыға.
Һаҡалым менән инәләм,
Һүҙемде йыҡма, ҡоҙа!

Кемгә тейә быңдай хөрмәт?
Әлеге лә баяғы,
Хәстәрен күрә. Беҙҙә тиһәң,
Наҡысыраҡ һый яғы.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ булһын,
Мин үҙем ныҡыш бәндә,
Ошо ерҙә көтәм һине
Тауыҡтар төнәр мәлдә.

Ауыҙ асып ябалманым,
Һыу булып һеңде ҡартым,
Туй көтә беҙҙе, туй көтә,
Елдәй ел, Ерән атым!

Ҡара урман аша үтә
Бына был серле һуҡмаҡ,
Урман өнһөҙ, йә ул йоҡлай,
Йә ул уйлана һымаҡ.

Аҡландар тулып сайҡала
Бешеп өлгөргән арыш.
Кем урыр, кем кәбән ҡойор,
Эй, арыш, башың ҡарыш!

Уттар, йәшел йылан булып,
Үрмәләп күккә менә,
Йә, ҡыҙыл ҡарлуғас булып,
Ҡапыл ҡайпылып һүнә.

Тар һуҡмаҡ киңәйгән ерҙә,
Үткәс урман аҡланын,
Һә тигәнсе ҡыуып еттем
Теребайҙың Саптарын.

Ҡыуаныстан һөрән һалам,
Ҡаушап китте Теребай.
– Юлда бәхет аунап ята,
Эштәр әкәмәт, малай!
Башта төшөнмәй маташа:
«Башым, – ти, – тубал бөгөн!»
Һөйләп бирҙем Теребайға
Мәсьәләнең елеген.

Саҡ-саҡ болотҡа теймәне
Теребайҙың кәпәсе.
Теребай бит беҙҙең яҡта
Беренсе туй әтәсе!

Ул кейәү егете икән,
Моғайын, ғауға була.
– Туйҙа, – ти, – көршәк төпәсләү
Борондан ҡалған йола.

– Ил йолаһын, – ти Теребай, –
Тыу итеп күтәрәйек.
Башҡорттарҙың туй ғәҙәтен
Немецка күрһәтәйек!

Уларса барып сыҡмаһа,
Ғәйеп итмәҫтәр әле.
Ашыҡ-бошоҡ эш ҡылынһа,
Ничево, һуғыш мәле!

Егеттәр теле әйткән һүҙ –
Ҡырҡылып ауған имән,
Таш яуһа ла юлда булыр
Саптар ат менән Ерән!

Төйөп-төйөп тултырманыҡ
Туй малын һандыҡ-һандыҡ,
Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәҫлек
Үҙебеҙсә яһандыҡ.

Туй кисе боларып килде,
Елләнеп, дауылланып,
Пыр туҙа күктә болоттар,
Йәшенләп, яуынланып.

Теребайға әйткән булам:
– Көн шәптән түгел алай...
Әллә биргән вәғәҙәне, тим,
Ҡыйшайтабыҙмы, малай?

– Алйот, – тип һүгә Теребай, –
Түмәрҙер һинең башың?
Туй өсөн ошондай кисте
Эҙләп тә табалмаҫһың.

Егеттәр теле әйткән һүҙ –
Ҡырҡылып ауған имән.
Туй юлына сығып китте
Саптар ат менән Ерән.

Әлеге ҡарт ҡаршы ала:
– Һаумы, Үлмәҫбай таныш?
Үҙе ете ҡарыш булыр,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

Ҡарт серле таяғы менән
Ҡартлас имәнгә һуға,
Ҡапыл, гүйә, ер аҫтынан
Өс батыр ҡалҡып сыға.

Ҡарт әйтә: – Бына өс улым,
Һеҙгә, – ти, – юлдаш булыр,
Уйҙа – уйҙаш, туйҙа – туйҙаш,
Ә ҡорҙа ҡорҙаш булыр.

Алдығыҙҙа ошо һуҡмаҡ,
Эйәрҙән һикерегеҙ,
Туй бүләген ҡуйындарҙа
Һыуытмай еткерегеҙ.

Туп ҡайыҙлай болот һыртын,
Телә йәшен ҡамсыһы,
Автоматтан һибәме ни
Эре ямғыр тамсыһы.

Ҡарт ҡалды. Тайғаҡ һуҡмаҡтан
Барабыҙ башты эйеп,
Эй барабыҙ, көн барабыҙ,
Ай, йыл барабыҙ кеүек.

Тау аҫтында кескәй ауыл,
Эт тә юҡ урамында,
Ҡарттың бер улы күрһәтә:
– Туй инде бына бында...

Эйелеп, яҡын киләбеҙ,
Өйҙәре бейек кенә,
Бишебеҙ, биш себен булып,
Биш тәҙрәгә менә.

Эштәр әкәмәт: немецтар
Ну эре сирттерәләр!
Сүл бүреһе туйымы ни,
Олошоп типтерәләр.

Эскә инеп, шат табынды
Ҡуҙғатырға «ҡыйманыҡ»,
Туй бүләге менән өйҙөң
Дүрт мөйөшөн һыйланыҡ.

Кәйеф боҙоп ишек ҡаҡһаҡ,
Ғәйеп итерҙәр һымаҡ(!)
Беҙҙең һыйҙар кейәүҙәрҙе
Мәйет итерҙәр һымаҡ.

Бер мәлде дүрт епте тарттыҡ –
Көл булып осто табын.
Ошонан да мәрәкәрәк
Туй буламы һуң тағы?

Теребайға әйтә һалам:
«Ҡыҙып ташламаныҡмы?
Әрһеҙләнеп, туй йолаһын
Боҙоп ташламаныҡмы?»

«Алйот, – ти Теребай, – туйҙа
Мылтыҡтан атыу була,
Һауыт-һаба шалтыратыу
Борондан ҡалған йола.

Табындарын күтәргәнгә
Маҡтап һөйләрҙәр әле:
«Ай-һай-һай, бик ирмәк икән
Башҡортта туй әмәле!»

### 3. АЛМАЛАР БЕШКӘН ИНЕ

Алмалары алһыуланып,
Балланып бешкән ине,
Баҫыуҙарҙа тулҡынланып
Бойҙай етешкән ине.

Беҙ ял итеп ятҡан утар,
Йоҡо шикелле, тыныс,
Ләкин аттар һоло ашай,
Ҡайрала тора ҡылыс.

Борола-һырыла ағып ятҡан
Тар ғына йылға ине,
Йылғаның ике яғында
Тик ике донъя ине.

Беҙҙең яҡтың яры һөҙәк,
Әҙәм үтмәҫлек ҡамыш,
Теге яҡта ҡасып ята
Беҙҙең күптәнге таныш.

Мыйыҡтарҙы еткерәбеҙ
Һыйпаштырғылап, тарап,
Һағынабыҙ ер-һыуҙарҙы,
Осҡан ҡоштарға ҡарап.

Бәй, һүҙгә мауығып, яҡташ,
Һүҙҙең осон сыбалттым,
Ирмәк булды бер көнөндә
Йәйге матур сыуаҡтың.

Күл буйынан, ат йөҙҙөрөп,
Иренеп ҡайтып киләм,
Һалмаҡ ҡына башын сайҡап,
Күгәүен ҡыуа Ерән.

Ҡарайым, ситән артында
Ҡыҙ мине шәйләп тора.
(Бындағы ғәҙәт буйынса,
Көнбағыш сәйнәп тора.)

Башта үтергә уйланым,
Иҫем дә китмәй, имеш!
(Һөйгән йәре бар егеттәр
Шулай булырға тейеш.)

Тик, яҡташ, үҙең беләһең,
Бик саҡ ҡына булһа ла
Ҡыҙҙар менән һүҙ ҡушыуһаң,
Күңел бушанып ҡала.

Туҡтаным шул, егеттәр, тим,
Һиҙеп ҡалмаҫтар әле,
Һиҙһәләр ҙә, Гөлбикәгә
Хәбәр һалмаҫтар әле.

Туктаддым да сәләм бирҙем:
— Һаумы, Кәтүшә туташ!
Үҙең, тим, нәк муйыл күҙле
Перәник ҡошсоҡка оҡшаш.

— Тик ҡошсоҡ һеҙҙең баҡсаға
Ҡуныл һайрамаç кеүек. —
Ҡыҙ йылмая. — Мыйығыңды
Юкка тырпайтма, егет.

— Емдәр һибеүсеһе булһа,
Ҡунмаҡсы күренәһең;
Беҙҙә ағас бейек үçә,
Тик юҡка үреләһең.

— Мыйыҡ бар тип йөрөйһөңмө,
Йүнлерәк үçмәгәс тә,
Ҡарлуғас ҡанаттарылай
Ҡыйылып төшмәгәс тә,

Мыйыҡмы ни, ғибрәт бит был... —
Ҡыҙыҡай һөйләп китте,
Теште ҡыçып ҡына торам,
«Мыйыктан һөйрәп китте».

Шул заман ҡапыл үҙемде,
Әйтерһең, йәшен һуҡты:
Ҡыҙ торған ситән артынан
Теребай килеп сыҡты.

Матур ҡыҙҙың ҡулбашына
Үҙе таянып тора,
Мыйыҡ тиһәң — бөтөрөлгән,
Күҙҙәре янып тора.

— Аңламаçһың Үлмәçбайҙы,
Әллә атын һыу кертә,
Әллә, — ти, — зифа буйҙарға
Туҡтап ҡаш та һикертә.

Ҡыҙ-ҡырҡын менән серләшеп,
Күңел асаһың икән.
Был эшеңде һиҙеп ҡалһа,
Нимә әйтер Гөлбикәң?

Утыҙға аяҡ баҫҡанда
Янып, ҡыҙарып киттем,
Теге һылыу ҡыҙ янынан
Тиҙ-тиҙ ҡуҙғалып киттем.

Артҡа әйләнеп ҡараһам, —
Теребай килә, яуыҙ.
— Үлмәҫбай дуҫ, бик кәрәкле
Һүҙем бар, — ти, — бер ауыҙ.

Әле теге ҡыҙ янында
Үҙеңде көтөп торҙом,
Бер хәйләле эш хаҡында
Әкәмәт план ҡорҙом.

Йылғаның теге яғында
Бары өс һаҡсы ғына, —
Күрһәң, үҙеңә лә оҡшар —
«Тел»дәре яҡшы ғына.

Мин инде өс көн буйына
Йылғаға килә китәм.
Һайраясаҡ турғайҙарҙың
Хәлдәрен белә китәм.

Заманы түгел, Үлмәҫбай,
Телдәрҙе ҡайрашырға,
Тубыҡты бөкләп ултырып,
Туйғансы һайрашырға.

Барып өлгөрөргә кәрәк
Әле көн ҡыҙыу саҡта,
Һә тигәнсе эйәрләнде
Ерәнсәй менән Саптар.

Командир ҙа ҡулды ҡысты:
«Хәйерле юл – шул теләк.
Барып сыҡһа, бик шәп булыр,
Егеттәр, һеҙҙең бүләк».

Сығып киттек. Соҡор буйлап
Барабыҙ елеп кенә.
Уйлап киләм: «Теребай, тим,
Һай, асыл егет кенә».

Байтаҡ барғас, аттан төшөп,
Йәйәүгә күстек, малай;
Ҡояш түбәне ҡыҙҙыра,
Йән тиргә төштөк, малай.

Унан һуң кендектән һаҙлыҡ,
Әҙәм үтмәҫлек ҡамыш.
«Алыҫ түгел, – ти Теребай, –
Минең боронғо таныш».

Алдыбыҙҙа ҡусҡылланып,
Йәшәреп тора таллыҡ,
Япраҡ аша ялтырап аҡҡан
Йылғаны күреп алдыҡ.

Һыу ситенә барып еттек
Эйелеп, боҫоп ҡына.
Йүткереп ебәрмәҫ өсөн
Тештәрҙе ҡыҫып ҡына.

Теребай бышылдай миңә:
«Был урын арыу, тибеш,
Беҙ ошонда табышыбыҙҙы
Көтөп торорға тейеш».

Алдан һөйләшеү буйынса,
Өҫтө һалдыҡ үҙебеҙ;
Йырҙа әйтелгән шикелле,
Теге яҡта күҙебеҙ.

Һыуға ҡарайым, ярайһы,
Йылғаһы тоноҡ ҡына,
Тик ситендә ойоп тора
Һары томбойоҡ ҡына.

Күҙәтәбеҙ. Теге яҡта
Япраҡ та ҡыштырламай,
Эшебеҙҙең пустой булып
Сығыуы бар бит, малай.

Көтәбеҙ. Бына бер заман
Һайыҫҡан шыҡырланы,
Күп тә үтмәй килеп сыҡты
«Әкиәт батырҙары».

Өсәүҙәр. Автоматтарын
Ағасҡа һөйәнеләр,
Һыуға ҡарап, мығыр-мығыр
Нимәлер һөйләнеләр.

Ә унан һуң шыр яланғас
Сисенеп ташланылар.
...Күлдәктәрен әйләндереп,
Сүпләй ҙә башланылар.

Тфү, йә, был башкиҫәрҙәр
Күпме көттөрөр тағы?..
Йөрәктең, тартҡан йәйәләй,
Тулышып торған сағы.

Бына бер бүкән кеүеге
Йылғаға тәгәрәне,
Үҙе йөнтәҫ, үҙе ҡара,
Гүйә, һарыҡ бәрәне.

Унан һуң икеһе сумды,
Ҡиәфәт — өрәкме ни,
Ҡолаҡтары — һелкеүестәй,
Ҡулдары — күрәкме ни!

Быстырлашып яталар бит
Ярҙың ситендә һаман.
Бер саҡ күрәм, фетнәләрең
Йөҙәләр беҙгә табан.

Беҙ ҙә сумдыҡ ҡамышлыҡҡа,
Һыу аҫты сәфәренә,
Ата-баба ишетмәгән
Кәсептең хәтәренә.

Һыу төбөндә күргәндәрҙе
Таҡылдап тораһым юҡ,
Эшкә ҡағылмаған яҡҡа
Һүҙемде бораһым юҡ.

Бер заман башты күтәрһәк,
Алдыбыҙҙа яр булды,
Һыу эсендәге алты күҙ
Ғәжәп алты шар булды.

Шөрләп ҡул күтәргәйнеләр,
Бер-бер артлы баттылар,
Ярай, бәхетебеҙ бар икән,
Кире килеп ҡалҡтылар.

Мин автоматтарын алам,
Теребай ҡарап тора,
Тегеләр шауламаһын тип,
Бармағын янап тора.

Теге ялғаш ҡолаҡлыһы
Ярға сыҡмаҡсы итә,
Ғәйрәтләнеп, Теребайға
Килеп һуҡмаҡсы итә.

Йоҙроҡ тиһәң, – Теребайҙа
Суҡмарҙан яманыраҡ,
Анау тынғыһыҙ нәмәнең
Ҡундырҙы яңағына.

Тәкмәс атып, ҡолап төштө,
Эһ тә тип әйтә алманы.
Эштең ҡайҙа барғанлығын
Бүтәндәр ҙә аңланы.

Шулай ғына төшөндөрҙөк
Баш ҡоҙалар килгәнен!
Һөҙәк ярға алып сыҡтыҡ
Гитлерҙың өс имгәген.

«Ҡунаҡтар»ҙы көттөрөү, әй,
Борсоу булһа ла инде,
Ярға еткәс, тиҙ-тиҙ генә
Кейеп алдыҡ кейемде.

Юлға сыҡҡас ҡына, ҡәһәр,
Иҫемә килеп төштө;
Оятыраҡ булмаҫмы, тим,
Алып ҡайтыу был төҫлө?

Теребай менән тиҙ генә
Сараһын уйлап таптыҡ,
Әрекмән япраҡтары менән
Оят ерҙәрен ҡаплаттыҡ.

Урманды үткәс, үҙебеҙ
Арғымаҡтарға мендек,
Пилотканы ҡырын һалып,
Ауылға килеп индек.

Малайҙар шаулай урамда:
«Ен йөрөй көпә-көндөҙ,
Бейетегеҙ, ағай, – тиҙәр, –
Йә кәмит күрһәтегеҙ!..»

Шунан һуң был тирәләрҙә,
Әллә ысын, әллә юрый,
Башҡорттар ен тотҡан, тигән
Имеш-мимештәр йөрөй.

*1942–1944*

## СӘЙЕТ ХАҠЫНДА ХИКӘЙӘТ

I

Юҡ болоттоң әҫәре лә,
Күк йөҙө шундай аяҙ,
Йәм-йәшел үлән ер өҫтө, —
Ер өҫтөндә йылы яҙ.

Иртәнге елдәр тын ғына
Тал ботаҡтарын ҡаға,
Япраҡтарға төшкән ысыҡ
Ялтырап ергә тама.

Ҡаяла бөркөт ҡағынып,
Ҡанатын ташҡа һуға,
Көн буйы күктә йөрөргә
Тәгәрәп ҡояш сыға.

Ҡояштан иртәрәк тороп,
Кешеләр китә ҡырға,
Турғайҙар менән һауаға
Һайрарға, талпынырға.

Сабаҡтар уйнай күлдәрҙә,
Тулҡын уянмаҫ борон,
Тын ҡалып тыңлай урмандар
Тәүге кәкүктең йырын.

Бәрәстәр сыға яланға
Иркенләп йөрөр өсөн,
Өйрәктәр төшә йылғаға
Бәүелеп йөҙөр өсөн.

Иртә үк торған балалар
Гөж килә, урам тулып,
Китәләр улар мәктәпкә,
Шат, татыу төркөм булып.

Ерҙә һәр нәмә уянып,
Хеҙмәттә һулыш ала.
Бөтмәҫ йоҡоға һабышҡан
Бары бер генә бала.

Ана шул малай хаҡында
Һөйләп бирмәксе инем.
Быға оҡшаш уҡыусыны
Күргәнең бармы һинең?

II

Ул малайҙың исемеме?
Исеме уның – Сәйет;
Әле булһа йоҡлап ята,
Түшәктә ҡолас йәйеп.

Әсәһе, саҡ-саҡ уятып,
Мендәргә һөйәп ҡуя.
Шунан Сәйет, иҫнәй-иҫнәй,
Иренеп битен йыуа.

Етмәһә, дулай: итекте
Кейеүе, имеш, аҙап,
Мәктәпкә барырға сыға
Бөтә баланан аҙаҡ.

Ялтырап аға тар йылға,
Ә мәктәп арғы яҡта.
Ҡапыл туктап ҡалды Сәйет
Күпергә етер саҡта.

Күпергә ҡарап уйланды:
«Бер аҙ һуңлайым, буғай,
Был дәрескә инмәһәм дә...
Әй ҡалай йәшел туғай!

Бына әллә ниндәй ҡоштар
Ағасҡа килеп ҡуна,
Ҡарасы, йылғала нисек
Ҡаҙ бәпкәләре сума...»

Күпергә аяҡ баҫманы,
Китте был йылға буйлап.
Башта йөрөнө бик оҙаҡ
Бәпкәләр менән уйнап.

Ә унан һуң таштар йыйҙы,
Һарайҙар ҡорамы ни?
Ә ваҡыт үтә лә үтә,
Ул туҡтап торамы ни!

Башҡалар мәктәп эсендә
Тырышып белем ала,
Ваҡытын бушҡа үткәрә
Бары бер генә бала.

Муҡсаһын аҫҡан көйөнсә,
Сәйет һаман тик йөрөй,
Ә ҡарлуғастар, әйтерһең,
Ҡыйпылып үтә юрый.

Улар ҙа юҡҡа осмайҙар,
Эштәре барын белеп –
Ем көтә бит балалары,
Ояла сыр-сыр килеп.

Күр, йәшелсә баҡсаһында
Ниндәй ҡыҙыу, күмәк эш,
Күҙ етеүгә инде унда
Тәгәрәп үҫер емеш.

Тирә-яҡта бал ҡорттары,
Ҡалай нәҙек билдәре!
Татлы бал бирә уларға
Яҙҙың матур гөлдәре.

Хатта бит ҡырмыҫҡалар ҙа
Мыж килеп оя һала,
Бушҡа ғүмер үткәрә шул
Бары бер генә бала.

Ҡыуаҡ араһында Сәйет
Абынды ла йығылды,
Муҡсаһының эсендәге
Бар нәмәһе ҡойолдо.

Китабы китте асылып:
«Йә, уҡы!» — тигән төҫлө,
Шунан һуң ғына Сәйеттең
Дәрес иҫенә төштө.

Нәмәләрен ул тиҙ генә
Муҡсаға йыйнап һалды.
Ә ваҡыт... ҡуләгәһе лә
Сәйет буйлығы ҡалды.

Ҡояш тап түбә өҫтөндә:
Ә һуң иртәнән бирле
Ошо йәмле ер өҫтөнә
Ул күпме нурын бирҙе?

Хәҙер инде Сәйет барып
Дәрескә инһенме ни?
«Өйрәк балаһы шикелле
Аҙаштым», — тиһенме ни?

Юҡ, ул ҡайтырға бороლдо
Килгән һуҡмағы буйлап.
Инде йөрөмәне уйлап,
Ә китте уйҙар уйлап.

Ни тиер ҡайтҡас, дөрөҫөн
Әйтергә көс етерме?
Әллә тағы Сәйет үҙен,
Алдашып, хур итерме?

Ҡайтҡас, дөрөҫтө әйтмәне,
«Мәктәпкә барҙым, – тине, –
Килтерсе, әсәй, ашарға,
Бигерәк арыным», – тине.

Тағы әллә нәмәләрҙе
Теҙҙе был тел биҫтәһе,
Һуң, әсә ышана инде,
Ышанмайса нишләһен?

III

Урмандар артына китеп,
Тәгәрәп ҡояш батты.
Инде йондоҙҙар ҡабынды,
Ауыл йоҡларға ятты.

Һәм яҡтынан ҡасып торған
Килбәтһеҙ бер ярғанат
Әйләнгеләп осоп йөрөй,
Ҡуныр өсөн яр ҡарап.

Тап бына ошо сәғәттә
Йоҡлай алмай бер бала.
Тәҙрә аша төнгө ергә,
Төнгө күккә күҙ һала.

Йондоҙҙары араһында
Уйнап йөҙә тулған ай,
Эше хаҡ булғас, ергә ул
Яҡты йөҙ менән ҡарай.

Был малай ҙа әсәһенә
Тап шулай ҡарар ине...
(Ләкин ай малайҙы танып
Ҡуймаһа ярар ине.)

Тоноҡ шишмә, һикереп-һикереп,
Аға тау итәгенән,
Шатҡа күрә, сылтыр-сылтыр
Һөйләшә таштар менән.

Малайҙың да шишмә кеүек
Булһа икән шатлығы,
Ул да иртән дуҫтарына
Һөйләр ине атлығып.

Кем тиһегеҙме был бала?
Улмы? Ул – беҙҙең Сәйет.
Хәҙер уға йоҡо бирмәй
Теге көндөҙгө ғәйеп.

«Туҡта, туҡта! Әле эште
Берәү ҙә бит һиҙмәне».
Ул ҡыуанды. Уҡытыусыға
Тапҡыр яуап эҙләне.

Иртән әйтер: «Апайғынам,
Насар булды хәлдәрем.
Баштарым сатнап ярылды,
Эй һыҙланы тәндәрем...»

Күк ситендә таң атҡанын
Әтәстәр хәбәр итә.
Шул саҡ ҡына, тынысланып,
Сәйет йоҡоға китә.

IV

Бүлмәгә инәләр дуҫтар,
Баштарҙы эйеп түбән.
Дуҫтарҙың йөҙө ҡайғылы,
Дуҫтарҙың күңел һүрән.

Әсәнән һораша улар:
– Һыу йота аламы Сәйет?
– Бигерәк ҡаты ята икән!
Докторҙы килтерәйек.

Әсә ғәжәпләнеп ҡарай:
«Ниңә һыу? Ниңә доктор?
Ахыры, был малайҙарҙың
Бүтән эштәре юҡтыр».

Тап шул ваҡыт, йүгерә-атлай,
Ишектән апай керә,
Ул борсоулы кисә Сәйет
Ғәйеп булғанға күрә.

Тик әсә генә аңламай:
«Был ни эш? Ниндәй бәлә?»
Бәләнең ҡайҙан килгәнен
Бер Сәйет кенә белә.

Яртылаш уянған Сәйет
Саҡ ҡына тамаҡ ҡыра.
Ә уға, шарҙай асылып,
Унлап күҙ ҡарап тора.

Унлап күҙ... Ә Сәйеткә оят
Ике күҙен асырға.
(«Их, – ти ул, – асыҡ тәҙрәнән
Себен булып ҡасырға!»)

Себен түгел – малай шул ул,
Бына ҡулдар, бына баш.
Ә үҙен көйҙөрөп тора
Берсә төшкән ун ҡараш...

* * *

Беҙҙең яҡта байтаҡ ҡына
Һүҙҙәр булды был хаҡта.
Сер һаҡлайым тип, уларҙы
Күсермәнем китапҡа...

Сөнки Сәйет ошонан һуң
Һис ваҡыт аҙашманы.
(Белеп әйтәм, аҙашманы,
Тамсы ла алдашманы...)

...Йомарт ҡояш нурҙар сәсә,
Күктең йөҙө салт аяҙ.
Ерҙә яҡты хеҙмәт көнө,
Ер өҫтөндә йылы яҙ.

*1947*

## ЙЫЛМАЙЫУ

*(Көнсығыш әкиәте)*

I

Пайтәхетте* – шанлы ҡаланы
Дошман яуы килеп ҡаманы.
Бикләнделәр тимер ҡапҡалар,
Асылырлыҡ түгел, ҡаҡһалар.
Таш диуарҙар бейек, хикмәтле, –
Дошман түгел, ҡош та үтмәҫлек,
Тик ҡош үтмәҫ ерҙән уҡ үтә,
Уҡ үтмәҫлек ерҙән ут үтә.
Көнө-төнө күктән уҡ яуҙы,
Белмәйенсә тыныу, туҡтауҙы,
Иләк булды алтын түбәләр,
Ә кешеләр әле түҙәләр...

II

Бер саҡ һөрөм баҫты ер йөҙөн:
Ҡыуҙы дошман «Ҡыҙыл үгеҙ»ен –
Төбәне ул ҡала өҫтөнә
Меңәрләгән ялҡын мөгөҙөн.
Мәрмәр манаралар – көл хәҙер,
Сәсеп йөрөй уны ел хәҙер.

---

* *Пайтәхет* – баш ҡала

Ереп аҡты алтын түбәләр,
Ә кешеләр һаман түҙәләр...

III

Арыҡтарҙа тамам һыу кипте,
Әсә күкрәгенән һөт китте.
— Нан*, — тип һуҙған бала ҡулдары
Шул һуҙылған көйө буш ҡалды.
Дан ултыра ине тәхеттә,
Хәҙер аяҡ атлай ләхеткә.
Дан тәхете ҡалды әжәлгә,
Шул саҡ телгә килде әҙәмдәр:

IV

— И, мәшһүр хан, затлы ил тажы!
Бер үҙеңдә илдең мохтажы.
Күпме булһа көмөш сәстәрең,
Шул хәтле бит һинең ғәскәрең.
Бәндәләрҙең күрсе йәберен,
Ғәскәреңә бирсе әмереӊ.
(Никтер тажын һалды ханы илдең.
...Сәсе һирәк ине хакимдың.)

V

— Һин бит ҡөҙрәтебеҙ берҙән-бер,
Әмер бирсе, и, хан, бир әмер!
Бикле ҡапҡаларҙы асһындар,
Ғәскәрҙәрең яуға сапһындар,
Таш диуарға боҫоп тормаһын,
Асыҡ ҡырҙа дошман тураһын.
Үҙе бөтмәҫ, и, хан, ҡыр яуҙы,
Сабып өҙ ҙә утлы ҡоршауҙы.

---

*Нан — икмәк

Әжәл көтөп ятыу — хурлыҡтыр,
Ҡорал тотоп үлеү — ҙурлыҡтыр,
Тыңла, ханым, алма ғәйепкә:
Ҡоҙғон ҡарай һинең мәйеткә.
Ғәскәреңә әмер бирсе, хан,
Зил-зәбәр үк килһен хас дошман,
Һинең һүҙҙән ғәҙел әмер юҡ,
Ҡурҡаҡ булһа, ханға ҡәҙер юҡ.

VI

Был һүҙ өсөн башҡа ваҡытта
Баштар аунар ине балсыҡта.
Күтәрелеп хан бер баҡманы,
Ҡара һөрөм йөҙөн ҡапланы.
Ике ҡашы бергә ҡушылды,
Тәрән уйға сумып бошондо.

VII

Ҡөҙрәтле хан һалды оранын:
— Бар ғәскәрем алһын ҡоралын!..
Хан алдына баҫты ғәскәре.
Йөҙҙәрҙә юҡ өмөт әҫәре.
Әйтте хан: «Һеҙ көсөм, дарманым,
Ошо булыр һеҙгә фарманым:
Күрәһегеҙ, донъя ҡап-ҡара.
Асылһындар бикле ҡапҡалар!
Таш диуарға боҫоп тормағыҙ,
Асыҡ яуҙа дошман турағыҙ.
Яуҙа еңеп үлгән ҙур булыр,
Ҡурҡып ҡорал ҡуйған хур булыр».
Башын эйеп, ғәскәр тик тора.
Тирә-яҡта бәлә ҡотора...
Күккә һона хан һуҡ бармағын:
— Асыҡтыр бит һеҙгә фарманым?!
Ҡымшанмай ҙа ғәскәр аҙ ғына,
Тирә-яҡта әжәл ажғыра...

VIII

Хан күҙендә хәйлә сағылды.
Өндәште ул тыныс, яғымлы:
— Һеҙ ҡолдарым түгел, улдарым,
Даным уртаҡ, уртаҡ — малдарым.
Шәфҡәтем күп һеҙҙең өлөшкә,
Күмермен шау алтын-көмөшкә...
Һәр кем белә: хан мал ҡыҙғанмай,
Ләкин ғәскәр әле ҡуҙғалмай.
(Ғәскәр уйлай: үҙең самала,
Алтын ни хаҡ теге донъяла...)

IX

Хан, болоттай, ҡапыл ҡаралды,
Күҙҙәрендә йәшен яралды,
Дауыл өрҙө һулыш алышы,
Күк күкрәтте яман тауышы:
— Кем буйһонмай минең әмергә,
Шуға харам хатта ҡәбер ҙә!
Баштарығыҙ булыр ҡаҙыҡта,
Йәндәрегеҙ батыр яҙыҡҡа.
Ғибрәт өсөн ошо төйәккә
Тау өйөрмөн һеҙҙең һөйәктән.
Дәһшәтле хан текә ҡылыҡҡа —
Хан ҡулына килеп юлыҡма.
Һәр кем белә: ул йән ҡыҙғанмай,
Ләкин ғәскәр һаман ҡуҙғалмай.
(...Бер ҡырҡылған башҡа яҙыҡ ни,
Тупраҡ ни ҙә уға, ҡаҙыҡ ни.)

## X

Берәү алға сыкты атлығып,
Был ҡаһарман – ғәскәр башлығы.
Ул баҫҡанда тетрәп ҡуйҙы ер,
Ҡылыс һурып, һелтәп ҡуйҙы бер.
– Уландарым! – тине. – Уландар!
Һеҙме яуҙа ҡаушай торғандар?
Уңға-һулға аҙмы яу сапҡан,
Күпме ерҙе аттан тапатҡан,
Ете илде гиҙеп, юл үткән,
Ете ханды еңеп, ҡол иткән,
Бәһлеүәнлек менән дан алған,
Данға тура юлдаш һаналған
Беҙ түгелме ни һуң, уландар?
Беҙме яуҙа ҡаушай торғандар?
(Дөрөҫлөк ҙур ине һүҙендә,
Тик өмөт юҡ ине күҙендә.)
– Алға! – тине башлыҡ. – Иншалла!
Беҙҙең алда шөһрәт, шан алда!
Баштар ҡалҡындылар аҙ ғына,
Ләкин алда әжәл ажғыра.
(...Дан терегә генә ҡәҙерле,
Ул йылытмай һалҡын ҡәберҙе.)

## XI

Әгәр мәхрүм булһаң өмөттән,
Вәғәҙәләр, янау, өгөттәр, –
Ҡомдан ишкән арҡан кеүектәр.
Диуар аръяғында ғәрәсәт,
Бирге яҡта – ҡурҡыу, һәләкәт.
Тап ошо иң шомло бер мәлдә,
«Инде харап булдыҡ» тигәндә,
Хоҙай белһен, ҡайһы яҡтандыр,
Шайтан белһен, ниндәй заттандыр,
Хас байрамса ҡупшы кейенгән,

Хас бәхеткә тамам тейенгән
Бер һылыу ҡыҙ, ярһый-ашҡына,
Килеп басты ғәскәр ҡаршына.

XII

Баш ҡалҡыта ғәскәр бер талай:
«Ни әйтмәксе икән был бала?»
Ҡыҙ йылмая. Шулай йылмая,
Хатта ирер ине боҙ ҡая.
Ул өндәшмәй һаман, тик тора,
Торған һайын йөҙҙәр яктыра;
Ергә, гүйә, һулыш өрөлдө,
Шиңгән үлән, гүйә, терелде.
Гүйә, көлдәр мәрмәр булдылар,
Арыҡтарға һыуҙар тулдылар.
Ҡыҙ йылмая. Йыһан яктыра.
Был – өмөт бит! Өмөт саҡыра.

XIII

Күңелдәрҙә ғәйрәт яралды,
Ҡулдар ҡыҫып тотто ҡоралды.
Ғәскәр әйтте: «Һылыу, беҙ әҙер,
Әмер бирсе беҙгә, бир әмер!»
Тик йылмая ғына ине ҡыҙ,
Ауыҙ асып былай тине ҡыҙ:
«Мин бейергә килдем майҙанға –
Һеҙ дошманды еңгән байрамда».

XIV

Күк күкрәне, йәшен атылды...
Бар ҡапҡалар берсә асылды.
Бәһлеүәндәр яуға ташланды,
И, муйындар, һаҡлаң баштарҙы!

Өс көн, өс төн ҡаты дау бара,
Саң болото күктә сөм-ҡара.
Ҡанға батып, ҡыҙҙы һөңгөләр,
Йылға ҡандар ергә һеңделәр.
Аҙыҡ булып ҡоҙғон туйына,
Башһыҙ ҡалды бик күп муйындар.

XV

Ярты ғәскәр яуҙа йығылған,
Ҡый үләндәй, дошман ҡырылған.
Дүртенсе көн ҡала ҡырынан
Киткән бәлә, киткән һәләкәт.
Еңеү туйын иткән мәмләкәт,
Илгә кире ҡайтҡан бәрәкәт.
Тик ҡыҙ ғына ошо байрамда
Бейемәгән сығып майҙанға.
Ҡасып атҡан хаин уғынан
Ул йылмайған көйө йығылған.

XVI

Өс көн, өс төн тауҙар һелкенгән,
Йылғаларҙан тулҡын эркелгән,
Урмандарҙа ағас бәүелгән,
Болот тетрәп, ямғыр түгелгән,
Күктәге ай хатта сайҡалған,
Ергә ҡолап төшмәй саҡ ҡалған,
Шулай бейегән, ти, бар ғаләм,
Аяғына баҫҡан һәр әҙәм.

## XVII

Был, әлбиттә, иҫке әкиәт,
Әкиәттә ошо хәҡиҡәт:
Әгәр мәхрүм булһаң өмөттән,
Вәғәҙәләр, янау, өгөттәр, –
Ҡомдан ишкән арҡан кеүектәр.
Йылмайыуҙан көслө әмер юҡ,
Ул әмерҙә янау, йәбер юҡ.

*1960*

## ҠАРА ҺЫУҘАР

Көнөн яуа, төнөн яуа,
Аҙна яуа бер тоташтан,
Әйтерһең, күк ҡолаған да,
Һауа менән ер тоташҡан.

Ҡайҙа ҡояш, ай, йондоҙҙар?
Күкте ташлап ҡайҙа киткән?
Һөйгән йәрһеҙ йәшәү кеүек,
Ай-ҡояшһыҙ ҡыйын икән.

Ел иҫмәне. Һәм япраҡтар
Йырламаны һуңғы йырын, —
Һары һыуҙар йыуып алды
Ғүмерҙәре бөтмәҫ борон.

Көнөн яуа, төнөн яуа...
Ер күшеккән, ер ҡаңғыра.
Мәтеләнгән һалҡын ергә
Бер баҫырға сирҡандыра.

Сирҡандыра? Тиреҥ тамған,
Ҡаныҥ аҡҡан ошо ерме?
Дуҫтарыҥдыҥ һөйәктәре
Төйәк тапҡан ошо ерме?

Ошо ерме? Һин һуң уны
Иңләп-буйлап үтмәнеңме?
Тоғролоҡҡа анттар биреп,
Йәш аралаш үпмәнеңме?

Әжәл һине эҙләгәндә,
Берәй саҡ ул шик һалдымы?
Хатта ҡурҡып һыйынғанда,
Ул һуң һинән сирҡандымы?

Сирҡанманы, ҡосто беҙҙе
Тере йәки үле көйгә,
Һин шуларҙы оноттоңмо,
Оноттоңмо йылы өйҙә?

Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа,
Түбәләрҙән һыуҙар аға.
Сеү! Ҡараңғы көҙгө төндә
Кемдер миңә ишек ҡаға...

Йәнә тынлыҡ. Бик һаҡ ҡулдар
Аҡрын ғына ишек аса,
Ямғыр шауы менән бергә
Ят бер ҡатын инеп баҫа.

Өндәшмәйсә ул бик оҙаҡ
Күҙҙәремә бағып тора,
Ҡара шәле суҡтарынан
Сөбөрләп һыу ағып тора.

Ялбарыулы ҡарашында
Ғазап ҡатыш өмөт күрәм.
Дөрләп янған мейес алдынан
Һүҙһеҙ генә урын бирәм.

Ялҡын нуры уның борсоу
Аҡ йөҙөнә төшөп балҡый.
Был һағышлы матурлыҡты
Онота алмам ғүмер баҡый.

Ҡатын

Уйларһығыҙ, ниндәй яфа
Килтерҙе икән, тип, был бәндә.
Дөрөҫ, шатлыҡ бүлешергә
Килмәҫ кеше быңдай мәлдә.
Юлдар үттем, күңелемә
Ер күтәрмәҫ өмөт тейәп,
Ошо усаҡ өмөтөмә
Һуңғы тыныш, һуңғы төйәк.
Йә ул шунан йылы алыр,
Йәки янып көлгә ҡалыр.

Мин

Әйтегеҙсе, һеҙ кем?

Ҡатын

Мин – Сыҙамлыҡ.
Сикһеҙ юлға сыҡҡан Юлсымын,
Һағыш менән оҙаҡ еңештем мин,
Хәҙер йонсоном...

Мин

Ниндәй яҙмыш йөрөтә?

Ҡатын

Мин тол кәләш.
Ҡатын булмай етем ҡалғанмын.
Ун йыл буйы шуға ышанманым,
Ышанмайым. Булмаҫ... Ялғандыр!

Мин бит һөйәм уны. Кис ҡайтмаһа,
Ҡайтыр, тинем, таңдар атҡанда;
Аш ултыртһам, ике ҡашыҡ ҡуйҙым,
Ике мендәр һалдым ятҡанда.

Һәм һаман да шулай... Ун йыл буйы
Бөтә илде ҡыҙырып атланым,
Тереләр араһында осратманым,
Зыяраттарҙан ҡәберен тапманым.

Хатта дошмандарҙың ҡәбере бар,
Өңөлһә лә, әрем баҫһа ла,
Кеше энә түгел юғалырға...
Эҙе ҡала, тамсы тамһа ла.

Мин

Кем ул?

Ҡатын

Яҡуп атлы егет ине.
Беләһегеҙме уны һеҙ генә,
Йыуатырлыҡ йәки илатырлыҡ
Һүҙ әйтегеҙ, бары һүҙ генә...

Мин

Яҡуп атлы егет? Яҡуп атлы...
Иҫке йәрәхәткә теймәгеҙ.
Ҡайғығыҙҙың бары баштан ашҡан.

Ҡатын

Мин сыҙармын. Зинһар, һөйләгеҙ!

Мин

Һағышлының күңеле буш түгел,
Һәм йөрәге тере көткәндең.
Шуларҙан да мәхрүм ҡалһағыҙ һуң?..

Ҡатын

Мин ҡурҡыуҙың сиген үткәнмен,
Түгер йәштәремде түккәнмен.
Һөйләгеҙ!

(Мин һөйләнем. Аяу белмәй
Аҡтарҙым бар яраларҙы.
Ул ултырҙы таш һын һымаҡ,
Ҡымшанып та ҡарамаңы.)

Мин

Ҡәберлеләр ятҡан ерҙә,
Эйе, уның ҡәбере юҡ,
Ә тереләр араһында
Үлектәрҙең ҡәҙере юҡ.

Был аҙағы әңгәмәнең,
Уның башы юл сатында.
Ҙур һуғыштың тәүге йәйе
Ут бөркөгән бер сағында,

Сиктән алып сигендек беҙ.
Хурлыҡ яҡын, еңеү йыраҡ.
«Китмәгеҙ!» тип табандарға
Йәбешә ине тыуған тупраҡ.

Көс-хәл менән күтәрҙек беҙ
«Сигенеү» тигән яманатты.
Күңелдәргә үрләтмәнек
Тик шик тигән ҡара затты.

...Батальон приказ алды
Ҡайынлыҡта, юл сатында:
Дошман яуын ошо ерҙә
Кискә тиклем туҡтатырға,
Эңер төшкәс, юл алырға,
Төнгә инеп юғалырға!

Мең ғүмерҙән оҙонораҡ
Ярты көн бар кискә тиклем —
Ҡояш күкте урап үтә,
Тура юлдан йөрөй үлем.

Һәм беҙ ҡалдыҡ юл сатында,
Уның юлын бүлер өсөн,
Йә алышып еңер өсөн,
Йәки ергә һеңер өсөн.

Ә донъяның үҙ хәстәре,
Тәбиғәттә мәңгелек эш,
Көн битендә арыш бешә,
Сәскәнән бал йыя иңкеш.

Бары раҫлай тик йәшәүҙе:
Тултырып ал һулышыңды!
Ҡайын шундай хуш еҫ бөркөй,
Бар тип белә һуғышыңды...

Ләкин һуғыш йәнәшәлә.
Өҫкә килә дошман шашып,
Төтөн ҡатыш саң болото
Көндө ҡаплай, күккә ашып.

Машиналар, машиналар...
Ағылалар һалдат тейәп.
Туҡтағыҙ! Был яландарға
Кәрәк түгел һеҙҙең һөйәк.

Кеше бында иген сәскән, –
Тупраҡ шундай игелекле.
Дошман килә ерҙе иҙеп,
Бар тип белә игенеңде...

Улар ғәмһеҙ. Ҡиәфәттә
Тәкәбберлек сиктән ашҡан.
Ләкин, күрәм, йөҙҙәренә
Әжәл үҙе мөһөр баҫҡан.

Бер секундта беҙҙең яҡта
Күтәрелгән балта сапты:
Ҡупты дауыл, ут дауылы,
Дуланы ул киҫкә саҡлы.

* * *

Күргәнегеҙ барҙыр, тимен, һеҙҙең
Өйөрмәлә диңгеҙ шашҡанын,
Тулҡын артлы тулҡын һуғыла ла
Дер һелкетә ҡая таштарын.

Ҡая тора. Алыш оҙаҡ бара,
Ҡырылалар ғорур тулҡындар;
Тик бер ваҡыт таштың хәле бөтә,
Һәм ҡаяны уба упҡындар.

Ләкин күпме генә дулаһа ла,
Диңгеҙ сыға алмай ярынан.
...Алты атаканы тонсоҡторҙоҡ,
Етенсе ҡат баҫыу яғынан
Улар килә. Бесән сапҡан кеүек;
Ни саҡлыһын ҡырған инек бит!
Беҙ ҙә һирәк-һаяҡ ағас төҫлө,
Күптән түгел урман инек бит.

Ҡурҡыу беҙҙән үҙе ҡурҡып ҡасты.
Быңдай ирлек, ныҡлыҡ ҡаршында
Хатта дошман башын эйер ине,
Әгәр аңы булһа башында.

Төн алдында сигенеп барған ҡояш,
Ҡанға батып, гүйә, сәсәне.
Тамып торған ҡыҙыл тамсылары
Офоҡ ситтәренә сәсрәне.

Шул саҡ берәү ҡурҡып артҡа ҡасты:
Кеше йүгерә, шәүлә тирбәлә.
Пуля тейҙе уға. Кем пуляһы?
Кеше ауҙы. Бөттө күләгә.

Шәүлә хужаһын мин танып ҡалдым.
Танымаһам икән ул һынды!
...Минең өсөн дә нәҡ шул секундта
Ҡапыл ҡояш һүнде, ер тынды,
Бөтәһе лә бөттө, онотолдо.

* * *

Шыбыр-шыбыр, шыбыр-шыбыр
Ҡолағыма кем шыбырлай?
Шыбырламай, баш осомда
Минең ғәзиз бисәм илай,
Күҙ йәштәре тама шулай:
Шыбыр-шыбыр, шыбыр-шыбыр.
Шыбыр-шыбыр... Ҡайнар йәштәр
Уң сикәмде көйҙөрәләр.
Мин үлгәнмен. Шыбыр-шыбыр
Улар миңә йән өрәләр.

Йән өрәләр. Саҡ-саҡ ҡына
Мин һушыма киләм икән.
Күҙем асам. Ә һөйгәнем,
Йән кергәс тә, ниңә киткән?

Аяу белмәй уң сикәмә
Утлы ҡаҙау кем һуң ҡаға?
Ҡаҙау түгел. Йәрәхәттән
Сөбөр-сөбөр ҡаным аға.

Төн ҡараңғы. Тик шәйләйем
Ҡайындарҙың аҡ һындарын.
Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа —
Дуҫтарымдың үләндәргә
Тамып ҡалған ал ҡандарын
Шыбыр-шыбыр ямғыр йыуа.

Шыбыр-шыбыр... Ниндәй моңһоу.
Ошо әллә йыназамы?
Ҡаны менән әллә йыһан
Батырҙарға дан яҙамы?

О һин, дымлы һалҡын тупраҡ!
Ҡотҡарғанһың мине тағы,
Мин яңынан тере япраҡ
Һиндә үҫкән ағастағы.

Ямғыр йыуа япраҡтарҙың
Һарыларын, йәшелдәрен.
Ә күк күкрәй көнсығышта,
Бында сағыла йәшендәре.

* * *

Яу ҡыры тын. Туҡта, кемдер
Үҙәк өҙгөс ыңғыраша.
Ыңғырашмай. Ябалаҡтар
Бер-береһенән хәл һораша.

Ябалаҡтар! Бындай хәтәр
Урманда һеҙ ник ҡалдығыҙ?
Өн тағы ла ҡабатлана,
Кеше өнө: «Ҡотҡарығыҙ...»

«Ҡотҡарығыҙ...» Тимәк, унда
Тағы ла бер ғүмер һүнә.
Мин тауышты эҙләп китәм
Яу ҡырынан, ауа-түнә.

Был яланда дуҫтар ята —
Ил терәге булған ирҙәр,
Һуңғы төндө ҡуна улар
Ер өҫтөндә. Иртәгә иртән

Беҙ белмәгән дуҫтар һалыр
Батырҙарҙы бер ҡәбергә.
Кемдер һыҡтар, кемдер һүҙһеҙ
Башын эйер. Ә хәҙергә

Улар яҙған сәләм хаттар
Көнсығышҡа юлдар яра,
«Мин иҫәнмен!», «Мин иҫәнмен»
Тигән хәбәр алып бара.

«Мин иҫәнмен!» – Өйҙәрендә
Йылмаялар һүрәттәре,
Түгелмәгән улар өсөн
Түгеләсәк күҙ йәштәре.

Ҙур штабта писарь бөтөр
Наградаға ҡағыҙ яҙып,
Ә интендант складтан
Улар өсөн алыр аҙыҡ...

Икмәк, тоҙ, һыу, наградалар –
Бөтәһе лә ерҙә ҡала...
...«Ҡотҡарығыҙ!» Эргәмдә үк
Тере кеше һөрән һала.

Бомба иҙгән бер соҡорҙа
Аунап ята ул бисара.
Уны тағы таныным мин...
Танымаҫҡа булһа сара?!

Был – ул ине. Ҡапыл ниҙер
Өтөп алды йәндәремде.
Ирекһеҙҙән ҡапшаным мин
Билемдәге хәнйәремде.

Ләкин ҡыны хәнйәремде
Ҡыҫып алды, сығарманы.
Гүйә, әйтте: мин ерәнәм,
Харам миңә уның ҡаны.

Кеше һыҡтап, үкһеп ята:
«Ах, аяғым, ах, аяғым!..»
Мин тик торам. Үҙ-үҙемә
Һорау бирәм: «Ҡайҙа аяуың?
Ҡайҙа аяуың?.. ... ...»

Таң яҡтыра, һүҙһеҙ генә
Бәйләштек беҙ яраларҙы.
Икебеҙ ҙә тойҙоҡ мәгәр
Яҡынаймаҫ араларҙы.

Сыҡмаған йән тәндә булғас,
Йән эйәһе бәндә булғас,
Күҙе һиңә ҡарап торғас,
Ташларға көс етмәй икән.

Ауыр юлдаш мин һайланым,
Яурыныма йөкмәп уны,
Тын урманға ыңғайланым.

Урман, урман, ҡара урман –
Күк түбәле йәшел һарай!
Мәскәй ҡарсыҡ йәнде һорай,
Сәмреғош хәлде һорай.

Мәскәй юҡ ул. Беҙ тик бары
Ышанабыҙ Сәмреғошҡа.
Ҡанатына ултыртыр ҙа
Алып китер көнсығышҡа.

Сәмрүк тә юҡ. Һушты ала
Ике аяҡты бер атлауы.
Тик берҙән-бер өмөт беҙгә
Алыҫтағы туп шартлауы.
Беҙҙекеләр, тимәк, унда,
Еңеү яулай яу ҡырында.

Таңдар атты, кистәр килде,
Һаман алға имгәкләнек.

Тик, телдәргә таш таҡҡандай,
Ауыҙ асып өндәшмәнек.

Ҡарағайҙар юл күрһәтте
Ыңғай яҡты самаларға,
Ә үләндәр дауа булды
Һарҡып торған яраларға.

Аҡрынлап бөтәшәләр
Тәндәрҙәге йәрәхәттәр,
Йөрәктәге яман яра
Торған һайын һыҙлай хәтәр.

Шик яралһа, уны ҡыуҙыҡ.
Аслыҡ быуҙы, уға түҙҙек.
Аҙна барҙыҡ, ун көн барҙыҡ
Һаман һүҙһеҙ, һаман һүҙһеҙ.

Ҡара көйөп ҡаҡландыҡ беҙ –
Әйтерһең дә, ике өрәк.
Тик үҙенсә тибә бирҙе,
Тибә бирҙе ике йөрәк.

Ун беренсе кис тигәндә
Оло юлға яҡынлаштыҡ.
Ағыла унда, зың-зың килеп,
Дөң-дөң килеп, тимер ташҡын...

Дошман яуы көнсығышҡа
Һаман әле аға икән.
Тимәк, уның пыран-заран
Онталыуы алда икән.

Эңер төшкәс, бер шырлыҡта
Ергә ауҙыҡ, тайып хәлдән.
Юлдаш кеше беренсе ҡат
Телгә килде ошо мәлдә:

«Етер! Етер! Ишетәһеңме,
Бер сик була сыҙамлыҡта.
Кеше түгел мин – ҡоләгә,
Мин хәшәрәт был һаҙлыҡта!

Хәбәр бирмәй, ҡәбер күрмәй
Серегәнсе бында ятып,
Әсир төшөп тере ҡалыу
Йөҙ ҡат артыҡ, мең ҡат артыҡ;
Терелә́й тотоп ашамаҫтар, –
Дошман да бит әҙәм заты.

Кемгә файҙа, иртәгә кис
Ҡоҙғон ҡунһа һөйәгемә?
Мин үҙемә кәрәк түгел,
Мин кәрәкмен һөйгәнемә.
Аңлайһыңмы, һөйгәнемә!»

Үкһеп илап ебәрҙе ул,
Унан оҙаҡ һыҡтап ятты.
Ташҡа әйләнгән йөрәгемә
Шул саҡ йәнә боҙҙар ҡатты.
Ә боҙ белмәй һыҙлана ла,
Йыуата ла, ҡыҙғана ла...

* * *

Мин һандуғас һайрауына
Уяндым.
Өр-яңы көнө башланған
Йыһандың.
И һайрай, һайрай һандуғас,
Ярһыған,
И һайрай, бөтмәҫ шатлығы
Бар һымаҡ.

И һайрай, гүйә, донъяла
Туй ине.

Әйтә кеүек: «Булдыра алһаң,
Тый мине.

Көзрәтең юк. Тырышма ла,
Исмаһам,
Туптар тыныр, мин тынмамын
Һис касан!»
И һайрай, һайрай, күпме наз
Телендә!
Һайрай үс итеп һуғышка,
Үлемгә.

* * *

Мин, һиҫкәнеп, капыл ғына
Як-яғыма күҙем һалһам,
Юлдашымдың урыны буш,
Тик мылтығы ятып калған.

«Кояш яңы сығып килә,
Ергә яткан шыйык томан.
Ысык төшкән үләндәрҙән
Бер эҙ киткән алпан-толпан.

Уның эҙе. Акһай-тукһай,
Оло юлға табан бара.
Коткарам тип, кыуа сыктым,
Юлға әле байтак ара.

Тик һуңланым. Ул, имгәкләп,
Калкыу юлға үрмәләне.
Үрмәләне күрер өсөн
Күрәсәктең күрмәгәнен.

Оло юлдан дошмандарҙың
Танкылары килә олоп.
Ике кулын күтәрҙе лә
Юлға басты курkыу коло.

Тимер дейеү яҡыная,
Арҡан буйы ара ҡалды.
Бөгөлөп төштө кеше шул саҡ,
Саңлы юлға тубыҡланды.

Тубыҡланды. Егерме йыл
Ерҙә атлап йөрөгән, имеш.
Тубыҡланды һәм йәшәргә
Теләне ул ошо килеш.
Теләне ул...

Алғы танк уға табан
Борола биреп уҙып китте,
Бер ер ҡорто урынына
Ыһ та итмәй иҙеп китте...
Ә бер аҙҙан үләндәге
Унын һуңғы эҙе кипте...

* * *

Өйҙө басты таш тынлығы,
Ҡуҙғалманы ҡунаҡ һаман.
Ҡыймылдарға баҙнат итмәй
Туҡтап торҙо, гүйә, заман.

Бая дөрләп янған мейестә
Бары күмер көйрәп ҡалды.
Шылт иткән юҡ. Бер мин генә
Ишек-түрле кәләп һалдым.

Тышта һаман өй түбәһен
Шыбыр-шыбыр ямғыр ҡаға.
Күмер көйрәй, ямғыр яуа,
Тимәк, ерҙә ваҡыт аға.

Урынынан торҙо ҡатын,
Ләкин һис ни өндәшмәне.

Иңбашынан аҡрын ғына
Шыуып төштө ҡара шәле.

Ҡунаҡ ҡапыл бороддо ла
Сығыр яҡҡа атлап китте,
Иҙәндәге лысма еүеш
Ҡара шәлен тапап китте.

Шәлдән ҡара һыу эркелде,
Ә бер аҙҙан ул да кипте,
Кибеп бөттө. Иҙәнемдә
Тороп ҡалды тик тап ҡына.

Ғорур һеңлем! Тап та бөтөр,
Сабыр итсе бик саҡ ҡына.

*1960*

## СЕР

*(Көнсығыш әкиәттәре циклынан)*

1

Борон, борон заманда,
Бәлки, бөгөн заманда,
Әллә яҡын, әллә йыраҡта,
Әллә таныш, әллә сит яҡта
Йәшәгән, ти, ерҙә бер әҙәм.
Әҙәм тураһында әңгәмәм.

2

Ҡабыҡ эсендәге төш һымаҡ,
Бауыр эсендәге шеш һымаҡ,
Нығ йәшерен яман-яҡшынан,
Төнөн төндән, көндөҙ яҡтынан, –
Күңелендә булған бер төйөн,
Йомарланып ятҡан сер-төйөр.

3

Сере барҙың китә маҙаһы,
Маҙа китһә, килә ҡазаһы...
Уҙа көндәр, уҙа бер көйө,
Яҫмыҡ саҡлы ғына шул төйөр

Торған һайын һаман бүртенә,
Һис сара юҡ уның иркенә.

4

Сер йомғағы тамам шешенә,
Шиңер ине, әйтһәң кешегә.
Әҙәм уйлай: «Кисер, йә Раббым,
Кешеләрҙе ниңә яраттың?
Мин уларға, имеш, иш һанап,
Сер асырға нисек ышанам?»

5

Кешеләргә әҙәм ышанмай.
(Ышанмаған шиктән бушамай.)
Сер ҡыуығы ошо арала
Эскә һыймаç булып ҡабара.
Шартлар сиккә етә әҙәмең.
Табыу кәрәк бер-бер әмәлен.

6

Һәм далаға бара бер көн ул, —
Сер һыйҙырыр – дала иркен ул.
Дала тыныс. Унда кем дә юҡ,
Сәпсек уятырлыҡ өн дә юҡ.
Көндән ҡасып киткән кейектәр,
Һайрар ҡоштар үтә бейектә.

7

Серҙе систем генә тигәндә...
Ел ҡағылып үтте үләнгә.
Әй сайҡалды дала ҡылғаны,
Бер-береһенә ниҙер ымланы.
Тертләп китте әҙәм:
Һораны:
«Ел бар ерҙә һуң сер торамы?»

8

Бына урман, урман, исмаһам,
Өндәшәсәк түгел һис ҡасан.
Ҡояш нуры үтмәй шырлыҡҡа,
Нур төшмәгәс, ышан сер ныҡҡа.
Эсе тулы уның шом ғына.
Шунда килә әҙәм шым ғына.

9

Тукта, ни был? Япраҡ ҡыштырлай.
Ботаҡ һайын баҫып ҡош йырлай.
Ағас араһында, һис ҡуймай,
Һикерешеп яҡты нур уйнай.
Күпте һөйләй урман, сама юҡ.
Ышанырға уға сара юҡ.

10

Бына тауҙар, тауҙар, исмаһам,
Өндәшәсәк түгел һис ҡасан.
Таш ҡаялар күптән үлгәндәр,
Түбәләрен ҡарҙар күмгәндәр.
Улар өндән, телдән мәхрүмдәр.
(Ҡаты серле була мәрхүмдәр.)

11

Әҙәм эҙләп килде тауҙарҙы.
Тауҙай йөгөн шунда ауҙарыр.
Һүҙ башларға теләп: «Сер...» – тине.
Ҡарт тау һүҙҙе йөпләп: «Сер...» – тине.
«Сер... Сер...» – Башҡалар ҙа гөр килде.
Һөрән хатта күккә эркелде.

12

«Сер... сер...» – Тауҙар һаман,
Гүйә, ваҡ таш өрә көсөктәй.
Шашыр сиккә етә әҙәмең.
Табыу кәрәк бүтән әмәлен.
...Бына диңгеҙ, диңгеҙ, исмаһам,
Һайығып төбөн асмай һис ҡасан.

13

Кеше сере уға ни генә...
Сәме етһә әгәр сигенә,
Утрауҙарҙы йота. Ҡалалар
«Ә» тигәнсе төптә ҡалалар.
Яман ҡеүәт унда тиңһеҙҙер,
Ышаныслы серҙәш – диңгеҙҙер.

14

Әҙәм килә диңгеҙ ярына,
Диңгеҙ һикереп ярға һарыла.
Ә тулҡындар, бөтөп хәлдәре,
Сәсәп һөйләй донъя хәбәрен.
Диңгеҙ тотмай икән юҡ-барҙы,
Ярға атҡан бөтә сүп-сарҙы.

15

Нисек ышанаһың даръяға?
Гел тулҡынлана ул, гел аға.
...Бар йыһанды, гүйә, ут ала,
Әҙәм тороп ҡала уртала.
Фекер һүнә, уйҙар бутала,
Ул буш сүлгә инеп юғала.

16

Сүлдә тапты ул ер тишеге –
Тынлыҡ һарайының ишеге!
Әҙәм уға эйелеп ҡараны,
Мәңгелек төн күрҙе – ҡараңғы.
Таш ташланы. Батты. Төбө юҡ.
Һүҙ өндәште – яуап өнө юҡ.

17

Башын һондо әҙәм тишеккә,
Уны ел дә, сүл дә ишетмәй.
Көңгөр-ҡаңғыр өс ҡат һөйләне,
Унан йәнә өс ҡат көйләне.
Өс ҡат шымып, өс ҡат тикшерҙе.
Сер йомғағын шунда төшөрҙө.

18

Ер тишеге тыныс әлегә.
Ышаныс юҡ донъя хәленә...
Серҙәр инеп киткән ҡапҡаны
Ул ҡара таш менән ҡапланы.
Шик ҡалманы хәҙер, исмаһам,
Сер сығасаҡ түгел һис ҡасан.

19

Өҫтән ҡапыл ауыр йөк төштө,
Әҙәм хәҙер осор ҡош төҫлө.
Ергә теймәй йөрөй табаны,
Артта ҡалды хәүеф замана.
Шулай булыр һымаҡ мәңгегә...
Әммә тамам түгел әңгәмә.

20

Уҙа көндәр, уҙа бер көйө.
Тары бөртөгөләй бер төйөр
Ай моңайып батҡан тын төндә
Йәнә бүртә йөрәк төбөндә.
Төйөр йомғаҡ булып шешенә,
Шиңер ине, әйтһәң кешегә.

21

Кешегә һуң ышана аламы?
Һайлар, бәлки, йәнә даланы?
Юҡ! Ел унда хәбәр тарата.
Тауға барһаң, таштар үкерә,
Ә диңгеҙҙә тулҡын һикерә.

22

Аулаҡ урын тик ер тишеге —
Ул тау йәки диңгеҙ ишеме?
Бөкрәйеп ауыр йөгөнән,
Әҙәм йәнә сүлгә йүгерә.
Теге саҡ эше шуға уңмаған, —
Башын тәрәнерәк һонмаған.

23

Бар өмөтөн йыйып ул шунда
Ярты һынын һондо упҡынға.
Көңгөр-ҡаңғыр өс ҡат көйләне.
Өс ҡат ҡына етмәҫ еренә
Еткерергә кәрәк етегә.

24

«Рәхимле бул, Хоҙай, көс кәрәк...» —
Ул ынтылды йәнә эскәрәк.
Ауыҙ асып яба алманы,
Тик ялтырап ҡалды табаны.
Көс китмәне һис тә әрәмгә —
Батты сер ҙә, батты әҙәм дә.
Сер — сер булып ҡалды мәңгегә
Тфү, тфү! Тамам әңгәмә.

## Икенсе бүлек*

### ЕҢЕРБЕҘ

Илебеҙҙең үҫмер балалары
Мәктәптәрҙә тырышып уҡыйҙар,
Белем гранитын ныҡ кимереп
Ленин васыяттарын үтәйҙәр.
Беҙ беләбеҙ совет мәктәбенең
Беҙгә ҙур тәрбиә биргәнен,
Беҙ аңлайбыҙ, шул илдәге дуҫтар
Капиталдың һеҙҙе иҙгәнен.
Беҙҙең йөрәк тибә ашҡынып
Ҡотҡарырға эшсән дуҫтарҙы,
Килер бер көн, тағы беҙ еңербеҙ
Ер шарында йыртҡыс дошманды.
Ҡанлы көрәштәрҙә беҙ күп еңдек,
Еңеү йәшәй беҙҙең йөрәктә.
Әйҙә, дуҫтар, бергә, бер теләктән
Эшсе эше өсөн көрәшкә!

*1934*

---

*Был бүлеккә шағирҙың тәүге осорҙа ижад ителгән шиғырҙары, арнауҙар һәм тамамланмаған әҫәрҙәре индерелде

## МИЛЛИОН КИРОВ ҮҪӘ АЛМАШКА

Ташҡын сафтар бөгөн баштар эйеп,
Ҡайғы маршы йырлап үтәләр.
Музыкалар шаулы урамдарҙа
Тәрән ҡайғы моңо һуҙалар.
Ул үлһә лә, уның көрәш дәрте
Бөтә ил өҫтөндә яңғырай.
Беҙҙең еңеү таңы алдында
Бөтә дошман тетрәп ҡалтырай.
Ҙур көрәшсе үлһә,
Мәктәптәрҙә –
Миллион Киров үҫә алмашҡа,
Беҙҙең сафтар
Көрәштәрҙә артта ҡалмаҫтар!

*1935*

## ЗӨБӘЙҘӘ ҺӘМ БӘПКӘЛӘР

Көн йылытты,
Йәшел үлән сыҡты
Бәпкәләргә йүгереп уйнарға,
Үләндәрҙә йүгереп уйнағастын,
Тағы килеп күлгә сумырға.
Бер яғы бар һәм бәпкәләргә
Йыртҡыс ҡоштар һөжүм иткеләй.
Ҡарамаһаң,
Яҡшы һаҡламаһаң,
Тилгән, ҡарға алып киткеләй.
Кисә генә әле күл буйында
Тилгән алған Зөбәй бәпкәһен,
Бәпкә урлап ҡына туҡтамаған,
Талап киткән бәпкә атаһын.
Зөбәйҙәгә был бик ауыр булды:
«Әсәй, мин бынан һуң бәпкә
Ҡарармын,

Мин һаҡлаған саҡта һөжүм итһә,
Уҡытырмын артҡы һабағын».
Шул көндән һуң эшсән Зөбәйҙә ҡыҙ
Үҙ эшенә ныҡлап башланы
Иртән тороп,
Ашай, кейенә лә
Күлгә ҡыуып китә ҡаҙҙарҙы.
Зөбәйҙә ҡыҙ тора күл буйында,
Галстугы елгә елберләй,
Торошта ры, бөтә ҡараштары
Ҙур кешеләр кеүек һөйкөмлө.
Яҡты тейһә, кескәй бәпкәләрҙе
Бергә йыйып, маҡтап ашата.
— Әнкәң кеүек һин дә ҙур үҫерһең,
Бәпкәйем, етеҙ ашаһаң.
Берәү генә түгел,
Бер нисә,
Күп булһа ла уға бер ни түгел,
Алып бара
Етеҙ, еңелсә.
Беренсеһе булһа йөкләмәнең
Бәпкәләрҙе
Ҡарау, тәрбиәләү,
Көҙ етеүгә кескәй бәпкәләрҙе
Еткән ҡаҙҙар итеп әҙерләү.
Икенсеһе тағы йөкләмәнең:
Тауыҡтарҙы барлап ашата.
Уға тағы ҡыҙыу эш башлана
Тауыҡтары һала башлаһа.
Зөбәйҙәнең уҡыған мәктәбендә:
— Кем булаһың? — тине уҡытыусы.
Хәҙерҙән үк үҙе алға ҡуйған:
— Мин булам, — ти, — мөдир ҠТФ*.

*1935*

* ҠТФ — ҡошсолоҡ фермаһы

## ТӨШӨРМӘБЕҘ ҠОРОС ҠӘЛӘМЕН

*(Мәжит Ғафуриҙың үлеүенә бер йыл тулыуға арнап)*

Баҡсаларҙа сирень сәскә ата,
Гөлгә ҡуныП ҡоштар һайраша,
Йәш йөрәгем минең тулҡынлана,
Ниңә әрней,
Кемде һағына?!
Әрнемәҫлек түгел,
Ул юғалды,
Баш көрәшсе, синыф кешеһе.
Орденлы илдең халыҡ шағиры –
Әҙәбиәтебеҙҙең үрнәк эшсеһе.
Унының үлеме беҙҙең сафтар өсөн
Ҙур юғалтыу булып һанала.
Үлеменә бер йыл тулғанда,
Ауыр ҡайғы тағы ла яңыра...
Янабыҙ беҙ һинең эшең өсөн,
Беҙ янабыҙ –
Һинең кеүек эшләп,
Иҫкеләрҙең эҙен юйырға.
Һинең хеҙмәттәрең беҙгә ҡалды,
Улар мәңге һүнмәҫ шиғырҙар,
Һинең шиғырҙарың мәңге яңғырар,
Беҙҙең йөрәктәрҙә янырҙар.
Мәжит ағай,
Һиңә йәдкәр булһын
Беҙҙең йөрәктән сыҡҡан сәләмдәр.
Беҙҙең йөрәк ҡайнар йырын йырлар,
Төшөрмәбеҙ ҡорос ҡәләмен.

*1935*

## АНДАЛУЗИЯ БУЙЛАП

1

Севильяла төнгө уттар һүнгән,
Гвадалквир өҫтө аҡ томан,
Моңһоу йылда көмөш тәңкә һанап,
Андалузия буйлап тартыла.
Тынлыҡ баҫты,
Төнгө ауыр тынлыҡ,
Тәмле йоҡо,
Тыныс урамдар.
Арлы-бирле йөрөй кашауайҙар,
Төн эсенә сумды диуарҙар...
Андалузия буйлап төн елдәре
Киләләр ҙә диңгеҙ ярынан,
Сер һөйләйҙәр зәйтүн гөлдәренә:
«Ҡара болот беҙгә ағыла...»
Гүйә, шулай
Һырға кипаристар
Әкрен генә ергә тартыла,
Һәм әйтәләр кеүек шомло ғына:
«Теш ҡайрайҙар диңгеҙ артында...»
Алыҫ ҡырҙар,
Бойҙай баҫыуҙары,
Тулҡынланып елдәр иркенә,
Ҡыштыр-ҡыштыр хәбәр һөйләшәләр:
«Ах, йылы ҡан еҫе бөркөлә...»

2

Мароккола диңгеҙ ташты бөгөн,
Ярға һуҙылып тулҡын дуланы,
Эт көтөүе, таң бүреһе кеүек,
Диңгеҙ аша ҡарап олоно.
Күтәрелде ҡаты ҡан бураны,
Илау-һыҡтау ерҙе ҡаманы,
Башкиҫәрҙәр ҡуйы ҡан яғылған
Алтын бокалдарҙы яланы.

3

Борғолар һауа телделәр,
Күкрәне тыныс ҡала,
Кем ирек һәм бәхет теләй,
Шул ҡулға тылҡыу ала.
Алһыуланған таң нурында,
Түбән ҡарап тын ғына,
Икәү килә ҡултыҡлашып,
Аллеялы юл менән.
Ул – Тереза, һуңғы ҡабат
Баш балаһын ҡосаҡлап,
Оҙата килә һөйгән йәрен
Ул эшенә – оҙаҡҡа.
Уның зәңгәр күҙҙәренә
Текләне лә күҙҙәрен,
Йылмайып һөйгән егете
Әйтте һуңғы һүҙҙәрен:
– Ауырҙыр, иркәм, ҡалыуы,
Етем бәпкә шикелле,
Ләкин бел, был көрәш беҙгә
Ҡояшлы көн килтерер.
Һин илама, түкмә йәшең,
Башыңды түбән эйеп,
Һин бойоҡма, һулыма, иркәм,
Һыуһаған гөлдәр кеүек.
Кем беҙҙең өсөн көрәшер,
Ут эсендә ҡан түгеп,
Күтәрелмәһәк күмәкләп
Буранлы дауыл кеүек?!
Күрәһеңме зәңгәр күкте –
Иге-сиге юҡ киңлек,
Шулай пак һәм саф итербеҙ
Беҙ ҙә был тыуған илде.

Беҙ еңербеҙ, бәхет тыуыр,
Тонсоғор тилергәндәр,
Беҙ бит халыҡ,

Беҙ – миллиондар,
Беҙ – донъя, иҙелгәндәр.

Әсәһенең ҡосағында
Йоҡоға сумған улын
Алып күкрәгенә ҡыҫты
Һәм үпте арыҡ ҡулын.

– Шартлар ҡоллоҡ, бөтөр һыҡтау,
Бойоҡмаҫһығыҙ тағын,
Пожар кеүек күтәрелеп,
Даулайбыҙ ирек таңын.
Һөйөклө йәнем, Терезам,
Һаҡла күҙем ҡараһын,
Ил батыры итеп үҫтер
Мигуэлдең балаһын.

Һөйгәненең ҡулын ҡыҫып,
Көрәшкә китте егет,
Ҡарап ҡалды Терезаһы
Күҙҙәрен уға текләп.

Кешелекте һаҡлау өсөн
Утлы, ҡанлы һуғыш бы,
Күкрәне Севилья урамы,
Тра-ту-ту-ту-ту...

*1937*

## БАҠСАСЫ ҠЫҘ

Таң томаны һипкән ынйы ысыҡтар
Сирень керпегенән түгелде,
Ҡояш нуры япраҡ араһынан
Eләк түтәленә үрелде.
Таң уятҡан яҙғы шаян елдәр
Сирень еҫен бөркөп иҫтеләр,
Ап-аҡ сәскә менән биҙәкләнгән

Түтәлдәргә илтеп һиптеләр.
Таҙа беләктәрен һыҙғанған да
Толомон ҡуйып елдәр иркенә,
Таң һауаһын тәрән һулай-һулай,
Еләк түтәленә һыу һибә.
Данлы илдең был бәхетле ҡыҙы
Яңғыратып йырлай баҡсала:
– Саф һауалы иркен илдә генә
Кеше тыныс һулай, шатлана.

*1937*

## ОНОТОЛМАҪ УЛ ҠАНДАР

Һалам түбәле тәпәш өй,
Мөрйәһе ватыҡ.
Тәҙрәләрҙе шыбыр-шыбыр –
Ваҡ ямғыр шаҡый.
Фью-фью – мөрйәләрҙә
Елдәр һыҙғыра,
Ҡара болот тоноҡ айҙы
Ҡаплап тик тора.
Төн ҡараңғы.
Төндә төтөн.
Туптар атыла,
Гөрһөлдәп ауа ҡапҡалар,
Өйҙәр ватыла.
Шыйылдап оса пулялар,
Боттар тишелә,
Ахылдап ауа кәүҙәләр,
Баштар киҫелә.
Прожекторҙар, йәшен кеүек,
Һауаны телә,
Ямғыр урынына яуа
Пуля ла пуля.
Тапыр-тыпыр, шаптор-шоптор
Атлылар саба,
Үткер һөңгөләр төбәлгән

Дошманға таба.
Тратта-та-та, пулеметтар
Ҡурғаш һиптеләр,
Егерменсе йылға шулай
Шаулап үттеләр.

* * *

Зәңгәр күкте ваҡ ямғырлы
Болот ҡаплағас,
Тау һелкетеп, ер тетрәтеп,
Туптар шартлағас,
Иҫке шинелен кейҙе лә,
Наганын тағып,
Изге көрәшкә йүнәлде
Ағайым тағы.
Ағай йыйынған ваҡытта,
Әсәй йәш түкте,
Ә ағай уны ҡосаҡлап
Маңлайын үпте.
Күҙҙәрен еңенә һөртөп:
«Еңеп ҡайт, балам,
Турағыҙ аҡ бандаларҙы —
Теләктә ҡалам».
Минең арҡамдан һөйҙө лә
Мөләйем көлдө:
«Буржуйҙарға атырһың», — тип,
Буш гильза бирҙе.
Ул һуңғы ҡабат хушлашып,
Ҡылысын алды,
Беҙ әсәй менән илашып
Оҙатып ҡалдыҡ.

* * *

Таң атыуға, бер туҡтауһыҙ
Елдәр олоно,
Туптар менән емерелде
Ауыл урамы.

Баҡсаларҙа ҡарт ҡайындар
Япраҡ ҡаҡтылар,
Урамдарҙа ҡан ҡатышҡан
Һыуҙар аҡтылар.
Хәлдән тайған башкиҫәрҙәр
Артҡа сигенде,
Көрәш ҡорбанһыҙ булманы –
Ҡандар түгелде.
Башы өҙөлгән, ҡулы һынған
Кәүҙәләр ҡалды,
Көрәш үҙ ҡорбаны итеп
Ағайҙы алды.
Ҡанға батҡан килеш күрҙем
Уның кәүҙәһен,
Күҙ алдымда һаман йөрөй
Уның шәүләһе.

* * *

Күмделәр ул кәүҙәләрҙе
Урман ситенә –
Ҡаршылағы текә тауҙың
Көньяҡ битенә.
Ҡыштарында ҡар һибелә
Ҡәбер өҫтөнә,
Ә йылы яҙ әсә булып
Сәскә үҫтерә.
Көрәшселәр, ҡандарығыҙ
Бик күп аҡтылар,
Ҡыҙыл ҡандар орлоҡ булып
Сәскә аттылар...

*1937*

## ЙӘШЛЕК

Сәскәләнә торған йәшлегемдең
Йылы яҙы көлә, йылмая.
Шыңғыратып көлөр,
Яңғыратып йырлар –
Йәшәр өсөн тыуған донъяға.
Баҡсалағы шиңмәҫ гөлдәр кеүек,
Үҫәбеҙ һәм сәскә атабыҙ.
Янар ҡояш кеүек нурын һипкәс
Бөйөк юлбашсыбыҙ, атабыҙ.
Ҡайҙа бар һуң
Ярһыу ҡайнар йәшлек?

Ҡайҙа күкрәү,
Ҡайҙа, ҡайһы илдә?!
Тик ул беҙҙә –
Совет илендә ул,
Иосиф ата булған был ерҙә.
Күмер баҙҙарында,
Тимер юлда,
Колхоз баҫыуында, болонда,
Заводтарҙа шул ҡайнар йәшлек
Сәскә ата, данға күмелә.

*1937*

## СӘСКӘЛӘР

Их, тирбәләләр сәскәләр,
Баштарын түбән эйеп,
Шаяра һары күбәләк
Сәскәләр битен үбеп.

Һин көлөп килгән шикелле,
Шылтырап шишмә аға;
Шоморт аҡ сәскә сығара,
Һандуғас ҡанат ҡаға.

Сығырһың да шул болонға,
Йөрөрһөң болон буйлап,
Күбәләктәрҙе ҡыуырһың,
Сәскәләр есен һулап.

Сәскәләр йыйырһың һайлап,
Тештәрең төҫлө ағын,
Күҙҙәрең төҫлө зәңгәрен,
Иренең төҫлө алын.

Уйна, әйҙә, шаян һеңлем,
Күңелең күбәләк булғас,
Тыуған илең гөл баҡсаһы
Хуш есен һибеп торғас.

*1937*

# ИҘЕЛ ТАШҠАНДА

*(поэма)*

Тағы беҙгә йылы ҡояш йәйеп,
Яҙ көндәре килде урамға,
Өҙөлөп һөйәм уны,
Әллә инде
Йәшлегемдәй яҡты булғанға.
Әйтерһең дә, йыраҡ илдән ҡайтып,
Һөйгән дуҫым миңә ҡул һуҙа.
Яҙ ҡояшы бөгөн беҙгә ҡарап
Зәңгәр күктән шулай нур һуҙа.
Гүйә, шаян ҡыҙҙар сәстәремде
Тарап төшөрәләр битемә,
Иртә яҙҙың иркә елдәре лә
Бөгөн бына шулай итенә.
Сылтыр-сылтыр урам таштарынан
Ҡар һыуҙары йырлап ағалар,
Теҙҙән батып,
Шарлауыҡтар буйлап
Кәмә йөҙҙөрәләр балалар.
Матур ҙа һуң был яҡ!
Ынйы сәскәләре
Биҙәкләйҙәр тауҙар итәген,
Өйрәктәр ҙә инде өй һалырға
Ҡамышлы күл буйын күтәлер.

* * *

Институт ишеген сыҡҡан саҡта
Мәрйәм, ҡулын ҡуйып ҡашына,
Ҡояш нурҙарына ҡараны ла
Боролоп баҫты Дәүли ҡаршына:
– Көн иртә бит әле,
Әйҙә, Дәүли,
Иҙел ярҙарына барабыҙ,

Боҙ китә, ти,
Ташҡын төшкән икән,
Кисә йәштәр барып ҡараны.
Ни өсөндөр
Дәүли өндәшмәне.
«Ниңә йыйыраһың ҡашыңды?»
Башта үпкәләгән булды, ә унан һуң
Беләгенә Дәүлиҙең килеп аҫылды.
Дәүли көндә.
«Һин, ҡыҙыкай, – тине, –
Ебәрмәйһең, батһаң ҡаныма».
Ҡултыҡлашып, яҙғы урам буйлап
Атланылар Иҙел ярына.
Улар икәү ташҡындарға ҡарап
Текә ярға килеп баҫтылар,
Уралып, урғылып яҙғы ташҡын
шаулай
Аҡһыл скалалар аҫтында.
Тулҡын һикерә,
Көслө тулҡын үкерә.
Тулҡын ялай Иҙел ярҙарын,
Тулҡын дулай аҡ күбектән сәсәп,
Тулҡын ҡыуа боҙҙар ҡарғауын.
Көмөш тәңкәләрҙе хәтерләтеп,
Ялтырап, сағылып ҡояш нурына,
Бик ҙур көҙгө кеүек,
Сикһеҙ диңгеҙ
Иҙел аръяғына һуҙыла.
Әсәһенең ҡәбер ташына бағып,
Уйға ҡалған егет шикелле,
Ташҡындарҙы күҙләп, Дәүлием дә
Ауыр күренештәрҙе кисерҙе.
Тик Мәрйәме генә япты уның
Күңел архивының биттәрен:
«Әллә ауырыйһыңмы?
Ник ағарҙың?
Ник дәшмиһең, Дәүли,
Нишләнең?»

«Беләһеңме, Мәрйәм?
Ауыр миңә,
Ауыр миңә ташҡын ҡарауы,
Ҡара шәүлә баҫа күҙ алдыма
Һәм яңырта йөрәк ярамды».
«Ниндәй шәүлә?
Ниндәй ҡара шәүлә?..
Йөрәгеңдә ниндәй яра ул?
Һәр саҡ иркен типкән һинең йөрәк
Ташҡын күргәс ниңә яна ул?»
Яҙ!
Яҙ ине ана ул саҡта ла,
Боҙ сайҡала ине Иҙелдә,
Ташҡындан да көслө көрәш барҙы
Беҙҙең ағайҙарҙың иңендә.

### Сажидә апай

Алма сыбар аттың тиреһе булып
Ҡар ашала яҙғы ел менән,
Шул ваҡытта, ҡыҙыл байраҡ болғап,
Партизандар беҙгә килделәр.
Улар менән бергә
Беләгенә
Ҡыҙыл тәре таҡҡан ҡыҙ килде.
Йырлай ине,
Уйнай, көлә ине,
Шаян ине ҡолон шикелле.
Сәсе көлһыу ине һинекеләй,
Күҙҙәре лә зәңгәр инеләр,
Ә өҫтөнә һоро шинель кейеп,
Ҡайыш быуған ине биленә.
Мөләйем йылмайыуҙан,
Ҡыйыу ҡыҙый
....... (*юлдар төшөп ҡалған – Төҙ.*)
Сажидә апай ана шул ине,
Ул килгәс тә тура беҙгә инеп:
«Бына улығыҙҙан хат», – тине.
Хатты алғас атай:

«Ни күрәм тип,
Һаташаммы, әллә шашаммы?
Ғүмеремдең һуңғы көндәрендә
Күрә алырмын микән баламды?»
«Осратырһың, бабай, ул тере,
Тиҙҙән ҡайтып етер ул бире».
Сажидәне күргәс, атай бахыр
Улын күргән кеүек һөйөндө:
«Ҡыҙым, – тине, – һуғыш башланғансы
Беҙҙә ҡунаҡ булып ҡал инде».
Беҙҙә ҡалды,
Буш ваҡыты булһа,
Мине иркәләй, үбә, һөйә ине.
«Беҙ ҡайғының көлөн күккә осорҙоҡ,
Һеҙ бәхетле быуын», – ти ине.
Кистәрендә, атай юҡ сағында,
Ултыра ла усаҡ ҡаршына,
Һөйләй ине минең апайыма
Һөйәркәһе Гәрәй хаҡында.

### Шахтер Гәрәй

Гәрәй – шахтер.
Ундайҙарҙы беҙҙә
«Ала ҡанат» тип тә йөрөтәләр,
Ул Уралда булһа кисә генә,
Донбасында булған иртәгә.
Зимагор ҙа булған ваҡыты менән,
Һары ҡайыш быуып биленә,
Сажидәгә шәл-яулыҡтар алып,
Байығып та ҡайтҡан иленә.
Бер китеүҙән
Оҙаҡ ҡайтмай йөрөгән,
Хат та ебәрмәгән ул башта,
Ә һуңынан «КИМ»лы булып ҡайтҡан,
Күкрәгенә тағып ал таҫма.
Был ҡайтыуҙа Сажидәһенә лә
Пудра-фәлән бүләк итмәгән,

Хәйер, йылдар шулай ауыр булғас,
Сажидә лә уны көтмәгән.
«Динһеҙ ҡайтҡан был», – тип
Йәш коммунға
Нәфрәт яуған бик күп күҙҙәрҙән.
Ысындан да ул яңырып ҡайтҡан –
Танымаҫлыҡ булып үҙгәргән,
Сажидәләй йәштәр менән бергә
Ирек өсөн,
Тыуған ил өсөн
Улар һалған ауыл күкрәгендә
Комсомолдың тәүге кирбесен.
Һәм түҙмәгән йәшлек,
Мылтыҡ аҫҡан
Еңеү гимны йырлап, ашҡынып,
Комсоотряд булып ут эсендә
Гөрләп киткән йәшлек ташҡыны.

**Айлы кистә**

Ҡояш батты Иҙел аръяғында,
Горизонтта аллыҡ ҡыйылды,
Һалмаҡ ҡына, киң ҡосағын йәйеп,
Яҙҙың айлы кисе йыйынды.
Түбәләрҙән ләп-ләп итеп тамған
Ыңйы тамсыларҙың таҡмағы
Аҡрын ғына һүнде,
Йылғаларҙы
Йоҡа боҙлалар ҡапланы.
Кискә ҡаршы шаулап яҙғы ташҡын
Текә Иҙел ярын тултырҙы,
Ошо кистә ҡарт комиссар беҙҙә
Бик оҙаҡҡа тиклем ултырҙы.
Кистән киткән разведчиктар ҡайтты
Асыу тейәп йөрәк ҡанына:
«Ҡара шәүлә булып тағы ла
Аҡ бандалар бында ағыла».
Комиссарҙы эҙләп беҙгә килде

Командир һәм ике партизан.
Борсоу баҫҡан ине йөҙҙәрен
Бик-бик тәрән ҡайғы бар һымаҡ.
Ул ингәс тә тәрән һуланы һәм
Теш тәре араһынан төкөрҙө,
Шинель кеҫәһенән ҡағыҙ алып,
Йыуан итеп махра бөтөрҙө.
«Разведчиктар ҡайтты.
Полк китә,
Атлылар ҙа, ауыр туптар ҙа.
Сигенергә.
Н отряды менән
Ике көстө бергә тупларға».
– Юҡ, егеттәр, – тине аранан
берәү,
Партизанса һүгенеп ташланы, –
Хет әсәһен айыу үпһенсәле,
Һаҡлап булмай инде баштарҙы.
Сигенмәбеҙ.
Йә беҙ,
Йәиһә улар
Һүнгән күмер булыр иртәгә.
Ату
Бысағымамы ни
Мылтыҡ аҫып йөрөү елкәгә».
Ә комиссар һалмаҡ ҡына итеп
Ҡулы менән сәсен тараны,
Ул йылмая төшөп йылы ғына,
Дуҫтарына наҙлап ҡараны:
«Дөрөҫ,
Үлем.
Ҡан,
Ҡорбанһыҙ ғына
Броневиклы йылдар үтмәҫтәр,
Ләкин беҙгә
Сигенеүһеҙ еңеү
Бик-бик ауыр булыр, иптәштәр».
Ә командир тағы ҡыҙа төшөп:

«Сигенһәк тә әле беҙ бөгөн
Юҡ, туғандар,
Һис бер ваҡытта ла
Беҙ еңелдек тигән һүҙ түгел.
– Аттарға,
Сережа, һин,
Хәҙер үк сигнал уйнат
Һәм
Партизандарҙы уят».
Комиссар ҡарт Сажидәне тотто
Ишек асып сыҡҡан сағында,
«Телефоның менән тағы ла
Әмер ошо баҙҙа ҡалырға.
Штаб менән өҙмә хәбәрҙе,
Баҙҙан сыҡма таңға ҡәҙәре.
Иртән уны өҙөп ҡуйырбыҙ».
«Мин үтәрмен, булһа баш иҫән,
Тыныс булығыҙ, иптәш комиссар».
Партизандар ҡунған ярлы өйҙәрҙә
Моңһоу ғына уттар яндылар.
Улар китте,
Ҡолаҡтарҙа ғына
Тояҡ тауыштары ҡалдылар...

* * *

Төн уртаһы,
Ишек шаҡынылар
Һәм ҡаты итеп бераү аҡырҙы,
Мылтыҡ приклады менән һуҡтылар ҙа
Беҙҙең өй ишеге ватылды.
«Ҡайҙа телефонист?
Тиҙ әйтегеҙ».
Аҡылынан шашҡан шикелле,
Ҡамсы менән һуҡты атайыма,
Үҙе аяҡ тибеп екерҙе.
Өйҙө тынлыҡ баҫты ун секундҡа,

Улар килеп баҙҙы астылар,
Түбән ҡарап тәрән уйға батҡан
Яңғыҙ Сажиҙәне таптылар.
Толомонан һөйрәп сығарҙылар,
Унан итек менән типтеләр,
Тоноҡ айлы яҙғы һалҡын төндә
Һыу буйына алып киттеләр.
Ай яҡтыһы ергә түгелде,
Ауыр ҡайғы баҫты күңелде.
Ай нурына ялтырап ҡалды уның
Ҡулындағы алтын йөҙөгө,
Уны биргән уға шахтер Гәрәй,
Күҙ ҡараһы кеүек егете.
Улар ҙа бит шулай һөйләшкәндәр,
Боҙҙар аҡҡанын да күргәндәр,
Беҙҙең кеүек ул йәш йөрәктәр ҙә
Икәү ҡултыҡлашып йөрөгәндәр.
Бер офицер яуыз йылмайҙы ла:
«Килтер бында, ҡыҙый, йөҙөктө,
Онот инде,
Һиңә йөҙөк биргән
Һине һөйгән сибәр егетте».
Ә Сажиҙә уға тура ҡарап:
«Төкөрәм һеҙгә, бирән ҡорһаҡтар,
Үлгәс алырһығыҙ, хәшәрәттәр,
Һалып бирмәм үҙем һау саҡта...»
Ул һүгенеп, хәлһеҙ Сажиҙәнең
Ҡыҫып, ҡайырып тотто бармағын,
Икенсеһе ҡылыс менән сапты,
Өсөнсөһө алды балдағын.
Һораштылар,
Ә ул өндәшмәне,
Ғорур ғына түбән ҡараны.
«...Партизандар ҡылыстарын болғап
Үтһә ине ошо араны...»
Ташландылар уға ас бүреләй,
Таланылар ата ҡаҙ кеүек,
Һәм аттылар

Яҙғы ташҡын ташҡан
Бөйөк скалаға баҫтырып.
Ул сайҡалды,
Никтер ауа алманы,
Уға мылтыҡ менән һуҡтылар,
Ул атылды ташҡын ҡаҙанына,
Шашҡан боҙҙар уны уптылар...
Боҙға һикереп тулҡын быуланы
Һәм ҡыҙыл ҡан ҡалды болғанып...

* * *

Лента өҙөлөп,
Кино экранында
Туҡтап ҡалған һүрәт шикелле,
Улар һүҙһеҙ генә яр өҫтөндә
Ҡуҙғалмайса ҡатып ҡалдылар,
Һаман шулай ҡанлы ҡулса һикереп,
Үтә кеүек улар алдынан.
Яр аҫтынан йырлап студенттар
Күтәрелде тауға, юғары,
Дәүли менән Мәрйәм икеһе лә
Шул төркөмгә инеп юғалды.
Бөтөрөлдө һаман урғындар,
Ярҙы йыуҙы шаулы тулҡындар.

*1937 – 1938*

## ОТРЯД КУҘҒАЛДЫ

Был йыйынтыҡ Ленин – Сталин комсомолының боевой 20 йыллығына арнала. Авторҙар.

(*Поэманан өҙөктәр*)

Комсомолия!
Ҡайнар ҡосағында
Гүзәл йәшлек япраҡ ярғанда,
Беҙҙең быуат биргән даһиҙарҙың
Бөйөк исемдәрен алғанға,
Уйыбыҙҙы текәп атабыҙға,
Йөрәктәрҙе – ватан иркенә,
Йәшлек дәрте менән ялҡынланып,
Һиңә атап йырҙар эркелә.
Комсомолия!
Һиңә бүләк иттек
Күкрәк хистәренең емешен,
Һин аңларһың ошо юлдар аша
Улдарыңдың йөрәк тибешен.

### Төн килде

Тайга ҡышы, ғәҙәтенсә,
Дауыллап бөгөн,
Буранлы кисен килтерҙе
Томалап күген.
Емерек ҡала аҡ бүрек
Кейеп башына,
Көндәгеләй ҡар аҫтында
Төнөн ҡаршылай.
Төтөнгә туйынды дауыл
Ғинуар кисендә,
Зәғиф лампалар ҡабынды
Өйҙәр эсендә.
Йәһәт өйҙәргә таралды
Киске смена,
Тревогалы хәбәр килгәс
Ҡала өҫтөнә.

## Тревога

«Колчак килә!..»
Берәүҙәрҙә был хәбәргә
Асыу ҡайнаны,
Ә берәүҙәр һыра менән
Тамаҡ майланы.
Пеләш буржуй кеткелдәп көлдө,
Ҡорһағын һөйөп,
Кәйефләнде: «Власть тағы —
Беҙҙеке», — тиеп.
Кәзә һаҡаллы сауҙагәр
Ишеген бикләп,
Ултырҙы ла түр башына
Тубығын бөкләп:
«Хуш килдегеҙ, әйҙә, ҡунаҡ,
Әйҙә, хуп,
Хәҙер инде сәүкәләргә
Пулнай хут!..»
Был хәбәргә шатлығынан
Етмәй сыҙамы,
Түшәк аҫтындағы мещан
Башын сығарҙы.
Сысҡан утылай көсһөҙ шәм
Янған бер өйҙә
Һыҙлана меҫкен әсә,
Ах...
Йөрәкте өҙә.
Ә тышта яңғыҙ ҡарағай
Елгә болғана,
Ҡарай ҙа әсә
Хәтерләй...
...Епле бағананы...
Унда ла ғинуар дуланы
Буран аҫтында,
«Бунтовщик» тип улың ирен
Тотоп аҫтылар.
Ҙур улы слесарь Нәғим

Фронтта күптән,
Ә бәләкәй улы Сабир
Йыйылышҡа киткән.
Тышта ел һаман үкереп
Ҡарҙарҙы тетә,
Ауырыу әсә ҡаҡ һикелә
Үлемен көтә.

* * *

Халыҡ шығырым, ҡоромланып
Биттәр ҡаралған,
Етеҙ баҫып, алға сыҡты
Сабир аранан.
– Да, иптәштәр, бөгөнгө хәл
Көн кеүек асыҡ,
Комсолия!
Фронт көтә,
Давай алға сыҡ!
Йөҙҙә асыу, ә күҙҙәрҙә
Ашҡыныу көслө,
Ул ҡыҙҙы, яңағы буйлап
Тир ағып төштө.
– Комсомол, баҫ партияның
Ҡорос сафына,
Көрәш ҡырҡыу, ал винтовка,
Ленин саҡыра!

* * *

Смирно!..
Команда булды...
Өйөрмә булып
Ҡуҙғалды халыҡ.
– Әйҙәгеҙ, дуҫтар,
Алға юл алдыҡ!

Винтовка иңдәргә,
Патронташ билдәрҙә,
Байраҡтар ҡулдарҙа,
Елберләй елдәргә.
Комсомолецтар
Иң алдан бара,
Интернационал
Һауаны яра:
«Был беҙҙең иң аҙаҡҡы,
Иң ҡырҡа бой булыр.
Интернационал менән
Кешелек уяныр».
Көслө аяҡтар
Ҡаршы таптайҙар,
Бында ҡарттар ҙа,
Бында ҡыҙҙар ҙа
Бергә атлайҙар.
Йәшлек ялҡынын,
Тайга һалҡынын,
Әсе буранын,
Елдәр улауын
Юлдашы итеп,
Тайфундан көслө,
Алырға үсте –
Һуғышҡа китте.
Комсомолия баҫты шунда
Көрәш сафына,
Алда Колчак, унда фронт,
Ленин саҡыра!

## ТАҘ

*(әкиәт)*

1

Ҡамыр батыр менән Шомбай
Ил гиҙеп йөрөгән йылды,
Ә беҙҙең әкиәттең батыры
Таҙға ете йәш тулды.
Таҙ хаҡында күп һөйләйҙәр,
Шуҡ малай булған, тиҙәр,
Биләүҙә ятҡан саҡта ул
Йыланды быуған, тиҙәр.
Йәше тулғанда, Аҡбайҙы
Кескәй санаға егеп,
Ҡар туҙҙырып, дулап үткән
Таҙ тигән ошо егет.

Таҙ, атһа, мөрйә емергән,
Шар һуҡһа, тәҙрә ҡырған,
Сөскөрһә, бала-сағаны
Аҡ болотҡа осорған.

Ҡарттар кәңәшә: «Беҙҙең Таҙ
Шашып китте бигерәк.
Нимә уйлайһығыҙ, халыҡ?
Сара күрергә кәрәк».

Ҡарттар көн дә һүҙ ҡуҙғата:
– Нимә эшләргә? Ниндәй әмәл?
Ҡарар ҡабул ителмәй ҡала,
Ә була ошондай хәл.

Көндәрҙең береһендә Таҙҙың
Тағаһы килгән таған,
Ә таҡанды тағыр өсөн
Бейек ағас тапмаған.

Аптырашта беҙҙең батыр
Елкәһен ҡашып ҡуя,
Күҙҙәрен ҡояшҡа текәп,
Йомғолап, асып ҡуя.

Ҡапыл хәтеренә төшә:
Ә һуң мәсеттең айы,
Таған өсөн шулай бейек
Эшләнмәгәндер моғайын?
Тағанды айға ҡуйып
Атынам ғына тиһә,
Сыраларын сәсә-сәсә,
Манара һынып төшә.
Халыҡ йыйылып өлгөрә,
Гөр килә бала-саға.
Мулла, сәлләһен онотоп,
Яланбаш көйө саба.
Ҡарттар тағы кәңәшә: «Таҙ
Шашып китте бигерәк.
Нимә уйлайһығыҙ, халыҡ?
Илдән ҡыуырға кәрәк».

Ә мулла саҡ баҫып тора:
– Һеҙ, ҡарттар, ни тинегеҙ?
Ботонан аҫыу ҙа аҙ бит
Бының кеүек кешене.

– Аҙ түгел! – тинеләр ҡарттар. –
Бит мәсет манараһын
Таҙ бөтә ил күҙе алдында
Һындырҙы таған атып.

Енәйәтенә – язаһы.
Ғибрәт булһын был эш,
Урманға илтеп, ботонан
Ағасҡа аҫыр тейеш.

Кешеләр Иҙел буйлығы
Арҡанды һөйрәп килә,
Әкиәттең батыры – Таҙ
Ҡулдарын йәйеп көлә.

Ҡарттарға ҡарышмайынса
Тик кенә тора һаман;
Батырҙы алып китәләр
Урман яғына табан.

2

Ботонан аҫылған килеш,
Таҙ саҡ ҡына тирбәлеп тора,
Теш араһынан төкөрөп,
Үҙе тиргәнеп тора.
Офоҡтағы ҡыҙыллыҡта
Ҡояш юғалды күптән,
Йондоҙҙарҙы һанай-һанай,
Ай атлап үтте күктән.
Япраҡтар телгә киләләр,
Йыраҡта таң яҡтыра.
Таҙҙың баш аҫтында айыу
Табанды ялап тора.
Тәүҙә һүҙҙе айыу башлай:
– Ни эшләп тораһың, малай?
Ә үҙе беҙҙең егетте
Туҡмау яғын самалай.
– Бына һине эҙләп арыным
(Билдәле, Таҙ алдаҡсы)
Аяҡтарҙы күккә терәп,
Булдым хәл алдырмаҡ.
Айыу ғәжәпләнеп китә:
– Мин ниңә кәрәк һиңә?
(Үҙе мығырланып ала:
«Былай һимеҙ күренә».)

– Әле белмәйһеңдәме ни
Ниңә килгәнде минең?
Башҡоҙаңды танымайһың,
Ахмаҡ һин, айыу энем.

Кесе ҡыҙы Ғилминурға
Кейәү ҡоҙалай мулла,
Һинән дә батыр егетте
Табалмам тигән була.

Мулла бит, ҡарышып булмай,
Һаҡалын һелкеп һорай;
Бына һине төн буйынса
Эҙләп йөрөйөм шулай.
Айыу, нимә, шатлыҡтан
Үкереп үк ебәрә,
Шул саҡта уҡ осоп барып
Күрге килә сибәрҙе.

Уны мулланың өйөндә
Тауыҡ көтә, ҡаҙ көтә,
Тәпән-тәпән бал әҙерләп,
Нескә билле ҡыҙ көтә.

Мин күптән әҙер, ҡоҙа, – ти айыу, –
Шул ваҡыт бик ҡапыл ғына
Китәйек юлға сығып.
Таҙ ҡуя тыпырсынып.

Ҡара әле, айыу ҡустым,
Донъяла ниҙәр булмай:
Болоттарҙың ҡойроғона
Аяҡ уралды, буғай.
Бар, сәйнәп өҙ әле шуны,
Ағас башына менеп;
Күп тә үтмәй, дөрөҫ итеп
Аяҡҡа баҫты егет.

Турғайҙар менә күктәргә,
Ел тына, көн асыла;
Баш ҡоҙа менән кейәүҙе
Ҡайтырға юлға сыға.
Бер саҡ бөтә ауыл халҡы
Урамдарға һибелә –
Баҫыу ҡапҡаһы яғынан
Әкәмәт нәмә килә.

Яҡынлашҡас, танышар:
Таҙ айыуға атланып,
Йыландан үргән ҡамсыһын
Һелтәштергеләй һалып,
Ауылға ҡайтып керә.

Ҡайһылар шашып ҡалалар,
Ҡайһылар эстән көлә,
Ҡайһылар Таҙҙы сәләмләп,
Кәпәсен күккә сөйә.

Ошо көндө мулла инде,
Тамам аҡылдан яҙа,
Ә Таҙ айыуын бейетеп,
Урамдар буйлап уҙа.

*1940*

## ТОСТ

Беҙ – шағирҙар, ябай һалдаттар беҙ,
Мәскәү, Уралдан, Балкандан.
Ай аҫтында өнһөҙ төнгө Вена.
Шул тынлыҡта сыңлай бокалдар.

«Еңеү өсөн! Һәм ҡандарға һеңгән
Бөйөк дуҫлыҡ өсөн!» – эсәбеҙ.
Балканда бар бер ил – Болгария.
Болгария – тыуған әсәбеҙ!

Беҙ еңеүсе. Ҡартлас Европала
Ултырабыҙ азат табында.
Окоп төптәренән килдек бит беҙ
Йәшәүҙең был яҡты таңына.

Йырлайыҡсы аталар йырын,
Йырлайыҡ поход тураһында,
Иң гүзәл моң – славяндар моңо
Яңғырап торһон
Кисә төрмә булған урында.

## ЙЫРЛАНЫР ЙЫР МЕНӘН ҠОТЛАЙЫМ

*(26 декабрь 1959 йыл, шиғыр кисәһе)*

* * *

Һанаулы көн ҡалды хушлашырға
Ҡабатланмаç бөйөк йыл менән,
Шатлыҡлы ла, бер аҙ яманһыу ҙа...
Оҙатайыҡ уны йыр менән.

Яңы, йәш йыл килә. Набат булып
Ишетелә уның аҙымы;
Барған һайын киңлектәргә сыға
Беҙ йәшәгән заман ағымы.

Яңы йылда яңы бәхет артһын,
Кеше һайын, һәр бер йорт һайын.
Һеҙҙе, дуçтар, тыуыр роман менән,
Йырланыр йыр менән ҡотлайым!

* * *

Хәҙер инде яйлап ҡына,
Шәп шиғырҙар һайлап ҡына,
Әлепбейсә сират менән,
Башта бер аҙ тыйнаҡ менән
Беҙ һөйләргә тотонорбоҙ,
Һеҙ (*залға*) шауламай ултырығыҙ.

* * *

Шулай булғас, тәүге һүҙ
Һиңә, Тимер Арслан,
Саҡырыуҙы хуп күреп,
Үҙең килдең алыçтан,
Үҙең Тимер Арслан.

* * *

Әйҙә, Атнабай, был юлы
Ҡағылмайым мыйыҡҡа;
Буйың еткән өрлөккә,
Йырың етһен ҡыйыҡҡа!

* * *

Һүҙ бирергә мәл етте
Биишева Зәйнәбкә,
Роман тыуа, йыр тыуа,
Эштәр китте һәйбәткә.

* * *

Ҡул сабығыҙ дәррәүерәк,
Бикбай[*] сыға сәхнәгә, —
Һирәк яҙа шиғырҙы,
Ниҙә икән мәсьәлә?..
Эше күптер сәхнәлә.

* * *

Трибунаға Шәриф Бикҡол баҫа...
Бик һәйбәт тә яҙа күп саҡта,
Һәйбәт һүҙ күп булһа — китап яҡшы,
Күп һүҙ яҡшы түгел китапҡа.

* * *

Хәким Ғиләж әйтә:
— Һүҙ минеке!
Дәрте ташып бара, күрәһең.
Туҡта! Гәрәй бик шым ултырҙы[**].
Әүәл Йософ Гәрәй һөйләһен.

* * *

Һүҙ һинеке, Хәким Ғиләж иптәш:
Паузаларҙы оҙаҡ яһама...
Бурыслыһың шиғыр сүкергә һин,
Шыбыр тир аҡҡансы яғаҡа.

---

[*] Баязит Бикбай
[**] Ул 16 йыл һөргөндә йөрөп ҡайтты

* * *

Тамаҡ ҡырып, килеп баҫыр
Алдығыҙға Даян үҙе,
Илләһе лә тулмаған шул,
Шуға һәләк шаян үҙе.

* * *

Иҙелбайға һүҙ бирәм,
Елә алһаң, «Ел, ерән!»

* * *

Хәҙер сыға трибунаға
Хәниф Кәрим яйлап ҡына,
Яй булһа ла, күрерһегеҙ,
Эсендә дәрт ҡайнап тора.

* * *

Үтә оҙон фамилияң,
Юлға һыймай, Кәтибә.
Сыҡ та уҡы, инәлтеп
Беҙҙең теңкәгә теймә.

* * *

Сәләх – Сә-кү – Кулибай
Айыу ата, әҫәр яҙа,
Кулибайҙың ҡулы бай.

* * *

Хәҙер шиғыр һөйләр өсөн
Ҡолмой иптәш Яҡуп тора,
Ҡул саптырып, ошо залды
Емертәм, тип ярһып тора.

* * *

Ситтә йөрөп, Н. Нәжми
Инмәй ҡалған иғланға,
Һүҙ бирмәйсә сара юҡ,
Назар Нәжми булғанға.

* * *

Күнеккән эш – ал һүҙенде.
Ал, Ғилемдар Рамазан!
Шағир ҙа һин. Журналист та,
Самалап әйт, уҙаман!

* * *

Рәхимғолова Фәүзиә,
Һиңә килеп етте нәүбәт, –
Бынан һуң да шиғырҙарың
Булһын ябай, булһын һәйбәт.

* * *

Бик сабыр ултырҙы Сафин.
Һүҙ – Рафаэль Сафинға;
Йәш булһа ла, ҡыйыу атлай
Поэзия сафында.

* * *

Мәҡсүд Сөндөклө үҙен
Аҙ һөйләргә өйрәткән,
Әйтһә, артыҡ ҡыҫҡырмаҫ,
Ләкин әйтер йөрәктән.

* * *

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы,
Тажи ағай һүҙ ала.
«Тәлгәш ҡайын» үрсеһен, тип
Һөйләшәбеҙ үҙ-ара.

* * *

Хәниф Кәрим баҫа:
Анһат – кеше тикшереү:
«Теге төгән, был фәлән».
Мостай Кәрим гел һөйләй,
Тотамы һуң ул ҡәләм?
Ҡәләм тотһа, уҡыһын,
Тотмаһа, тик ултырһын...

(*М. Кәрим шиғыр уҡый.*)

## *Туҙға яҙылған шиғырҙар (стихи, написанные на бересте)*

1

Был шиғырҙар туҙға яҙылғандар,
Оҡшатмаһаң, тот та утҡа ат,
Улар яҡшы ялҡын өҫтәр,
Яман булһа, утың һүндерер.

2

Искәндәр: Ҡайһылыр пәйғәмбәр намаҙ уҡығанда, улы Ибраһимды Хоҙай ҡулы утҡа атҡан, Искәндәрҙең дингә тоғролоғон белер өсөн. Пәйғәмбәр намаҙын бүлдермәгән, иманын тотоп ҡалған. Бала янмаған. Тере күмер менән уйнап ултырған. Әгәр мин намаҙ уҡый торған булһам, шул сағында һин килһәң, мин намаҙымды бүлеп һине үбер, һине һөйөр инем, шулай итеп үҙемдең мөхәббәткә тоғролоғомдо иҫбат итер инем.

3

Кем һине кәкре ҡабырғанан яратылған, ти?

4

Ҡояш бирәү. Нисә яҙ килтерҙе яна-яна,
Нисә көҙ килтерҙе һыуынып,
Һин дә бирәү.
Һөйөү булып күпме йәшәрттең һин мине,
Һағыш булып күпме һарғайттың.

5

Бер ҡыҙ һорай әсәһенән:
– Ынйы сәскә ниҙән яралған?..
– Ғашиҡ егеттең күҙ йәштәре тамған,
Күҙ йәшенән сәскә яралған...
...Мин әгәр был дөрөҫ булһа...
Ынйы сәскә баҫыр ине ер йөҙөн.
Минең сәскәләрем гел бер туғай
Булыр ине.

6

Бар эшемде бөгөн һин эшләнең,
Сөнки кисә һин миңә бер йылмайҙың,
Нескә билле сибек ҡара ҡыҙ –
Бар эшемде бөгөн һин эшләнең –
Ҡая ярып шишмә сығарҙың –
Сөнки кисә бер йылмайҙың миңә.

7

Й ә ш ә с ә ! Әле баланды шатлыҡ итеп кенә күтәреп йөрөтәһең. Йылдар үткән һайын һинең йөгөң ауырайыр. Мәшәҡәтең – хәстәргә, хәстәрең хәсрәткә әйләнеп һине бөгөргә тырышыр. Сабыйың иң бәхетле булһа ла, сабырлыҡтан Хоҙай мәхрүм итмәһен!

8

Ш ә р е ҡ ҡ а т ы н ы ! Беҙ, шағирҙар, беҙ һинең ҡаштарыңды йырланыҡ, күкрәгеңде алмаларға тиңләнек, ләкин йөрәгеңә инмәнек. Һин ир биҙәге булдың, уның йәне булырға тейешһең һин, шулай иттек, «яратабыҙ» тинек, яраттыҡ. Ә «һин яратаһыңмы?» тип һорарға онотабыҙ. Беҙ һине ауыр эш эшләгәнең өсөн, эшсе көсө булғаның өсөн маҡтаныҡ. Йәнәһе, һин ирҙәр менән берҙәй таш ватаһың, бесән сабаһың, ә өйгә ҡайтҡас һинән мөхәббәт талап итәбеҙ.

*1968*

# Аңлатмалар

## МОСТАЙ КӘРИМ: ШИҒРИӘТ, ЮЛДЫҢ ТӘҮГЕ ЯРТЫҺЫ

1938 йылдың көҙөндә, бөтә ил комсомолдың егерме йыллығын билдәләргә йыйынған мәлдә, башҡорт уҡыусыһы ҡулында «Отряд ҡуҙғалды» исемле бәләкәй генә шиғри китапсыҡ пәйҙә булды. Авторы икәү ине уның – Мостай Кәрим менән Вәли Нафиҡов. Ун туғыҙ шиғыр Мостайҙыҡы, ун һигеҙе – Вәли ижадынан. Китаптың тәүге биттәре уртаҡ емештәр булып яралған «Отряд ҡуҙғалды» поэмаһынан өҙөктәр (поэманың үҙе, бәлки, бөтөнләй яҙылмағандыр ҙа) һәм «Ватан тауышы» исемле шиғыр менән асыла. Йыйынтыҡҡа иғтибар итәләр, хатта тыйнаҡ ҡына маҡтап та ташлайҙар. Мәҫәлән, Ҡәлип Йосопов үҙенең баһаламаһында йәш авторҙарҙың ыңғай һәм етешһеҙ яҡтарын билдәләп үтә, шул уҡ мәлдә беренсе авторға, икенсеһенә ҡарағанда, хуплау күберәк эләгә. Хәйер, Вәли Нафиҡов шиғриәт менән мауығыуын ни сәбәптәндер ташлап ҡуя. Шулай ҙа башҡорт баҫмаһының үҫешенә үҙенең лайыҡлы өлөшөн индерергә өлгөрә ул. Мостай Кәримдең иһә шиғриәттәге юлы оҙонораҡ һалынды – әгәр тәү башлап баҫылып сыҡҡан шиғырҙарынан алып иң һуңғыларына тиклемге арауыҡты иҫәпләһәң, йәмғеһе 70 йыл.

Мостафа Сафа улы Кәримов 1919 йылдың 20 октябрендә Шишмә районы Келәш ауылында ҙур, татыу крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Шиғырҙары иртә тыуа, Мостай үҙе әйтмешләй, алтынсы кластарҙа уҡ «рифмалар менән мауыға» башлай. Шул осорҙағы шау-шыулы йәмғиәт тормошо йәш шағир ижадының төп темаһына әүерелә. Мәҫәлән, ошо арауыҡта мәктәп стена газетаһында «Ҡанһыҙ еңергә кәрәк, иптәштәр!» исемле шиғыры баҫыла. Газета йөкмәткеһенә инеүен инә, тик, уның ҡарауы, сираттағы һанда ун дүрт йәш-

лек «уң оппортунис»ҡа редколлегия тарафынан ҡаты шелтә эләгә.

Шиғырҙар республика матбуғатында ла күренә башлай. Өмөт-хыялдар менән ҡанатланған ун алты йәшлек үҫмерҙе белем алыу ниәте Өфөгә илтә. «Бер теләк – шағир булыу». Тәүҙә рабфакка, һуңынан педагогик институтҡа уҡырға инә, газета-журнал редакциялары менән тығыҙ бәйләнеш булдыра. Әлбиттә, Мостайҙың ул мәлдәрҙә яҙған шиғырҙарында, бүтәндәрҙекендәгесә үк, кешеләр колонналар менән йөрөгән, ҡулдарына сыраҡтар тотҡан. Беренсе кандидат – иптәш Сталин, Александр Македонский, уның тырнаҡ осона ла торошло булмаған бөйөк полководец Клим Ворошилов... Әммә заман билдәләре лә юҡ түгел уларҙа: ҡыҙҙар парашют менән һикерә, өҫтәүенә шағирҙың үҙенә лә тел тейҙерергә йөрьәт итәләр әле: «Мин хәҙер ҡыйыу һикерәм, һин ни көтәһең, дуҫым?»; ауылдың иң дан егете – тракторсы; Гвадалквивир яр буйында һөйгәнен фронтҡа оҙата (Испанияла граждандар һуғышы бара). Әле шул осорҙа уҡ йәш авторҙың ныҡлы шиғырын, һәләк ҙур оҫталыҡ менән тасуирланған пейзаждарҙы тойомларға мөмкин. Эйе, был шиғри әҫәрҙәрҙә ышанысты аҡламаған (хәҙер беҙгә билдәле булыуынса) оптимизмға, барабан һуғыуға, юлбашсыларҙы данлауға күп урын бирелгән, мәгәр «Бөтһөн!», «Яуапҡа!», «Юҡҡа сығарайыҡ!», «Ер йөҙөнән юҡ итәйек!» кеүек шул замандарҙа газета биттәренән төшмәгән оран һалыуҙарҙың әҫәре лә булмай. Үҙ фекеренә тоғро ҡала шағир: ҡанһыҙ еңергә кәрәк, иптәштәр!

Ғөмүмән алғанда, «Отряд ҡуҙғалды», дан уҡ ҡаҙанмаһа ла, уңышҡа өлгәшә.

«Таныш булмаған ҡунаҡ» исемле икенсе поэмаһын Мостай Кәрим, яҙма ҡағыҙ тапмау сәбәпле, стандарт яуаплы (иптәш, һеҙҙең материал редакция тарафынан ҡабул ителде (йә ҡабул ителмәне), һәм ҡабул ҡылынған ҡарарҙы нигеҙләү өсөн ҡалдырылған ҙур булмаған урын) редакция бланкыларының арт яғына яҙа башлай. Шиғриәт кенә түгел, заман үҙе лә ныҡышмал, ҡәтғи була. Тик был поэма (стандарт бланкыларҙың артҡы яғына яҙылыуына ҡарамаҫтан) 1940 йылдың йәйендә лә «стандарт булмай» сыға – һирәк осраҡ! – бер юлы, бер үк ваҡытта ике баҫмала – «Ленинсы» газетаһында һәм «Октябрь» журналында донъя күрә.

Тимәк, Мостай әле шул осорҙа уҡ дан ҡаҙандырыр әҫәр яралтҡан!

Ә эш башы шунда: был ваҡиғанан ике йыл элгәре шағир «Ленинсы» газетаһына үҙенең «Ағиҙел ташҡанда» тигән тәүге поэмаһын тәҡдим итә. Ул йылдарҙа редактор вазифаһын атҡарған Ғариф Ғөзәйеров уны бик ентекләп уҡып сыҡҡандан аҙаҡ: «Мал кәрәкме, дан кәрәкме?» – тип ҡырыҫ ҡына һүҙ ташлай. «Күреп тораһыңдыр... Дан ҡайғыһымы ни?» – була яуап. «Улайһа, быныһын тиҙ баҫырбыҙ. Дан өсөн икенсе поэма яҙ».

Икенсе поэмаһы, ысынында ла, Мостай Кәримдең исемен уның быуын ижад әһелдәре араһынан бер башҡа юғары күтәрә. Дан уҡ булмаһа ла, был үҙенә күрә билдәлелек яулауға тиң. Өс йылдан һуң, яу ҡырында, ул һалдат муҡсаһында «Яҙғы тауыштар» исемле шиғри йыйынтыҡты алып йөрөткән бер егетте осратасаҡ. «Поэмағыҙ миңә бик оҡшай, – тиер егет, китапты сығарып, – үҙем менән фронтҡа алдым бына, икенсе йыл йөрөтәм, һис тә уҡып ялҡмайым». «Был осраҡлы хәл кәйефемде генә түгел, үҙемде күтәреп, ҡанатландырып ебәрҙе. Тимәк, минең яҙғандарым өйҙә генә ятмай, хәтәр юлға сыҡҡан. Тимәк, улар кемгәлер кәрәк, хәжәт. Тимәк, мин яуҙа үҙем генә йөрөмәйем», – тип хәтерләйәсәк яҙыусы йылдар уҙғас. Поэманы бөгөн килеп ҡайтанан уҡып сыҡҡас, сюжетының бер ҡатлылығын да, хәл-ваҡиғаларҙың бер ни ҡәҙәр ябайлығын да күрерһең, моғайын, ләкин был нәмә менән ул осор шағирҙарының һәммәһе лә интегә. «Яңы алымдар һәм поэтик сағылыш формалары өлкәһендәге эҙләнеүҙәр бик һүлпән барҙы... Хатта С. Ҡудаш, Р. Ниғмәти, Ғ. Сәләм ише үтә үҙенсәлекле һәләт эйәләре лә әкренләп ҡәҙимселеккә ҡайтты. Ғ. Сәләм йәшләй вафат булды, ә С. Ҡудаш менән Р. Ниғмәти һуғыш осоронда һәм унан һуңғы йылдарҙа ла үҙҙәренең үлемһеҙ әҫәрҙәрен тыуҙырҙы», – тип яҙа һуңынан Мостай Кәрим.

«Яҙғы тауыштар» һуғыш башланырҙан бер нисә көн алда нәшер ителә. Ул шағирҙың таланты нығыныуын, камиллашыуын, бирелгән шиғриәт сиктәренән сығырға ынтылыуын дәлилләй. Был йыйынтыҡҡа «Тыуған ерҙә», «Ай юлы», «Күршемдең теләге» кеүек уның Юғары Көс тарафынан бүләк ҡылынған һәләтенә лайыҡлы шиғырҙар ингән. Һәм шағир эскерһеҙ баҫалҡылыҡ менән:

*Асеевтар Иҙел булып таша,*
*Мин Дим булып ҡушылып ағырмын, –*

тип тауыш бирә. Хәйер, былар ғына йәш шағирҙың хыял сиктәре булдымы икән?

Ҡулына башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы дипломын алып, кәләше Рауза менән ауылға уҡытыусылыҡ эшенә ҡайтырға йыйынған уҙаман, 1941 йылдың 22 июнендә хәрби хеҙмәткә саҡырыу пунктына юллана һәм йәй аҙаҡтарына инде Муром элемтә хәрби училищеһында була. Тиҙләтелгән уҡыуҙарҙан аҙаҡ кесе лейтенант Кәримов Брянск фронтына ебәреләә. Һәм үҙе әйтмешләй, «иҫ китерлек батырлыҡ ҡылмайынса», 1942 йылдың 25 август көнөндә Мценск ҡалаһы эргәһендә үткән алыштар мәлендә мина ярсығы тейеп, ҡаты яралана (уның икенсе ярсығы лейтенант Фоминдың ғүмерен өҙә; был турала, ун ике йыл үткәс, «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» исемле йөрәктәрҙе тетрәндерер шиғырында яҙа ул). Ярсыҡ комсомол билетын, Яҙыусылар союзы ағзаһы танытмаһын үтәләй тишеп, йөрәктән саҡ ҡына аҫтараҡ, һулаҡай үпкәнән сығып китә.

Яраһы ауыр була, шулай ҙа дауаланғандың артабанғы ике айы шағирға ижад итеү мөмкинлеген бирә. Бер нисә шиғырҙан тыш, «Үлмәҫбай» поэмаһының тәүге бүлеге – «Үлмәҫбай һунарсы» әҫәре яҙыла.

Йәнә фронт, был юлы – Көнбайыш. Тик унда артыҡ тотҡарланырға яҙмай – йәрәхәте асылып, ҡабаттан госпиталгә эләгә, ҡатмарлы операция яһала. Был юлы дауаланыу оҙаҡҡа һуҙыла, шиғырҙарға тәғәйен ваҡыт та оҙара. «Үлмәҫбай» поэмаһының икенсе бүлеген – «Үлмәҫбай туйға бара»ны тыуҙыра ул бында. Ә иң мөһиме, бер тынала тиерлек, Мостай Кәрим өсөн генә түгел, бөтә башҡорт поэзияһы өсөн яңы һүҙ, яңы һулыш булған поэма – «Декабрь йыры» ижад ителәә.

Ярты йыл самаһы госпиталдәрҙә дауалана; өс тапҡыр операция өҫтәленә ята, һәм, ниһайәт, 1943 йылдың мартында артабанғы хәрби хеҙмәт өсөн яраҡлы тип табыла. Был осорға әҙер шиғырҙар йыйынтығы ла һалдат муҡсаһында ятҡан була. Сентябрь айында Өфөлә һигеҙ шиғыр менән ике поэманы үҙ эсенә алған «Минең атым» исемле бәләкәй генә китабы донъя күрә. Уны нәшер итеүҙә Мостайҙың өлкән

иптәштәре – Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай ярҙам итә.

Госпиталдән һуң һалдатты Воронеж фронтының «Ватан намыҫы өсөн» газетаһына юллайҙар, унан аҙаҡ Мәскәүгә, ГлавПУ-ға саҡыртыла һәм бында, резервта яңы вазифа көтөп ятҡан саҡта, йәнә шиғри донъяға сума, хатта ки казарма тирәләй сәскә лә ултырта. «Хәҙер шул көндәргә алыҫтан ҡарайым да берсә сәйерһенәм, берсә һоҡланам. Илдә яу бара, илдә ҡыйынлыҡ тип, сүпкә, бысраҡҡа батып ятмағандар. Хатта сәскә ултыртыуҙы кәрәк тип тапҡандар. Был вазифаны тап миңә тапшырыуҙары, әлбиттә, осраҡлы нәмә. Әммә дөрөҫ тура килгән. Бына нисек килеп сыҡҡан: һуғыш йылдарында уттар аша үттем, дошман яғына тоҫҡап туп аттым, тыуған ил тупрағына ҡанымды ҡойҙом, ҡоралдаштарымды ерләнем, шул тупраҡҡа уҡ гөлдәр ултырттым, һыуҙар һиптем», – ти хәтирәләре менән уртаҡлашып М. Кәрим.

43-төң июлендә ул Көньяҡ-Көнбайыш (һуңынан өсөнсө Украина) фронтының алты телдә нәшер ителгән «Советский воин» газетаһына ебәрелә. Мостай Кәримде «Совет һуғышсыһы» тигән татар редакцияһына юллайҙар. Ойошҡан, татыу коллектив менән билдәле татар яҙыусыһы Мәхмүд Мәҡсүд етәкселек итә. Бында шағир буласаҡ драматург Ғабдулла Әхмәтшин менән таныша; уларҙы бәйләгән ныҡлы дуҫлыҡ ғүмерҙәре ахырынаса дауам ҡыла.

Хәрби журналист, газетаның махсус корреспонденты бурыстарын Мостай Кәрим һүҙ тейҙермәҫлек итеп башҡара; алғы һыҙыҡта күрәләтә утҡа ынтылмай, әммә бүтәндәрҙең арҡалары артына ышыҡланыуҙы ла өнәмәй. Фронт тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы мәҡәләләр аша ғына яҡтыртып ҡалмай, шиғырҙарында ла сағылдыра һалдат. Тимәк, редактор корреспондентынан үтә ҡәнәғәт ҡалырға тейеш һымаҡ. Әммә бер көн килеп етәксе: «Һин шиғырҙарҙы бөтөнләй ташланың, буғай... Һүҙем «газета шиғырҙары» тураһында түгел, китапҡа индереп ебәрергә лә оят булмағандарын күҙ уңында тотам», – тип әйтеп һала. Бынан ары, яу яландары туп тауыштарынан арынып, бер ғауымға һиллек урынлашып ҡалған мәлдәрҙә, Мостайҙы, даими рәүештә тиерлек, өс-дүрт көнгә «ижади ялға» ебәрер булған ул. «Бындай саҡтарҙа минең редакцион бурыстар иптәштәрем иңенә ята торғайны. Тик улар бер тапҡыр ҙа ризаһыҙлыҡ белдермәне. Ошо оло йөрәкле

кешеләргә булған рәхмәтем миндә бөгөн дә йәшәй», – тип яҙа ул тиҫтә йылдарҙы артылғас.

Шул рәүешле ижад ителә «Башҡорт халҡына яуап хаты» – Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең ете йөҙ ҡултамғаһы ҡуйылған хатҡа шиғри яуап. Егерме дүрт йәшлек шағирҙың тәүәккәллегенә һоҡланыуҙан башҡа сара юҡ. Дөрөҫ, исеме тәүҙә «Көньяҡ-Көнбайыштан яуап» тип ҡуйыла, ләкин Рәшит Ниғмәтиҙең ҡулы менән был сикләү алып ташланып, һөҙөмтәлә, Мостай Кәрим бөтә яҡташ-фронтовиктар исеменән яуап биргән төҫлө тойола. Хат йылы ҡабул ителә, баҫылып сыҡҡандан һуң бик күп ыңғай фекерҙәр әйтелә.

1944 йылдың көҙөндә, Яссы – Кишинев операцияһынан һуң, М. Кәрим биш-алты көн эсендә «Үлмәҫбай»ҙың «Алмалар бешкән ине» тип исемләнгән өсөнсө һәм аҙаҡҡы бүлектәрен яҙып бөтә. 45-тең яҙында иһә бөйөк Шандор Петефи исеменә бәйле Балатон ярҙарында оҫтаның ҡаурый ҡәләме «Сит уттар» циклының төп өлөшөн тамамлай.

Күпселек шағирҙар тарафынан бәйән ҡылынған шул осорҙағы һуғыш лирикаһына мөрәжәғәт иткәндә, уның йыш осраған мотивтары түбәндәгеләр: *иҫеңдәме; бойоҡма, дошманды иҙеп, еңеү менән ҡайтырмын; беҙҙе көткән бәхет* һ. б. Ғөмүмән, тормоштоң мәле менән үтә сетерекле, фажиғәле яҡтарына ҡарамай, был һөйөү мәшәҡәтһеҙ, хатта еңел күҙалланғандай. Ошоноң ише мотивтар Мостай Кәрим ижадына ла хас. «Таныш түгел ярҙа баҫып торам...», «Һалдат һағына һөйгәнен» һ. б. Шулай ҙа һуғыш мәлендә ижад ителгән мөхәббәт лирикаһы самалы ғына уның – унлап шиғыры бар, буғай. Әммә 1942 йылдың көҙөндә яҙылғандарында уҡ ғәҙәти булмаған ноталарҙы тойомларға мөмкин. Мәҫәлән, «Госпиталь. Урман. Сентябрь» тип нарыҡланған «һөйләшеү»ҙә лирик әңгәмә ҡыҙҙың һүҙҙәре менән тамамлана:

*Бойоҡмайым, тик яманһыу миңә,*
*Сөнки япраҡ ҡоя ҡайындар.*

Был шиғыры башҡа яу шиғырҙары әйләнәһендә үтә урынһыҙ һымаҡ күренгәндер, моғайын, (йәнәһе, ошо турала һөйләшер мәлме инде?) – ни бары 1966 йылда ғына ташҡа баҫыла. Йәнә бына «Беҙҙе таңмы әллә солғағайны...» шиғыры. Бында герой яу ҡырынан бер мәлгә генә тыуған төйәгенә ҡайтып, ятһыныу ғәләмәтенә тап була:

*Ят тойолдо башта өй тынлығы,*
*Ят тойолдо наҙлау һүҙҙәре.*

Хәүеф, хатта ниндәйҙер аңлайышһыҙ бәлә булырын һиҙемләү кеүек хистәр менән һуғарылған «Төш» (1944) иһә бары тик 2009 йылда ғына баҫмаға бирелә. Һәм, ниһайәт, хатта М. Кәрим тарафынан да һуғыш лирикаһында иң уңышлы әҫәр тип табылған киң билдәле «Таш өҫтөндәге гөлдәр». Шулай ҙа был шиғырға ентекләберәк күҙ һалайыҡ әле. Ҡулъяҙмаһында уның ошондай инеш строфа бар:

*Мин хат алдым Иҙел һылыуынан,*
*Ҡайғы ла юҡ, ҡайнар йәш тә юҡ.*
*Эстән янған тыныс тау шикелле,*
*Тәрән күл шикелле ул бойоҡ.*

«Эстән янған тау», «тәрән күл». Был образлы сағыштырыуҙарҙа йәшертен ғазап йомолған. Әллә ҡасанғы тыныс, ғәҙәти ҙә, хатта бер аҙ миңрәүләнгән көтөү хисе тойомланғандай унда. Сабырлыҡ сиктән ашҡан. Шағир икеһе өсөн дә моң-һағыш һәм юғалтыуҙар менән тулы оҙайлы айырылышыуҙы уҡыусыға бөтөн килеш еткерерлек образ табыуға ирешә: таш өҫтөндәге гөлдәр. Эйе, мөхәббәт еңәсәк, тик:

*Эҫе нурҙар гөлдөң һабаҡтарын*
*Шундай сәнскеле иттеләр...*

Мөхәббәт лирикаһында ғына түгел, бәғзе ваҡыт, ирекһеҙҙән микән, бүтән шиғри юлдарҙа ла өйрәнелгән тәүәккәллектән ашатлай шағир.

«Өс мәйет» шиғырының тарихы үҙенә күрә ҡыҙыҡлы ғына. «Днестрҙа май» циклынан ул. Йылға тулҡындарында өс дошман һалдатының мәйете яҡкан кәмә сайҡала. Иртәнге сафлыҡ төшкө томра менән алышына; эңер төшә; төн етә; һәм, бәлки, шуғалыр ҙа, бер ниндәй хәрәкәт-фәлән тойолмағастын, кәмә өҫтөнә тынлыҡ аҫылынып, уның менән бергә йөҙгәндәй.

*Кемгә атты кешеләр*
*Ҡарғышты,*
*Ҡай берәүҙәр күрмәмешкә*
*Һалышты.*

Бына ошо «күрмәмешкә һалышты» тигәне бирә лә инде шиғырға көтөлмәгән яңғырашты. Әгәр быға тиклем күңелдәрҙә тик нәфрәт кенә хөкөм һөрһә, һуғыш-

тың һәр ике яҡ өсөн дә көн кеүек асыҡ ахыры яҡынлашҡас, хәсрәт тигәне лә төҫмөрләнә. Юҡ-юҡ, илбаҫарҙарҙың үлеме өсөн түгел – әйләнгән һайын кеше ғүмеренә ҡул һуҙыуҙан...

Шуныһы ҡыҙыҡ, 44-се йылдың яҙында газета редакторы Мәхмүд Мәҡсүд был шиғырҙы натурализмда ғәйепләп, баҫтырыуҙан ҡырҡа баш тарта. 1948 йылда иһә ул Ҡазанда татар теленә тәржемә ителеп, «Шиғырҙар» тигән йыйынтыҡҡа индерелә. Китаптың редакторы – Мәхмүд Мәҡсүдтең үҙе.

Бөйөк еңеүҙе «Совет һуғышсыһы» редакцияһы Австрияла ҡаршылай. Мостай Кәримдең «Тост» исемле тамамланмаған шиғырында тынып ҡалған төнгө Вена, интернациональ табын, уның артындағы төрлө милләт яугир-еңеүселәрҙең, бокалдарҙы сәкәштереп, юғары чин һәм дәрәжәләргә эйә булмауҙарына ҡарамаҫтан, «Тыныслыҡ тураһында Вена хартияһы»н ҡабул итеүҙәре һөйләнелә. Мәңгелек тыныслыҡҡа дан йырлана. Бына шундай кәйефтә була беҙҙең һалдаттар. Шул иҫәптән Мостай ҙа. Ике яу ордены, өс миҙал, «Минең атым» (1943), «Шиғырҙар» (1945) исемле фронт шиғырҙарынан торған ике йыйынтыҡ, унан аҙаҡ өсөнсөһө лә әҙер була («Ҡайтыу» 1947 йылда сыға). Алда – тыныслыҡ һәм шиғриәт тулы оло тормош.

Әммә капитан Кәримовтың һөйөнөслө ашҡыныуҙары оҙаҡҡа бармай. Киләһе йылдың яҙында, 46-ла, Румынияла ике яҡлы үпкә туберкулезы сире ҡотороп китә. Мценск янында Фоминды үлтергән, Мостайҙы иһә ярты йыл буйы госпиталь койкаһында аунатҡан ҡәһәрле мина ярсығы йәнә үҙен иҫләтә. Мостай демобилизациялана һәм, икенсе төркөм инвалиды танытмаһын алып, ҡатыны, 1942 йылда тыуған улы Илгиз менән бергә тыныс тормошҡа ҡайта (үҙ мөйөшө лә булмай әле уның). Шулай ҙа иң аяныслыһы – операция эшләтмәй тороп һауығырға өмөт итергә ярамай.

Александр Твардовский һәм Константин Симонов ярҙамында ул Мәскәү янындағы Үҙәк туберкулез институтына стационар дауаға юллама ала. Тик баш табип, төрлө сәбәптәр табып, уны ҡабул итеүҙән баш тарта: врачҡа артыҡ мәйет нимәгә ул? Консилиумға ирешеүен ирешәләр, ләкин уныһы ла, бер тауыштан тиерлек, операция эшләүҙән фәтүә булмаясаҡ тигән ҡарарға килә. Бына шунда ҡырҡ йәшлек профессор

Лев Богуш, аяҡ үрә баҫып: «Үҙемә алам уны!» – тип өндәшә.

Егерме йыллап ваҡыт үткәс, Мостай Кәрим уға түбәндәгеләрҙе яҙа: «Ғүмеремдең иң сетерекле мәлендә һеҙҙең тарафтан әйтелгән өс кенә һүҙ арҡылы мин бөгөн тереләрҙең ҡыуанысын һәм бәхетен бүлешәм. Һеҙ ул саҡта: «Үҙемә алам уны!» – тинегеҙ. Ни өсөн? Һеҙҙең уңышһыҙлыҡ ҡыйыу тәүәккәллегегеҙҙе күрә алмай аҫтыртын уҫаллыҡ менән янған бәндәләрҙе һөйөндөрәсәк кенә ине. Ә уңышығыҙ ниндәйҙер яңы баһаларға юлығыу менән «янаманы», сөнки Һеҙҙең йондоҙ унһыҙ ҙа күктәрҙә иң баҙыҡ янғандарҙың береһе булды. Мин беләм – Һеҙҙең ниәт – ябай кешене, туғанды үлем тырнағынан йолоп маташыу ине. Һәм Һеҙ минең ҡыл өҫтөндә торған ғүмерем өсөн оло яуаплылыҡ алдығыҙ».

Ике йыл дауамында Богуш Мостайға өс тапҡыр операция эшләй, һәм 1949 йылдың июнендә, ниһайәт, сәләмәтлеге ҡайтып, дауахананан сығырға насип була уға.

Шул уҡ йәйҙә «Йәш гвардия» нәшриәтендә дуҫтарының ярҙамы, тәржемәһе арҡылы шағирҙың рус телендәге тәүге китабы донъя күрә. 1947 йылдың апрелендә йәш яҙыусыларҙың Беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә М. Кәрим рус милләтле Михаил Дудин һәм Вероника Тушнова, авар Рәсүл Ғамзатов, әрмән Геворком Эмин, үзбәк Шукрулло менән танышып, дуҫлашып китә. Уларҙың һәммәһе лә билдәле тәржемәсе Семен Липкин ҡулы аҫтындағы бер төркөмгә эләгә. Ирина Снегова һәм Елена Николаевская исемле ике һылыу ҡыҙ менән дә таныша. Һәм улар, Дудин менән бергә уның шиғырҙарын тәржемәләргә тотона. Вероника Тушнова ла ситтә ҡалмай. Икенсе йылдың йәйендә Дудин, хатта Башҡортостанға, Келәшкә килеп, ауыр хәлдә ятҡан дуҫына ярҙам ҡулы һуҙа, башҡорт шағирҙарының әҫәрҙәрен тәржемә итә, Башҡортостан тураһында үҙенең шиғырҙарын яҙа. Дауахананан сыҡҡанда инде Мостайҙы барлыҡ Союз уҡыусыһына билдәле иткән «Таш өҫтөндәге сәскәләр» исемле китабы көтөп торған. Бәлки, бер мәлгә дүрт йыл элек Австрияла йөрәге аша үткәргән еңеү тойғоһон кисергәндәй булғандыр ул... Әммә, юғалған өс йыл ғүмерен яңынан тергеҙергә теләгәндәй, шағир бер минутын да исраф ҡылмай, эшкә егелә. Әгәр 1946 – 1948 йылдарҙа ул тереклек итер аҡсаны өйҙән сыҡмайынса, нигеҙҙә

тәржемәләр, газеталар өсөн рәсми материалдар яҙып ҡына эшләй алһа, хәҙер иһә М. Кәрим күп ваҡытын республика буйлап сәйәхәттәргә арнай. Уның корреспонденциялары, статьялары, очерктары республика баҫмалары биттәренән төшмәй тиерлек. Шиғриәт тә юлға һалына. 1951 йылда «Яҙғы ер» исемле китабы донъя күрә. Хәйер, поэзия йәһәтенән был артҡа ҡарай бер аҙым булһа ла, китапҡа тупланған шиғырҙар «Европа – Азия» циклының байтаҡ өлөшөн, ғәмәлдә, нигеҙен, тәшкил итә. 1951–1953 йылдар арауығында яҙылып, йыйынтыҡ булараҡ баҫмаға бирелгән «Европа – Азия» юғары граждандыҡ темаһына өҫтөнлөк биргән ифрат һәләтле шағир барлығын һөйөнсөләй. Башҡортостанға, уның кешеләренә, матурлығына, яҙмышына арналған шиғырҙар киң популярлыҡ яулай, ҡайһы бер образдары уҡыусы тарафынан Башҡорт иленең яңы символдары кеүек ҡабул ҡылына. «Россиянмын» шиғыры Советтар Союзының бөтә телдәренә лә тиерлек тәржемә ителә.

1951 йыл шағир өсөн өс ваҡиға менән билдәләнә: китабы сыға, ҡыҙы Әлфиә тыуа һәм Башҡортостан Яҙыусылары союзы рәйесе итеп һайлана.

Союз рәйесе булып Мостай Кәрим ун ике йыл самаһы эшләй. 1958 йылда барлыҡҡа килгән Рәсәй Яҙыусылары союзының секретары вазифаһын биләргә лә өлгөрә. Дәрәжәле урындар һәм үҫә килгән шағирлыҡ даны М. Кәримде билдәле кеше итә. РСФСР-ҙың Юғары Советы депутаты булып өс тиҫтә йылдар самаһы һайланып килә. Иңенә XIX партия съезы делегаты бурыстары ла ята (шулай уҡ артабанғы етеһендә лә делегат итеп һайлана). Юғары наградаларға өлгәшә. 1963 йылда Башҡортостандың Халыҡ шағиры, 67-лә БАССР-ҙың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты (шиғырҙары өсөн) һәм РСФСР-ҙың Станиславский исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты («Ай тотолған төндә» пьесаһы өсөн) дәрәжәләренә лайыҡ була.

Мәгәр, иң мөһиме, ижади йәһәттән йөҙ ҡыҙартырға тура килмәй Мостайға. Тимәк, бүләктәр ҙә эйәһенә белеп тапшырылған. «Европа – Азия»нан (1954) һуң «Шиғырҙар һәм поэмалар» (1956), «Йылғалар һөйләшә» (1961), «Торналар ҡайтҡанда» (1964) кеүек йыйынтыҡтары донъя күрә. Улар араһында балалар өсөн яҙылып, бер нисә телгә тәржемә ителгән повестары – «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған» да бар бит әле, («Ай

тотолған төндә» генә лә йөҙҙән ашыу театр сәхнәһендә уйнала!) Шулай ҙа иң мөһиме – шиғриәт. Уға жанрҙар йәһәтенән дә, моңо яғынан да иҫ китмәле төрлөлөк хас. Күңел ҡылдарын тибрәтер сағыу мөхәббәт лирикаһы, тәрән фәлсәфәүи шиғырҙар, уйсан балладалар. Вьетнам, Болгария, Чехословакия тарафтарына юлланғандан һуң ижад ителгән шиғырҙар циклы. Һәр юлы йәшертен тулҡынланыу хисе менән һуғарылған тантаналы «Россиянмын», элегик «Елдәр иҫкән һайын, ҡайындарҙа...» Поэмалары ла уның береһен-береһе ҡабатламай: «Сер» һәм «Йылмайыу» исемле ике «көнсығыш әкиәте», һуғыш йылдарындағы әшәке хаинлыҡ, тәүәккәл ҡыйыулыҡ тураһында бәйән иткән трагик сюжетлы «Ҡара һыуҙар». Ә «Дуҫ тураһында күңелһеҙ хикәйә», «Вәғәҙәләр бирмә», «Торналар ҡайтҡанда», «Өс сифатта күрәм, өс һында...», «Был ҡаланан китәйек беҙ, йәнем...», «Әсәйем сирләгәндә» әҫәрҙәрен ни тип билдәләргә? «Шиғырмы улар, әллә тығыҙ йомғаҡҡа уралған кескәй романдармы?»

Һәм тағы ла шул осорҙарҙың бәхетле табышы, яҙмыштың оло бүләге. Тәүҙә улар икәү ине – Мостай Кәрим вә Рәсүл Ғамзатов. Һуңғараҡ һөргөндән Ҡайсын Ҡулиев менән Дауыт Кугультинов ҡайта. Улар осраша, бер-береһенә ҡарата туғанлыҡ хистәренә торошло иҫ киткес яҡынлыҡ тоя. Дүртәү хәҙер улар. Бер теҙмәнең дүрт соңҡаһы, күп милләтле Рәсәй шиғриәтенең тиңһеҙ ғорурлығы, «рус түгел, ләкин россиянлар» – авар, башҡорт, балҡар, ҡалмыҡ. Һәм береһенән төшкән шиғриәт яҡтылығы икенсеһенең ижадын төрлө төҫтәргә мансыр, байытыр ине.

Ижадта ғына бер-береһенә таянмаған улар. Ҡаф тауҙары араһында Мостай ҡатыны менән юл һәләкәтенә осрап, ауыр йәрәхәттәр алған Рауза әжәл һулышын тойоп комала ятҡан ҡара көндәрҙә, дүрт дуҫ уның янында һауығыуын ялбара... Тәңренең ҡөҙрәте киң – берәү ҙә етем ҡалмай. Рауза арыуланып, аяҡҡа баҫа.

1969 йылда Башҡортостан Мостай Кәримдең 50 йәшлек юбилейын билдәләп үтте. Үҙе лә йәш, таланты ла көслө ине. Шағир ҙа, һалдат та булараҡ оло данға күмделәр, ҡаҙаныштары тураһында һөйләнеләр. Әммә иң юғары осош һәм үтә аянысһыҙ төңөлөү алда булған икән...

## ТӨҘӨҮСЕЛӘРҘӘН

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Мостай Кәримдең һуғышҡа тиклемге осорҙа яҙған ҡулъяҙмалары, ҡатыны Рауза һаҡлаған хаттарҙан тыш, бик әҙ һаҡланған. Архивта 1941 йылға тиклем ғәмәлдә булған латин хәрефтәре менән яҙылған «Таҙ» әкиәте һәм 1941 йылдың 23 июнендә ижад ителгән «Үс алынһын» шиғырының бер өлөшө һаҡланған. Фронт ҡулъяҙмалары ла күп түгел, шулай ҙа шағирҙың әҙер шиғырҙарын күсереп яҙған бер нисә блокноты бар. Тик был блокноттарҙа әҫәрҙәрҙең яҙылыу датаһы түгел, ә күп осраҡта күсереп яҙған көн ҡуйылған.

Беҙҙең комментарийҙарҙа тәүҙә яҙылыу датаһы ҡуйыла. Автор үҙе ҡуйған булһа, ул тырнаҡтар эсенә алына, төҙөүселәр ҡуйған дата тырнаҡтарһыҙ бирелә. Бының артынан әҫәр тәү тапҡыр баҫылған газета йәки журнал номеры бирелә. Әгәр газета, журнал һандары юҡ икән, тимәк, әҫәр ваҡытлы матбуғатта донъя күрмәгән йәки төҙөүселәр таба алмаған. Аҙаҡ был шиғыр беренсе тапҡыр баҫылған китап исеме бирелә.

## ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

**Отряд ҡуҙғалды** – 38 – «Мостай Кәрим. Вәли Нафиҡов. Отряд ҡуҙғалды. Өфө, Башгосиздат – 1938». Яуаплы мөхәррире Н. Камалов.

**Яҙғы тауыштар** – 41 – «Мостай Кәрим. Яҙғы тауыштар (шиғырҙар). Өфө, Башгосиздат – 1941». Яуаплы мөхәррире Ш. Килдейәров.

**Минең атым** – 43 – «Мостай Кәрим. Минең атым. Өфө, Башгосиздат – 1943». Яуаплы мөхәррире Б. Бикбай.

**Шиғырҙар** – 45 – «Мостай Кәрим. Шиғырҙар. Өфө, 1945».

**Ҡайтыу** – 47 – «Мостай Кәрим. Ҡайтыу. Шиғырҙар. Өфө, Башгосиздат – 1947». Мөхәррире Ә. Харис.

**Шиғырҙар һәм поэмалар** – 48 – «Мостай Кәрим. Шиғырҙар һәм поэмалар. Өфө, Башгосиздат – 1948». Мөхәррире Ә. Вәли.

**Яҙғы ер** – 51 – «Мостай Кәрим. Яҙғы ер – 51. Өфө, Башгосиздат – 1951». Мөхәррире С. Кулибай.

**Һайланма әҫәрҙәр** – 51 – «Мостай Кәрим. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, Башгосиздат – 1951». Мөхәррире С. Кулибай.

**Европа – Азия** – 54 – «Мостай Кәрим. Европа – Азия. Шиғырҙар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1954». Мөхәррире Ф. Иҫәнғолов.

**Шиғырҙар һәм поэмалар** – 58 – «Мостай Кәрим. Шиғырҙар һәм поэмалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1958». Мөхәррире С. Кулибай.

**Йылғалар һөйләшә** – 61 – «Мостай Кәрим. Йылғалар һөйләшә. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1961». Мөхәррире Ғ. Байбурин.

**Торналар ҡайтҡанда** – 64 – Мостай Кәрим. Торналар ҡайтҡанда. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1964». Мөхәррире Ш. Бикҡол.

**Һайланма әҫәрҙәр** – 66 – «Мостай Кәрим. Һайланма әҫәрҙәр. I том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1966». Мөхәррире Ғ. Байбурин.

**Әҫәрҙәр** – 71 – «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. II том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1971». Мөхәррире М. Игебаева.

**Көндәлектәр** – «Ғүмер миҙгелдәре» – Мостай Кәрим. Ғүмер миҙгелдәре. Өфө, «Китап» – 2002. Мөхәррире Ф. Ноғоманова.

*Ваҡытлы матбуғатта:*

**«Ағиҙел»** (1949 йылға тиклем – «Октябрь», 1960 йылға тиклем «Әҙәби Башҡортостан») – Башҡортостан Яҙыусылар союзының айлыҡ журналы.

**«Ҡыҙыл Башҡортостан»** (1951 йылдан алып «Совет Башҡортостаны») – КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты газетаһы.

**«Кызыл таң»** – КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты газетаһы, татар телендә.

**«Йәш төҙөүсе», «Коммунар», «Ленинсы»** – 1930 йылдарҙағы йәштәр баҫмалары.

**«Совет һуғышсыһы»** – Көньяҡ-көнбайыш фронт (һуңынан 3-сө Украина) газетаһы.

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

### Тулҡындар

«Ленинсы», 1938, 2 август. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Көҙ

«Ҡыҙыл Башҡортостан», 1937, 30 сентябрь. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Диңгеҙ ярында

«Отряд ҡуҙғалды» – 1938 йылдың йыйынтығына «Пушкин һүрәтенә» исеме аҫтында ингән. Моғайын, И. К. Айвазовскийҙың картинаһы күҙ уңында тотолғандыр.

### Ҡыҙыҡ һөйөү

«Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Яулыҡ болғап ҡалды

«Ленинсы», 1937, 1 апрель. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Урам шаулай

«Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Һин киткәндә

«Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Ни көтәһең?

«Йәш төҙөүсе», 1938, 7 август. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Ленин

«Октябрь», 1939, № 1. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

«Октябрь» журналында *Миллион йөрәктә* тигән һүҙҙәрҙән тағы ун юл килә:

*Гүзәл еремдә,*
*Данлы илемдә,*
*Коммунизмдың*
*Тәүге ягында*
*Якты көн тыуып*
*Килгән сагында,*
*Ауыр һулайбыҙ*
*Унын янында,*
*Баштар эйәбеҙ*
*Унын алдында.*

### Факел

«Октябрь», 1938, № 5. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Айырылыу

«Ленинсы», 1938, 1 декабрь. «Яҙғы тауыштар» – 41.

### Туҡайға

Был йыйынтыҡта *Тыны бөтөп үлде йәш егет* тигән һүҙҙәрҙән һуң дүрт юл килә:

*Дауыл алдындағы ҡара болот*
*Теләгәндәй айҙы ҡапларға,*
*Иҫке тормош, Туҡай, һинең данды*
*Теләгәндер шулай ҡапларға.*

Ғабдулла Туҡайҙың шағирға йоғонтоһо бик көслө булған. Күп йылдар уҙғандан һуң юҡҡа ғына ул түбәндәге юлдарҙы яҙмаған:

*Ун биш йәшем тулыр-тулмаҫтан*
*Шиғриәткә килеп абындым,*
*Алтмыш өс йыл һиңә табынам,*
*Алтмыш өс йыл һине һағынам.*

*(1997)*

### Беренсе тамсылар

«Ленинсы», 1939 йыл, 6 октябрь. «Яҙғы тауыштар» – 41.

Һуңғараҡ М. Кәрим былай тип яҙа:

«Бынан тап 57 йыл әүәл яҙған «Беренсе тамсылар» исемле шиғырым иҫемә килеп төштө. Уны А. Фетҡа эйәреп яҙғайным. Тәүҙә «Фетҡа эйәреп» тигән аңлатма ла бар ине. Хәҙер хәтерләмәйем, ҡайһылыр редактор ул аңлатманы алып ташланы, ләкин уның килтергән дәлиле иҫемдә ҡалған: «Нису һиңә бер кем белмәгән, бер кем күрмәгән Фетҡа эйәреп йөрөргә, – тине. – Етмәһә, берәй баярҙыр әле. Комсомол башың менән шуға эйәрергә һиңә ни ҡалған? Үҙең алда барып, бүтәндәрҙе әйҙәргә тейешһең һин. «Фет»ыңды һыҙып ташла». Һыҙып ташланыҡ. Был турала онотоп йөрөнөм. Хәҙер иҫкә килеп төштө. Уңайһыҙ булып китте, хилаф эш ҡылғандай һиҙҙем үҙемде. Әле биш томлыҡты әҙерләгәндә төҙәтәйем дә тигәйнем, ҡул һелтәнем. Шулай ҙа, «тегендә» барғас, үҙенән ғәфү һорарға тура килер». («Көндәлектән», 9.VI.95).

Нисек кенә булмаһын, «Һайланма әҫәрҙәр» – 95 йыйынтығында Фет исеме тора.

### Ҡыш килгәс

«Йәш төҙөүсе», 1938, 22 октябрь. «Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Кил инде

«Отряд ҡуҙғалды» – 38.

### Дуҫтың үлеме

«Отряд ҡуҙғалды» (1938) йыйынтығында «Намыҫ» атамаһында инде.

Унда *Беҙгә һуҙҙы билетын* тигән һүҙҙәрҙән һуң шундай юлдар килә:

*– Дуҫтарым, ошо билетты*
*Комитетҡа бирегеҙ,*
*Ул үлде, ләкин теләге*
*Уттай балҡый, тиегеҙ.*
*Һүнде, ләкин ул халҡының*
*Ышанысын аҡланы.*
*Аяманы, ғүмерен бирҙе,*
*Ә намыҫын һаҡланы.*

«Яҙғы тауыштар» – 41. Был юлдар әлегесә яңғырай.

**Төн тураһында уй**

«Коммуна», 1939, 6 август. «Яҙғы тауыштар» – 41.

**Трамвайҙа**

«Ленинсы», 1939, 27 август.

**Тыуған ерҙә**

«Яҙғы тауыштар» – 41.

Атай һаман ата арыҫлан ул... – Кәримов Мөхәммәтсафа Садыйҡ улы (1866–1948).

Әсәй – әүәлгесә ҡайғыһын да, шатлығын да йәшкә сылата... – Кәримова (Ризина) Вазифа Хафиз ҡыҙы (1884–1990).

Был китапта *Шатлығын да йәшкә сылата* тигән һүҙҙәрҙән һуң биш юл килә:

*Ләкин улар төнө айһыҙ түгел,*
*Тик аҙапһыҙ тыуа иртәһе,*
*Улар белә*
*Беҙҙең крейсерҙың*
*Кешелекте ҡайҙа илтәһен.*

«Шиғырҙар һәм поэмалар» (1958) китабында *Ҡайғы йәше әсе* һ. б. тигән юлдар барлыҡҡа килде.

**Йыр**

«Ҡыҙыл Башҡортостан», 1939, 7 ноябрь. «Яҙғы тауыштар» – 41.

**«Иҫке йылдың иҫтәлеге итеп...»**

«Ленинсы» газетаһында (1940, 1 ғинуар) «Ҡаршылау» исеме аҫтында баҫыла. «Яҙғы тауыштар» – 41.

*Асеевтар Иҙел булып ташһа,*
*Мин Дим булып ҡушылып ағырмын.*

Асеев Николай Николаевич (1889–1964) – шул осорҙа билдәле булған рус совет шағиры.

**Таң ине**

«Яҙғы тауыштар» – 41.

Унда бишенсе строфанан һуң түбәндәге юлдар бар:

*Кем һуң был? Әллә Пушкиндың*
*Акулинаһы кеүек,*

*Ҡайнар күҙ йәштәрен түгеп*
*Киләме? Әллә ҡайын төбөндә*
*Көтәме гүзәл егет?*

А. С. Пушкиндың «Барышня-крестьянка» әҫәре күҙ уңында тотолған.

**Балалыҡ**

«Йәш төҙөүсе», 1940, 12 февраль. «Яҙғы тауыштар» – 41.

«Зәңгәр колонналар булып...» – ул ваҡытта пионер формаһы күк төҫтә ине.

**Яҙғы тауыштар**

Шул уҡ исемдәге 1941 йылдың йыйынтығына ингән.

*Яҙ гөлдәре бирһен сафлығын* тигән һүҙҙәрҙән һуң шундай строфа килә:

*Тик кисер, яҙ,*
*Был йыр бағышланмай*
*Ҡурсағына бәйһеҙ хистәрҙең,*
*Былбылына бульвар һөйөүенең,*
*Ҡоҙғонона айлы кистәрҙең.*

**Алыҫта ҡалған эҙҙәр**

«Яҙғы тауыштар» – 41.

Был шиғыр Мостай Кәримдең рус теленә тәржемә ителгән беренсе шиғыры. («Далекие следы»: «Красная Башкирия», 1940, 24 ноябрь. Тәржемәсеһе – М. Шулепов.)

**Осрашыуҙар**

«Яҙғы тауыштар» – 41.

Был китапта өс осрашыу бирелгән ине. Киләһе йыйынтыҡта өсөнсө «осрашыу» алып ташлана.

***

*Мин уйҙарҙан айныт,*
*Ғәмһеҙ генә*
*Эштән ҡайта инем кис менән,*
*Ҡапыл эфир әйтте:*
*- Күктә тревога!*
*Ә гудоктар һауа киҫтеләр.*
*Бер минутҡа ҡалтыранды урам,*
*Һоро төтөн ятты таштарға,*
*Постовойҙар юл күрһәтте миңә*
*Таш подвалға ҡарай атларға.*
*Күптән серле булған күҙҙәр менән*
*Осраштыҡ беҙ ошо урында,*
*Һәм йөҙҙәргә тынысһыҙлыҡ сыҡты:*
*– Тревогамы?*
*- Эйе, тревога.*
*Теләктәрҙе ҡараштарҙа сәстек,*
*Теләктәргә һүҙҙәр ялғанды,*

*Ваҡыт һанһыҙ,*
*Тик һуңынан белдек*
*Беҙ икәүҙән-икәү ҡалғанды,*
*Күптән уҙған ине тревога.*
*Тышҡа сыҡтыҡ,*
*Зәңгәр еләҫлектә*
*Елбәҙәген ҡоя аҡ муйыл,*
*Һәм бына беҙ бергә атлап киттек,*
*Ыңғай булып сыҡты барыр юл.*
*Егет йөрәгенең яныуы*
*Ҡыҙ иренендә табыр дарыуын.*

Шуның өсөн «Шиғырҙар һәм поэмалар» – 58-ҙән башлап киләһе йыйынтыҡтарҙа исеме аҫтында *Өҙөктәр* тип ҡуйыла.

**Ай юлы**

«Ленинсы», 1941, 26 ғинуар. «Яҙғы тауыштар» – 41.
Был баҫмала эпиграф үҙенән бирелгән:

*Тормошта ла ҡай берәүҙәр*
*Үтә алмайҙар ярҙан,*
*Көнләшмә һин уларҙан.*

**Күршемдең теләге**

«Октябрь», 1940, №1. «Яҙғы тауыштар» – 41.

*Сәйфиҙе дәштек күңелһеп...*
*...Ул Нуруллаһын ебәрҙе...*

Бында һүҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаш тураһында бара. «Сөгөлдөр Нурулла» – Ҡудаштың әҫәрендәге персонаж. Тимский хаҡында Мостай Кәрим көндәлегендә былай тип яҙа: «Беҙ йәш саҡта һәр хөрт шағир үҙенсә насар яҙа ине. Мәҫәлән, Зиннәт Ҡотип йәки Мөбәр Тимский. Хәҙер йәш шағирҙарҙың байтағы һәйбәт яҙа, ләкин бер һәйбәте икенсе һәйбәттән айырылмай».
(Көндәлектәр: 1998, 7 ғинуар.)

**Табын йыры**

«1941, март». «Өҫтәл артындағы йыр» исеме менән «Ҡайтыу» (1947) йыйынтығына ингән.

Был шиғыр 1941 йылда Мәскәүҙә үтәсәк Башҡорт сәнғәте һәм әҙәбиәте декадаһына арналып яҙылған. Заһир Исмәғилев ул шиғырға көй яҙырға тейеш була. Ләкин һуғыш башланып китә...

**Минең һөйгәнем**

Һуғыш башланыр алдынан яҙылған. «Ҡайтыу» – 47.

**Үс алынһын!**

«Ҡыҙыл Башҡортостан», 1941, 26 июнь. «Минең атым» – 43.

23 июндә яҙылған. Мостай Кәрим былай тип иҫкә ала: «Шиғыр барлыҡҡа килде һәм унда «Рәсәй, Рәсәй, Ватан» тигән һүҙҙәр ҡабатланды. Мин уны радио аша һөйләнем. Бер-ике көндән

был шиғырым «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитәһендә баҫыла. Әммә мөхәррир был ҡабатланған юлдарҙы «СССР, СССР, Ватан» тип үҙгәртә. («Советские писатели»: Автобиографии. Том IV. С. 255. Москва. 1972 г.)

**Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!**

1941 йылдың аҙағында яҙыла. «Минең атым» — 43.

**Тәҙрәңде ас та...**

«28 апрель. 1942 йыл». «Минең атым» — 43.

«Шиғыр яҙыр өсөн бер фекер. Ҡәҙерлем минең, мине һөйһәң, дауылды ярат, мине һөйһәң, һин йәшенде һөй. Йәйҙең дауыллы, йәшенле төндәреңдә тәҙрәңде асып ҡуй. Асыҡ тәҙрәң эргәһендә ултырып, беләктәреңә башыңды һалып, яҡын йәшен уйнағанын күҙәт. Сәстәреңде дауыл тараһын, бүлмәңдә йәшен уйнаһын. Был — минең иҫәнлегем тураһында хәбәр, минән сәләм булыр».

*Мин йәшәрмен, ерҙә дауыл*
*Тынмаһа әгәр,*
*Мин яңырмын һуңғы йәшен*
*Һүнгәнгә ҡәҙәр.*

(Көндәлектәр, 1941, 25 декабрь.)

**Рус ҡыҙы**

«Минең атым» — 43.

**Һөйләшеү**

«1942, сентябрь, урман». «Һайланма әҫәрҙәр» — 66.

Ауыр яраланғандан һуң госпиталгә эләккән ваҡытта яҙылған.

**Ай**

«Минең атым» — 43. Китапта: «Көнбайыш фронты, октябрь», — тип билдәләнгән.

Күрәһең, был шиғыр «Төрөпкә» шиғыры һымаҡ, 1942 йылдың октябрь — ноябрь айҙарында яҙылған. Шул ваҡытта Мостай Кәрим төҙәлеп бөтмәгән яралары менән кире фронтҡа китә, ноябрь урталарында Тулала яҡынан госпиталгә эләгә.

Шиғыр һуғышта 1942 йылдың февраль айында һәләк булған яҙыусы Сәғит Мифтаховҡа (1907–1942) арналған.

Мостай Кәрим былай тип иҫкә ала: «Яҙыусылар Союзына барҙым. Унда Низам Ҡәрип, Сәғит Мифтахов, Баязит Бикбай, Хәниф Кәрим, Кирәй Мәргән, Ғәйнан Әмири бар ине. Ҡайһы берәүҙәре үҙҙәре теләп фронтҡа китергә ғариза ла биреп өлгөргән. Бөтәбеҙ ҙә — һуғышсан. Ай-ай ярым үтмәҫ, фашистың һөйәген он итәсәкбеҙ. Күмәкләп Пушкин аллеяһына сыҡтыҡ... Шунда мин Сәғит Мифтаховты — сөм-ҡара сәсле, ут күҙле, етеҙ хәрәкәтле ир аҫылын һуңғы тапҡыр күрҙем. Ул фронтҡа беренселәрҙән булып китте. Уның һәләк булыуын ишеткәс, бик әрненем...» («Ғүмер миҙгелдәре», 152 бит.)

### Төрөпкә

«Минең атым» (1943) йыйынтығында «Трубка» исеме менән сыға.

«Көнбайыш фронты» тип ҡултамға ҡуйылған. Был шиғырҙар октябрь-ноябрь айҙарында яҙылған булһа кәрәк.

### Ерҙәге йондоҙҙар

«Бәхет йондоҙҙары» исеме менән «Минең атым» (1943) йыйынтығына ингән. Китапта яҙылыу ваҡыты бирелгән: «28 ноябрь, 1942 йыл. Госпиталь».

Артабан *Ҡан аға, ҡан аға, ҡан аға* тигән һүҙҙәрҙән һуң 16 юлы алып ташланған:

*Тыуыуым менән яңы замандың мин*
*Иң бәхетле көнө-ҡорҙашы,*
*Бына шуға*
*Минең ғүмеремдең*
*Яҡты йондоҙ булды юлдашы.*
*Һәм ул йондоҙ*
*Үлем ҡосағынан*
*Тартып алыр үҙенең егетен.*
*Елбиҙәкле яулыҡ булып һаман*
*Болотһоҙ күк яба төн битен.*
*Ана! Ана!*
*Йондоҙомдо таптым,*
*Ул атылып төшөр яныма.*
*Сеү! Ниңә ул аҡрынлап һүнә?*
*Әллә ҡабынырмы һуң тағы ла?*
*Ҡараңғылыҡ...*

«Бәхет ҡошом йәйә ҡанатын...» тигән һүҙҙәрҙән һуң тағы дүрт юл алына:

*Тоноҡ, өнһөҙ, һалҡын метеор булып,*
*Күк йондоҙо атылып төшмәһен!*
*Сөнки ерҙә был күҙҙәрҙә таптым –*
*Һауыҡтырғыс нурҙар шишмәһен.*

### Минең атым

«Минең атым» – 43.

Китапта яҙма: «1942 йыл, 5 декабрь. Госпиталь».

### Һалдат һағына һөйгәнен

«Минең атым» йыйынтығына «Баллада» атамаһында ингән. Яҙылыу датаһы: 1943 йыл, 28 февраль. «Ҡайтыу» (1947) йыйынтығында һуңғы дүрт юл алып ташланған:

*Ҡыуайыҡ уны киләсәк*
*Таң ҡосағынан...*
*Шәүләләр... шәүләләр тыуасаҡ*
*Ҡояш ағынан.*

**Якты төн**

«Троицкий, Курск өлкәһе. 18.04.43». «Яҙғы ер» – 51. Был китапта яҙылыу датаһы ни өсөндөр 1947 йыл тип күрһәтелгән.

Автор был шиғырҙың яҙылыу ваҡытын һәм шарттарын «Ғүмер миҙгелдәре» китабында иҫкә ала: «Ярты йылдан ашыу госпиталдә дауаландым. Туланан Горькийға күсергәс, йәнә операция яһанылар. Ярам бөтәшкәс, 1943 йылдың мартында Мәскәүгә ГлавПу резервына эләктем. Шунан мине Воронеж фронтына эшкә ебәрҙеләр. Бында – Воронеж фронтында – «Ватан намусы өчен» тигән татар газетаһы сыға ине. Ошо редакцияла эшләгән шағир Әхмәт Ерикәй, драматург Риза Ишморат, шағир Ғәли Хужи менән таныштым. Ғәли һәм Риза менән ғүмергә дуҫтар булып ҡалдыҡ.

Ер иҙәнле ҙур ғына өйҙөң түр яғында Ерикәй, Хужи, Ишморатов, мин ҡунып йөрөйбөҙ. Алғы бүлмәлә хужалар тора. Бер төндө, йоҡоға ятҡас, мин шундай ирмәк тәҡдим яһаным. «Бөйөк сәсәндәр, аҡындар һәм ашугтар! Һеҙгә өндәшәм! Әйҙәгеҙ, көн яҡтырғансы һәр беребеҙ яттан шиғыр сығарабыҙ. Өс куплеттан да кәм булмаһын». Тегеләр бәхәсһеҙ ризалаштылар. Һәм шунда уҡ мышнай-хырылдай йоҡлап киттеләр. Ныҡ арығандар, күрәһең. Минең йоҡом ҡасты. Сәмем ҡуҙғалды. Сәмем артҡан һайын, фекерем тарҡала. Етмәһә, тулған ай күҙелде иләҫ-миләҫ килтерә. Аҡрынлап тыныслыҡ ҡайтты. Апрель таңы тәҙрәгә ҡағылғанда, дүрт строфаны саҡ ипкә килтерҙем. Иртән тегеләргә уҡыным. Иҫтәре китмәй генә тыңланылар». («Ғүмер миҙгелдәре», 168–169 бб.)

**«Гөрләп үтте тәүге күкрәү...»**

«Мәскәү, 29. 05. 1943 йыл». «Шиғырҙар» – 45.

**«Беҙҙе таңмы әллә солғағайны...»**

«Мәскәү, 15. 06. 1943 йыл». «Шиғырҙар» – 45.

**Шағир дуҫыма**

«Мәскәү, июнь башы, 1943». «Шиғырҙар» – 45.

**Ямғыр**

«Мәскәү, 18.06.43». «Шиғырҙар» – 45.

**Яр ситендә**

«Белолуцк, Украина, 28. 07. 43». «Шиғырҙар» – 45. Был баҫмала исемһеҙ, йондоҙсоҡтар менән бирелгән.

**Нәләт тамғаһы**

«Белолуцк, Украина, 5 август, 1943 йыл». «Совет сугышчысы» – 43, 11 август. «Шиғырҙар» – 45.

Ҡулъяҙмала эпиграф рәүешендә: «Барлыҡ совет пленныйҙары кләймә менән тамғаланырға тейеш». (Немец Юғары командованиеһы приказынан).

### Украина

«Украина, Белолуцк, 11.08. 43». «Шиғырҙар» – 45.

### Ҡол ҡыҙ йыры

«Украина. Екатериновка ауылы, 1 октябрь 1943 йыл». «Совет сугышчысы». 1943, 1 октябрь. «Ҡайтыу» – 47.

Яҙылыу датаһында хата киткән, күрәһең, күсереп яҙған ваҡыты ҡуйылған.

Авторҙың иҫтәлектәренән: «1941 йылдың көҙө. Һуғыштар Украина ерендә бара. Бына-бына Днепрға килеп етәбеҙ. Германияға ҡоллоҡҡа ҡыуылған ҡыҙҙар тураһында аһ-зарҙарҙы көндән-көн күберәк ишетәбеҙ. Әммә был шиғырҙы яҙырға мине мәжбүр иткән ошондай айырым бер хәл булды. Беҙҙең «Совет һуғышсыһы» газетаһы редакцияһы Екатериновка тигән ауылда туҡталды. Мине Оксана Михайловна исемле оло ғына йәштәге бер апайға фатирға ҡуйҙылар. Ул саҡта кешеләр былай ҙа шат түгел ине. Ләкин был ҡатын үтә ҡайғылы, үтә бойоҡ ине. Төндәр буйы һыҡтап сыға.

Бер нисә көндән ул миңә үҙенең оло хәсрәте тураһында һөйләне. Уның Галина исемле берҙән-бер ҡыҙын немецтар ҡоллоҡҡа алып киткәндәр. 16–17 йәшлек балаларҙы төн йөҙөндә мал урынына әйҙәп ҡыуғандар. Оксана Михайловнаның ҡайғыһы минең йәнемде әрнетте, уның күҙ йәштәре йөрәгемә тамды. Алыҫ-алыҫ аралар аша миңә Днепр ҡамышы кеүек кенә Галинаның саҡырыу тауышы ишетелгәндәй булды. Ошо уҡ кисте мин был ауыр кисерештәремде шиғыр юлдарына күсерергә тырышып ҡараным.»

### Атлылар анты

«5 октябрь. Украина. Днепропетровщина. Хутор Екатериновка». «Совет сугышчысы», 1943, 6 октябрь. «Шиғырҙар» – 45.

Газетала «Беҙ ант иттек» тип аталған.

### «Таныш түгел ярҙа баҫып торам...»

«Украина, беренсе ҡар яуған көн. 1943 йыл». «Шиғырҙар» – 45.

### Полктар уҙалар

«Совет сугышчысы», 1943, 7 ноябрь. «Шиғырҙар» – 45.

### Киев

«Совет сугышчысы», 1943, 26 ноябрь. «Шиғырҙар» – 45.

«*Как тополь киевских высот*» – А. С. Пушкиндың «Полтава» поэмаһынан.

### Дан

«Совет сугышчысы», 1943 йыл, 26 ноябрь. «Шиғырҙар» – 45. Газетала шиғыр исеме «Дан йондоҙо» тип бирелгән.

### Башҡорт халҡына яуап хат

1943 йылдың октябрь айында яҙылған. «Шиғырҙар» – 45.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең һуғыштағы яҡташтарына

төбәлгән был хат 1943 йылдың 23 августында башҡорт һәм рус телдәрендә баҫылған. 754 280 кеше ҡултамғаһы менән яҙылған был хатта хәрби Ҡыҙыл Армиябыҙҙың тыуған илебеҙҙе фашист илбаҫарҙарынан азат ителәсәге тураһында саҡырыуы тора.

Мостай Кәрим «Ғүмер миҙгелдәре»ндә иҫкә алыуынса, «Совет сугышчысы»ның редакторы Мәхмүд Мәҡсүдов уның хатҡа яуап яҙғанын белеп, уны бер аҙнаға редакция эштәренән азат итә. Бер аҙна ла үтмәй, шиғыр тамамлана. Әммә шиғырҙың ҙур күләме арҡаһында уны «Совет сугышчысы» газетаһында баҫтырырға мөмкинселек булмай. Башҡортостанда был хатты ихлас ҡабул итәләр. Хәйер, автор был хатты «Көньяҡ-көнбайыштан хат» тип атаған. Ҡулъяҙмала Рәшит Ниғмәти ҡулы менән «Башҡорт халҡына хат» тип үҙгәртелгән.

Һәм тағы Р.Ниғмәтиҙең өҫтәмәһе: ВКП(б) Өлкә Комитеты менән һөйләшеп, был хатты «КБ» газетаһында баҫтырыр һәм Әҙәби альманахҡа бирергә кәрәк.

### Ике бокал

«1943 йыл, 31 декабрь, Украина».

### «Томандар, ҡуйырып...»

«31.01.44 йыл». «Шиғырҙар» — 45.

### Ҡояш сыҡҡан яҡта, йыраҡта...

«Украина, февраль, 1944». «Кызыл Башҡортостан», 1944, 1 апрель. «Шиғырҙар» — 45. 8 март.

Башҡорт АССР-ның 25 йыллығына арналған.

### Армия килә

«22 февраль, 1944 йыл. Украина». «Совет сугышчысы», 1943, 23 февраль. «Шиғырҙар» — 45.

Газетала «Сталин армияһы» тип бирелә. Ҡулъяҙмалағы: *Ерҙә йәшен утын һибеп* тигән юл газетала *Бөйөк Сталин етәкләгән* тип үҙгәртелгән.

### Иҙел ҡыҙы

«7 март, 1944 йыл. Украина». «Совет сугышчысы», 1944, 8 март. «Шиғырҙар» — 45.

### Атлылар йыры

«22 март, 1944 йыл. Украина». «Совет сугышчысы», 1944, 24 март. «Шиғырҙар» — 45.

### Һаумы, диңгеҙ!

«29 март, 1944 йыл». «Совет сугышчысы», 1944, 3 апрель. «Шиғырҙар» — 45.

### Ул ҡыҙ мине ташлап китмәне

«4 апрель, 1944 йыл. Украина». «Шиғырҙар» — 45.

### Азат Одесса

«13 апрель. Одесса». «Совет сугышчысы», 1944 йыл, 14 апрель. «Шиғырҙар» — 45.

Одесса 12 апрелдә азат ителә.

### «Үрмә гөлдәреңде тирбәлдереп...»

«Шиғырҙар һәм поэмалар» — 48.

### Днестрҙа май (*цикл*)

1944 йылда беҙҙең ғәскәр Днестр аръяғында Кицкан плацдармын фашистар ҡулынан тартып ала. Мостай Кәрим унда өс көн була һәм газетаға байтаҡ материалдар, шиғырҙар ҙа алып ҡайта. Шулар араһынан «Днестрҙа май» тигән шиғырҙар циклы барлыҡҡа килә.

1. Уң ярҙа. «Одесса, май, 1944». «Совет сугышчысы», 1944, 1 май. «Шиғырҙар» — 1945. Газетала — «Днестрҙа май».

2. Йыр ишеттем. «Днестр лиманы», май, 1944 йыл. «Шиғырҙар» — 45.

3. Өс мәйет. «8 Май. Одесса. 1944 йыл». «Шиғырҙар һәм поэмалар» — 48.

«Редакцияға әйләнеп ҡайтҡас, плацдармда тәьҫораттарға бәйле «Днестрҙа май» тигән исем аҫтында бер нисә шиғыр яҙҙым. Шуларҙың береһе «Өс мәйет» тип атала. Унда үҙем күҙәткән күренеш тасуирлана. Мәйеттәр ятҡан кәмәнең йылға буйлап ағып китеүен иртә таңда үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, тик деталдәрен генә ижади хыял тулыландырғандыр. Моғайын, улар теге саҡта, ҡайҙалыр һыу үрендә йылғаны кисеп сыҡмаҡсы булғандарҙыр, беҙҙекеләр уларҙы утҡа тотҡандыр. Башҡаса аңлатып булмай был «сәйәхәтте». Шиғырҙы «Совет сугышчысы»ның редакторы Мәхмүд ағай «Совет сугышчысы»нда баҫманы. «Үтә натуралистик картина», — тине. Артабан уны 1948 йылда китапта ла бер генә тапҡыр баҫтырҙым. Башҡаса йыйынтыҡтарыма индермәнем. Йомшаҡ тип иҫәпләнгәндер, ахыры. Күптән түгел бер иҫке дәфтәремдә шуның ҡулъяҙмаһына тап булдым». («Ғүмер миҙгелдәре», 180 б.)

Был шиғыр 1948 йылда Ҡазанда, татар телендә «Шигырьләр» йыйынтығында донъя күрә. Мөхәррире — Мәхмүд Мәксүд.

Күрәһең, был ваҡытта ул шиғырға ҡарата фекерен үҙгәрткәндер.

